# шоңқар



1*2011

**«ШОҢҠАР»** журналының Райман Ишбаев исемендәге премияһының 2010 йылғы лауреаттары тип Баймаҡ районының данлыҡлы Буранбай ауылында йәшәп ижад итеүсе өс туған – **Хәбир РАЕВ**, **Фәттәх** һәм **Фәнүр АРАЛБАЕВТАР** танылды. Халыҡ йырҙарын иҫ киткес оҫта башҡарыу менән бер рәттән, уларҙың өсөһө лә киләсәк быуынды тәрбиәләүгә ҙур көс һала, үҙҙәренә лайыҡлы алмаш әҙерләй. Лауреаттар хаҡында тулыраҡ мәғлүмәт журналдың киләһе һандарында донъя күрер.



№1(126)*2011

ОС ИРЕККӘ, БАШҠОРТОСТАН!

БАШҠОРТОСТАН ЙӘШТӘРЕ ЖУРНАЛЫ
шоңҡар

1994 йылдың 1 ғинуарынан башлап нәшер ителә.

*Башҡортостан йәштәренең айлыҡ ижтимағи-сәйәси, әҙәби-нәфис журналы*

# БЫЛ ҺАНДА:

**ИЖТИМАҒИ МӨНБӘР**
Азамат БУРАНШИН.
Хәҙерге башҡорт йәмғиәтен модернизациялау мәсьәләләре. 2

**СӘСМӘҮЕР**



Лира ӘХМӘТ-ЯҠШЫБАЕВА.
Ғабдулла Сәиди. Әҙәби-документаль повесть 6

**ИЛҺАМ**
Мөнир ВАФИН.
Шиғырҙар. 30

**БЕР КӨНЛӨК СӘХИФӘ**
Миңзәлә АСҠАРОВА.
Уйнап-көлөп кенә йөрөгәс тә, уйланмай ҙа тиһеңме. 32

**БЕҘҘЕҢ АШ-ҺЫУ** 40

**ТАЛАНТТАР ҺӘМ ФАНАТТАР**
Гөлфиә ЮНЫСОВА.
Йырлап йәшәүҙәре бер ғүмер. 41

**ИЛАҺИӘТ**
Гөлшат ҠАҺАРМАНОВА.
«Урал батыр» балет сәхнәһенә күтәрелерме? 46

**БИЗМӘНГӘ ҺАЛЫП**
Р. СӘЛИМОВ.
«Дондурей манифесы» ни һөйләй? 51

**ҮҘ-ҮҘЕҢДЕ ТАП**
Милә БИЛАЛОВА.
Уңышҡа өлгәшеү серҙәре. 54

**ӘСӘЙҘӘР МӘКТӘБЕ**
Гөлсинә ЙОСОПОВА.
Магазинда илаған балаларға әкиәт. 57

**ИЛҺАМ**



Мөнир ФӘЙЗУЛЛИН.
Шиғырҙар. 58

**БАРСЫНҺЫЛЫУ**
Земфира АБУШАХМАНОВА.
Ҡыҙ бала шуға бәхетле - яҙмышын үҙе яҙа. 60

**БЕҘҘЕҢ ЖУРНАЛ ТЫШЫНДА**



Филүзә СӘЛИХОВА.
Әсәйемдең ҡыҙы ла, улы ла мин. 63

**ТАБИП МӨЙӨШӨ**
Филиә БУЛАТОВА.
Күҙҙе һаҡлар контакт линзалар. 66

**ҠЫРҠТАРТМА**
Ғәли ӘХМӘТЙӘНОВ.
Ваҡыт уҙа, шиналар туҙа. 70

**ӘКӘМӘТ**
Мар. СӘЛИМ.
Яңыса һепереүсе. Сатирик хикәйә. 72

**ЙОНДОҘНАМӘ** 74

**«ШОҢҠАР» КИТАПХАНАҺЫ** 75

**ЮРИДИК КОНСУЛЬТАЦИЯ** 79

шоңҡар ИНТЕРНЕТТА: WWW.SHONKAR.RU
www.video.shonkar.ru
www.music.shonkar.ru
http://vkontakte.ru/club13743478
http://www.facebook.com/#!/profile.php?id=100000936043132

# ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ЙӘМҒИӘТЕН МОДЕРНИЗАЦИЯЛАУ МӘСЬӘЛӘЛӘРЕ

Модернизация мәсьәләһе хәҙерге башҡорт йәмғиәтенә ҡағылышлы иң актуаль һорауҙарҙың береһе булып торалыр, моғайын. Бөгөнгө туҡтауһыҙ үҙгәреп тороусы донъя йәмғиәтебеҙгә һәр көн тиерлек яңы саҡырыуҙар, бурыстар ҡуя. Уларға яраҡлаша алмаған осраҡта беҙгә тормоштоң ситендә тороп ҡалыу хәүефе янай. Башҡортостанды модернизациялауға йүнәлтеү хаҡында республика Президенты Р.З. Хәмитов тарафынан да белдерелде. Шулай итеп, модернизацияның асылына төшөнәйек.

Был һүҙҙең бер нисә аңлатмаһы бар. Уларҙың береһе – нимәгәлер заманса төҫ биреү, яңыса ҡарашҡа, идеяға, ихтыяжға яраҡлашыу. Нимәнелер камиллаштырыу, яҡшыртыу, яңыртыу.

“Модернизация” һүҙенең икенсе бер мәғәнәһе – традицион йәки аграр йәмғиәттән заман йәмғиәтенә күсеү процесы. Әлеге һүҙҙе ҡулланғанда, мәғәнәләренең күп булыуы сәбәпле, йыш ҡына ҙур буталсылыҡтар килеп тыуа. Мәҡәләлә беҙ модернизацияны ошо икенсе мәғәнәһендә ҡараясаҡбыҙ.

Хәҙерге фәндә йәмғиәтте модернизациялау мәсьәләһе ифрат ауыр. Был һорау буйынса күп төрлө ҡараш йәшәй. Шундай теорияларҙың береһе тарихи күҙлектән ҡарағанда, дәүләт һәм йәмәғәт итституттарын модернизациялауҙың ике юлы барлығын таный.

Беренсеһенә Көнбайыш Европа илдәре үткән либераль модернизация ҡарай (“классик капитализм”). Был юл ярайһы уҡ яҡшы өйрәнелгән. Уның төп һыҙаттары: Европала феодаль йәмғиәт тарҡалыу һөҙөмтәһендә бөлгөнлөккә төшкән крәҫтиәндәрҙән яңы иҡтисади ҡатлам барлыҡҡа килә һәм ул капиталистик юл буйынса модернизацион үҙгәрештәрҙең төп көсөн тәшкил итә. Шул рәүешле Көнбайышта баҙар иҡтисадлы граждандар йәмғиәте һәм хоҡуҡи либераль дәүләт урынлаша. Идеология булараҡ, либерализм – 1889 йылда Францияла иғлан ителгән кеше хоҡуҡтары Декларацияһы принциптарында формаль нигеҙләнгән, әммә тәүге осор капитализм илдәре – Голландия, Англия, Франция, Швейцариялағы күп быуын социаль фекерләүселәр тарафынан булдырылған идеялар берлеге. Был, тәү сиратта, сәйәси плюрализм, граждандыҡ хоҡуҡтары һәм азатлығы, парламент демократияһы һәм властар бүленеше, дәүләттең иҡтисадҡа һәм шәхси тормошҡа мөмкин тиклем аҙыраҡ ҡыҫылыу идеялары. Либерализм логикаһы – эске мөхите ныҡлы үҫешкән булыуы һөҙөмтәһендә үҙ-үҙен ойоштороуға һәләтле ҡатмарлы социаль система логикаһы ул.

Модернизацияның башҡа вариантын “консерватив” тип атайҙар. Ул традицион цивилизациялы илдәрҙең тәжрибәһе булып тора. Уға, тәү сиратта, революцияға тиклемге Рәсәй, СССР, хәҙерге Ҡытай, Япония, ислам нигеҙле дәүләттәр, барлыҡ боронғо дәүләттәр, урта быуаттағы Европа һәм башҡалар инә. Традицион, аграр, ауыл тибындағы йәмғиәттәр юлы ул.

Модернизацияның был варианты шуныһы менән үҙенсәлекле: йәмғиәттә үҙгәрештәр мәҙәниәт менән тормош тәртибен ҡапыл емереү иҫәбенә башҡарылмай, ә “иҫке” формаларҙы һаҡлау юлы менән, йәғни традицион ҡиммәттәргә таянып эш ителә.

Үкенескә күрә, әлегә тиклем башҡорт йәмғиәтендә либераль ҡиммәттәрҙе күптәр бик тар мәғәнәһендә, башлыса һүҙ азатлығы тип

аңлай. Ысынында, либераль цивилизацияға күсеш бик оҙайлы һәм ауыр процесс. Ул, тәү сиратта, ҡиммәттәр алмашыныуын күҙаллай. Әйтәйек, бөгөн беҙ енси аҫсылыкты йә булмаһа республикала ерҙе һатыу-һатып алыуҙы законлаштырыуға әҙербеҙме һуң?

Беҙҙең ҡарамаҡка, бөгөн шуны аңлау мөһим: башҡорт йәмғиәтенең социаль һәм мәҙәни хәле урыҫтыҡынан ғына түгел, этник йәһәттән яҡын булған татар йәмғиәтенән дә ҡырка айырылып тора. Күп күрһәткестәр буйынса башҡорт йәмғиәте әле булһа традицион, аграр типтағы йәмғиәт. Был ысынбарлыҡ һәм уның менән иҫәпләшеү мотлаҡ. Башҡорт йәмғиәте үтән быуаттың 60-70-се йылдарында уҡ урыҫ халҡы үткән мәҙәни һәм этник процесты кисереүе лә бар (әгәр ҙә һүҙ унан да элгәрерәк осорҙар тураһында бармаһа).

Үкенескә ҡаршы, беҙ һаман да үҙ йәмғиәтебеҙҙе бик насар беләбеҙ, уның йәшәйешен яңылыш күҙаллайбыҙ. Шулай итеп, уның характер айырмалыҡтары нимәлә икәнлеген билдәләп ҡарайыҡ.

Үҙенсәлектәрҙең береһе – совет осоронда башҡорт йәмғиәте мәҙәни асылын үҙгәртмәгән модернизация кисереүҙән ғибәрәт. Шулай итеп, урбанизация процестары милли йәмғиәтебеҙҙең төпкө ҡатламдарына ҡағылмай. Урбанизация күҙәтелә, әммә ләкин башҡорт ҡала мәҙәниәте барлыкка килмәй.

Бынан тыш, заман башҡорттары араһында донъяны индивидуалистик йәһәттән күҙаллауға күсеш тә һүлпән була. Киреһенсә, Рәсәй йәмғиәтенең либерализациялашыуы менән коллективистик, община йүнәлеше, тәртиптәре көсәйә генә.

Әйтәйек, бөгөн яҡташтар берекмәләре исеме аҫтында йәштәр ойошмалары көс туплай, аҡрынлап башҡорт мосолман өммәте тәьҫире үҫә. Йәғни элеккеләре менән бер рәттән яңы традицион община ойошмалары барлыкка килә йәки ҡайтанан аяҡҡа баҫа. Был ойошмаларҙың үҙенсәлеге шунда, улар либераль түгел, ә традицион ҡимәттәр ядроһы тирәләй тупланған.

Шулай итеп, СССР таркалыу менән башланған Рәсәй йәмғиәтенең "вестернизациялаңыуы" башҡорт йәмғиәтенә өлөшләтә генә тейә, йәшәйеш һәм әхлаҡ өлкәһендәге мөһим һорауҙарға ҡағылышлы нигеҙле ҡараштарҙан баш тартыуға алып килмәй.

Быны күптәр архаика тип ҡабул итә, әммә беҙҙең ҡарамаҡка, был халыҡтың ныҡлы "тамырлы" булыуы хаҡында һөйләй. Артта ҡалыу түгел, ә киреһенсә, көстөң ныҡлығы. Көнсығыш дәүләттәре тарихы шуны күрһәтте: йола йөгө модернизацияға ҡаршы тормай, традицион йәмғиәт теләге булһа, һәр саҡ үҙ үҫеш юлын таба.

Совет модернизацияһы тәжрибәһе лә ошо хаҡта һөйләй. СССР ваҡытында рәсми рәүештә иғлан ителгән "мәҙәниәт революцияһы" мәғариф үҫешен, заман техникаһы менән фән белемдәренә яраҡлашыуға, йәшәйеш, санитар һәм физик мәҙәниәтте таратыуға һ.б. модернизацион маҡсаттар яулауға йүнәлтелгән була. Әммә шул уҡ ваҡытта үҙ үҙенсәлеге һаҡлана, йәғни йәмғиәт традицион булып ҡала.

Башҡортостан Республикаһының постсовет осоро үҫеше анализы уның шул уҡ "консерватив модернизация" юлынан китеүен күрһәтә.

1990-2010 йылдарҙа республика совет үҫешен хәтерләтеүсе юл буйлап бара. Ни өсөн шулай?

Эш шунда, идеологияға ҡарамаҫтан йәмғиәттә өҫтөнлөк иткән мәҙәниәт элек булдырылған тарихи социаль институттарҙы һәм хужалыҡ итеү алымдарын һаҡлап ҡына ҡалмай, яңынан күп һандағы "иҫке" типтағы кешене (традицион кешене) барлыкка килтерә. Быларҙың барыһы ла үҙ сиратында йәмғиәт үҫешенә төрлө яҡлап хәл иткес тәьҫир итә. Тәү сиратта – иҡтисадка.

Тимәк, үткән 20 йыл эсендә традицион йәмғиәт республиканың иҡтисады үҫешенә шулай тәьҫир иткәнме?

Тәү ҡарашҡа бөгөнгө Башҡортостан иҡтисады – етештереүҙең төрлө формаларындағы үҙенсәлекле дәүләт капитализмы (госкапитализм) ул. Әммә ентекле анализ шуны күрһәтә: беҙҙең алда баҙар иҡтисадынан алыҫ, натураль һыҙатлы, хужалыҡ итеүҙең "иҫке" консерватив формаһы тора. Совет иҡтисадында ла шундай уҡ механизм эшләп килә. Логик йәһәттән ахырынаса еткерелһә, Башҡортостан иҡтисады уға оҡшаш булыр ине. "Штурмовщина", күҙ буяуға ынтылыш, ғәмәлдә

аҡланмаған эште йәйелдереү, ҙур күләмдәр менән мауығыу, МТС һәм быуалар булдырыуҙар кеүек совет күренештәре ошонан барлыҡҡа килә лә инде.

Ниндәй сәбәптәр арҡаһында иҡтисадтың консерватив модернизацияһы яңынан аяҡҡа баҫтырылды һуң? Тәү сиратта, "традицион йәмғиәттең" ошо өлкәгә тәьҫире һөҙөмтәһендә. Тарихтан билдәле булыуынса традицион йәмғиәттә баҙар алышыныуы түгел, ә ҡабаттан бүлеү (перераспределение) ҡарашы өҫтөнлөк итә. Үҙ сиратында баҙар иҡтисады элементтары ҡаты көйләнә. Был иркен баҙар мөнәсәбәттәренең халыҡтың социаль мобиллеген көсәйтеүе һәм йәмғиәттең социаль структураһын үҙгәртеүе менән бәйле. Тимәк, традицион йәмғиәттең бөтөнлөгөнә янай. Ҡабаттан бүлеү системаһы традиция (йолалар) менән көйләнә ала, ә баҙар хаҡтары – юк.

Традицион йәмғиәттә иҡтисади табыш артынан ҡыуыу мораль йәһәттән ғәйепләнә, эскерһеҙ ярҙамға ҡаршы ҡуйыла. Шул уҡ ваҡытта бындай иҡтисадта баҙар бәйләнешенең көслө булмаған һыҙаттары сағылырға мөмкин. Унда тигеҙлек идеалы ярылып ята.

Башҡортостанда башҡа системаның барлыҡҡа килеүе мөмкин булмай. Классик баҙар мөнәсәбәттәрен булдырыу өсөн традицион йәмғиәттең емерелеүе менән донъяға индивидуаль ҡарашлы заманса мәҙәниәтле яңы ҡала кешеһе айырылып сығырға тейеш. Уның киң ҡатлам булыуы мөһим. (Көнбайышта "урта синыф"ты тәшкил иткәндәр һымаҡ). Республикала ундай тип киң һаналмай, халыҡтың күбеһендә коллективистик ҡуйылыш өҫтөнлөк итә.

Либераль цивилизациянан айырмалы, традицион йәмғиәттең социаль һәм сәйәси институттарға әүерелгән, үрнәк һәм йолаларға әйләнгән тормош ҡоролошон булдырыусы үҙ проекты, үҙ мәҙәниәт программаһы бар. Хужалыҡ итеүҙең әлеге тибы сәйәси тәҙәлештәргә ҡарамайса ҡайтанан тыуып тора. Әгәр ҙә халыҡтың күпселеге бындай мәҙәниәт программаһын йөрөтә икән – иҡтисадтың яңы тибы барлыҡҡа килә алмаясаҡ. Тарихтан билдәле булыуынса, йәмғиәт өсөн мөһим булған ниндәйҙер хужалыҡ һәм социаль тәртипте урынлаштырыуға халыҡтың төп өлөшөнөң эшмәкәрлеге булышлыҡ итә.

Башҡортостандың консерватив модернизацияһы характеры уның элитаһы тибын да билдәләнә. Совет осоронан айырмалы рәүештә "суверенитет өсөн хәрәкәт" барышында системаны сәйәси модернизациялау власҡа яңы, "демократик" элита алып килә, әммә шул уҡ ваҡытта уның яңырыу механизмын булдырмай. Совет номенклатураһы элитаһының тарихи ауырыуы ҡабатлана.

Элитаның был формалашыу тибы көнбайыш либераль системаның үҫешкән формаларынан радикаль рәүештә айырыла. Унда власть һәм йәмғиәт горизонталь селтәр бәйләнеш ярҙамында формалаша. Был элитаның йомшаҡ алмашыныуына алып килә һәм системаға дөйөм тоторокло төҫ бирә.

Совет номенклатураһының формалашыу ҡаршылыҡтары республиканың хәҙерге сәйәси һәм хужалыҡ элитаһына ла хас. Властың юғары эшелон вәкилдәренә күҙ йүгертеп сыҡҡанда уларҙың традицион ҡиммәттәрҙе үҙ итеүен һәм "иҫке" тәртипкә буйһоноуын күрергә мөмкин. Улар көнбайыш тибындағы менеджерҙар була алмай. Был властың профессионализм критерийҙары буйынса түгел (һүҙ дөйөм элита тураһында бара, ә уның айырым бер вәкиле хаҡында түгел), ә этник, шәхси принциптар (бәйләнештең клан тибы) буйынса формалашыуы тураһында һөйләй. Элитаның формалашыу механизмының үҙ аллы көйләнеше барлыҡҡа килгән. Уның һайлап алыу нигеҙенә властың традицион ҡиммәттәр йөрөтөүсе менән килешеү принцибы һалына. Һөҙөмтәлә, альтернатив тәртип вәкилдәре – ҡала, либераль мәҙәниәт кешеләре икенсе планға ҡыҫырыҡлана. Асылда, республикала егерме йылға яҡын ҡала өҫтөнән "ауыл власы" идара итте. Ҡала мәҙәниәте ауыл мәҙәниәте баҫымы аҫтында йәшәй. Был беҙҙең ҡарамаҡҡа ғәжәп һәм шул уҡ ваҡытта ыңғай күренеш.

Шулай итеп, бөгөн кем модернизация агенты була ала һәм булырға тейеш? Кем XXI быуатта башҡорт халҡын сәскә атыусы һәм конкурентлыҡҡа һәләтле милләт итеүгә ысын мәғәнәһендә нигеҙ һала ала? Әлегә башҡорт халҡының "урта синыфы", көслө бизнес-элитаһы юҡ һәм был эшкә башҡорт милли интеллигенцияһы тотонорға тейеш. Башҡорт йәм-

ғиәтенең башҡа социаль агенттары юҡ һәм, ҡыҙғаныска ҡаршы, оҙаҡ ваҡыт булмаҫ та.

Бөгөн башҡорт халҡы тарихи альтернатива алдында тора – либераль гражданлы милләтселек юлы менән барырғамы, әллә инде халыкты традицион община идеологияһы нигеҙендә тупларғамы.

Тәүге осраҡта традицион йәмғиәттең һуңғы сиктәрен емереүгә булышлыҡ итеп, тиҙләтелгән атомизация процесы аша үтеп, либераль миллилек сиктәрендә тупланырға кәрәк буласаҡ. Был шулай уҡ "крәҫтиән" мәҙәниәтен баҫтырыу, ашығыс структуралар һәм "ҡулланыусы йәмғиәт" идеологияһын булдырыу тигәнде аңлата.

Беҙҙең ҡарашка, был юлдың башҡорт халҡын һәм уның үҙенсәлекле мәҙәниәтен юҡ итеүе ихтимал.

Либераль модернизацияның икенсе альтернативаһы ла бар – этносты "халыҡ-ғаилә" идеологияһы, дәүләт һәм ғаилә патернализмы сиктәрендә, традицион һәм дини ҡиммәттәр нигеҙендә консолидациялау.

Яңы халыкты йыйыу башҡорт йәмғиәтенең донъяуи ҡараштары ядроһына таянырға тейеш. Уға традицион ҡиммәттәр һәм Ислам ҡанундары индерелһен. Ислам тураһында һүҙ йөрөткәндә, шуны ла аңларға кәрәк, бөгөн революцияға тиклемге традиционализмды тулыһынса регенерациялау мөмкин түгел. Сөнки үҙ заманында ул совет традиционализмы менән тулыһынса "эшкәртелгән" була. Был йәһәттән мосолман фундаменталистарына бер ниндәй ҙә иллюзия бағлау кәрәкмәй, бары тик традицион (светский) синтез һәм дини (ислам) ҡиммәттәр тураһында ғына һүҙ барыуы мөмкин.

Тарихтың әлеге этабында башҡорт йәмғиәтенең төп идеологияһы булып, шартлыса әйткәндә, "традицион йәмғиәт" идеологияһы торорға тейеш. Башҡорт халҡы этник үҙаң нигеҙендә туплана. Тел дә, дин дә, социаль килеп сығыш та башҡорт этносының төп өҫтөнлөгө булып тора алмай. Йәмғиәтебеҙҙең фундаменталь сиктәре юғала барыу менән, идеологияны алмаштырырға мөмкин буласаҡ. Әммә беҙҙең ҡарашка, тарихтың әлеге этабы өсөн иң тап килгән идеология булып "башҡорт традиционализмы", киңерәк йәки "ерлекле" консерватизм тора.

Бынан тыш, халҡыбыҙҙың донъяға ҡарашына һәм менталитетына таянып, яңы башҡорт йәмғиәте тупланырға тейешле ыңғай ҡиммәттәр һәм ялған ҡиммәттәр ядроһын бөгөн инде тейешенсә асыҡ билдәләргә була.

Тәүге сиратта, ул әхлаҡ культы, мәктәп, ғаилә һәм дин авторитеты; йолалар культы, милли мәҙәниәт, илһөйәрлек. Был шулай уҡ шәхес мәнфәғәте алдында дәүләт мәнфәғәте өҫтөнлөгө; көслө иерархия дәүләте, хокуҡ һәм азатлыҡ кимәленең конкрет-тарихи бәйлелеге; айыҡ аҡыл, аҡрын һәм һаҡ үҙгәреште.

Башҡорт халҡының ялған ҡиммәттәре – атеизм, сәйәсәттең материалистик ориентацияһы, мораль релятивизм һәм аҡыл культы. Артабан – антитрадиционализм, космополитизм, шәхес мәнфәғәттәренең дәүләт мәнфәғәттәренән өҫтөнлөгө; индивидуализм; шәхси хокуҡтар һәм азатлыҡ культы.

Бөгөн, үкенескә күрә, башҡорт йәмғиәтенең XX быуат башындағы кеүек үк сираттағы тарихи ҡапҡанға эләгеүен таныу кәрәк.

Һөҙөмтәлә, "баҙарға күсеү" менән престиж булмаған, аҙ түләнелгән һөнәрҙәр арта, социаль тигеҙһеҙлек урынлаша. Һәм шуға күрә лә был хәлдән ҡотолоу өсөн ҙур-ҙур эштәр башҡарырға кәрәк. Фекерләү кеүәһен үҙгәртеү, утопик иллюзияларҙан ҡотолоу ғына түгел, ә радикализм көсөн дә йырып сығыу талап итилә. Шулай итеп, был бик ауыр социаль мәсьәлә. Уны хәл итеү юлдары нисек булырға тейеш?

Бирәү ҙә ҡулыбыҙға әҙер рецепт тоттормаҫ. Үҙ-ара, хәбәрләшеп, был мәсьәләләрҙе хәл итеү юлдарын булдырырға тейешбеҙ. Һәм, башҡорт йәмғиәтен трансформациялауҙың иң оптималь моделе булып тик консерватив модернизация тора алалыр. Йәғни башҡорт йәмғиәтендә йәшәп килгән традицион ҡиммәттәргә таянған, беҙҙең халыктың йәшәү рәүешен һәм мәҙәниәтен тоткан урындан һындырмаған модернизация.

***Азамат БУРАНШИН,***
***Тарих фәндәре кандидаты, БР ФА-ның Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының этнополитология бүлеге мөдире.***
*buranchin@yandex.ru*

*Лира ӘХМӘТ-ЯҠШЫБАЕВА*

# ҒАБДУЛЛА СӘИДИ

## Әҙәби-документаль повесть



### ДОҒАИ БӘХЕТ ВӘ СӘҒӘҘӘТНАМӘ

Бер көндә илап-илап йоҡлап киткән малай төшөндә ниндәйҙер һүҙҙәр яҙылған алһыу шарҙар күреп уянды. Яҙыу ғәрәпсә ине. Уҡып өлгөрә алманы, шарҙар осоп китте лә ҡып-ҡыҙыл сәскәгә әүерелде. Уларҙа ни яҙылғанын бик белгеһе килгән Ғабдулла ҡабат йоҡлай алманы. Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, ҡаршылағы стенала алтын хәрефтәр менән теркәлгән һүҙҙәр хасил булды. «Доғаи бәхет үә сәғәҙәтнамә» тиелгәйне унда. Артабан йәнә яҙыуҙар күренде. Бәхет теләү доғаһы... Бындай доға хаҡында атаһы һөйләгәйне уға. Кем дә кем уға эйә була, үҙе генә түгел, бөтә тоҡом-ырыуы мәңге бәхетле йәшәйәсәк, тигәйне. Шул доғамы икән ни был? Их, күсереп алып ҡала алманы! Теге серле яҙыуҙар ҡабаттан пәйҙә булһа, яҙып алырмын, тип янына дәфтәр, ҡәләм һалып ҡуйҙы. Эй, көттө, эй көттө малай, әммә яҙыу башҡаса күренмәне. Стенала элеүле торған ҡәкүкле сәғәткә ҡараны, таңғы дүрт ине. Ята торғас, бала татлы йоҡоға сумды. Төшөндә йәнә теге шарҙарҙы күрҙе. Атаһыныҡына оҡшаған бер тауыш: «Иртәгә нәҡ ошо ваҡытта, ҡояш сығыр мәлдә доға ҡабаттан килер, уны күсереп алырға тырыш. Был доға һинең шәфәғәтсең булыр», — тине.

Иртәгеһен таң ҡыйылыр алдынан тағы шарҙар, яҙыуҙар күреп уянды малай. Ҡулына ҡәләмен алды. Шул саҡ, кисәге һымаҡ уҡ стенала алтын хәрефле яҙыу барлыҡҡа килде. Ғабдулла уларҙы дәфтәренә күсерә башланы:

* * *

*Әссәләму ғәләйкүм, йә бәхет-дәүләт!**
*Хуш киләһең, йә бәхет-дәүләт!*

* *Доғалар авторҙың тәфсирендә һәм транскрипцияһында бирелә.*

Кил миңә, кил, йә бәхет-дәүләт!
Ай менән тыуып кил, йә бәхет-дәүләт!
Көн менән тыуып кил, йә бәхет-дәүләт!
Ямғыр булып яуа кил, йә бәхет-дәүләт!
Ҡар булып яуа кил, йә бәхет-дәүләт!
Ҡыш булып ҡышлай кил, йә бәхет-дәүләт!

* * *

Сәғәҙәт ҡабалын ала кил, йә бәхет-дәүләт!
Һөйөнөс менән бергә кил, йә бәхет-дәүләт!
Нигмәт капкаһын аса кил, йә бәхет-дәүләт!
Рәхмәт нурын сәсә кил, йә бәхет-дәүләт!
Аллаһу Ҡадир сөбханә хаҡы өсөн кил,
Кил, йә бәхет-дәүләт!
Кәлимулла, Инжил хаҡы өсөн кил,
Кил, йә бәхет-дәүләт!
Забур аяттары хаҡы өсөн кил,
Кил, йә бәхет-дәүләт!
Тәүрат аяттары хаҡы өсөн кил,
Кил, йә бәхет-дәүләт!

* * *

Фуркан хәрефтәре хаҡы өсөн кил,
Кил, йә бәхет-дәүләт!
Рәжәб, Шәғбан, Рамаҙан шәриф хаҡы өсөн
Кил, йә бәхет-дәүләт!
Ер-күк ғәрше үә көрси ләүхә үә хаҡы өсөн
Кил, йә бәхет-дәүләт!
Үә барса рижалилдар хаҡы өсөн
Кил, йә бәхет-дәүләт!

* * *

Өс йөҙ ун өс мөрсәлин үә бәйғәмбәрҙәр хаҡы өсөн
Кил, йә бәхет-дәүләт!
Ғалимдарҙың ғилеме хаҡы өсөн
Кил, йә бехет-дәүләт!
Заһидтарҙың Заһиды хаҡы өсөн
Кил, йә бәхет-дәүләт!
Һигеҙ ожмах хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!
Мөъминдәрҙең хаҡы өсөн
Кил, йә бәхет-дәүләт!
Ете тамуҡ хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!
Ожмах хакимы Ризван хаҡы өсөн,
Кил, йә бәхет-дәүләт!
Тамуҡ хакимы Малик хаҡы өсөн,
Кил, йә бәхет-дәүләт!

* * *

Хурҙар хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!
Ҡөрьән шәриф яҙылмыш серҙәр хаҡы өсөн
Кил, йә бәхет-дәүләт!
Ике ғәйет хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!
Шәмси үә Ҡамәр сүрәләрендә яҙылмыш аяттар хаҡы өсөн
Кил, йә бәхет-дәүләт!
Хуш үә тәсбихтәр хаҡы өсөн
Кил, йә бәхет-дәүләт!
Хажиҙарҙың хажы хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!
Ғазиҙарҙың ғазаваты хаҡы өсөн
Кил, йә бәхет-дәүләт!
Мөфтөйҙәрҙең вәғәзе хаҡы өсөн
Кил, йә бәхет-дәүләт!
Солтан үә батшаларҙың ғәҙеллеге хаҡы өсөн
Кил, йә бәхет-дәүләт!

* * *

**Әҙәм бәйғәмбәргә** килмеш тик кил, йә бәхет-дәүләт!

اسْكُنْ أَنتَ وَزَوْجُكَ الْجَنَّةَ

Искүн әңтә үәзәүжәкәл-жәннәтә.
Был аят хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!

* * *

**Иҙрис бәйғәмбәргә** килмеш тик кил, йә бәхет-дәүләт!

وَ رَفَعْنَاهُ مَكَانًا عَلِيًّا

Үәрафәғнәһү мәкәнән гәлийән
Был аят хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!

* * *

**Нух бәйғәмбәргә** килмеш тик кил, йә бәхет-дәүләт!

سَلَامٌ عَلَى نُوحٍ فِي الْعَالَمِينَ

Сәләәмун гәләә Нүүхин фил гәәләмиин
Был аят хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!

* * *

**Ибраһим бәйғәмбәргә** килмеш тик кил, йә бәхет-дәүләт!

وَاتَّخَذَ اللهُ إِبْرَاهِيمَ خَلِيلاً

Үәттәхазәллааһу ибраһиимә халиилән.
Был аят хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!

* * *

**Исмәғил бәйғәмбәргә** килмеш тик кил, йә бәхет-дәүләт!

إِنَّهُ كَانَ صَادِقَ الوَعْدِ وَ كَانَ رَسُولاً نَبِيًا

*Иннәәһү кәәнә садикал уәгди уә кәәнә расүүләннәбийән.*

*Был аят хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!*

* * *

***Яхъя бәйғәмбәргә** килмеш тик кил, йә бәхет-дәүләт!*

يَا يَحْيَى خُذِالكِتَابَ بِقُوَّةٍ

*Йә Йәхиә хузил китәәбә бикувәти.*

*Был аят хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!*

* * *

***Дауыт бәйғәмбәргә** килмеш тик кил, йә бәхет-дәүләт!*

يَا دَاوُدُ إِنَّا جَعَلْنَاكَ خَلِيفَةً فِي الأَرْضِ

*Йә Дәүду иннә жәгәлнәкә халифәтән фил ардый.*

*Был аят хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!*

* * *

***Сөләймән бәйғәмбәргә** килмеш тик кил, йә бәхет-дәүләт!*

إِنَّهُ مِنْ سُلَيْمَانَ وَ إِنَّهُ بِسْمِ اللهِ الرَّحْمَنِ الرَّحِيمِ

*Иннәһү миң Сүләймәәну уә иннәһү бисмилләһир-рахмәәнир-рахиим.*

*Был аят хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!*

* * *

***Яҡуп бәйғәмбәргә** килмеш тик кил, йә бәхет-дәүләт!*

إِذْ كُنْتُمْ شُهَدَاءَ إِذْ حَضَرَ يَعْقُوبَ المَوْتَ

*Из күңтүм шуһәдә-ә из хәдара Йәгъкуубәл мәүтә.*

*Был аят хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!*

* * *

***Йософ бәйғәмбәргә** килмеш тик кил, йә бәхет-дәүләт!*

يُوسُفُ أَعْرِضْ عَنْ هَذَا

*Йүүсүф әгрид гән һәҙәә*

*Был аят хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!*

* * *

***Муса бәйғәмбәргә** килмеш тик кил, йә бәхет-дәүләт!*

وَ كَلَّمَ اللهُ مُوسَى تَكْلِيمًا

*Уә күлләмәл-лааһу Мүүсәә тәкълимән.*

*Был аят хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!*

* * *

***Әйүп бәйғәмбәргә** килмеш тик кил, йә бәхет-дәүләт!*

وَ أَيُّوبَ إِذْ نَادَى رَبَّهُ أَنِّي مَسَّنِيَ الضُّرُّ وَ
أَنْتَ أَرْحَمُ الرَّاحِمِينَ

*Уә Әйүүбәизнәдийәә раббәһү әннии мүссәнийәд — дурру уә әңтә әрхәмүр-рахимиин.*

*Был аят хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!*

* * *

***Юныс бәйғәмбәргә** килмеш тик кил, йә бәхет-дәүләт!*

وَ ذَا النُّونِ إِذْ ذَهَبَ مُغَاضِبًا فَظَنَّ أَنْ لَنْ نَقْدِرَ عَلَيْهِ
فَنَادَى فِي الظُّلُمَاتِ أَنْ لاَ إِلَهَ إِلاَّ أَنْتَ سُبْحَانَكَ إِنِّي
كُنْتُ مِنَ الظَّالِمِينَ فَاسْتَجَبْنَا لَهُ وَ نَجَّيْنَاهُ مِنَ الغَمِّ وَ
كَذَلِكَ نُنْجِي المُؤْمِنِينَ

*Уә зиәннүүниз-зәһәбә мүгадыйбән фәзаннә әлләннәкъдира гәләйһи фәнәәдәйәә физзулмәти*

*әллә илә́әһә иллә әңтә субьхәәнәкә инни күңтү минәз-залиминә фәстәжәйнә ләһу уә нәжжәйнәәһу минәл гамми, кәзәликә нүнжил мүэминиин.*

*Был аят хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!*

* * *

***Зәкәрийә бәйғәмбәргә** килмеш тик кил, йә бәхет-дәүләт!*

وَ زَكَرِيَّا إِذْ نَادَى رَبَّهُ لاَ تَذَرْنِي فَرْدًا وَ
أَنْتَ خَيْرُ الوَارِثِينَ

*Уә Зәкәрийә из нәэдийә раббәһү ләә тәзәрнии фәрдә əн уә әңтә хайрул уәрисиин.*

*Был аят хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!*

* * *

***Ильяс бәйғәмбәргә** килмеш тик кил, йә бәхет-дәүләт!*

وَ إِنَّ إِلْيَاسَ لَمِنَ المُرْسَلِينَ

*Уә иннә Илйасә ләминәл мүрсәлиин.*

*Был аят хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!*

* * *

***Ғайса бәйғәмбәргә*** *килмеш тик кил, йә бәхет-дәүләт!*

اللَّهُمَّ رَبَّنَا أنْزِلْ عَلَيْنَا مَائِدَةً مِنَ السَّمَاءِ تَكُونُ لَنَا عِيدًا لأوَّلِنَا وَ آخِرِنَا وَآيَةً مِنْكَ وَ ارْزُقْنَا وَ أنْتَ خَيْرُ الْوَارِثِينَ

*Әллаһүммә раббәнәә әңзил гәләйнә мәә идәтәм минәс сәмәә-и тәкүнү ләнәә гидә әи ли әүвәлинә үә әхыйринә үә аятән миңиә үәрәүкъмәә үә әңтә хайрул үәрисин.*

*Был аят хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!*

* * *

***Нәбийнәә Мөхәммәдин Мостафа салләлләһү тәгәлә гәләйһи үәссәләмгә*** *килмеш тик кил, йә бәхет-дәүләт!*

طه مَا أنْزَلْنَا عَلَيْكَ الْقُرآنَ لِتَشْقَى إلا تَذْكِرَةً لِمَنْ يَخْشَى

*Тәһә мәә әңзәлнә гәләйкәл кур-әәнә литәшкаа илләә тәзкиратәл-лимән йәхшә.*

*Был аят хаҡы өсөн кил, йә бәхет-дәүләт!*

* * *

وَنُنَزِّلُ مِنَ الْقُرآنِ مَا هُوَ شِفَاءٌ وَرَحْمَةٌ لِلْمُؤْمِنِينَ وَلا يَزِيدُ الظَّالِمِينَ إلا خَسَارًا * وَصَلَّى الله عَلَى سَيِّدِنَا مُحَمَّدٍ وَ آلِهِ وَ أصْحَابِهِ أجْمَعِينَ بِرَحْمَتِكَ يَا أرْحَمَ الرَّاحِمِينَ

*Үә нүнәззилү минәәл кур-әәни мәә һүвә щифәәүн үәрахмәтүл-лил мүәминиинә үәләә йәзидүззаалимиинә иллә хасәра. Үә салләлләһү гәләә сәййидинә Мүхәммәдин үә алиһи үә әсхаабиһи әжмәгиин.*

*Бирахмәтикә йәа әрхамәр-рахимиин.*

Шулай итеп, егерме өс көн дауамында Ғабдулла тәҙрәгә яҙылған доғаларҙы дәфтәренә күсерҙе. Әҙәм, Иҙрис, Нух, Ибраһим, Исмәғил, Яхъя, Дауыт, Сөләймән, Якуп, Йософ, Муса, Әйүп, Юныс, Зәкәрийә, Ильяс, Ғайса, Мөхәммәдин Мостафа саләлләһү тәғәлә ғәләйһи үәссәләмгә бирелер бәхет-дәүләт доғаларын бер дәфтәргә теркәне һәм күңеленә һеңдерҙе..

Ай самаһы булышты Ғабдулла был изге доғалар менән. Бер нисә дәфтәрҙе ҡушып тегеп, ҡатырға менән тышлап, китап яһап алды. Бәхет доғаһын шунда матур итеп күсереп яҙҙы һәм иртәнге намаҙҙан һуң көн дә уҡыр булды. Бер көн ҡулдан яҙылған китабын алып ҡараһа, үҙ күҙенә үҙе ышанмай торҙо. Хәрефтәр алтынланғайны. Етмәһә, бер нисә яңы доға өҫтәлгәйне. «Йә, Хоҙай, был ни хикмәт?» тип уйланы малай. Уның сабый күңеле ҡанатлы ҡоштай талпынды. Ул изге һүҙҙең ҡөҙрәтле көсөн тойҙо. Күңеле доғаларҙың изгегә икәнен аңлап, көн дә мөғжизә көтөп йәшәй башланы.

## ӘҮЛИӘ ХИКМӘТТӘРЕ

Шәйех Ғабдулла Сәидиҙең ерҙә йәшәп китеүенә күп йылдар үтеүгә ҡарамаҫтан, дин юлында йөрөүселәр, хәҙрәттең яҡташтары, туғандары әүлиәне онтомай: “Йылдар үткән һайын хәтирәләр тарих төпкөлөнә китеп юғала бара. Оло быуын вәкилдәре, һис юғы Мөхәмәтәнүәр олатайҙы күреп белеүселәр араһынан берәү, уның хаҡында мәғлүмәт туплап, әҫәр яҙып сығарһын ине”, — ти Зәйтүнә апайҙың (Ғабдулла хәҙрәттең ейәнсәре) балалары һәм уның хәләл ефете Мөхөтдин ағай. Шулай уҡ Ғабдулла хәҙрәттең килене Файҙа Абдуллинаның, Баймаҡта йәшәүсе Хәҙисә апайҙың һәм башҡа бик күптәрҙең теләге был.

Бөгөн, Ғабдулла Сәиди хикмәттәрен, нигеҙҙә, улы Мөхәмәтәнүәр һөйләп ҡалдырғандар буйынса ишетеп беләбеҙ.

– Ул барыбыҙҙы эргәһенә йыйып ултыртыр ҙа, олатайыбыҙ тураһында һөйләр ине, — ти хәҙрәттең бүләсәһе Дилара Рафиҡова. — Әбеҙ уның ауыҙынан ишеткәндәрҙең күбеһен әкиәт итеп ҡабул иттек.

– Атайым ҡайҙа барһа ла мине күсер итеп алып йөрөттө, — тип хәтерләр булған Ғабдулла Сәидиҙең улы Мөхәмәтәнүәр мулла. – Юлға сығыр тарафҡа ымлап, ҡулын ғына һелтәй ҙә, «Ләббәйкә» тип бер генә һүҙ әйтә. Аттар шунда уҡ теләгән ергә алып барып еткерә. Ташып ятҡан йылғамы, көрт һалынған юлмы, йөҙәр саҡрым арамы, ҡара урманмы — былар-ҙың береһе лә беҙгә ҡаршылыҡ була алмай. Атайымдың иртәнге намаҙҙы — Муллаҡайҙа, өйләне — ауылынан өс йөҙ саҡрымда ятҡан Троицкиҙа, аҡшамды ике йөҙ илле саҡрымдағы Хәйбулла районы Вәлит ауылында йәшәгән Ғатаулла ишанда уҡыған саҡтары булды. Йөҙәр саҡрым араны беҙ уның менән күҙ асып йомғансы үтә ала инек.

Күңелдәрендә үҙҙәре йәшәгән заман өсөн яуаплылыҡ тойғоһо йөрөткән бөйөк дин әһелдәре, әүлиәләр, суфыйҙар, арала мең саҡрымдар ятһа ла, үҙ-ара рухи бәйләнештә тороуы, бер-береһенең ни ҡылғанын, ни уйлағанын белеүе тураһында халыҡ хәтерендә байтаҡ мәғлүмәт һаҡланған. Ғилем һәм хикмәт эйәһе Ғабдулла Сәиди ҙә шундайҙарҙан булған. Ул үҙенә күренергә килгән кешенең ни уйлап, ни сәбәп менән мөрәжәғәт итеүен алдан белгән, өшкөрөләргә теләүсене тәһәрәтләнеп көтөп алған. Килгән бер кешене яҡты йөҙ, йылы һүҙ менән ҡаршылаған. Асыуярһыу, көнсөллөк, тәкәбберлек уға ят булған.

Хәҙрәт шулай уҡ күп телдәр белгән. Урыҫтар килһә, улар менән дә рәхәтләнеп русса һөйләшкән. Ғәрәп, фарсы телдәрендә иркен уҡыған, яҙған, шиғырҙар ижад иткән.

Бохара әүлиәләре «Ҡөрьән»де дүрт-биш сәғәттә уҡып сыҡҡан, Ғабдулла Сәидигә лә быныӊ өсөн яҡынса шул саманы ваҡыт талап ителгән.

– Беҙ – ҡотоп заман, — тигән хәҙрәт. – Йәшәгән заманыбыҙ өсөн Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында яуаплы заттанбыҙ. Хужаһыҙ өй булмай. Ер шары беҙҙең дөйөм йортобоҙ, уның хужаһы — Аллаһы Тәғәлә. Ә беҙ, кешеләр, ергә килгән ҡунаҡ ҡына. "Ҡунаҡ булһаң, тыйнаҡ бул", тигәндәр. Беҙ, ҡунаҡтар, ҡай саҡ Хужаның киң күңеллелеге, йомартлығы менән файҙаланып, артығын ҡыланмайбыҙмы икән?!

Ҡотоп замандың бәндәләрҙе иманға өндәп әйткән әлеге һүҙҙәре хаҡында онотмаһаҡ ине.

## БИРЕ БАРМЫ?

– Бире, тиҙәр ҙә өләсәйемдәр хәбәр һөйләй. Хәҙрәт, ысынлап та, биреләр бармы икән беҙҙең арала?

Был һорауҙы Сәмиғулла остазына юкка ғына бирмәне. Әҙәм балаһы менән йәнәшә бире заттарының йәшәү-йәшәмәүе уны, ысынлап та, ҡыҙыҡһындыра. Кисә генә Иҙрис ауылынан килгән Тимерғәле ағай атаһына ендәр тураһында һөйләгәнен шаҡ ҡатып тыңлап ултырҙы. Хайран ҡалырлыҡ бит. Тимерғәле ағай ҡатыны Ырысбикә менән ауыл осонда өй һалып сығып, донъя көтә башлай. Бер аҙҙан улар йортта үҙҙәренән тыш кемдәрҙеңдер барлығын аңлай. Буштан-бушка ишек асылып ябыла, тып-тып баҫып йөрөгән аяҡ тауыштары ишетелә. Ҡай саҡ бала-саға ауазы ла яңғырап ҡуя. Башта хужалары быға бик хафалана. Әммә бер аҙҙан күнегә. Зыяндары теймәй бит, йәшәһендәр әйҙә. Ә бер көн эңер мәлендә билдәһеҙ бер зат уларҙы тәҙрә шаҡып уятҡан.

– Ни ҡарап ятаһығыҙ, һыйырығыҙ быҙаулай алмай интегә.

Тышта кеше-фәлән күренмәгән. Һарайға барып инһәләр, ысынлап та, һыйырҙары быҙаулай алмай, ауыр тын алып, хәл өҫтөндә ята, ти. Тиҙ генә күршеләге имсе Кәшифә инәйҙе саҡырып килтереп, быҙауҙы ҡул һалып, һөйрәп алғандар. Аҙаҡ сыуыны ла төшкән. Меҫкен һыйыр быҙаулай алмай үлер сиккә еткән булған, имен ҡалғас, хатта күҙҙәренән йәше аға, ти. Йорт хужалары иҫкәртеүсенең кем булыуына төшөнмәһә лә, уға рәхмәттәр уҡыған. Тегеләре үҙҙәрен хатта иртәнге намаҙға ла уятып торғас, хужалар уларҙы дуҫ күргән.

Сәмиғуллаға биреләрҙең күсеүе тураһында ла ишетергә тура килде.

Быны Дүбиндә йәшәгән Хәйербанат инәһе һөйләне. Бер көн әбейгә кемдәр:

– Был урындан күсергә ваҡыт. Татыу йәшәнек, хушығыҙ, — тип өндәшә. Бер аҙҙан бала-сағалары менән сыр-сыу килешеп өйҙән сығып киткән тауыштар ишетелә, ә үҙҙәре күренмәй.

Ауылда биреләр тураһында әҙәм ышанмаҫ хәбәрҙәр ҙә йөрөй. Бераүҙәре биреләр менән дуҫ йәшәргә кәрәк, ти. Икенселәре киреһен һөйләй. Был имеш-мимештәргә ышанырға ла ышанмаҫҡа ла белмәгән Сәмиғулла остазына мөрәжәғәт итте. Хәҙрәт шәкертенә шаян ҡараш ташланы ла йылмайып ҡуйҙы:

– Ә үҙеңдең биреңе күргең киләме һуң?

– Эйе.

– Иртәгә ауылдаштар йәйләүгә күсә. Һине урындыҡ аҫтына йәшереп ҡалдырырбыҙ. Аҙаҡ беҙгә ниҙәр күргәнеңде һөйләрһең.

Иртәгеһенә Сәмиғулла билдәләнгән урынға инеп боҫто. Бер мәлде ниндәйҙер күҙгә күренмәгән заттарҙың дөбөр-шатыр өйгә килеп тулғанын ишетте ул. Сарылдап бала илай. Бер саҡ тегеләр урындыҡҡа ултырып сәй эсә башланы. Шунда береһе шәкерткә өндәште:

– Һинең урындыҡ аҫтында йәшенеп ятҡанынды беләбеҙ. Эй, әҙәм балаһы, тыңла, һәм кешеләргә еткер: беҙ ҙә һеҙҙең һымаҡ уҡ мосолман. Ерҙәге тормош өсөн борсолабыҙ. Уның именлеген һаҡлау — беҙҙең дә, һеҙҙең

дә бурыс. Белегеҙ, ахырызаманды кисектереү үҙебеҙҙән тора.

Ошо һүҙҙәрҙән һуң теге тауыш тынып калды. Бер аҙҙан ҡурҡынған шәкерт йәһәтләп урындыҡ аҫтынан сыкты ла йәйләү яғына тороп сапты. Тирмәгә килеп йығылғас, хәҙрәт:

– Йә, биреләрҙе күрҙеңме, һөйләштеңме? — тип һораша. Шәкерт барыһын түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә.

– Йә, хәҙер ышандыңмы биреләрҙең барлығына?

– Эйе. Тик мин бер ни ҙә аңламаным.

– «Джин» сүрәһе «Ҡөрьән Кәрим»гә Аллаһы Тәғәлә тарафынан бушка индерелмәгәндер. Ысынлап та, ер йөҙөндә беҙҙең менән йәнәшә ендәр донъяһы ла йәшәй. Улар һан яғынан кешеләргә ҡарағанда өс-дүрт тапкырға күберәк һәм күпкә етеҙерәк. Беҙ биреләрҙе күрмәйбеҙ, әммә улар кешеләрҙе күҙәтеп йөрөй. Эйе, мосолман ендәре лә була. Улар бәндәгә зыян итмәй. Аҡылы, ғилеме, көс-ҡеүәте йәһәтенән үҙҙәренән өҫтөн булған әҙәми затка ендәр теләп буйһона, ҡол һымаҡ егелеп хеҙмәт итә. Ҡушкан йомошон үтәй. Быға бик күп дәлилдәр бар.

Шул рәүешле шәкерте хәҙрәттән биреләр тураһында ифрат ҡыҙыклы мәғлүмәт алды.

## ҒАБДУЛЛА УРҘАҺЫ

Ололарҙың «Йыландың үҙе үлһә лә, ағыуы ҡала», тигәне хаҡ. Сураш батыр яуыз Брагинды бынан йөҙ утыҙ йыл элек һөйәркәһе менән Талкаҫ күлендә кәмәлә йөрөгән сағында уктан атып үлтерһә лә, аҙғын баярҙың тоҡомо һаман йәшәй, тигән булған Әмин ауылы кешеләре. Ҡанында Брагин шауҡымы булған баярҙар, уларҙың яҡындары башҡортка хаслыҡ ҡылыуын һаман ҡуймаған. Брагинсылар башкорттарҙың малын, бесәнен, йә булмаһа һылыу ҡыҙҙарын урлап, сәскән игендәрен малдарынан тапатып, этлеген ҡылып ҡына торған. Был хәлдәрҙән тамам биҙрәгән Үрге Иҙрис, Әмин, Эткол ауылы халкы ярҙам һорап Ғабдулла Сәйдигә мөрәжәғәт итте.

– Яҡын тирәләге ауыл кешеләре менән берләшеп бер төн эсендә ике арала тәрән соҡор ҡаҙығыҙ. Ул урҙанан насар уй менән йөрөгәндәр үтә алмаҫ, — тине хәҙрәт. Үҙе брагинсыларға:

– Башҡа был тирәгә аяк баҫмағыҙ, ҡотолғоһоҙ бәләгә тарырһығыҙ, — тип хәбәр ебәрҙе.

Брагинсылар хәҙрәт әйткән һүҙҙәрҙең дөрөҫләгән һынап ҡарамаҡсы булды. Бер хаслыклы баяр биш ат егеп, биш хеҙмәтсеһен бесән урларға ебәрҙе. Тегеләре ауыл халкының кәбәнгә һалған мал аҙығын тейәп ҡайтырға сыкты. Ҡапыл ер өҫтөн ап-аҡ томан каплап алды. Бесән бурҙары ҡайтыр юлды таба алмайынса аҙашып ҡырҙан-кырға йөрөй башланы. Ахмалға төштө. Өйҙән сығыуҙарына бер-нисә көн үтеп китте. Ризыҡ, йоҡо төҫө күрмәй арманһыҙ булдылар. Аттары йонсоно. Шунда араларынан бер аҡыллырағы:

– Былай итеп йөрөй торғас, хәҙрәт иҫкәрткәнсә, йә тағы ла ҡатыраҡ бәләгә тарырбыҙ. Йә бүре өйөрөнә ем булырбыҙ. Иҫән сакта, әйҙәгеҙ, Муллакайға барып, хәҙрәттән ғәфү һорайыҡ, — тип хәбәр һалды.

Тәкдимгә бишеһе лә риза булды.

Хәҙрәт уларҙың килерен белеп, кесе ҡатыны Зөләйхаға:

– Абыстай, аш һал, самауырыңды ҡайнат. Хәҙер беҙгә бесән алып киләләр, – тине һәм Әнүәр улына аҙашып йөрөгән брагинсыларға ҡапка асырға ҡушты.

Бесән бурҙары ояла-ояла килеп Ғабдулла Сәйдигә хәлде һөйләп бирҙе. Быны үҙҙәренең ихтыярынан тыш эшләүҙәрен әйтте.

– Белеп торам. Ана, инеп аш ашап, йылынып алығыҙ ҙа бесәнде хужаларына таратып сығығыҙ. Ике йөгөн Нәбирә инәйгә, береһен беҙгә, ҡалған икеһен бесәндәрен ҡайһылай алдырырға белмәй йөрөгән етем-еһерҙәргә бушатығыҙ, — тине. Үҙе рәхәтләнеп көлдө. — Ҡайһылай йәтеш булды, бесән өйгә үҙе килеп ауҙы.

Бесәнде хужаларына таратып сыҡкас, былар йәнә Ғабдулла хәҙрәт янына килде:

- Беҙ баяр бойороғо менән йөрөйбөҙ. Ҡушканын үтәмәһәң, ҡамсы менән ярҙыра. Шул яуыз түрәне аҡылға ултыртып булмаҫмы икән, — тип ҡабатланы бесәнселәр. — Ҡанһыҙлығы, яуызлығы менән Брагиндан һис тә ҡалышмай.

– Был турала уйлашырбыҙ әле. Ә хәҙер өйҙәрегеҙгә таралышығыҙ. Яҡындарығыҙ һеҙҙе көтә-көтә көтөк булды инде. Хужағыҙға еткерегеҙ, бынан ары һис кем яман уй менән урҙа аша үтмәһен. Һынау быныһына ҡарағанда ла яманыраҡ буласаҡ.

Тәкәббер баяр бесән урларға ебәргән хеҙмәтселәре һөйләгәндәргә тамсы ла ышанманы. Үҙе ҡарап тороп һәр береһенә унар ҡамсы һуҡтыртты ла, иртәгеһенә һунар мылтығын,

пистолетын тағып, үҙенә юлдашҡа бер нисә хеҙмәтсеһен эйәртеп, һыбайлап юлға сығып китте. Муллаҡайҙарҙың йылҡы көтөүен ҡыуып алып ҡайтыу ине иҫәбе. Улар Һаҡмар аша сығып, Әмин ауылынан урҙа ҡаҙылған яҡҡа йүнәлде. Хужалары Бәҫмән тауы буйында йөрөгән йылҡыларҙы ҡыуып алып ҡайтырға дәғүәләшә башлаһа, беҙҙең ергә төшкән, ни эшләтһәк тә хаҡыбыҙ бар, тип малдарын бирмәҫкә — баярҙың ҡорған маҡсаты ошонан ғибәрәт. Юлдары көҙгө урман аша үтә. Ергә түшәлгән һары япраҡтар серле ҡыштырлай. Баяр ҡапыл ағас башында ултырған оҙон ғына кәүҙәле, ялбыр ҡойроҡло көрән төҫтәге йәнлекте күреп ҡалды.

– Һыуһар бит был! — тип ҡысҡырҙы һәм тегегә тоҫҡап атып та ебәрҙе. Әммә йылғыр йәнлек икенсе ботаҡҡа һикереп өлгөрҙө. Аҫыл тиреле, һирәк осрай торған йыртҡысты нисек тә ҡулынан ысҡындырмаҫҡа тырышып, баяр уның артынса урман эсенә инеп китте. Йәнлек үҙенән әллә ни алыҫ та түгел, әммә атып тигеҙермен тимә. Шулай ҡыуалап бара торғас, һунар сәме тоҡанған баяр ҡара урман төпкөлөнә инеп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Уға һүҙ әйтергә ҡурҡҡан юлдаштары ла артынан эйәрҙе. Ҡап-ҡара урман эсенә инеп юлыҡҡас, теге йәнлек күҙҙән юғалды. Баяр эй, ыуаланды, эй, һүгенде. Тик бер ни ҙә ҡыла алманы. Урман йәнлеге, тотоп алып ҡамсы менән ярырға, ҡул аҫтындағы хеҙмәтсеһе түгел шул. Тиҙҙән ҡараңғы ла төшә башланы. Баяр ҙа, юлдаштары ла был тирәне белмәй. Юл да, һуҡмаҡ та күренмәй. Етмәһә ҡаршыла бейек-бейек тауҙар теҙмәһе. Ҡайһы тирә булды һуң был? Анау күренеп ятҡан йылға Йылайырмы, Ҡанамы, Инйәрме?

Баяр асыу-ярһыу менән юлдаштарына ябырылды:

– Булдыҡһыҙҙар! Ер-һыу ҙа танымаған аңра бәрәндәрҙе, ни тип үҙем менән алдым?

Үсе ҡанғансы ялсыларын кәмләп-хурланы Брагин тоҡомло баяр. Әммә бынан ни фәтүә? Айыҡ аҡыл кәрәк, шунһыҙ был ҡара урман эсенән мәңге сыға алмаясаҡтар. Ул ялсыларына ниндәй ҙә булһа  берәй юл табырға бойорҙо. Әммә һуҡмаҡ булмай сыҡты. Ул арала төн етте. Ҡара урманда өкөләр ухылдай, ниндәйҙер ят ҡоштар тауышы ишетелә, ҡайҙалыр бүреләр ҙә олоп ҡуя.

«Бер эшкинмәгән һыуһар артынан йөрөп, юлдан яҙҙыҡ», — тип үкенде баяр, үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр күңелен ҡурҡыу солғап алды. Бәҫмән тауы тирәһендә утлап йөрөгән йылҡы өйөрөн дә онотто. Ул хеҙмәтселәренә аттарҙы шундағы йыуаныраҡ ағастарға бәйләргә ҡушты ла, төндө ағас башында үткәрергә бойорҙо. Таң атыу менән ҡайһы яҡҡа барырға ла белмәгән юлсылар йәнә юл эҙләп китте. Ҡайҙа ҡарама ҡара урман, шыршыһы ла, ҡарағасы ла, ҡайыны ла шәм кеүек ултыра. Биштәрҙәге ризыҡтар ҙа бөтөп бара. Инде ни эшләргә, ҡайҙа барырға? Аҙашып йөрөүҙәренең өсөнсө көнөнә хеҙмәтселәрҙең берәүһе аңғарып ҡалды:

– Беҙҙең былай ҡаңғырып йөрөүҙәр Муллаҡай хәҙрәтенең хикмәте түгелме икән? Ул яуыз ниәтле кеше урҙанан үтһә, ҡаты бәләгә тарыр, тигән.

– Ерунду не городи, — тип ҡырт киҫте баяр. — Нашел чем пугать. Не из пугливых.

– Беҙ бит яуыз уй менән барҙыҡ.

– Ну и что же?

– Өйҙә ни уйлайҙарҙыр?

– Не хныч, без того тошно!

Улар бик күп тау-урмандар гиҙҙе. Аҙашып йөрөүҙәренә алты көн булып китте. Инде баяр үҙе лә хафалана, ҡурҡа башланы. Был тирәне биш бармағындай белә торғайны ул. Юлдаштарын хурлаһа ла, улар ҙа төшөп ҡалғандарҙан түгел. Ни булды һуң әле? Әллә хеҙмәтсеһе әйткәнсә, Муллаҡай хәҙрәтенең хикмәте буйынса шулай ҡаңғырып йөрөйҙәрме? Унынсы көндө эшлектән сығып йонсоған, асыҡҡан юлсылар кәңәшкә туҡталды. Хәҙрәттең көҙрәте тураһында һүҙ йөрөткән хеҙмәтсеһе былай тине:

– Әйҙәгеҙ, хәҙрәттән ғәфү үтенәйек. Ул алыҫтағы кешенең дә ни уйлауын белә, алыҫтағыны күрә, тиҙәр.

Тамам арманһыҙ булып, хәлдән тайған баяр был юлы ҡарышманы, башҡалар ыңғайына шыбырланы:

– Ғәфү ит беҙҙе, эй, Ғабдулла хәҙрәт. Бынан ары һеҙгә зыян килтермәҫкә ант итәбеҙ! — Был һүҙҙәрҙе баяр теләр-теләмәҫ кенә бышылдаһа ла, хеҙмәтселәре ысын ихласлыҡ менән әйтте, хатта бер нисәүһенең күҙҙәрендә йәш тамсылары күренде. Юлсылар тороп баҫҡайны, ни күрһендәр, ҡаршылағы ағаста теге сакта баяр баҫтырған һыуһар ултыра. Бына ул, әйҙәгеҙ минең арттан, тигәндәй ағастан-ағасҡа һикерҙе. Юлсылар ҡалышмаҫҡа тырышып, аттарын һыуһар артынан ҡыуаланы.

Бер-ике саҡырым үттеләрме-юкмы, Һаҡмар буйына килеп тә сыктылар. Алда Муллаҡай ауылы күренде. Ошо ус төбөндәгеләй ерҙә лә аҙашып йөрөһөндәр әле!

– Что за чертовщина?! — тип һүгенә башлаған баярҙы, йәнә берәй бәләгә тарыуҙан ҡурҡкан юлдаштары тиҙерәк туктатырға ашыкты.

– Муллаҡай хәҙрәтенең хикмәтен аңламаныңмы ни? Беҙҙе бит ул аҙаштырҙы. Был тирәнән тиҙерәк һыпыртайык.

Һөмһөҙ брагинсылар бынан ары муллаҡайҙар еренә килеп, даулашып йөрөргә ҡурҡты. Был тирәлә мал, бесән урлау күренештәре тукталды. Баяр тыштан һиҙҙермәҫкә тырышһа ла, күңеле менән хәҙрәттең илаһи ҡөҙрәтен танырға мәжбүр булды.

...Инде был урҙаға йөҙ йылдан ашыуҙыр, ти муллаҡайҙар. Ошо ваҡыт арауығында уның аша насар уй менән үтеүсе булманы. Әле лә, ана, ҡалкыу булып күренеп тора. Хәҙрәттең илаһи ҡөҙрәтенә бер дәлил, тере тарих ул.

## БИРЕЛЕТАШ ҒИЛЛӘҺЕ

Малдар һимереп, һуйырлык булғас, бер көндө Байым ауылының уғрылык менән кәсеп иткән өс кешеһе муллаҡайҙарҙың һарыктарын урлап ҡайтырға булды.

– Байып киттеләр. Өй беренсә илле-алтмыш һарык. Бер нисәүһен алғандан бөлөп китмәҫтәр. Уртаклашһындар беҙҙең ише ярлы-ябаға менән,– тип ауыҙ йырҙы хаяһыҙ уғрылар.

Быйыл, ысынлап та, Муллаҡайҙа ваҡ мал ишле ине.

Ҡараңғы төшөүгә аттарын ауыл осондағы саукалыкта ҡалдырып, үҙҙәре Утын ояһы тигән ергә килеп йәшенде былар. Төн уртаһы етеп, ауылдың шәмдәре һүнеп бөткәнсе, шунда көтөп яттылар. Күҙгә төртһәң дә күренмәҫлек көҙгө айһыҙ ҡараңғы төн. Бына, ниһайәт, ауыл тәрән йоҡоға сумды.

– Ваҡыт, — тине башлык. — Аттарҙы саукалыктан алып сығығыҙ!

Бурҙар ауыл ситендәге бер нисә өйгә инеп, утыҙ-кырк баш һарыкты арбаларына тейәп алды ла, йәһәтләп ҡайтыр якка йүнәлде. Байым ауылы яғына киткән оста күбәләй булып, алыҫтан уҡ күренеп Бирелеташ ята. Ҡарактар шул ергә килеп етте лә, ниндәйҙер сихри көскә буйһоноп, ыскынып китә алмай, таш тирәләй өйрөлөп йөрөй башланы. Тылсымлы әкиәттәрҙәге ирекһеҙҙән сихри көйгә буйһонған яуыз заттар кеүек, бурҙар ҙа күбәләй таш тирәләй ураланды.

– Быныһы ни булды, шайтан алғыры, — тип һүгенде аптырап ҡалған төркөм башлығы. — Муллаҡайҙарҙың хикмәте бөтмәҫ, уларға тарыма, тарыһаң — арыма инде.

Әйләнсек һарык һымаҡ, таш тирәләп өйрөләп йөрөй торғас, былар тамам хәлдән тайҙы. Шунда араларынан берәүһе:

– Был әлеге шул Ғабдулла мулланың этлеге булыр, — тине. — Барып хәҙрәттән ғәфү үтенәйек. Юғиһә, тағы әллә ниндәй бәләләргә тарытыр.

– Төн йөҙөндә ғәфү һорап йөрөп булмай инде.

Улар шулай, мейеһе зарарланған әйләнсек һарык һымаҡ, арманһыҙ булып, төнө буйы Бирелеташ тирәләй әйләнеп сыкты.

Иртәнсәк ауыл кешеләре көтөү ҡыуырға сыкканда, тегеләр һаман Бирелеташты өйрөлтөп йөрөп ята ине.

– Ә-ә-ә, бына улар — һарык бурҙары. Беҙҙең һарыктар һеҙҙе өйрөлсәк иттеме? — тип һөрәнләне көтөү ҡыуған бисә-сәсә. Арбаларҙан һарыктарын һөйрәп төшөрҙөләр ҙә аяктарындағы бәйҙе сисеп, мәхлүктәрҙе көтөүгә оҙаттылар.

Байым менән Муллаҡай араһы күп булһа егерме саҡрымдыр. Ике ауыл халкы бер-береһен яҡшы таный.

– Ә-ә-ә, һарык ите ашағың килдеме ни, ҡоҙа? Әйтһәң ни, саҡырып алып та ашатыр инек, — тип мәрәкәләне бер шаяны.

– Бирелеташ тирәләй әйләнә-әйләнә хәлдән тайғанһығыҙҙыр, байғоштар, әйҙәгеҙ, беҙгә инеп сәй эсеп ҡайтығыҙ.

– Инде Муллаҡайға килеп аяк баҫмаҫтай булдығыҙмы?

– Өйрөлсәк һарык бурҙары!..

Мыҫҡыллауға иғтибар итмәй, бурҙар һаман өйрөлөп йөрөүен белде. Шунда берәү эштең нимәлә икәнен аңғарып ҡалды ла:

– Хәҙрәтте алып килергә кәрәк. Уның хикмәте был, — тине. Ул арала Ғабдулла Сәиди үҙе лә, был якка юл тоткайны инде.

– Йә, окшанымы һарык урлау, байымдар? – Башта шулай мәрәкәләп һөйләшһә лә, аҙаҡ хәҙрәт бурҙарҙы бик шелтәләне:

– Һеҙ бөйөк ғалим Байым ишан ауылында йәшәүегеҙҙе онотмағыҙ. Ул йөрөгән юлдарҙан йөрөйһөгөҙ, ул эскән һыуҙы эсәһегеҙ.

Аҡылығыҙға килегеҙ! Бурлыҡ төбө — хурлыҡ. Барығыҙ, ҡайтығыҙ, бынан ары аслан урлашып йөрөмәгеҙ. Уғрылыҡ башҡортҡа тоҫ түгел. Намыҫлы йәшәгеҙ. Башҡаса йәмһеҙ ҡылығығыҙ хаҡында ишетмәйем.

Ер тишегенә инерҙәй булып оялған ҡараҡтар Бирелеташ эргәһенән тиҙерәк һыпыртыу яғын ҡараны.

Ошо хәлдән һабаҡ алған Байым халҡы, бынан ары кешенең энәһенә лә ҡағылманы.

## ТАБЫШ, ЙӘКИ ТРЕБИЙ ҠОҘОҒО

Алтын — нәфсене аҙҙырыусы һары шайтан ул, тигәндәре хаҡтыр. Рәмиевтар Ғәҙелша алтынының төмен тойғандан һуң уны күберәк ҡаҙҙырыу, мәғдәнгә бай урындарҙы табып лицензиялау теләге менән янып йәшәй башланы. Хатта улар хосуллы урындарҙы табыуҙың яңы ысулдарын уйлап сығарҙы. Тирә-як ауылдарға руда белгестәрен разведкаға ебәрҙе. Уларҙы арзан ғына хаҡҡа ҡоҙоҡ таҙартырға ялланған булып, ҡойо төбөнән, стеналарынан һынау өсөн ҡом, балсыҡ алып сыҡты. Һәм уны үҙҙәренең лабораторияһына анализға алып килеп бирҙе. Мәғдәнле урын була ҡалһа, байҙар яйын табып, был урынды һатып алды.

Шулай Ғүмәр Ишалин тигән белгес-мәғдәнсе, алтын королдәренең әмере буйынса, Нағайбәк районы Балкан ауылы тирәһендәге Требий тигән хуторға килеп сыҡты. Һәм Василий Кувшинов тигән суҡындырылған татарға осһоҙ ғына хаҡҡа ҡоҙоҡ таҙартырға ялланды.

– Элгәре ҡоҙоғомдоң һыуы шул тиклем һәйбәт, үҙе тәмле, үҙе таҙа ине. Быйыл әллә ни булды? Һыу алғанда йә үле сыскан, йә ҡомаҡ килеп сыға. Яңыраҡ ҡоҙоҡ сығырының тотҡаһын әйләндереп торғанда ун йәшлек улымды кемдер ҡулынан аҫҡа һөйрәп төшөргән. Шунда бер тауыш: «хазина һинеке, ал», — тигән. Ярай әле үҙем яҡында ғына инем. Улым һөрәнләгән тауышҡа йүгереп килеп еттем дә бау төшөрөп, баланы саҡ-саҡ ҡоҙоҡтан һөйрәп сығарып алдым. Ҡото осҡан улым бер аҙна һөйләшә алмай йөрөнө, — тип белгескә зарын һөйләп бирҙе Василий. — Шуға ҡоҙоҡто таҙартып, тикшертеп ҡарарға булдым.

Йорт хужаһы һөйләгәндәрҙән үк был ерҙәрҙең хикмәтле булыуын аңлаған Ғүмәр йәһәтләп эшкә тотондо.

Тәрән итеп ҡаҙылған ҡоҙоҡтоң һыуын алып түгеү — ике-өс көнгә һуҙылған мәшәҡәтле эш. Бына, ниһайәт, Ғүмәр уның төбөнә үк төшөп етте. Ҡуйынынан шырпы алып, һыҙып ҡарағайны, ни күҙҙәре менән күрһен, ҡоҙоҡ төбөндәге таштар йымылдап ята! Алтын бит был, алтын! Йөрәге күкрәгенә һыймай дөрһөлдәп типкән Ғүмәр шырпы башындай ғына хазина бөртөктәрен усына йыйып алды ла, тимәк, был тирәлә алтын һыҙаты үтә, тигән һығымта яһап, уларҙы ҡулъяулыҡҡа төрөп, ҡуйын кеҫәһенә һалып ҡуйҙы. Шунан ҡапыл ниҙәндер ҡурҡҡан кеше һымаҡ, һөрәнләргә тотондо, үҙен тиҙ генә ҡоҙоҡтан сығарыуҙарын һораны. Йылан аяғын киҫкән йылмаяҡ белгес шунда уҡ хәйләһен дә уйлап та һалды.

– Ҡоҙоғоғоҙға һары шайтан эйәләгән. Һыуы эсергә яраҡһыҙ. Әле мине тотоп быуа яҙҙы, — тип хәбәр һалды был. — Унда төшөп йөрөйһө булмағыҙ, харап итер үҙегеҙҙе. Ҡоҙоҡтоң ғилләһен һис кем белмәһен, йортоғоҙҙо хатта һата ла алмай аҙапланырһығыҙ.

Уның мутлашыуын башына ла килтермәгән Кувшиновтар, ҡоҙоҡ таҙартыусының әйткәндәренә шунда уҡ ышанды. Мәғдәнсе, артығын һөйләп тормай, хатта эше өсөн аҡса алырға ла онотоп, был йорттан тиҙерәк китергә ашыҡты. Күңеленә шөбһә төшкән Кувшиновтарға Ғүмәрҙең сәйер ҡылығы етә ҡалды. Ғаилә ағзаларын ҡурҡыу алды. Ҡоҙоҡтоң ауыҙын ҡапҡаһы менән ябып, эргәһенә тәре ҡаҙап ҡуйҙылар. Һыуын тотонманылар. Улар ҡоҙоҡ тураһында бераүгә ләм-мим өндәшмәҫкә һүҙ ҡуйышты. Бар теләгәндәре — нисек тә тиҙерәк өйҙәрен һатып был тарафтан күсеп китеү.

ыЮлда алтын эҙләүсенең күңелен төрлө уйҙар биләп алды. Әллә Требийҙағы ҡоҙоҡ тураһында хужаға әйтмәҫкәме? Аҙаҡ үҙҙәре барып алтынын йыуыр ине. Кеҫәһендә әле лә ярты шырпы ҡабы хазина ята. Уны аҡсаға әйләндерһәң, өйәҙ ҡалаһына барып, өй һатып алып буласаҡ. Ул ҡапыл Ырымбурға барыу уйынан ҡайтты. Байыу теләге менән ҡанатланған Ғүмәр башта Йолалыға ҡайтып, атаһы Әхмәҙулла менән кәңәшләшергә булды.

– Атый, унда шахта ҡаҙып торорға ла кәрәкмәй. Ҡоҙоҡто саҡ ҡына соҡоһаң, алтын ҡутарылып сығасаҡ.

Ғүмәрҙең атаһы — дини кеше. Алтындың кешегә файҙа килтермәүен белгән әһел улының ниәтен хупламаны.

– Балам, һәүетемсә йәшәйек, байлыҡ —

бер айлыҡ, — тип яуапланы. — Ерҙең мәғҙәненән алған өсөн Аллаһ алдында яуап бирергә кәрәк буласаҡ.

Алтынлы һыҙат үткән Йолалы ауылында мәғҙәнгә ҡағылышлы төрлө-төрлө хикмәтле иҫтәлектәр һаҡлана. Аталы-уллы шуларҙы хәтерләп, Требий ҡоҙоғо тураһында ла уйлашып, таңға саҡлы һөйләшеп ултырҙы:

– Иҫләйһеңме, улым, алтын ҡаҙып, көн күргән бер старатель урам буйлап: «Алтын, алтын, минең алтындарым!» — тип һөрәнләп тилереп йөрөй торғайны. Хыялланып үлде. Мәйете табылмаған, кешеләр, ендәре алып китеп ерләгәндер, тине.

Атаһы һөйләгән был әҙәмде Ғүмәр ҙә күреп белә ине, мәрхүмә өләсәһе, уға алтын ене ҡағылған, ти торғайны.

– Йәнә, улым, алтын бәрәүгә килешә, икенсегә — юҡ, – тине Әхмәҙулла.

– Ә Рәмиевтарға килешәме икән?

– Самаһын белһәләр, килешергә тейеш. Улар бит ҡаҙып алынған мәғҙәндең бер өлөшөн халыҡ мәнфәғәтенә тотона. Мәсеттәр, мәҙрәсәләр һалдыра, һәләтле балаларҙы сит яҡтарға ебәреп уҡыта. Ана, беҙҙең ауылдан Тимерғәле ағайыңдың улы әле Петербурҙа белем ала. Рәмиевтар түләп укыта, ти.

Аллаһы Тәғәләгә генә табынып йәшәгән Әхмәҙулла бабай алтыны йыуылған ерҙәрҙең йөҙәр йылдар буйы кешеләргә рәнйеп, кобараһы осоп ятыуы тураһында ла улына фәһемле хәбәрҙәр еткерҙе.

– Ундай урындар балын һурып алған буш кәрәҙ кеүек булып ҡала. Ер ҡуйынынан сығарып ташланған тау-тау булып өйөлөп ятҡан ҡара таштар үҙҙәрен урынынан ҡуҙғатҡан кешеләргә рәнйеш яуҙыра, йән ауырыуы тарата. Приискының әйләнә-тирәһе бысраҡ һыулы соҡорҙар менән тулып китә, унда ауыл малдары төшөп үлә. Ана, дәрүиш булып йөрөгән суфый Шәмсетдин шәйех әйтә: «Хазинаның ер ҡуйынында ятыуы хәйерлерәк. Ер ҡуйынындағы мәғҙәндең әҙәм балаһына файҙаһы күберәк. Ер үҙәгендәге хазинаны алып бөтөргәс, ҡыуышланған ағас кеүек, уның ҡыртышы ғына тороп ҡала", ти.

Ғүмәргә был һүҙҙәр нык тәьҫир итте. Ә атаһы талғын ғына тауыш менән һеңдерә һөйләүен белде.

– Аллаһы Тәғәлә мәғҙәнде кешегә самалап тотонорға ҡуша. Ә кеше, ҡомһоҙланып, ерҙең тәнен яралауҙан тартынмай. Байыр өсөн ул Ер-әсәһенең тәнен соҡорға, уны телгесләп ташларға ла әҙер. Йөрәген һурып алырға, һөйәген кимерергә лә тартынмаҫ, әстәғәфируллә тәүбә.

Был һүҙҙәрҙе Әхмәҙулла йән асыуы аша әйткәнгәме, улар Ғүмәрҙең йөрәгенә барып ҡаҙалды. Ниңә атаһы быларҙы уға элегерәк һөйләмәгән? Рәмиевтарҙа ялланып эшләй башлағаны бирле, әлегә тиклем, үҙем дә бер саҡ алтын ҡаҙып байырмын, тигән ниәт менән йәшәне бит ул. Атаһы менән һөйләшеүҙән һуң, ул ерҙе үҙ әсәһе итеп күрҙе. Тәне йәрәхәтле, эсе ярылған, йөрәген соҡоп алырға йыйыналар. Ғүмәрҙең күҙҙәрендә йәш күренде. Астан үлһә-үлер, күрәләтә, әсә тәненә яра һалмаҫ. Юҡ, юҡ, ул бер ҡасан да Ер-әсәне талаусы булмаясаҡ.

Бөгөнгө һөйләшеүҙән һуң ҡапыл байыу, алтын йыуыу теләгенән мәңгелеккә дүнде Ғүмәр. Ул Ырымбурға барып, байҙарға Требий ҡоҙоғо тураһында әйтте лә старателлектән китергә ҡарар итте.

Бер-ике аҙнанан Шакир Рәмиев тарафынан ебәрелгән кеше килеп, Василий Кувшиновтың урамы менән өйөн һатып алды. Был зәхмәтле нигеҙҙән тиҙерәк котолорға тырышкан хужалар, етмәһә һатып алыусы аксаны мул ғына тотторғас, ике уйлап торманы. Ҡыуана-ҡыуана Требийҙағы өйө менән хушлашып, Силәбегә барып, шул аксаға бына тигән йорт һатып алды. Шулай итеп, һарыҡ та иҫән, бүре лә туҡ ҡалды.

Лаборатория анализдарынан һуң мәғҙәнле урын табыуы өсөн руда белгесенә хаҡты йәлләмәне алтын королдәре. Ә Ғүмәргә ошо етә. Алла бирһә, ауылына ҡайтып, өй һалып инер, кәләш алып ебәрер. Бығa тиклем ата-бабаһы нисек ғүмер кисерһә, шулай йәшәр әле.

Эйе, әҙәм балаһын һемәйтеп була, ә бына алтын ендәрен алдау мөмкин түгел. Юғарылар тарафынан Василий Кувшиновтың улына тәғәйенләнгән хазинаға ҡул һуҙыусылар бының өсөн ҡасан да бер бик ҡиммәт түләйәсәк әле. Һәм мотлаҡ кеше йәне менән. Требий ендәренең хөкөмө ҡаты шул. Тик алтынға ҡанығып, баштарын юғалткан Рәмиевтар бәндәселеге менән әлегә был серҙе белмәй.

Шакир Рәмиев Балкан ауылы, Требий хуторы тирәһен, Ғөмбәй йылғаһы буйҙарын һатып алыуға йәһәтләп документтар йыйҙы. Һәм хәҙер инде яйға һалынған танышлыктары аша тиҙ генә Екатеринбургтағы Тау эштәре идара-

һына барып лицензия алдылар. Бында старателдәргә лә мохтажлык булмаç. Тирә-якта эреле-ваклы ауылдар теҙелгән. Төрлө яктан зимагорҙар килеп тулыр. Закир бай тау эше мастерҙарын саҡыртып, алтынлы урындарҙы табып, буласаҡ шахталарҙың урынын билдәләргә, шурфтар ҡаҙҙыртырға ҡушты. Управляющий эште оҙаҡҡа һуҙманы: хосуллы урынды сит-яттарҙан һаҡлар өсөн стражниктар саҡыртып алды. Шахта эше өсөн кәрәк-яраҡтар, эш ҡорамалдары алдыртты, хужалыҡ биналары төҙөттө.

Балкандар үҙҙәрен беҙ нуғай татарҙары, тиҙәр. Телдәре башҡортка ла, ҡаҙаҡҡа ла тартым. Холоҡтары үҙенсәлекле, казак фиғелле сая заттар. Шакир байға урын оҡшаны. Был тирәнең тәбиғәте лә йәмле. Йәйрәп ятҡан шау сәскәле болондар, мул һыулы Гөмбәй йылғаһы, емеш-еләкле туғайҙар — барыһы ла күңеленә хуш килде. Ул, оҙаҡҡа һуҙмаçтан ғаиләһе өсөн ике манаралы йорт һалдырыу эшен башланы. Ыңғайы мәсет төҙөүҙе лә уйланы. Архитектор һәм төҙөүселәр яллан. Бынан ары йәйҙең бер өлөшөн Балканда үткәрәсәк ул. Ҡунаҡтарҙы ла ошонда ҡабул итәсәк.

Ҡунаҡ өйөн төҙөп бөтөп, шартына килтереп йыйыштырып алғас, алтын эшен башлап ебәрер алдынан, Рәмиевтар дин әһелдәрен, дуç-иштәрен, туғандарын йыйып, саҡырып алырға, яңы асылған приискылары менән таныштырып китергә булды. Ғабдулла Сәиди, әлбиттә, исемлектә беренсе ине.

– Атайыбыҙ урынына ҡалған ҡәҙерле кешебеҙ, остазыбыҙ, — тип Закир уға урынды һәр саҡ табындың иң түренән бирер булды. Балканға үҙ заманының байтаҡ күренекле шәхестәре саҡырылды. Ризаитдин Фәхретдинов, Зәйнулла ишан, Фатих Кәрими, Шәриф Камал һымаҡ күҙ күрешеп йөрөгән зыялылар йыйылды. Табынды һәр ваҡыттағыса оçта ашнаҡсылар тарафынан әҙерләнгән сифатлы ризыҡтар, затлы эсемлектәр биҙәгәйне. Ғилемле, үҙҙәрен юғары даирәле тип иçәпләгән заттар үҙ-ара күңелле аралашты.

Ғабдулла Сәиди генә күңелләнеп китеп һөйләшкән кешеләр тирәһенән китеп, ситкәрәк йөрөнө. Бында килеү менән зәр эйәләренең зәхмәтле ҡарашын тойҙо ул. Улар мәғдәнле ер өсөн ҡорбан талап итергә йыйына:

– Зәүер ҡорбаны түләһендәр!

– Мотлаҡ әҙәм йәне менән!

Был ғаиләлә тиҙҙән ҡаза буласағын тойомланы хәҙрәт һәм күңелен Рәмиевтар өсөн хәүеф биләп алды.

Теге сакта, Гәҙелшала, Шакир ҡомһоҙланып, ярамаған, ҡушылмаған ерҙәргә барып йомолдо ла алтын ендәренең асыуын ҡабартты. Атаһы улының артынан килеп, уны ҡара көстәр тырнағынан йолоп алмаһа, был көндә Шакир бай менән нимә булыр ине? Мәгәр аяуһыҙ тау эйәләре атаның үҙенә йәбеште. Шулай итеп, улын ҡурсалап, Гәҙелша алтыны өсөн атай кеше үҙенең ғәзиз йәне менән түләне. Ә иçән ҡалған Шакир был турала белмәй ҙә.

Ғабдулла Сәидиҙең көтөлмәгән ҙур уңыштан йөҙҙәре тулған айҙай балҡыған хужаларға тиҙҙән янаясаҡ хәүеф тураһында әйтергә теле әйләнмәне, бынауындай шатлыҡлы саҡта ни йөрәк менән уларҙың кәйефтәрен боҙмаҡ кәрәк? Йәнә, мин әйткәнде ҡабул итмәçтәр, тип уйланы. Ер-һыуҙың һулышын тойған Ғабдулла хәҙрәт бер арала яңғыҙы ғына сығып тирә-яҡты байҡап килде. Эйе, был урындар ябай түгел. Гөмүмән, алтын сыҡҡан ерҙәр һәр саҡ хикмәтле була. Бындағы алтын эйәләре хазинаһына тейгәнде яратмай. Етмәһә, ул икенсе кешегә инселәнгән булған. Барыһын аңлап, белеп торған хәҙрәт бер үҙе генә ныҡынған ендәр донъяһын еңеп сыға алмаясағын аңланы. Шулай ҙа ул, башҡалар уйын-көлкө ҡороп, күңел асҡан арала, төнө буйы керпек тә ҡаҡмай зекерҙә ултырҙы. Был ерҙең яңы хужаларына, ғаиләләренә Алланан именлек һораны. Рәмиевтар үҙенең шәкерттәре булһа ла, әле һаман да остазыбыҙ тип өҙөлөп торһалар ҙа, хәҙер инде улар ябай кеше түгел. «Алтын королдәре» тип йөрөтәләр бит уларҙы. Ә байлыҡ ниндәйҙер дәрәжәлә кешене тәкәббер итә.

Ғабдулла Сәиди хужаларға һиҙенеүҙәрен белдерергә йөрьәт итмәне, барыһын Аллаһы Тәғәләнең үҙенә тапшырып, Муллаҡайға ҡайтып китте.

## ЙЫЛАН АРБАУ

Ҡыҙыу бесән мәле. Иртәнге сәйҙән һуң Ғабдулла хәҙрәт ҡараһыу буҙ тимер күк атын егеп, малайҙары менән бесән сабырға китергә йыйынды. Ул салғыларын, яныуыс, башҡа кәрәк-яраҡтарын барлап һалып алды ла уландарын арбаға ултырып, инде ҡуҙғалып китер-

гә тигәндә генә ашығып атының дилбегәһен Әнүәргә тотторҙо:

– Миңә алыҫтан бик ҡаты ауырыуҙы алып киләләр, — тине ул. — Һеҙ бесәнгә үҙегеҙ генә бара тороғоҙ, ҡояш ныҡлап ҡыҙҙыра башламаҫ элек бер һыуһын эшләп ҡалығыҙ.

Атаһының көтөлмәгән хикмәттәренә күнегеп бөткән улы ҡаршылашып торманы. Малайҙары үҙҙәре генә сығып китте.

Кемдәрҙеңдер бик мөшкөл хәлдәге балаларын алып Муллаҡайға юлланыуҙары тураһындағы мәғлүмәт күңеленә ҡабатлап бирелде. Бына-бына килеп етерҙәр. Хәҙрәт тәһәрәтен яңыртып, ҡапҡа тышына сыкты ла ауылға ингән юлға төбәлде. Ана, йән-фарман сабып килгән сабышҡы ат та күренде.

Күп тә үтмәҫтән, эйәренә ете-һигеҙ йәштәрҙәге баланы һалып алған, шәпле атын ҡыуып ҡара тиргә батырған, үҙе ахмалға төшкән бер ҡаҙаҡ кешеһе Ғабдулла хәҙрәттең ҡапҡаһы төбөнә килеп тә туктаны.

– Без Ҡызыл буйынан буламыз. Минең атым Тәңребирде, — тине юлсы үҙе менән таныштырып һәм эсе күпкән, иҫтән яҙған ҡыҙҙы күтәреп хәҙрәттең алдына килтереп һалды.

– Балам йоклап яткан сағында, һыу эсәм икән тип уйлап, йылан йоткан. Ах, айналайым! Харап ҡына була инде бәпкәм. Һине, хәҙрәт, йылан телен белә, тиҙәр. Зинһар, ҡотҡар ғәзиземде. Арбап сығар шул мәлғүнде. Хәҙрәт, тик һин генә йолоп ала алаһың был бәләнән. Балам иҫән ҡалһа, ни һораһаң, шуны бирермен, — тип илап ялбарҙы ҡаҙаҡ.

Хәҙрәт вакытты әрәм итмәй, шул ыңғайҙа ҡыҙҙың каршыһына ултырҙы ла, моңло тауыш менән ошондай һүҙҙәрҙе әйтеп көйләп, йыланды арбай башланы:

Сәңке, сәңке, сәңке йылан,
Сәңке башлы ҡара йылан,
Аткан уктай етеҙ йылан,
Ағын һыуҙай йылғыр йылан,
Нух бәйғәмбәр хаҡы өсөн
Кирсә-кирсә кире кил,
Мар йылан, сык йылан.
Ләп-ләп килеп сык йылан,
Ләпәләй, Сәмиға, Тәлғәт,
Нәлби-тәлби, сарба-торба,
Сык та беҙгә мөгөҙөң күрһәт.
Йыландарға батша бул!
Урман, тауҙар гиҙерһең,
Ерҙә йөҙ йыл торорһоң.
Әҙәм эсендә ҡалһаң,
Ғазапланып үлерһең.
Сыҡ, йылан,
Сыҡ, йылан!
Бир рәхмәтең, Аллаһым,
Йә рахманир-рахим.

Бына бер саҡ һуштан яҙған ҡыҙыкай күҙҙәрен ҙур итеп асты ла йән көсөнә укшый башланы. Ауыҙынан йыландың башы күренде. Хәҙрәт тағы ла яғымлыраҡ, йомшағыраҡ тауыш менән көйләне:

Сәңке, сәңке, сәңке йылан,
Сәңке башлы ҡара йылан,
Ана, урман, ана, тау,
Хилүәтлектә йәшә шунда,
Нух бәйғәмбәр хозурында
Сыҡ, йылан, сыҡ, йылан,
Сыкһаң һиңә киң йыһан!
Йәмлиха. Мәксәлинә. Мәрнүш.
Дәбәрнүш. Шәзәнүш. Мислинә.
Кәфәштатыййүш. Ҡыйтмир.

Бына баланың ауыҙынан оҙон ҡара йылан һөйрәлеп шыуышып сыға башланы. Хәҙрәт тағы ла яғымлыраҡ тауыш менән өндәште:

Сәңке, сәңке, сәңке йылан,
Сәңке, сәңке, ҡара йылан,
Сыҡ, сыҡ тышҡа, сыҡ йылан,
Тау-таш буйлап кит йылан,
Ҡояш нурында ҡыҙынып,
Сәскәләрҙең һутын эсеп,
Рәхәт йөрөрһөң, йылан.

Ярты кәүҙәһен сығарғас, йылан һис ҡурҡыуһыҙ башын сәкәйтеп, кешеләргә ҡарап тора башланы. Хәҙрәт йыланды тағы наҙлыраҡ тауыш менән саҡырҙы.

Сыҡ, йылан, сыҡ, йылан,
Урман, тауҙар гиҙерһең,
Әҙәмдең эсендә ҡалһаң,
Тын ала алмай үлерһең.

Бына йылан ергә килеп төштө. Әммә был тирәнән китергә ашыкмай, ҡап-ҡара йомро күҙҙәрен секрәйтеп, аяк аҫтында уралып ята биҙе.

Инде хәҙрәттең тауышы ҡәтғи һәм талапсанға әйләнде.

Һин – йылан,
Һинән артыҡ мин йылан.
Йөрөмә бында, кит бынан.
Тағы тейһәң кешегә,
Ағыулы тешең һурырмын,
Телеңде өҙөп алырмын,
Етмеш ете мөгөҙөңдө,
Алтмыш алты тамырыңды

Утка яғып, көл итеп,
Тоҡомоңа һибермен,
Ҡороғорҙар, тиермен.

Арып, ҡара тиргә төшкән хәҙрәт, сыбыртҡылай бөгәрләнеп, башын сәкәйтеп ятыусы йыланға уң ҡулын һуҙып, тау яғына төртөп күрһәтте:

– Ана бара юлың.

Хәҙрәт әйткәндәрҙе төшөнөп буғай йылан, йәһәтләп ҡаршылағы тауға табан шыуыша башланы. Ҡыҙын ғазапҡа һалған йән эйәһенә асыуы ҡабарған ҡаҙаҡ байы уға ат тире һеңгән сыбыртҡыһы менән үлтерә һелтәргә йыйынғайны, хәҙрәт уның ҡулынан тотоп өлгөрҙө:

– Булышма, әйҙә, үҙ юлы менән китһен. Хәҙер ул кешегә теймәҫ. Әйткән һүҙебеҙҙә торайыҡ. Яҙаһын Аллаһы Тәғәлә уға үҙе бирер.

Бер аҙҙан ҡыҙ күҙҙәрен асты. Хәҙрәт уны көслө доғалар менән өшкөрҙө. Шунан абыстайына сайырлы һарыҡ йөнө килтерергә ҡушты ла баланы шуға төрөп һалып ҡуйҙы. Ҡыҙҙың шеше кискә табан һурыға төшә. Таң атыуға хәле арыуланды, юлсылар ҡыуанып ҡайтып китте.

Ҡайтҡас, Тәңребирҙе ата-инәһенә, туғандарына Муллаҡай муллаһының йыланды арбап ҡыҙының ауыҙынан сығарыуы тураһында һөйләп бирҙе. Бер аҙна ла үтмәҫтән ҡаҙаҡ байы Муллаҡайға яңынан юлланды. Был юлы ул рәхмәт әйтергә тип килде. Көтөүселәре, хәҙрәттең ай-вайына ҡарамай, ихатаға бер көтөү йылҡы ҡыуып алып килеп индерҙе. Тәңребирҙе саҙаҡаны ҡабул итеп алыуҙарын үтенде:

– Был беҙҙең хәләл малдарыбыҙ башынан зәкәт, — тине ул. – Мәҙрәсә тотаһығыҙ, шәкерттәрегеҙ күп. Һеҙгә ярҙам итеү фарыз. Беҙ ҙә, Аллаһ бирһә, ошонда ебәреп уҡытырбыҙ балаларыбыҙҙы, — тигәс, саҙаҡаны доға ҡылып, ҡабул итеп алды хәҙрәт.

Ҡөҙрәтле имсене үҙ күҙҙәре менән күреп, рәхмәт әйтеп ҡайтырға тип Тәңребирҙенең ата-инәһе лә килгәйне. Улар Ғабдулла Сәидигә йылҡы ҡото булған ҡара айғырҙарын бүләк итте:

– Тоҡом айғыры. Әйҙә, аттарыбыҙ тоҡомдаш, үҙебеҙ туғандаш булып дуҫ йәшәйек! Ҡыҙ алайыҡ, ҡыҙ бирәйек!

Был хәлдән һуң ҡаҙаҡтар Муллаҡай ауылы менән Ҡыҙыл буйы араһындағы юлға саң ҡундырманы. Йә үҙҙәре килеп етте, йә Ғабдулла Сәидиҙе Ҡөрьән уҡытырға саҡырҙылар. Хәллерәктәре Муллаҡай мәҙрәсәһенә балаларын уҡырға алып килә башланы. Ошо хәлдәрҙән һуң ике диндәш милләт араһында оҙаҡ йылдарға ныҡлы дуҫлыҡ урынлашты.

Бүләк итеп килтерелгән теге ҡаҙаҡ айғырынан һәйбәт тоҡом таралды. Ете йылдан һуң, биргән кешенең ҡулының ҡото китмәһен тип, хәҙрәт тоҡом айғырын тыуған яғына ҡайтарып ебәрҙе.

## СИХЫР ҠАЙТАРЫУ

Ғабдулла Сәидигә ауырыуҙарҙы бик йыраҡтан, хатта Арал диңгеҙе буйынан да килтерҙеләр. Шулай бер Динебәк бейҙең Айсулпан исемле хәләл ефете ауырып китә. Көндән-көн хәле хөртәйә. Табиптарҙың дауаһы ла, дәрүиштәрҙең ырым-имләүҙәр ҙә файҙа бирмәй.

– Уны тик Бохарала уҡып ҡайтҡан Муллаҡай шәйехе Ғабдулла Сәйет кенә йүнәтә алыр, — ти ҡаҙаҡ бағымсылары. — Беҙҙең ҡулдан килмәй.

Бына бер саҡ көплө арбаға егелгән пар күк ала аттар Ғабдулла хәҙрәттең ҡапҡаһы төбөнә килеп туҡтаны. Аяҡтан яҙған, йөҙө һурылып һарғайған, кәүҙәһе ҡуранысланған ауырыуҙы күтәреп индереп, урындыҡҡа һалдылар. Был ҡатынға көслө боҙом һалынғанын шунда уҡ аңланы хәҙрәт. Хеҙмәтселәренә тиҙ генә бер нисә ҡаҙан һыу ҡайнатырға ҡушты. Һуңынан боҫрап торған һыуҙы таҫҡа һалып, ауырыу тирәләй түңәрәкләп урындыҡҡа теҙеп ултыртып сығыуҙарын һораны. Эргәһенә йәмкә һалып ҡуйҙы ла ғәйрәтләнеп ҡатынды өшкөрөргә, кемдер тарафынан ашатылған сихыр ғәләмәтен эсенән ҡыуып сығарырға тотондо. Бер аҙҙан ҡатын уҡшып ебәрҙе һәм ауыҙынан баҡаға оҡшаған бер йән эйәһе атылып килеп сыҡты. Хәҙрәт уны тиҙ генә йәмкә менән эләктереп алып, эҫе һыулы таҫҡа һалды. Теге нәмәкәй түңәрәк буйлап, бер таҫтан икенсеһенә һикерергә тотондо. Һыуға бешеп үлгәс теге баҡа һымаҡ нәмәне ярып ҡаранылар. Эсе тулы тырнаҡ, сәс ине.

– Ярай әле ваҡытында килтереп өлгөрҙөгөҙ. Тағы бер нисә көндән ҡатынығыҙҙың йәне си-хыр ғәләмәтенән таланып үлер ине, — тине хәҙрәт Динебәк бейгә теге хәшәрәт ғилләне күрһәтеп. — Сихыр бер нисә ай элек эшләнгән. Хәҙер ул йәнләнгән, көсәйгән, үҙ аллы йәшәй башлаған. Ҡатынығыҙҙың йәнен үлтереп,

сихыр уның тәненә үҙе хужа булып алмаҡсы иткән. Әгәр хәләлегеҙҙең йәне үлеп, тәне ошо баҡаға оҡшаш нәмәгә тороп ҡалһа, һеҙ аңдытоңдо белмәйенсә шул хәшәрәт менән йәшәр инегеҙ.

Ҡаҙаҡтар ишеткән, күргәндәренә шаҡ ҡатты. Берәйһе һөйләһә, ышанмаҫтар ине, бында барыһы уларҙың күҙ алдында эшләнде. Инде һәр береһенең башында, был кемдең эше булыр, тигән һорау тыуҙы. Уларҙың ни уйлауын белеп торған хәҙрәт Динебәккә үҙе һорау бирҙе.

– Айсулпан эргәһендә бер йәш хеҙмәтсе ҡатын йөрөнөмө? Шуның эше булыр. Бейҙең ҡатынын үлтереп, аҙаҡ үҙе уға барырға ниәтләгән. Әммә ул ҡатын хаталанған. Айсулпан һылыуҙың тәненә йәнләнгән сихыр хужа булып алғас, ул сихырсының үҙен дә Динебәккә яҡын ебәрмәҫ ине. Башта ир кеше белмәйенсә йәнләнгән сихырҙы ҡатыным тип йөрөр ҙә, бер аҙҙан сихыр уның үҙен дә харап итер ине.

Ҡоҫа-ҡоҫа хәлдән тайған меҫкен Айсулпанды абыстайҙар ҡултыҡлап һаҡмар буйына алып китте. Йыуындырып-сайындырып, өҫтөндәге күлдәк-ыштанын систереп утҡа яғып, өрәңынан кейендерҙеләр. Йылға буйынан ҡайтҡас, сихыр зәхмәте менән йән өсөн талашып хәлдән тайған ҡатын тынысланып йоҡлап китте.

– Һауығасаҡ, иншалла!

Хәҙрәт мосафирҙарҙы икенсе өйҙә әҙерләнгән табынға саҡырҙы. Һүҙ һаман да әлеге зәхмәт хаҡында барҙы.

– Сихыр, боҙом өсөн Аллаһы Тәғәләнең яҙаһы бик ҡаты, — тине Ғабдулла Сәиди. — Ундай гонаһ эш менән булышҡан әҙәмдәрҙе әхирәттә мәңгелек тамуҡ уты көтә.

Хушлашҡанда Динебәк бей Ғабдулланы үҙҙәренә, Арал диңгеҙе буйына, саҡырып ҡайтты.

– Мифтахетдин тигән ағайым бар, ул ҡаҙаҡтар менән бик дуҫ, бергәләп барырбыҙ, — тип ҡалды хәҙрәт.

## ХУШ, АҠМУЛЛА!

Күп йылдар элек, бала сағында, Шәмсикәмәр инәһе мәрхүмдән ишеткән бер йыр гел ҡолаҡ төбөндә Ғабдулланың:

Бүҙәнәкәй тигән, ай, аҫыл ҡош,
Юрғалайҙыр оло юл менән.
Маңлайыңа яҙған хаҡ яҙмышты,
Һыпырып ташлап булмай ҡул менән.

Тәҡдиргә ышанһа ла, Ғабдулла намаҙ һайын Аллаһтан мәшһүр шағир ағаһына ғүмер һорап доға ҡылды. Аҡмулланың маңлайына яҙылған яҙмышты үҙгәртеп булмаясағын аңлағас, тамам бойоҡто, көндәр буйы бераү менән дә һөйләшмәҫ булды.

Аҡмулла ағаһы тураһында Юлыкта күңеленә бирелгән мәғлүмәттән һуң, Ғабдулла Сәиди йән тыныслығын юғалтты. Йөрәгенән үҙ иткән, ағай булараҡ ҡына түгел, яҡын дуҫ, фекерҙәш итеп тә яратҡан талант эйәһе өсөн хәүефләнеп, уны үҙ эргәһенә, Муллаҡайға саҡырып алды һәм ике ай буйы бер ҡайҙа ебәрмәйенсә үҙендә йәшәтте. Икәүләшеп ҡаҙаҡтар яғына сығып йөрөп ҡайттылар. Ундағы халыҡ Аҡмулланы ла, Ғабдулланы ла яратты. Шағирҙың ҡаҙаҡтарға төбәп «Егетлек хасиәте — мәғрифәттә» тигән шиғырын ишеткәс, мосафирҙарҙың дәрәжәһе артты.

Әҙәмгә ауыр дәүләт буйын баҡмаҡ,
Һүҙҙәрҙең мәғәнәһе юҡ телең һаҡлап.
Егетлек хасиәте — мәғрифәттә,
Илдә үҫкән һөнәр түгел ғафил ятмаҡ.
Күсмәле ҡаҙаҡбыҙ бит күрке аҫтында,
Һөнәр юҡ, йоҡлағандай көрпә аҫтында.
Ғәмһеҙ булып ята бирһәң, хур булырһың,
Яу юҡ тип уйламағыҙ бүрек аҫтында.

Ҡаҙаҡтарҙың береһе лә үҙҙәрен белемле, мәғрифәтле булырға саҡырған был тәнкит шиғыры өсөн шағирға үпкәләмәне. «Һуҡыр ҡуй», «наҙан әҙәм», «буш һауытбыҙ бал һалмаған» тигән һүҙҙәрҙе дөрөҫ аңланы. Уҡымышлыраҡтары, шиғырҙы яҙып алып, шунда уҡ яттан һөйләп йөрөнө. Аҡындары, йырауҙары, уны ҡобайыр һымаҡ күреп, көйгә һалып, думбыра сиртеп, үләң итеп әйтте.

Ғабдулла Сәиди ҙә бында ваҡытын бушҡа әрәм итмәне. Халыҡты йыйып, «Алифба» китабынан хәреф танырға өйрәтте, намаҙ тәртиптәре менән таныштырҙы, хәҙистәр уҡыны, ауырыуҙарҙы ҡараны.

Иркен ҡаҙаҡ далаларын бер итеп йөрөп ҡайтҡас, улар Стәрлебаш яҡтарына сығып китте. Әсәһе яғынан иң яҡын туғандары аҙ ҡалған. Улар менән осрашып, күңелдәрен йыуаттылар.

– Аҡмулла, Ғабдулла, һеҙҙең менән ғорурланабыҙ. Һеҙ — ырыуыбыҙ даны, — тиеште туғандары.

Ҡунаҡтар үҙҙәре илле йылдар элек уҡыған мәҙрәсәне инеп күрҙе, дәрес биргән остазда-

рын хәтерләп, рухтарына доға бағышланы, мәсеттәрендә намаҙ уҡыны.

Троицкиға барып, Зәйнулла ишан эргәһендә лә бернисә көн тороп ҡайттылар. Хушлашҡанда барыһын алдан белеп, күреп торған олуғ дин әһеле былай тине:

– Аҡмулла хәҙрәт, ижадың йөҙ йылдан һуң ҙур танылыу табасаҡ. Башҡорт халҡы һине ҙурлаясаҡ. Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында исемең гел яҡшы яҡтан телгә алынасаҡ.

Был һүҙҙәр бәхилләшеү телмәре һымаҡ тойолдо Ғабдуллаға.

Бына көҙ ҙә етте. Бер урында тороуҙан тolҡа тапмаған, ил гиҙергә яратҡан шағир энеһенә Силәбе яҡтарына сығырға ниәтләүен әйтте. Мәҙрәсәлә уҡыуҙар башланып торған саҡ, Ғабдулла хәҙрәт был юлы ағаһы менән бергә йөрөй алмаҫ. Бына-бына биш йөҙләгән бала мәҙрәсәгә килеп туласаҡ, уларға ятағын да, ризығын да хәстәрләү талап ителә. Ағаһын янынан ебәрмәй Муллаҡайҙа ғына тотор, шәкерттәргә дәрестәр бирҙерер ине лә бит, дәрүишлекте үҙ иткән, азатлыҡ һөйгән, ҡыҙыу ҡанлы, тотҡан ерҙән һындыра, тураһын әйтә торған кешене бәйләп ҡуяһыңмы ни?

...Алдан күреү һәләтенә эйә остаз менән шәкерттең Юлыҡтағы мәжлес ваҡытында күҙаллауы хаҡҡа сыҡты. Көҙгө һыуыҡтар башланғас, октябрь баштарында, арбаһына китап-дәфтәрҙәрен, ағас эшкәртеү ҡорамалдарын тейәп, Мейәс заводынан Һарыҫтан ауылы яғына китеп барғанда, ниндәйҙер яуыз зат тарафынан ялланған кешеләр Аҡмулланы юлда үлтереп китте. Уның вафат булыуы тураһында хәбәр бер-береһе менән рухи бәйләнештә торған суфыйҙар араһында йәшен тиҙлегендә таралды. Аҡмулла вафат булған ергә шунда уҡ төрлө тарафтан дин әһелдәре йыйылды. Троицкиҙан Зәйнулла ишан, Вәлит ауылынан Ғатаулла ишан, Стәрлебаштан туғандары, Табын ырыуынан Халиҡовтар килеп етте. Барыһын алдан белеп-күреп тороусы әүлиәләр фаразы буйынса, уны күп аҡса биреп, бер бай яллап үлтерткән. Кем икәнлеген дә беләләр. Үсленең түгел, көнсөлдөң эше булды был. Уның талантына, халыҡ араһындағы абруйына көнләшкән кешеләр ҡылды был вәхшилекте. Ябай халыҡ араһында ла ошондайыраҡ хәбәрҙәр ишетелеп ҡалды, әммә уларҙың ауыҙын тиҙ яптылар. Үлтереүселәрҙең тәғәйен исемдәре билдәле булһа ла, уларҙы хөкөмгә тарттырып торманылар. Аҡса, байлыҡ хакимлыҡ иткән был донъяла Аҡмулланың үлеме шул көйө йомолдо. Бөйөк шағирҙың үлеме барыһы өсөн дә сер булып ҡалды.

Мәрхүм рухына бағышлап йыназа уҡылғандан һуң, күңелендә ағаһына оло хөрмәт йөрөткән Ғабдулла Сәиди халыҡ алдында сығыш яһаны:

– Тура һүҙле булды ағайым. Тура һүҙ таш яра, таш ярмаһа, баш яра, ти. Дөрөҫ йәшәне, ысын суфый булды. Тәҡдиренә шулай яҙылғандыр. Бәйғәмбәребеҙ йәшенә етте, иншалла. Урыны ожмахтың түрендә булһын. Амин.

Аҡмулланы кәфенләгәндә бөтә Муллаҡай мәҙрәсәһе зекерҙә ултырҙы. Ә Мөжәүир Аллаһы Тәғәлә алдындағы Аҡмулланың барлыҡ гонаһтарын дәүрит итте, йәғни, үҙ өҫтөнә алды. Бер нисә ҡат «Ҡөрьән» сығып, мәңгелек йортонда урыны йәннәттә булыуын һораны. Шулай итеп ҙурланы бөйөк шағирҙы Муллаҡай ауылы.

Аҡмулланы ерләгән көн кисен күк йөҙөн ялбыр ҡара болоттар баҫып алды ла бер аҙна буйы туҡтауһыҙ быҫҡаҡлап ваҡ күҙле ямғыр яуҙы. Аҙаҡ ер өҫтөн шаҡырлатып туңдырҙы. Ун көн самаһы боҙлауыҡ ятты. Әҙәм балаһы ҡылған гонаһ өсөн тәбиғәт ергә бына шундай һынау ебәрҙе.

– Арабыҙҙан бәйғәмбәрҙәй саф күңелле кеше китте. Хатта күктәр рәнйеп һыҡтай, ерһыу илай. Ошондай яуызлыҡтар ҡылған мәртәт бәндәләргә Аллаһы Тәғәләнең ебәргән «Мәсәд» сүрәһе ҡабул булһын. Бөтәһен дә Аллаға тапшырабыҙ, — тип доға ҡылды Муллаҡай мәсете диндарҙары.

Муллаҡай ауылы имам-мөдәрисе Ғабдулла Сәиди үҙе тотҡан мәҙрәсәлә Аҡмулла ижадына бик иғтибарлы булды, шиғырҙарын яҙҙырып халыҡҡа таратты, һәр шәкерт кәмендә уның иллеләп шиғырын яттан белде.

Ноябрь аҙаҡтарында алыҫтан ике мосафир килде Ғабдулла хәҙрәткә. Хәстәләр үҙҙәрен яфалаған яман төштәренән ҡотолорға теләй икән.

– Айҙан ашыу рәтләп йоҡлай алмайым. Күҙем эленһә, һаташып уянам. Кемдәрҙер тәнемде бысаҡ менән телгеләй, ҡанға батыра, — тине беренсеһе.

– Йоҡлап китһәм, тәнемде йырткыстар өҙгөсләй. Ҡанға туҙыштыра. Шыбыр тиргә батып уянам да ҡабат күҙемде йоморға ҡурҡам. Аҡылдан яҙам инде, — тине икенсеһе лә. – Йән тынысльiғын юғалттым.

– Күҙ терәп һиңә килдек, ярҙам ит, хәҙрәт.

– Ҡоткар беҙҙе был ғазаптарҙан!

– Ҡоткар алама төштәрҙән!

Көтмәгәндә хәҙрәт уларға шундай һорау бирҙе:

– Һеҙ Дәүли менән Ғәфиәт булаһығыҙмы?

Үҙ исемдәрен ишетеп ғажиз ҡалған һатлык йәндәр, караштарын ергә төбәне, күҙҙәрен йәшерҙе. Хәҙрәттең карары ҡәтғи булды:

– Мин һеҙгә ярҙам итергә теләмәйем, – тине. – Һеҙ алама әҙәмгә ялланып бөйөк шағирҙы үлтерҙегеҙ.

Хәҙрәттең үҙҙәренең мәсхәрәле эштәрен һиҙеүен төшөнгән хаиндар бынан тиҙерәк касырға ашыкты. Хушлашканда Ғабдулла Сәиди уларға:

– Баҫлығыуҙан ҡотолорға теләһәгеҙ, үҙегеҙҙе был аҙымға дусар иткән теге әҙәмгә мөрәжәғәт итегеҙ, ул сараһын үҙе табыр, – тине.

Ҡот оскос төштәрҙән ҡотола алмайынса тамам ахмалға төшкәс, Дәүли менән Ғәфиәт аптырағандың көнөнән теге байға барырға мәжбүр булды.

– Мин һеҙҙе Орскиға алып барып көслө докторҙарға күрһәтәм, – тип уларҙы һауыктырырға вәғәҙә итте мәкерле бай һәм үҙе менән бергә икһеҙ-сикһеҙ дала буйлап алып сығып китте. Ярты көн самаһы барғас:

– Ошонда тамак ялғап алайык, — тине бай. – Шул сак рәхимһеҙ әҙәм кеҫәһенән наганын сығарып, һис шикләнеүһеҙ табын хәстәрләп йөрөгән юлдаштарына тоҫканы. Дәүли менән Ғәфиәт аңдары томаланғандай, күҙҙәрен шар асып бер ҡарап өлгөрҙө, ә яуыз әҙәм:

– Тере шаһиттар миңә нимәгә, – тине лә наганын тоҫкап атып та ебәрҙе. һәм мәйеттәрҙе ерләп тә тормай, кырандасына ултырып ары елдерҙе.

Шул мәлдә мәҙрәсәлә дәрес биреп торған Ғабдулла Сәидиҙең күңеленә был хәл тураһында мәғлүмәт бирелде. “Бына инде тағы бер яуызлыкка яуызлык ҡылынды. Әҙәм йәнен ҡыйған гонаһ өсөн үҙ йәнегеҙ менән түләнегеҙ. Инде теге донъяла Аллаһы Тәғәлә алдында яуап бирәһегеҙ бар әле...

Яманлыкты фаш итеүҙән файҙа юк. Бары әҙәмдең әҙәбе асыла. Якшылыктан – якшылык, яманлыктан яманлык ярала, барыһы аҙак кешеләргә тарала”, тип уйлап акыл эйәһе Ғәфиәт менән Дәүлиҙең ҡылған яуызлығы, ғүмерҙәренең һуңғы минуттары тураһында һөйләп йөрөмәүҙе хәйерле күрҙе.

## ГҮЗӘЛ ХОЛОҠ, КҮРКӘМ ӘҘӘП

*(Шәйех Ғабдулла бин Сәйет хәҙрәттең бер вәғәзенән)*

Сираттағы йома намаҙына шәйех айырыуса ентекле әҙерләнде. Әҙ һүҙгә ҙур мәғәнә һалыу ине ниәте. Әҙәпле генә итеп теҙелешеп ултырған диндәштәренә, шәкерттәренә бер һирпелеп ҡарап алды ла вәғәзен башлап ебәҙе.

– Бисмиллләһир-рахмәәнир-рахиим!

Әлхәмдүлилләәһи раббил-ғааләмииин!

Әссәләме ғаләйкүм үә рахммәуллаһи үә бәрәкәтүһ!

Аллаһы Тәғәлә 95-се «Әт-тиин» сүрәһенең 4-се аятында әйтте: «Ләкаде халәкәнәл-инсәәнә фии әхсәни тәкъуиим», – йәғни: «Беҙ Әҙәм балаһын бар нәмәнән күркәмерәк итеп халик ҡылдык».

Ислам диненең нигеҙе булып тәүхид, йәғни, бер Аллаһка ғына инаныу торһа, уның икенсе мөһим өлөшө – тәүфиҡ, йәғни, күркәм холоҡ, гүзәл әҙәп. Был йәһәттән бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт Мостафа ғәләйһиссәләмдең күркәм холко, иманлы әхлағы беҙгә үрнәк. Ул һәр ваҡыт кешеләр менән үҙен әҙәпле тоткан, йомшаҡ мөғәмәләле, мәрхәмәтле булған, яғымлы һөйләшкән. Мохтаждарға ярҙам күрһәткән, хәленә ингән, изгелек иткән. Монафиклык, ялған һүҙ һөйләү, эскерлелек кеүек сифаттар уға ят булған. Тәкәббәрлек, кеше ғәйебен тикшереү, яла яғыу, көнсөллөк, буш, мәғәнәһеҙ һүҙ һөйләү кеүек сифаттарҙы ул оло гонаһка һанаған. Һүҙ һөйләгәндә ялғанлаусыларҙы, биргән вәғәҙәләрендә тормаусыларҙы, аманатка хыянат итеүселәрҙе һөйкөмһеҙ һанаған. Һәр мөьмин мосолман бындай алама ғәҙәттәрҙән ҡотолһон ине, тип өндәгән.

Аллаһы Тәғәлә каршыһындағы иң ауыр ете гонаһты билдәләп китә шәйех Ғабдулла хажи. Бына улар: беренсеһе – көнсөллөк; икенсеһе – асыу-ярһыу; өсөнсөһө — фәхишәлек; дүртенсеһе – ҡомһоҙлоҡ; бишенсеһе – ашамһаклык; алтынсыһы – тәкәбберлек; етенсеһе – күңел төшөнкөлөгө.

Имам-хатип ете гонаһтың иң ауыры булған «тәкәбберлек» хаҡында ентеклэп һөйләп үтте.

– Әбү Ғабдулла Мөхәммәт бине Исмәғил әл-Бохари үҙе тарафынан төҙөлгән «Әл-жәмиғ әс-сахих» тигән хәҙистәр китабында былай тип яҙа: «Йөрәгендә тамсы тәкәбберлек

булған кеше ожмахты күрмәйәсәк». Артабан хәҙрәт был юлдарҙың мәғәнәһен ошолай тәфсилләне:

– Тәкәбберлек – шайтандан. Иблес башта Аллаһтың тоғро хеҙмәтсеһе була, нәк тәкәбберлеге арҡаһында яуыз шайтанға әйләнгән. Аҙаҡ ул кешеләрҙе яман эштәргә өндәй. Айырыуса, тиҫкәре, кире әҙәмдәрҙе үҙ ауына эләктерә. Улар күңеленә уҫаллыҡ менән күрә алмаусылыҡ орлоктары сәсә. Үҙен эре, һауалы тотоу, кешене тиңһенмәү, башҡаны әҙәмгә һанамау, мин-минлелек – былар тәкәбберлек билдәләре. Тәкәбберҙәр үҙҙәренә ҡарата барыһынан да ихтирам көтә, юҡ-барға асыулана, ярһый, көйһеҙләнә. Үҙ етешһеҙлектәрен күреп, юҡ итәһе урынға, уны башҡаларға япһара.

Тәкәбберлек сиренән ҡотолор өсөн Аллаһты танырға һәм уның ҡушҡандарын үтәп йәшәргә тейешбеҙ. Йәнә Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ йәшәйеше беҙгә үрнәк булыр.

Вәғәзде барыһының йотлоғоп тыңлағанын күреп, имам-хатип дауам итте:

– Бохара ҡалаһы мөфтөйө, сер ғилеме эйәһе, остазым Ғәскәр Ғосаметдин ишан хәҙрәттәре мөридтәренә мосолмандар өсөн мөһим булған төп алты сифатты билдәләп күрһәтте, – тине лә һәр ҡайһыһын атап, мәғәнәләрен аңлатып, һанап китте – иман, намаҙ, ғилем алыу һәм Аллаһты зикер итеү, башҡаларҙы хөрмәт итеү, ихлас ниәт, дәғүәт.

Халҡыбыҙҙы, милләтебеҙҙе күтәрергә теләһәк, иң башта үҙебеҙҙең әхлаҡ кимәленә иғтибар итергә, балаларыбыҙҙы дөрөҫ тәрбиәләүгә өлгәшергә тейешбеҙ. Дине алға киткән милләттең иле лә, халҡы ла алға сығыр. – Хәҙрәт һәр һүҙен мәсеткә килеүселәрҙең күңеленә һеңдерергә тырышты.

Муллаҡай мәсетенең имам-хатибы был алты сифат тураһында көндәр буйы һөйләй алыр ине, әммә ваҡыт тамамланыу сәбәпле, ошо урында туҡтап ҡалды һәм бөгөнгө вәғәзен түбәндәге һүҙҙәр менән тамамлап ҡуйҙы.

– Һәр өйҙөң үҙ хужаһы булған кеүек, Ер шарының да хужаһы бар, ул – Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә. Беҙгә, кешелек донъяһына, Аллаһ йыһандағы иң матур планетаны, Ер шарын, төйәк итеп биргән. Беҙҙең хужабыҙ ифрат рәхимле, мәрхәмәтле, сабыр. Бәндәһе рәхәт, имен, бәхетле йәшәһен өсөн барлыҡ шарттарҙы булдырған. Һулар өсөн саф һауа, эсер өсөн таҙа һыу, ашар өсөн ризыҡ биргән. Әҙәм балаһын Ер шарындағы барлыҡ йән эйәһенән аҡыллыраҡ итеп яралтҡан, барыһына баш итеп ҡуйған. Әммә беҙ, кешеләр, быны ҡәҙерен беләбеҙме? Ерҙә дөрөҫ йәшәйбеҙме? Барыһы ла Аллаһы Тәғәләнең барлығын, берлеген танымы? Уның ҡушҡандарын үтәйме, тыйғандарынан тыйыламы? Аманат итеп биргән тәбиғәтен һаҡлаймы? Әгәр кешелек донъяһын ерҙә йәшәтәйек тиһәк, Бөйөк хужабыҙҙың өйөн үҙе ҡушҡанса тәрбиәләп тотайыҡ.

Әҙәп-тәүфиҡлы, иманлы, мәрхәмәтле, яҡшы фиғелле булыу һәр кемдең үҙенән тора.

Ғабдулла Сәиди вәғәзен мәрхүм ағаһы Мифтахетдин Аҡмулланың «Нәсихәт» шиғырын уҡыу менән тамамланы:

Иң әүүәле кәрәк нәмә – иман, тигән,
Әхирәт эштәренә инан, тигән.
«Хоҙай, кисер!» – тигән менән эш бөтмәйҙер.
Иман шартын өйрәнмәһә – Иван, тигән.
Икенсе ҡиммәт нәмә – күңел, тигән.
Күңеле боҙоҡ әҙәмдән төңөл, тигән.
Боҙоҡҡа ер өҫтөнән аҫты артыҡ,
Булмаһа күңел таҙа – күмел, тигән.
Өсөнсө ҡиммәт нәмә – аҡыл, тигән.
Аҡылһыҙҙа тәүфиҡ яғы таҡыр, тигән,
Аҙ эшкә асыуланып, динен боҙор,
Иманын көфөрлөккә һатыр, тигән,
Дүртенсе ҡиммәт нәмә – шөкөр, тигән,
Нигмәткә шөкөрһеҙлек – көфөр, тигән.
Ятҡан ерҙән: «Хоҙай, кисер!» – тиеү – хурлыҡ.
Сәбәп эҙләп, төҙ юл менән йүгер, тигән.
Бишенсе ҡиммәт нәмә – әҙәп, тигән.
Әҙәп тигән – мөхәббәткә сәбәп, тигән.
Көфөрлөк әҙәплелә тормағандай.
Әҙәпһеҙҙә иман тороу ғәжәп, тигән.
Алтынсы ҡиммәт нәмә – сабыр, тигән,
Сабыр кеше моратын табыр, тигән.
Һәр эштә лә сабырһыҙҙың төбө — хурлыҡ,
Сабырһыҙлыҡ башҡа бәлә һалыр, тигән.
Етенсе ҡиммәт нәмә – ихлас, тигән,
Ихласһыҙҙың эше ҡабул булмаҫ, тигән.
Аҡыллылар ошо һүҙҙе белһә кәрәк:
Иман, аҡыл, әҙәп, ихлас – юлдаш, тигән...

Бөгөн һөйләгәндәрҙе дөйөмләштереп шағир Аҡмулла бына ошолай тигән.

## ЕРЕМӘ ИМЕНЛЕК ҺОРАП ХАЖ ҠЫЛАМ

Яҡынлашып килгән XX быуаттың дәһшәтле булырын күҙалланы шәйех Ғабдулла ишан.

Ғәрәсәт ҡубыуы ихтимал. Тауҙар емерелеп, ер менән күк зир-зәбәр килеп, аҫты-өҫкә әйләнеү ҡурҡынысы бар. Туфан һыуы ҡалҡмаҫ тимә. Һуғыштар, ҡан ҡойоштар булыр. Илгә дүрт тарафтан һәр төрлө афәттәр ябырылыр, йоғошло сирҙәр таралыр. Илде аслыҡ, яланғаслыҡ, нужа баҫыр. Мин-минлек, тәкәбберлек хаттин ашҡан ерҙә бәндәләрҙе алда бына ошондай һынауҙар көтөүен күрҙе әүлиә хәҙрәт. Аллаһы Тәғәлә алдында туған халҡы, уның киләсәге өсөн үҙ иңендә яуаплылыҡ ятыуын белгән ҡотоп заман үҙе һымаҡ шәйехтар, ишандар менән бергәләшеп, хажға барып, тейешле изге ғәмәлдәрҙе үтәп, еребеҙгә именлек теләргә ниәтләне.

Ғабдулла Сәиди Бохарала уҡыған сағында уҡ остазынан ҡот оскос Помпей фажиғәһе, Сиддим үҙәнендәге ҡалаларҙың ер тетрәү, вулкан урғылыу арҡаһында ер аҫтында ҡалып, тулыһынса юҡҡа сығыуы тураһында ишетеп белә. Ғөмүмән, Аллаһ үҙ ҡанундарына буйһонорға теләмәгәндәргә, маһайып, уның барлығын онотҡандарға яҙаһын ебәреп тора. Ер шарында зилзилә ҡуптарып, гонаһлы, аҙғын ҡәүемде ер йөҙөнән һеперептүгеү осраҡтары тарихта байтаҡ теркәлгән. Ғабдулла Сәиди тыуған ерен ана шундай ҡаты фажиғә, афәттәргә дусар булыуҙан әрсәләргә теләне. Юлдашлыҡҡа иптәштәрҙе лә ныҡлап ҡарап, һайлап алды. Муллаҡайҙан – Фәтхулланы, Күсейҙән – Хәжәәхмәтте, Беренсе Этҡолдан Йәноҙаҡты лайыҡлы тапты, уларға әҙерләнергә ҡушты. Эйе, хәҙрәттең күңеле тыныс түгел. Ай араһында көн боларып алған кеүек, быуат менән быуат араһында ла Ер планетаһында ғәжәп хәлдәр күҙәтелә. Ҡайһылай итеп илде буласаҡ афәттәрҙән йолоп ҡалырға? Аллаһы Тәғәләнән илгә именлек һорап хажға барыу, көнө-төнө зекерҙә ултырыу, теләк теләү – бына ошоларҙа күрҙе хәҙрәт ҡотолоу сараһын.

Бала сағында, ата-әсәнән ҡалып, зарығып йөрөгән сағында, илаһи ҡөҙрәт менән тәҙрәһенә яҙылып, күсереп алған «Доғаи бәхет үә сәғәдәтнамә» китабын да инес кеҫәһенә һалып йөрөтә.

Йорт ҡураһына, мәсет, мәҙрәсә эштәренә яуаплы итеп тәүге абыстайы Мәймүнәнән тыуған егерме ете йәшлек өлкән улы Мирзазаһитты ҡалдырҙы. Райхана абыстайҙан тыуған улдары Мөхәмәтмазһар, Сәитәхмәттәр ҙә ҡул араһына инерлек, уландары донъя көтөшөргә, бәләкәй туғандарын ҡарашырға ярҙам итер, иншалла.

1998 йылдың йәйе. Хажға юлланыр көндө иртә менән бар халыҡ мәсеткә йыйылды.

– Йәмәғәт! – Мөнбәр артында телмәр тотҡан хәҙрәттең һәр һүҙен халыҡ йотлоғоп тыңланы. – Изге «Ҡөрьән»дә кешелек донъяһы өсөн йәшәү өлгөһө бирелгән, дини ҡанунды боҙған осраҡта бәндәләргә ниндәй афәт килере тасуирланған. Бына «Ҡамәр», йәғни, «Ай» сүрәһенә туҡталайыҡ. Унда иманынан яҙған Нух халҡының һыу аҫтында тороп ҡалыуы бәйән ителә. Беҙгә лә шундайыраҡ ҡурҡыныс янауын эшкәртәлер күктәр. Ярлыҡаусы, гонаһтарҙы ғәфү итеүсе Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғаләнән хажға барып, ап-актан кейенеп, йөрәктәрҙе һөйөү менән мөлдөрәмә тултырып, ихлас ниәттәр аша ярлыҡау һорарға булдыҡ. Был юлы хажға фәҡәт Аллаһҡа ялбарып, илгә именлек теләр өсөн барабыҙ.

Хәленән килгән һәр кем юлсыларға матди ярҙам күрһәтергә тырышты. Йыйынып-тейәнеп, хушлашып-аманлашып, эйәрле аттарға атланып, хажға барыусы төркөм ҡуҙғалып китте. Ил ғәмен иңенә һалып, еребеҙ яҙмышын йөрәгенә алып, хәүефле, хәтәр сәфәргә юлланыусыларҙы изге ниәттәренең үтәлеүен, илгә хажи булып, имен-аман ҡайтыуҙарын теләп, бөтә ауыл оҙатып ҡалды.

Барыһы аңлай, хаж сәфәре – хәтәр сәфәр. Бынан бер нисә йыл элек хажға барып ҡайтыусыларҙан ошондай бер хәбәр ишеткәйне муллаҡайҙар: диңгеҙ аша сыҡҡанда карапҡа өй дәүмәле акула һөжүм итә. Диңгеҙбикә ҡорбан һорай, тип хаж ҡылырға барыусылар шыбаға тотошҡан. Осарым осона сыҡҡан кеше ҡарышмай-нитмәй тәҡдиренә риза булған, ти. Уны аҡҡа төрөп, ясин сығып, диңгеҙгә ташлағандар. Акула ҡорбанын бер генә йотҡан да, ары йөҙөп киткән. Һәр мосафирҙың быңдай хәлгә тарыуы ихтимал. Ана, үткән йыл да хаж мәлендә ғәрәсәт ҡубып, көслө ямғыр башланып китеүгә, Әл-Хәрәм мәсетендә тубыҡтан һыу кисеп, тәүәф ҡылыуҙары, Мина яланын һыу баҫыуы, үлеп ҡалыусыларҙың хәтһеҙ булыуы тураһында һөйләнеләр. Ете диңгеҙ кисеп, етмеш төрлө бәләнән ҡотолоп, һәр кемгә лә хаж сәфәренән имен ҡайтыу насип булмай шул. Шуға ла хажға барыусылар юлға бәхилләшеп сыға.

Урта Азия яҡтарында байтаҡ йөрөп, ер-һыу күргән Ғабдулла Сәиди был юлы ла юлдаштарын башлыса диңгеҙ юлы менән алып китте.

Ҡөҙрәтле даръя һыуынан йәнен имләтеп, юл буйына уй-фекерен, диккәтен, барлыҡ доғаларын тик илгә именлек һорауға йүнәлтте шәйех Ғабдулла.

... Хаж ҡылыусы әһле исламдарҙың илгә именлек һорап Аллаһҡа ялбарыуы әҙһеҙ үтмәне. Иншалла, ишетте Йәнәбел Хаҡ уларҙың ялбарыуын һәм доғаларын. Быны быуат ахыры дәлилләне. Аслығына, ялангаслығына, төрлө ыҙаларына әҙәм балаһы, күркәм сабырлыҡ күрһәтте. Иң мөһиме, Еребеҙҙең аҫты-өҫкә әйләнмәне, ғәрәсәт ҡупманы, илдә токомобоҙ ҡоромаһы.

## ҺЕҘҘЕҢ ТӘҒӘЙЕНЛӘНЕШ — ТАБИПЛЫҠ

Сығып китеүҙәренә йыл тулып килә тигәндә, ниәтләгән барлыҡ хаж ғәмәлен үтәп, 1899 йылдың көҙө хажиҙар имен-аман илгә әйләнеп ҡайтты. Уларҙы күрергә, һис юғы елән салғыйына ҡағылып, сауап алып ҡалырға тырышҡан хаҡ мосолмандар төрлө тарафтарҙан Муллаҡай мәсетенә ағылды. Ғабдулла хажи хәҙрәттең барлыҡ ишле туған-тыумасалары, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙары, шәкерттәре, дуҫ-иштәре – барыһы килеп хәлен белергә ашыҡты. Меңәр саҡрым юл үтеп, алып ҡайтҡан бер турһыҡ зәм-зәм һыуын Ғабдулла хажи, барыһына еткерергә тырышып, килгән бер кешегә көмөш ҡалаҡлап ҡына ауыҙ иттерҙе.

Бер көндө иртән торғас, хәҙрәт аш-һыуға оҫтаһы хәләле Райханаға:

- Абыстай, мул итеп аш һалып ебәр, табын әҙерлә! Тиҙҙән бик ҡәҙерле ҡунаҡтар килеп етер, — тине. Төшкә ҡарай ҡапҡа тышына сығып, юлаусыларҙы көтәүелләп торғанда, Ғабдулла хәҙрәт Оҙон күл яғынан аттарын юрттырып ике һыбайлының үҙҙәре яғына етеп килеүен күрҙе. Уларҙың береһе Манһырҙағы шәкерте Мөжәүир, икенсеһе Мең ырыуы Сәйетҡол ҡарйәһе хәлфәһе Шәмиғол ине. Хажи хәҙрәткә уларҙың ат эйәрләп, юлға сығыуы мәғлүм булды. «Бына, ике төбәктең буласаҡ мәшһүр табибы күрешкән, иншалла», – тине ул. Һыбайлылар Ғабдулла хәҙрәттең өйө тәңгәленә килеп туҡтаны. Аҡбуҙ саптар эйәренән – Мөжәүир, бурыл айғырҙан Шәмиғол хәлфә һикереп төштө лә, хажи хәҙрәт янына килеп, күрешергә ҡул бирҙе.

– Әссәләәму ғәләйкүм үә рахмәтуллааһи үә бәрәкәтүһү!

– Үәссәләәмуғәләйкүм үә рахмәтуллааһи үә бәракәәтүһ!

Ғабдулла Сәиди ҡунаҡтарына алмаш-тилмәш ҡарап алды. Былар ни икеһе лә бер иш тәһә, урта буйлы, киң яурынлы, тоҫ-баштарына һокланып ҡарап тормалы. Тик йәштәре араһында ғына бер аҙ айырма һиҙелә. Яңыраҡ, ғилем эстәп, Бохара тарафтарынан ҡайтып төшкән Шәмиғол хәлфә Мөжәүирҙән етеһигеҙ йәшкә өлкәнерәк булыр.

– Нисек улай тап килдегеҙ әле? Алдан һөйләштегеҙме? – тип йорт хужаһы йәш дуҫтарын ҡунаҡ өйөнә әйҙүкләне.

– Беҙ Муллаҡайға етеп килгәндә, һаҡмар буйына төшөп тәһәрәт алғанда осраштыҡ.

«Аллаһы Тәғәлә, шулай насип ҡылғандыр, был осрашыу бик ваҡытлы булды», тип уйланы хәҙрәт.

Хажи хәҙрәттең Шәмиғол хәлфәне тәүләп күреүе. Уның алсаҡ йөҙө, киң йылмайыуы, күҙҙәренең нурланып, балҡып тороуы күңеленә хуш килде. «Был әһел шул тиклем камил, таҙа күңеллелер, хатта ки унан тәмле хушбуй еҫе килгәндәй тойола. Үҙебеҙ һымаҡ, Аллаһҡа тоғро бәндә», тип уйланы ул.

Бер ҡарауҙан уҡ бер-береһен үтә күргән өс хикмәт эйәһе хәл-әхүәл һорашып алғандан һуң, ғүмер буйы таныш кешеләр һымаҡ иркенләп һөйләшеп алып китте. Иң башта хажиҙан сәфәре тураһында һораштылар. Шәйех уларға яңы быуатта көтөләсәк афәттәр хаҡында ла аңғартты.

- Еребеҙгә лә, үҙебеҙгә лә еңел булмаясаҡ. Барсабыҙҙан ныҡлыҡ талап ителер. Был йылдар етди һынау осоро булыр. Хажға Аллаһтан Ер шарына именлек һорар өсөн барҙыҡ. Ғәрәсәт ҡупмаһын, ер-һыуыбыҙ аман булһын, Раббым.

Ғабдулла Сәиди хаж сәфәренән ҡайтып килгәндә юлда ауырып киткән бер каруансыны әшкәрәп аяҡҡа баҫтырҙы. Рәхмәтле юлсы һәр береһе бер ат хаҡына торошло биш-алты китап биреп китте. Улар араһында Урта Азияла, Иранда йәшәгән бөйөк иран-тажик ғалимы, табибы Әбүғәлисинәнең китаптары ла бар ине. Мөжәүир менән Шәмиғол хәлфәнең килерен алдан белгәнлектән, ҡайтҡас та хаттатарынан «Әбүғәлисина хикәйәте», «Һауыктырыу серҙәре», «Аш-шифа» китаптарын өс-дүрт дана итеп күсертеп, әҙерләп һалып та ҡуйҙы. Был ҡиммәтле китаптарҙы ҡунаҡтарҙың икеһенә лә аманат итеп тапшырҙы хәҙрәт:

– X быуаттың аҙактарында, XI быуаттың баштарында йәшәгән бөйөк табип Әбүғәлисинаның китаптары былар. Ифрат мәғлүмәтле әсбаптәр. Шуны белегеҙ, икегеҙҙең дә юғарынан тәғәйенләнешегеҙ–табиплык. Әбүғәлисинаны ентекле өйрәнегеҙ, униңса эш итһәгеҙ, яңлышмаҫһығыҙ, – тине.

Ғабдулла Сәиди бәһләүән һынлы, көс-ҡеүәте ташып торған егеттәргә тағы ла һокланып, алмаш-тилмәш ҡарап алды ла:

– Эйе, күреүемсә, тәҡдирегеҙ бер иш. Икегеҙ ҙә табип, икегеҙ ҙә оҙон ғүмерле. Моғайын, йөҙҙә вакларһығыҙ. Икегеҙ ҙә халыкка фиҙакәр хеҙмәт итеп, хәләл көсөгөҙ менән халыҡ араһында абруй яуларһығыҙ. Әммә бараһы юлдарығыҙ шыма ғына түгел. Яңы заман ҡатмарлы булыр. Ниндәй генә ауырлыктар килмәһен, һеҙгә беҙҙең изге эштәрҙе дауам иттереү яҙылған.

Ул арала Райхана абыстай ҡунаҡтарҙы аш табынына саҡырҙы.

Йорт хужаһы калакка ынтылырға ла онотоп, киләсәктең буласак ике бөйөк табибына һокланып та, яратып та ҡарап ултыра бирҙе: “Эйе, Мөжәүиргә лә, Шәмиғолға ла юғарынан оло ҡөҙрәт бирелгән. Икеһе ике төбәккә фиҙакәр хеҙмәт итерҙәр, иншалла. Эйе, тәкдирҙәре маңлайына яҙылған был изге заттарҙың, булмыштарынан әҙәп, иман нуры һирпелә”.

Тамаҡ ялғап алғас, иркенләп һөйләшер өсөн, хәҙрәт ҡунаҡтарын Һаҡмар буйындағы ҡайынлыкка алып төшөп китте. Аллаһы Тәғәлә юкка ғына бөгөн уларҙы осраштырманы, ошо илаһи минуттарҙың ҡәҙерен белеп, ул үҙенең күңеленә килгән һүҙҙәрҙе еткерергә тырышты:

– Дин ҡәрҙәштәрем, үҙегеҙ йәшәгән төбәктең имамы булығыҙ. Имам бар ерҙә иман булыр. Дин – бөйөк тәғлимәт, Ҡөрьән – бөйөк хакикәт. Халыкка тейешле нәсихәт кәрәк. Мөкәддәс бурысығыҙ – халыкка хеҙмәт итеү. Ке-шеләр һеҙҙе яратһын, һеҙ кешеләрҙе яратығыҙ. – Ошо ҡыҫҡа ғына хәҙистәрҙә Ғабдулла Сәиди бөтә ғүмере буйына йыйған ғилем һәм акыл тупланғайны. Ошондай нәсихәттән һуң, улар тәһәрәт яңыртып, ҡөрьән укып, бер мәлгә зекерҙә ултырҙы.

Бер аҙҙан уларға гел атаһы эргәһендә йөрөргә яраткан Әнүәр ҙә килеп ҡушылды. Ғабдулла хәҙрәт утыҙ бер йәшлек Шәмиғол, егерме өс йәшлек Мөжәүир, ун дүрт йәшлек Мөхәмәтәнүәрҙәр яғына яғымлы ҡараш ташланы. Һәр ҡайһыныһының йөҙөндә ҡот уйнап тора. Дауыл булып йөрәгенә килеп тулған шатлыҡ хисенән күңеле тулышыуын күрһәтмәй генә күҙ йәштәрен һөртөп алды ул. Бер ни тиклем талғын аккан Һаҡмар һыуына ҡарап уй-фекер төйнәп ултыра бирҙе лә якын күргән рухташ дуҫтарына үҙенең ғүмере буйы һаклап йөрөткән бөйөк серен сисергә булды. Һүҙҙе уратынҡырап башланы:

– Мөхәммәт бәйғәмбәр йәшенә еттем инде, алтмышты уҙҙым. – Йәштәр хәҙрәттең илһам бөркөп торған бәйғәмбәрҙәрҙеке кеүек нурлы йөҙөнә, төп-төҙ буй-һынына, еңел атлап йөрөүенә ҡарап, уны һис тә ҡарт тип ҡабул итмәне. Ләкин ҡайырып һүҙ әйтеүсе булманы. Ғабдулла хәҙрәт фекерен дауам итте:

– Хәҙер миңә әхирәт тураһында уйларға ла ваҡыт етте. Ер шарын да, айырым кешене лә Аллаһтың доға көсө тотоп тора. Миңә бала сағымда юғарынан бер илаһи доға ебәрелде. Өсөгөҙ бергә йыйылған сакта шуны һеҙгә аманат итеп ҡалдырырға ниәтләйем. Йөрөгән ерҙәрегеҙҙә дүрт тарафка таратығыҙ шуны. Доғабыҙ тыуған еребеҙгә ҡот, бәрәкәт булып әйләнеп ҡайтһын. Ул инес кеҫәһенән алып, йәш дуҫтарына «Доғаи бәхет үә сәғәҙәтнамә» китабын күрһәтте.

– Бохарала укып йөрөгәндә йөрәгем тәңгәлендә генә йөрөткән бына ошо китапты күсереп алығыҙ һәм минән аманат итеп һаклағыҙ, киләһе быуындарға таратығыҙ!

Бер-береһен якшы аңлаған өс ғилем эйәһе доға менән танышып сыкты. Был хикмәттән һуң ашауын да, йоклауын да оноттолар. Күберәген йөрәктәре серләште уларҙың.

Дауалауҙың төрлө алымдары хакында ете көн, ете төн дәрес бирә уларға шәйех Ғабдулла хәҙрәт.

Тәүге дәрес «Ҡөрьән» доғалары аша дауалауға бағышланды. Һәр сиргә тәғәйен доғалар бар. Уларҙы дөрөҫ кулланыу фарыз.

Икенсе дәрес үлән, сәскә, тамыр менән дауалауға бәйле үтте. Ҡырға сығып, төрлө шифалы үләндәрҙе йыйып алып ҡайттылар. Ғабдулла хәҙрәт уларҙың үҙенсәлеген бик якшы белә. Һәр береһе тураһында якшылап аңлатты.

Өсөнсө дәрестә илаһи ҡөҙрәт (Аллаһы Тәғәләнән бирелгән ҡөҙрәт аша дауалау) хаҡында һүҙ йөрттөләр. Ғабдулла Сәиди Бохаралағы остаздарынан өйрәнгән дауалау, һауыктырыу алымдары хакында бәйән итте.

Дүртенсе дәрес им-том, бағымсылыҡ аша һауыҡтырыу юлдары хаҡында ине.

Бишенсе дәрестә йондоҙҙарҙың серҙәрен үҙләштерҙеләр.

Алтынсы дәрес сихыр-боҙом, осоҡлау аша кешенең ауырыуға һабышыуы һәм унан ҡотолоу юлдары тураһында булды.

Етенсе дәрестә һандар һәм параллель донъя серҙәрен өйрәнделәр.

Шәкерттәренә ғилем биргәндә суфыйҙар араһында таралған силсилә ҡылыу юлын уңышлы ҡулланды хәҙрәт. Ғилемде туранан-тура күңелдәренә һеңдерҙе. Ябай кешеләр егерме-утыҙ йыл буйы өйрәнеп тә айышына төшөнә алмаҫтай һауыҡтырыу серҙәрен буласаҡ өс табип, шулай итеп, бер аҙна эсендә үҙләштерҙе.

Ғабдулла хажи хәҙрәттең һаҡмар буйындағы теге фаразлауы хаҡ ине: Шәмиғолға ла, Мөжәүиргә лә, Мөхәмәтәнүәргә лә Хоҙай Тәғәлә оҙон ғүмер бирҙе. Ерҙә уларҙың өсәһе лә бер быуатҡа яҡын ғүмер кисерҙе. Һуңғы һулышына тиклем өсәһе лә шәйех Ғабдулла Сәиди хажиҙан алған дәрескә, илаһи ғилемгә тоғро ҡалып, күҙ терәп килгән һәр ауырыуҙы сихәтләндереп йәшәне.

## НИӘТ ИТКӘН, МОРАҘЫНА ЕТКӘН

Рәмиевтар остаздары Ғабдулла Сәидиҙең хаждан ҡайтыуы тураһында хәбәрҙар ине. Әммә ҡапылда Муллаҡайға килеп етә алмай, хажиҙы барып күрергә форсаттары теймәй торҙо. Был мәлдә улар мосолман баҫмаларын сығарыуҙы юллап, батша хөкүмәтенән рөхсәт алыу өсөн Санкт-Петербург түрәләренең тупһаһын тапаны. Уйлағандарын тормошҡа ашырып өсөн батша чиновниктарына бүләген дә, аҡсаһын да йәлләмәй тейәнеп бара улар. Тик тәкәббер дәүләт хеҙмәткәрҙәре күпме алһа ла туйыуҙы ла, ҡуйыуҙы ла белмәй. Уларға алтын өләшеү төпһеҙ мискәгә һыу һалыуға бәрәбәр. Әйтерһең, Ирәндек тауынан ҡаҙған һайын, көрәкләп хазина сыға.

– Һеҙҙә ни алтын тау башында, асыҡ ерҙә түшәлеп ята, йый ҙа ал икән, – тиҙәр. Йәнәһе, теге Балҡанда Ғөмбәй йылғаһы буйындағы ҡайынлыҡта табылған егерме дүрт килолы самородокка ишаралауҙары. Алтынға ымһыныусылар етерлек. Ә был эштең ни саҡлы ауыр икәнлеген аңламайҙар ғына. Бер генә көн алтын йыуған вашгерд эргәһендә эшләтеп ҡарарға ине үҙҙәрен. Закир Рәмиев, нәшриәт юллап ун йылдан ашыу йөрөй инде. Бындай бәндәләрҙән тамам биҙрәгән. Шулай ҙа түрәләргә яҡынайыу юлдарын белә ул. Иң яҡшыһы, үҙеңде мөмкин тиклем кеселекле тотоу. Шунан да ҡулайы юҡ. Кеселеклелек өсөн алтын да, аҡса ла талап ителмәй, йылы һүҙ менән тупаҫ бәндәнең дә ҡай саҡ күңелен йомшартырға мөмкин. Ошоларға төшөндө ул Петербурҙа.

– Хөкүмәткә бер ауырлығыбыҙ ҙа теймәҫ, әфәндем. Матбағаны финанслауҙы тулыһынса үҙ өҫтөбөҙгә алабыҙ, — тип ялбарҙы ул Петербург түрәләренә. – Һалымдарҙы тейешенсә түләргә вәғәҙә бирәбеҙ. Һеҙҙең ярҙамды ла онотмабыҙ.

– Нацменам верить, без штанов остаться! – һауаланыуы йөҙөнә сыҡҡан баш ҡала чиновнигы эре һөйләшә. — Башта беҙ Ырымбурҙа үҙебеҙҙең дәүләт цензура тикшереү органдарын, канцеляриябыҙҙы булдырырға тейешбеҙ. Нәшриәттең матбуғат баҫмаларын беҙҙең күҙәтеүҙән башҡа сығарырға хаҡы юҡ. Был юлы ла һеҙгә нәшриәт асыуға рөхсәт бирә алмайбыҙ. Рәсәй ҙур ил. Кем нимә теләй, шуны сығара башлаһа, илдә анархия тамыр йәйәсәк. Йәнә, Рәсәй ҡаҙнаһы өсөн был һиҙелерлек сығым. Уны кем ҡаплар?

– Цензура сығымдарын да үҙ өҫтөбөҙгә алаҫаҡбыҙ.

– Барыһын яҙып, теркәп алып кил, әфәнде, шунан һуң ҡарарбыҙ.

Үҙен донъя тотҡаһы тип хис иткән был һауалы чиновник Закирҙың тамам зитына тейҙе. Уның янынан алтын короле ҡәһәтләнеп сыҡты. «Барыбер, Аллаһ теләһә, сығараcаҡбыҙ үҙебеҙҙең гәзит-журналды», — тип ныҡлы ниәт ҡылды ул. Аллаға шөкөр, уның башланғысын хуплап, ярҙам итергә әҙер торған саф күңелле дуҫ-иштәре бихисап.

Закир Рәмиев цензура составы, һәр хеҙмәткәргә тейешле эш хаҡы тураһында белешеп төрлө конторалар буйлап тағы бер аҙналай йөрөнө. Ырымбурға килгәс, уларҙы торлаҡ менән тәьмин итеү ҙә талап ителәсәген әйттеләр. Һәр береһенә йә яңы йорт төҙөргә, йә фатир һатып алырға тура киләсәк. Төрлө сәбәптәр табып, эште бында йәнә бер нисә йылға һуҙырҙар һымаҡ.

Ә бына холҡо ҡырҡыуыраҡ тәкәббер Шакир ағаһы уның ише ялынып-ялбарып йөрөй

алманы. Нервылары ҡуҙғыны. Ҡайһы бер чиновниктар менән әрләшеп тә китте.

- Ырымбур губернаһында бер мосолман нәшриәте юк. Уны үҙ аҡсабыҙға асырға йөрөйбөҙ. Рәхмәт әйтәһе урынға, аяҡ салалар, йүнһеҙҙәр, контора ҡомаҡтары, – тип нәфрәтләнде Шакир.

Балалары йылғаға батып үлгәндән һуң, биреште ул. Йәне әрнеп, йөрәге һыҙлап тик тора. Шуға нәшриәт эше буйынса күберәк Закирҙың үҙенә йөрөргә, ағаһы арҡаһында боҙолған мөнәсәбәттәрҙе лә көйләргә тура килде.

Шулай итеп, был юлы ла Петербурҙан эше бешмәй ҡайтты меценат Закир Рәмиев. Ни саҡлы ғына тырышмаһын, уйы йәнә барып сыкманы. Йөҙ төрлө ҡағыҙға түрәләрҙең йөҙ имзаһы кәрәк. Уларҙың береһе сит илгә сығып киткән, икенсеһе ҡабул итә алмай, өсөнсөһө ауырып ята. Ҡыҫҡаһы, һөйләшергә лә теләмәнеләр. Әллә мосолман матбуғатын йәйелдерергә теләмәйҙәр, әллә эштең барып сығырына ышанмайҙар...

Баш ҡалала бер ай самаһы йөрөп, арыпталып, Ырымбурға ҡайтып килгән Закир әфәнде өйөндә ике-өс көн генә торҙо ла, Муллаҡайға, хаждан ҡайтҡан остазы эргәһенә юлланды.

– Шайтан ғына өмөтһөҙ, өмөтһөҙлөккә бирелмәйек, – тине хәҙрәт уның уңышһыҙ йөрөп ҡайтыуына һис көйөнмәйенсә. – Иманым камил, нәшриәт буласаҡ. Һеҙ изге юлда.

Хажи хәҙрәт бер аҙға күҙҙәрен йомдо.

- Күрәм, өс-дүрт йылдан һеҙҙең нәшриәттә гәзит, журнал ғына түгел, китаптар ҙа донъя күрә башлар, иншалла. Был нәшриәт башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, халҡының рухи үҫешенә ыңғай йоғонто яһаясаҡ. Башҡа кәрҙәш халыҡтар өсөн дә хосуллы булыр. Каруанһарайҙа мәктәп асылыуға булышлыҡ итәсәк. Сығымдарығыҙ күп күренә. Әммә һеҙ күтәрерлек. Матди байлыҡ – бер айлыҡ, рухи байлыҡ – мәңгелек. Иншалла, иткән изгелектәрегеҙ ерҙә ятып ҡалмаҫ.

Ғабдулла хәҙрәттең кәйефе күтәрелде, тиҙерәк шул көндәрҙе күргеһе килде. Ул һиҙҙермәй генә доғаларын уҡып, шәкерте яғына өрөп ебәрҙе. «Һоҡ тейә күрмәһен. Бигерәк мөхәббәтле, бигерәк аҡыллы. Яратҡан ҡолона тәҫән-башын, буйын-һынын да биргән Раббым. Талантын да йәлләмәгән. Сабырлыҡ менән кеселеклеге лә тап-таман. Юҡҡа ғына үҙен Дәрдмәнд тип йөрөтмәй шул», тип уйланы хәҙрәт.

Төшкә аштан һуң ул шәкертен элек үҙҙәре уҡыған мәҙрәсәгә алып китте.

– Беҙҙә йылдың-йылы биш-алты йөҙ самаһы шәкерт белем ала. Мөғәллимдәребеҙҙең һаны ла илленән ашты, – тип уҡыу йортоноң хәле менән дә таныштырҙы.

Артабан Закир бай хәҙрәтте Ғәҙелша яҡтарында йөрөп килергә саҡырҙы.

- Көҙ ҙә етте. Ә был приискыла быйыл була алғаныбыҙ юҡ, — тине алтын короле. — Ситтән килгән старателдәр таралышҡандыр ҙа инде.

– Эйе, зимагурҙар өйҙәренә ҡайта башланы.

– Зимагурҙар?

– Был яҡта Ғәҙелша алтынында йөрөүселәрҙе халыҡ зимагур тип йөрөтә. Йәйен прискыла эшләйҙәр, ҡышын ял итәләр. Хатта улар хаҡында йыр ҙа сығарғандар. – Кисә генә бер төркөм йәш ир-аттың кисен урам буйлап йырлап үткәнен ишеткәйне хәҙрәт:

Зимагурҙар, зимагурҙар,
Зимагурҙар талчокта.
Ҡайғырһалар ҡайғыралар
Тәмәкеләре юкка.

Тирә-яҡтағы ауылдарҙың ир-атын йыйып эшкә ҡушыуға әллә халыҡ ризаһыҙлыҡ белдерәме икән, тип уйлап ҡуйҙы Закир бай.

– Аҡмаһа ла тама, аҫ-яланғаҫ түгел старателдәр. Аллаға шөкөр, анау Навалихиндарҙың приискыһындағы һымаҡ, шахта емерелеп, эшселәрҙең ер аҫтында ятып ҡалғаны юҡ. Теге саҡта ла шахта емерелерен Мөжәүир һиҙеп ҡалып, туҡтатып ҡалдығыҙ, иншалла, – тине остазының ни уйлауын белеп торған хәҙрәт.

– Яңыраҡ Навалихиндың бер шахтаһы емерелгән, тигәндә беҙ ҙә ишеткәйнек.

– Эйе, ун бишләгән старатель ер аҫтында ятып ҡалған. Ҡыҫҡырған, илаған тауыштары ер аҫтынан бер аҙна буйы ишетелеп торған. Ҡаҙып алып ерләйбеҙ тигән булып, халыҡты алдап, ҡәбергә кеше мәйете урынына бүрәнә һалып күмгәндәр, тип тә һөйләйҙәр. Аксинья тигән мәрйә тауыш ҡуптарып йөрөгән икән, Навалихин бай яллаған кешеләр үҙен бер шишмә буйында салып киткән. Хәҙер ул урынды Аксинья кисеүе, тиҙәр.

– Гонаһтан ҡурҡмайҙар. Әле Навалихин айыу башындай алтын тапҡан, тиҙәр. Петербургта ишетеп ҡайттым.

– Старателдәр таҡмағын да сығарып өлгөргән. – Ғабдулла хәҙрәт Закир байға уныһын да әйтеп ишеттерҙе.

Күсейский Навалихин
Ҡомһоҙ, һаран бай икән.
Айыу башындай алтынға,
Биргәне бер тай икән.

– Беҙ Требий эргәһендә егерме дүрт килограмлы алтын тапкан старателгә өй һалып бирҙек. Приискы халҡын ике көн буйы һыйланыҡ. Ризалаттыҡ, барыһы ҡәнәғәт ҡалды.

Һөйләшеп килеп улар юлда ваҡыттың үткәнен дә һиҙмәй ҡалды. Ана, Ғәҙелшаның эшселәре йәшәгән йәшел башлы бараҡтары ла күренде.

Был ерҙәр хәҙрәткә һәр саҡ Шакирҙың теге саҡтағы бәйһеҙлектәрен хәтерләтте. Әйткәнен тыңламайынса ошонан ауырыуға һабышып ҡайтты бит инде. Әле лә хәле хөрт тойола. Йән тыныслығын юғалтҡан, ахыры. Был хаҡта белеп торһа ла, хәҙрәт остазынан Шакирҙың да хәлен һораштырҙы.

– Петербурҙан йәне көйөп, ныҡ миктәп ҡайтты. Шулай ҙа Ырымбурҙа ятып сыҙаманы, әле Күсейҙәге Солтан приискыһына юлланды. Ундағы ғаиләһен дә һағынғандыр. Беләһегеҙ бит, Ғәҙелша приискыһында ла балалары менән бер еңгәйем йәшәй.

– Шакирҙы һаҡларға кәрәк. Уны һауыҡтырыу минең хәлемдән килә. Үҙенә был хаҡта әйтеп ҡара.

– Бәлки диңгеҙ һауаһы килешер, ти.

– Әйткәнде тыңламай шул ул. – Хәҙрәт ауыр һуланы. Шакирҙың аяныслы яҙмышы күҙ алдынан үтте. Шул йән ауырыуы менән баш өйәнәге харап итәсәк уны. Дауахана юлында йөрөгәндә яңылыш поезд аҫтында ҡалып харап булыр уның тынғыһыҙ йәне. Ул бая әйткәндәрен йәнә ҡабатланы:

– Килеп ҡараһын, йүнәлтерлек ғилемем бар, харап булыуы ихтимал. – Ағаһының холҡон белгән Закир бай был юлы өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрҙе.

Күрәһең, теге саҡтағы ҡырын эштәре өсөн намыҫы һаман яҙалайҙыр ағаһын. Әле лә Закир менән остазы янына инеп сыға ала ине бит. Әммә өндәшмәй генә Солтан яғына үтеп киткән.

«Бәндәселек менән белеп, йә белмәй ҡылған гонаһтарҙы Аллаһы Тәғәлә ярлыҡай. Тик тәүбәңә генә ҡайт. Күңелдә таш йөрөтмә, йән ауырыуы шунан башлана», тигән уйҙарын хәҙрәт, теле менән әйтеп биреүҙе йәпһеҙ күреп, шәкертенең аңына һалды. Закир Рәмиевта ла хәҙер ябайлығы самалы. Бәғзе бер әйберҙәр хаҡында уртаға ярып һалып һөйләшеп булмай.

Ҡунағын оҙатҡанда хажи хәҙрәт шәкертенә түбәндәге һүҙҙәрҙе еткерҙе:

– Әхирәткә иманыбыҙҙы ғына юлдаш итәбеҙ. – Йыйған мал, ғаилә, балалар, туғандар барыһы ерҙә тора ла ҡала. Донъя фани ғына.

Белә быны, Закир. Эйе, ул алтынды мул тотондо. Әммә маҡсаты изге уның: нәшриәт асыу, халыҡты мәғрифәтле итеү, мәсет, мәҙрәсәләр һалдырыу, әҙиптәрҙең китаптарын сығарырға ярҙам итеү. Дәрдмәнд үҙенең тәғәйенләнешен халҡының мәҙәниәтен, аң-белемен арттырыуға хеҙмәт итеүҙә күрҙе.

Шулай ҙа уның эсе бошто. Ырымбурҙағы йәмғиәттең юғары ҡатламында дәрәжәле урын тотоуына ҡарамаҫтан, ундағы дуҫ-иштәре араһында ла күңеле асылманы. Ысынлап Дәрдмәнд ул, бар булмышы, йөрәге менән. Зари күңелен тик алһыҙ-ялһыҙ хеҙмәт кенә ҡәнәғәтләндерә ала. Ул үҙен аямай көнө-төнө эшләне. Ярай әле мосолман әҙәбендә тәрбиәләнгән ҡатыны Мәхүбъямал аңлай үҙен.

Йыш ҡына Закир ҡатыны менән бергәләп тәбиғәткә сыға, Яйыҡ буйҙарында йөрөп әйләнә. Кистәрен иһә яратҡан шөғөләнә тотона – быйма төпләргә ултыра. Улдары Искәндәр менән Йәғәфәрҙе сит ил уҡыу йорттарына ебәреп уҡытыу сәбәпле, уларҙың өйҙә сағы һирәк. Ҡыҙҙары Рауза менән Зәйнәп, кесе ҡыҙы Гөлсөм дә күп ваҡыттарын уҡыуға бағышлай.

...1905 йылда, ниһайәт, Рәмиевтар Ырымбур губернаторынан «Вакыт» гәзитен, «Шура» журналын асыуға рөхсәт алыуға өлгәште. 1906-1907 йылдарҙа эш башланды. Шулай итеп, теге саҡ Ғабдулла Сәиди фаразлағандар тормошка ашты. Ун биш йыл дауамында юллап йөрөгән эштең ахыры хәйерле булыуға ҡыуанып ҡына йөрөгәндә Шакир байҙың ваҡытһыҙ яҡты донъянан китеп барыуы барыһын да тетрәндерҙе. Бигерәк тә Ғабдулла Сәиди был юғалтыуҙы ауыр кисерҙе. Һауыктыра ала ине бит ул Шакирҙы. Шәкертен баш ҡала табиптары аңлап етмәгән шул сирҙән йолоп алыу ҡөҙрәтенән килер ине. Нимәләр тотҡарланы уны, ниндәйҙер көс уларҙың осраштырырға теләмәне.

Шакир ағаһының ир уртаһына етеп, гөрләтеп йәшәр сағында ҡапыл ғына үлеп ҡалыуы Закирҙың ҡанаттарын ҡайырғандай булды. Бер мәлгә йәшәүенең мәғәнәһен юғалтты Дәрдмәнд. Йөрәгенә сыҙамай ул да түшәккә

йығылды. Ара һәм ваҡыт аша күреү һәләтенә эйә булған Ғабдулла Сәиди үҙенә был хакта мәғлүм булыу менән бар эшен ташлап, Ырымбурға ашыҡты. Аҙна дауамында хәл өҫтөндә ятҡан шәкерте эргәһенән китмәне ул. Был талантлы, аҡыллы, намыҫ менән йәшәргә ынтылған кешенең ғүмере ифрат ҡәҙерле ине уға. Аталары Мөхәмәтсадыйк йәш сағында уға бер туған ағаһындай булды. Үҙе лә Шакир менән Закирҙы улдарындай яҡын күрҙе. Уларға алтынға бай Ғәҙелшаны күрһәтте. Яҡын кешеһенең күңел яраларын имләр өсөн ғилем эйәһе барлыҡ көсөн, һәләтен һалды, изге доғаларын ҡулланды. Ауыр юғалтыуҙан йөрәге яраланып ҡалған шағирҙы, хәҙрәттең илаһи ҡөҙрәте аша аяҡҡа баҫты. Шулай итеп, остаз менән шәкерттең ҡаҡшамаҫ дуҫлығы ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға булышлыҡ итте. Закирҙың балалары хәҙрәт әйткән һәр һүҙҙе хәҙис һымаҡ ҡабул итте, ул өйрәткәндәрҙе үтәргә тырышты.

– Һеҙгә сәйәхәт итеү кәрәк. Илдәр, ҡитғалар күреп, йөрөп ҡайтығыҙ. Күңел төшөнкөлөгөнә бирелеү – ауыр гонаһ. Тереләргә тереклек итеү кәрәк, – тине хәҙрәт Шакирҙың үлеменә ҡырҡ көн үткәндән һуң. – Йөрөп ҡайтҡас, эшкә тотонорһоғоҙ. Алда һеҙҙе бик яуаплы осор көтә.

Рәмиевтар иһә хәҙрәттең кәңәшен тотоп, барлыҡ донъя мәшәҡәттәрен ҡалдырып, Европа илдәренә сәйәхәткә сығып китте.

## ОСТО ИЗГЕ ЙӘНЕ АСМАНҒА

Йәше һикһәнгә яҡынлаған шәйех Ғабдулла Сәиди хәҙрәттең күңелен болоҡһоу алды. Ниңәлер, йыш ҡына Һаҡмар буйҙарына төшөп, йылға ағышын күҙәтеп ултырырға әүәҫләнеп китте. Юҡ, һаулығына зарланманы. Аңы дөрөҫ, зиһене асыҡ, ҡолағы ишетә, күҙе күрә, эйелеп намаҙын да уҡый. Бөтә хикмәт шунда: бала сағынан суфыйсылыҡ юлында йөрөгән, ғүмере буйы тариҡәт ҡанундары буйынса йәшәгән руханиға быйыл үҙенең фани донъя менән хушлашыры мәғлүм.

Бер көнө улы Мөхәмәтәнүәргә:

– Балам, йәйҙең йәмле көндәрендә Стәрлебаш яҡтарында йөрөтөп алып ҡайтһаңсы, – тине. – Ундағы туғандарҙы күргем килә. Һиңә лә әләсәйеңдең тыуған яғын күрһәтәйем. Туғандарың менән таныштырайым. Саҡырышып, ҡатнашып йөрөрһөгөҙ.

Стәрлебашҡа барып ҡайтҡас, Троицкиға, Зәйнулла ишан эргәһенә юлланды. Унан Табын ырыуындағы дуҫы Ғәбделхаликтың туғандарын барып күрҙе. Муллаҡайға ҡатҡас:

– Быуат ауыр килә. Аллаһы Тәғәләнән еребеҙгә афәт ебәрмәүен ялбарам, – тип Иген, йә Бәҫмән тауына барып, ашауын-эсеүен дә онотоп, йәй буйы «Ҡөрьән» уҡып, зекерҙә ултырҙы. Бала сағынан уҡ биш намаҙын ҡалдырмаған хәҙрәттең ғүмере ахырында Аллаһы Тәғәләнең барлығына, берлегенә инаныуы, уға мөхәббәте сикһеҙ ине.

Алтын көҙҙөң матур бер көнөндә ул өс абыстайын, барлыҡ балаларын, кейәү, килендәрен эргәһенә саҡыртып алды. Ап-аҡтан кейенгән, ҡулына Бохаранан алып ҡайтҡан тиҫбеһен тотҡан хәҙрәт фәрештәгә оҡшағайны. Ул яҡындарына яратып баҡты.

– Һеҙгә ҡалдырыр мал-мөлкәтем юҡ минең, – тине хәҙрәт. – Аллаһы Тәғәләгә булған мөхәббәтемде, инаныуымды мираҫ итәм. Сәиди тоҡомонан сыҡҡан һәр кем Аллаһы Тәғәләнең тоғро ҡоло булһын. Мине ауылым зыяратына атайым, әсәйем, Шәмсикәмәр инәйемдәр янына ерләрһегеҙ.

Былдай һүҙҙәрҙән баҙап ҡалған яҡындары күҙ йәштәренә быуылып, ни ҡылырға, ни әйтергә белмәй торған арала ул һалмаҡ ҡына баҫып, эргәләге Бәҫмән тауына йүнәлде. Хәҙрәт көн дә үҙе зекерҙә ултырған тау башына менеп сәфәр доғаһын уҡып бөтөүгә, тау башынан зәңгәр күккә алһыу нурҙан хасил бер юлаҡ күтәрелде. Ул һыҙылып ҡына күктең иң бейек еренә барып етте лә, шул нурҙан “الله” тигән бер генә һүҙ хасил булды. Бер ни тиклем баш осонда йымылдап торғандан һуң, хәрефтәр йондоҙға әүерелеп, йыһан киңлегенә китеп юғалды.

– Атайыбыҙҙың изге йәне осто асманға, – тине күккә ҡарап торған Мөхәмәтәнүәр. – Аллаһы Тәғәлә уны үҙ янына алды.

Шул саҡ күк көмбәҙенән бар йыһанға моңло аҙан ауазы таралды. Ерҙә илаһи тынлыҡ урынлашты. Былдай мөғжизәгә хайран ҡалған кешеләр Ҡөрьәндең моңло ауазына таң ҡалып юғалтыу ҡайғыһын да бер мәлгә онотто. «Ысынлап та, беҙҙең атай әүлиә булған икән!» тип уйланы Мөхәмәтәнүәр. Был хикмәтте күреүсе, ишетеүселәрҙең һәммәһе лә ерҙә мөғжизәнең барлығына инанды.

Хуш, илаһи ҡөҙрәт эйәһе!

Изге йәнең йәннәт түрендә булһын!

*Мөнир ВАФИН*

# ҺИН ДОНЪЯҒА КИЛМӘЙ КАЛһАҢ, МИН КЕМДЕ һӨЙӨР ИНЕМ?..



* * *

Ауылдарҙан йәштәр генә түгел,
Китеп бара кайсак карттар ҙа.
Картлык һәм яңғыҙлык кулдан алып,
Калаларға илтә какларға.

Ундайҙарҙы таныу ауыр түгел,
(Булһалар ҙа, шактай аҙ улар) –
Көтөү кайтыр вакыт етеү менән
Балкондарға сығып баҫалар.

Кай тарафта ауылы? Белмәһә лә,
Караштары булыр йыракта.
Трамвай-троллейбустар гөрөлдәүе
Сыбырткылай тойолор колакка.

Оҙак үтә бында секундтары,
Кыҫыр ғына тыуа таңдары.
Кәүҙәләре менән – калаларҙа,
Ауылдарҙа калған йәндәре.



Балкондарға ер йылыһы йырак –
Балкондарҙа оҙак тормайҙар.
Их, ауылға тиҙерәк кайтырға, тип
Кәфенлекте инеп барлайҙар...

* * *

Бахыр халкым.
Мин көслөмөн, тимә.
Көслөләрҙе баҫыу – өс көнлөк.
Көҙгөгә бак: һинең йөҙкәйеңә
Шундай килешеп тора меҫкенлек.
Урамға бак.
Көтөү кайткан сакта,
Иғтибар ит малдар үтеүен.
Шундай күмәк, шундай укмаш
булып,
Ағылып кайткан һарык көтөүен.
Үтә һарык.
Һыртта – кайыш эҙе.
Тәкдире шул, ни хәл итәһең?
Ышандырмай, кыҙыл кар яуғас та,
Көтөүсеһен тапап китәһе...

* * *

Ҡабындырып китеп барҙың,
Әй шунан яныуҙарым!
Һуңғы күмергә ҡалғансы,
Һине һағыныуҙарым.

Йылдар үткәс килдең дә ул...
Хәҙер нисек янаһың?
Ә һин терһәгеңде тешләп,
Көләмдә бутанаһың...

### ЯҢҒЫҘЛЫҠ

Төн ҡараһы күҙгә керә
(Әйтерһең, ҡара томан).
Бөгәрләнеп ятҡан булам,
Хужаһыҙ бесәй һымаҡ.

Аяҡ оска баҫып килеп,
Кемдер өҫтөмә япты.
Шунан мыштым-мыштым ғына,
Арҡаһын терәп ятты.

“Арҡаң ниңә һалҡын?”, – тиеп,
Сығараһыңмы өндө?
Яңғыҙлыҡ менән икәүләп,
Үткәрҙек шулай төндө...

* * *

Нәселен һаҡларға тиһәң,
Барыһы һала көсөн.
Ергә түшәлә япраҡтар,
Тамырын һаҡлар өсөн.

Шундай бәхетле тоялар,
Баштарын һалалар ҙа.
...Беҙ ҙә япраҡтар шикелле,
Бар өмөт – балаларҙа.

### ҺИН ДОНЪЯҒА КИЛМӘЙ ҠАЛҺАҢ

Һин донъяға килмәй ҡалһаң,
Мин кемде һөйөр инем?
Кемде ҡосағыма алып,
Бергәнәм, тиер инем?

Һин донъяға килмәй ҡалһаң,
Кемгә өйләнер инем?
Эсеп ҡайтҡан саҡтарымда
Кемгә бәйләнер инем?

Һин донъяға килмәй ҡалһаң,
Кемде айырыр инем?
Кемде, алименттан ҡасып,
Хәлдән тайҙырыр инем?

Һин донъяға килмәй ҡалһаң,
Ерҙә ни булыр ине?
Мин тыумаһам, исмаһам, һин
Бәхетле булыр инең.

### ҒӘФҮ ИТ

Ауылыма ҡайтып барам,
Үрҙәре шундай һөҙәк.
Ғәфү ит, тыуған тәбиғәт,
Ҡайта алманым оҙаҡ.

Ауылдаштар, кисерегеҙ,
Һеҙ мине барығыҙ ҙа.
Ғүмерҙәрем ситтә уҙҙы,
Булманым арағыҙҙа.

Ғәфү ит, тыуған нигеҙем,
Ҡайта алманым оҙаҡ.
Ихатаны үлән баҫҡан,
Ишектә – оло йоҙаҡ...



# УЙНАП-КӨЛӨП КЕНӘ ЙӨРӨГӘС ТӘ, УЙЛАНМАЙ ҘА ТИҺЕҢМЕ...



## 20:00, ОСРАШЫУҘАН БЕР КӨН АЛДА.

**"Яндекс"та йыям: "СОЛТАНМОРАТОВ ИЛГИЗ Замфирович". 776 яуап сыға. Тә-әк... БР Фәндәр академияһының Гуманитар тикшеренеүҙәр институты директоры. Социология фәндәре кандидаты. 1982 йылда Стәрлетамаҡ ҡалаһында тыуған. 2004 йылда — Башҡорт дәүләт университетының философия һәм социология бүлеген, 2007 йылда Өфө дәүләт авиация техник университетының аспирантураһын тамамлаған. 2005-2006 йылдарҙа — Президент стипендиаты, 2007 йылда йәш ғалимдар өсөн тәғәйенләнгән грантҡа лайыҡ була. 2010 йылдың 8 октябренән алып Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе. Фән һәм техника өлкәһендә йәштәр премияһы лауреаты...**

**Телефон шылтырай.**

**...**

**- Тимәк, килешкәнсә, иртәгә осрашабыҙ?**

**- Эйе, бына әле Ҡазан ҡалаһынан ҡайтып киләм, шуны яҙһағыҙ ҙа була.**

## 08:00

"156-сы йорт. Йәһәтерәк... Юлы ла бигерәк тайғаҡ бит әле..." Ҡул сәғәтенә тынысһыҙланып ҡарай-ҡарай ашығам. Телефон шылтырай.

- Эйе, Илгиз Замфирович?

- Беҙ бөгөн иртәрәк тамаҡ ялғаныҡ инде. Әйҙәгеҙ, мин һеҙҙе килеп кенә алам.

"Байрам" магазины янында көтәм. Авиация университеты студенттары ҡаласығы. Әленән-әле ҡаршыға дәрескә ашығыусылар осрай.

Янымa тәҙрәләренә ҡар һырыған сит ил автомобиле килеп туҡтай. Hyundai Sonata.

- Хәйерле иртә, Илгиз Замфирович!

- Хәйерле иртә! Әйҙә, ултыр, эшкә һуңлайбыҙ бит.

Радионы тоҡандыра. "Ашҡаҙар". Башҡортса ретро йырҙарға ҡушылып йырлап ебәрә.

- Бына ҡара, нимә алып йөрөтәм үҙем менән. – Шыптыр һауыт тартып сығарып миңә күрһәтә. – Ҡорот. Мәрйәм апай Буракаеваның ҡорото. Юлда йөрөгәндә асығып китһәм, шуны һурам инде. Юл буйында һатылған теләһә нәмәгә ҡарағанда, был күпкә файҙалыраҡ та.

Күптәр нисек ҡала шарттарында ла башҡорт булып ҡалырға тип баш вата. Ниндәй ауырлығы булһын инде уның? Бына ошолай ҡоротон, ҡымыҙын онотмаһаҡ... Башҡортса йырлайһың, бейейһең.

*Башҡортостан – баш ҡалаһы,*
*Башҡорттарҙың баш ҡалаһы.*
*Ҡалай итеп башҡортома*
*Баш ҡалала ҡалаһы?..* – тип йырлаймы әле хәҙер йәштәр? Дөрөҫ түгел ул был йыр. "Ҡалаһы" урынына "нисек хужа булаһы" тип йырларға кәрәк.

- Ә был йырҙың һүҙҙәрен Мәрйәм Буракаеваның ҡыҙы яҙған, белгегеҙ килһә, – тип йылмаям мин. – "Ике йөҙ" төркөмө егеттәре башҡара.

Ул арала Ҡоролтай урынлашҡан "Нефтселәр" мәҙәниәт һарайына килеп еттек.

- Беләм мин, барыбер йыр менән килешмәйем. Сөнки был ҡараш позитив түгел. Проблеманан сығыу юлы ла юҡ, күрһәтелмәгән. Әхмәр Үтәбай ҙа яҙған бит: "Башҡорттарһыҙ башҡорт ҡалалары башҡорт тамағында һөйәк" тип, – шулай ти, үҙе һаман шул йырҙы көйләй. – Хәҙер хәл башҡараҡ. Башҡорттар күп ҡалала.

Мәҙәниәт һарайының ҡабырғаһынан килеп туҡтайбыҙ. Баҫҡысты тотошлайы менән ҡар һырыған. Илгиз ағай еңел генә баҫып, йүгерә-атлай менеп тә китте. Минең арттараҡ ҡалғанды күреп: "Һин минең ҡуләгә шикелле йөрөргә тейеш, тимәк, ғәҙәти тиҙлегемде кәметмәйем", – тип көлә.

Баҫҡыс буйлап тәғәйен ҡатҡа күтәреләбеҙ. Бына кәрәкле ишек. Һул яҡта Илгиз Замфировичтың бүлмәһе, уң яҡта – урынбаҫары Р.Т. Аҙнабаевтыҡы. Беҙ килгәндә секретарь юҡ ине әле, әммә Рүмил Тәлғәт улы үҙендә.

- Хәҙер бер ун минутка йыйылып алырбыҙ, – ти Илгиз Замфирович уға.

Ләкин үҙе, кейемен дә һалып тормай, кире урынбаҫарының бүлмәһенә йүнәлә. Ә унда – Фәнзил Әхмәтшин, Гөлфинә Юламанова... Бәләкәй генә йыйылыш оператив рәүештә шунда үтте. Ҡазандағы яңылыҡтар хаҡында һүҙ барҙы, бөгөнгө көнгә маҡсаттар аныҡланды.

Кире кабинетҡа инәбеҙ. Иркен генә уныһы. Илгиз Замфирович тәү сиратта компьютерын тоҡандырҙы.

- Интернетты байҡап сығайыҡ. Тәүҙә үҙебеҙҙең Ҡоролтайҙың сайтына күҙ һалайыҡ.

Ул арала, телефон номерҙарын йыйып, кемделер "бешә" лә башланы:

- Ни өсөн сайтта фотолар яй асыла ул? – Теге оста интернеттың тиҙлеге ғәйепле тип аҡландылар, буғай. – Юҡ, фотонан башҡа әйберҙәр шәп асыла бит! Әйҙән ингән саҡта ла шул уҡ хәл ине! "Еңеләйтеп" һалығыҙ!

- "В Контакте" сайтында, интернет-форумдарҙа йыш булаһығыҙмы?

- "В Контакте"ла ултырмайым, әммә элегерәк форумдарҙа йыш ҡатнаша инем. Хәҙер халҡыма һүҙ менән генә түгел, ә эш менән дә файҙа килтереү мөмкинлеге тыуғас, ундай урындарҙа ваҡытты үлтермәйем.

Нимә-нимә, Ҡоролтай рәйесенең гәзиттәр уҡып ултырырға әллә ни ваҡыты юҡ шикелле. Өҫтәлендә ятҡан "Башҡортостан", "Башҡортостан Республикаһы", "Ҡыҙыл таң", "Йәшлек" гәзиттәренә, кисә генә үҙе Ҡазан ҡалаһынан алып ҡайтҡан татар конгресы баҫмаһы "Халкым минем", мосолмандар баҫмаһы "Рисәләт"кә ашыҡ-бошоҡ күҙ йүгертеп сыҡты ла, кире компьютер экранына бороло.

- "Башинформ", "Lenta.ru"-ға инеп, яңылыҡтарға күҙ һалырға кәрәк. ...Белла Ахмадуллина тураһында яҙғандар икән... Яңыраҡ ҡына үлеп ҡалды... Миңә уның шиғырҙары бик оҡшай. – Шул арала шағирәнең бер шиғырын яттан һөйләп ебәрә:

*"С ума схожу. Иль восхожу*
*К высокой степени безумства..."*

- Ә бына тәүге ире Е. Евтушенко булғанын белмәгәйнем... Өс тапҡыр тормошҡа сыҡҡан. Белла Ахмадуллина! – тәрән һоҡланыу менән ҡабатлай шағирәнең исемен. – Уның шиғырҙарына күпме иҫ киткес йырҙар яҙылған!

Артабан шиғриәт, әҙәбиәт тураһында һүҙ китә.

- Шул заман яҙыусыларының миңә оҡшағандарынан бер Распутин ғына ҡалды. Астафьев үлде бит инде.

- Ауыл тормошон һынландырыусылар.

- Эйе, ауыл кешеһенә, шул иҫәптән беҙҙең башҡорттарға ла шул тиклем яҡын яҙыусылар. Улар бит урыҫтарҙы 60-70-се йылдарҙа иҫкәртә башланы. Беҙҙекеләр араһында ла ундай темаға яҙыусылар булғандыр, әммә мин белмәйем.

"Эмм..." хәтерҙән уҡылған китаптарҙы барлайым, әммә ҡапылдан минең дә иҫкә төшмәй.

- Бына беҙ, уҡып бөткәс ҡалаларҙа йәшәп-эшләһәк тә, ауылда йорт һалырға бурыслыбыҙ. Мин шулай итәм дә.

Көлөп ебәрҙем. Ни мәғәнә ауылда буш торған йорттан? Ҡартайғас ҡайтып йәшәргә була. Илгиз Замфирович мин көлгәнгә ҡыҙыбыраҡ:

- Эйе-е-е! Бына мин төҙәйөм! – ти. – Беҙгә, беләһеңме, ауыл ҡарттары ни ти торғайны? "Һеҙ кем ул? Һеҙ кеше лә түгел! Һеҙҙең бит ерҙә торған бер теүәлитегеҙ ҙә юҡ!" тиҙәр ине. Аҫаба башҡорт ергә яҡын булырға тейеш. Ә фатир нимә? Ул ерҙә түгел.

Кире әҙәбиәткә күсәбеҙ.

- Башҡорт әҙәбиәте... Мин мәктәптә гуманитар синыфта уҡып тамамланым, беҙ бөтә донъя һәм урыҫ әҙәбиәтен өйрәнеүгә ҙур иғтибар бүлә инек. Кемгә нисектер, ә бына мин башҡорт әҙәбиәтен уҡый алмайым хәҙер. Сөнки бөйөк урыҫ, бөтә донъя әҙәбиәте менән танышҡандан һуң, башҡортса китаптар уҡыу бер баҫҡыска түбән төшөү һымаҡ. Хатта Зәйнәб Биишева, Һәҙиә Дәүләтшиналарҙы уҡығанда ла... Улар күтәргән проблемалар бөгөн актуаль түгел. Кимәл мине ҡәнәғәтләндермәй. Әлбиттә, уҡыным мин уларҙы. Бәлки үҙ заманы өсөн ниндәйҙер күтәрелеш тә булғандыр романдары. Тик бөгөнгө көн яңы геройҙар талап итә. Башҡорт әҙәбиәтендә бөтә донъя кимәлендәге глобаль проблемалар күтәрелмәй. Үҫешәһе лә үҫешәһе әле беҙҙекеләргә...

Беҙҙең башҡорт ҡайҙа алдыра – шиғриәттә. Бик матур шиғырҙар яҙған шағирҙарыбыҙ бар, шул уҡ Рәми Ғариповты алһаҡ та...

Минең өйҙә китаптар күп ул, күрерһең әле. Әлбиттә, ятакта йәшәгәс, урын булмау сәбәпле, бында ғилми китаптар ғына. Ә ҡалғандары – нәфис әҙәбиәт – Стәрлелә. Шунда минең байлыҡ.

Иң һуңғы һатып алған китаптарым Хәсән Туфандың беренсе-икенсе томы булғандыр. Хәсән Туфан шәп шағир! Йырҙар яратам. Берәй йыр оҡшап ҡалһа, "О, ҡайһылай матур йыр! Авторы кем икән?" тим дә, шул шағирҙың шиғырҙары менән ҡыҙыҡһына башлайым.

Бөгөнгө көн шағирҙарынан Әхмәр Үтәбай, Лариса Абдуллиналарҙы уҡыйым. Йәштәрҙән Илгиз Ишбулатовты өмөтлө тип һанайым. Йәш егет, әгәр шулай уҡ барһа... Ә иң яратҡан шағирым... – пауза яһай. – Халҡым. Халыҡ йырҙары.

- Йыр яратҡанығыҙҙы аңланым инде.

- Ҡайһы бер кешеләр шулай йырлап, мәрәкәләп йөрөүемде аңламай. Уларға "Ҡарасурай" тигән халыҡ йырындағы һүҙҙәрҙе әйтеп ҡуям:

*Уйнап-көлөп йөрөгәс тә,*

*Уйланмай ҙа тиһеңме...*

Беҙҙең әңгәмәне бүлдерәләр.

- Һаумыһығыҙ, Илгиз Замфирович!

- Һаумыһығыҙ!

- Һеҙ конференцияға бараһығыҙмы?

- Юҡ, конференцияһына бара алмайым, әммә симпозиумға барам.

Мин шул арала уларҙың һөйләшкән сағын фотоға төшөрәм.

Йомош менән ингән ханым быға иғтибар итеп:

- Төшөрөп алдыңмы әллә мине лә? – ти.

- Эйе, төшөрҙө. Бына мине лә төшөрөп йөрөй. Милициянан ул, – тип шаярта хужа. – Сәүиә Миңлеғәлиевна Ғәзизова. Яуаплы сәркәтибебеҙ.

- Кисә йәштәр Эльбрус Ниғмәтуллин менән осрашыу үткәрҙе. Эльбрусҡа бик оҡшаны, – тип дауам итә һүҙен Сәүиә апай. – "Эльбрус – планетаның иң көслө кешеһе. Силәбе башҡорто".

- Ә йәштәрҙең үҙҙәренә оҡшанымы һуң?

- Эйе! Бик оҡшаттылар.

– Һарытауҙан килергә тейештәр ине, хәтерләйһегеҙме?

- Эйе, эйе. Губернаторҙарын көтәбеҙ. – Артабанғы һөйләшеүҙәрендә мин аңламаған ваҡиғалар... Тыңлауҙан туҡтайым.

"Халҡым минем" гәзитен ҡулыма алам. Ап-аҡ ҡағыҙға баҫылған, арыу уҡ ҡалын ғына баҫма.

- Беҙҙең Ҡоролтайҙың ошоға оҡшаш баҫмаһы бармы? – тием Сәүиә ханым сығып киткәс.

- Юҡ һәм көтөлмәй ҙә. Хәҙерге заманда интернетка ҙурыраҡ иғтибар бүлергә кәрәк тип уйлайым мин. Күршеләребеҙҙең баҫмалары ла даими рәүештә сыҡмай бит. Донъя күргән ваҡытын ҡара әле.

- 27 август.

- Шунан бирле баҫылмаған. Әммә тағы, гәзит сығарыу уйын бөтөнләй ситкә лә ҡуймайбыҙ, тиергә мөмкин. Ҡулай кешеләре тап булһа, мөмкинлектәре тыуһа, ниңә гәзит аша ла сағылдырмаҫҡа ти ил тормошон, Ҡоролтай хәлдәрен?

Ул арала Сәүиә Миңлеғәле ҡыҙы Ҡоролтайҙың тағы ла ниндәйҙер эштәре буйынса инеп сыҡты. Уның артынса бухгалтер ҡағыҙҙарына ҡултамғаларын ҡуйҙырып алды.

- Төштән һуң "Йола фольклоры. Сәсәндәр ижады" тип аталған симпозиумға барабыҙ. Шул йыйын сиктәрендә Розалия Солтангәрәеваның юбилейы буласаҡ. Бына ошо Маҡтау ҡағыҙын һәм "Ал да нур сәс халҡыңа!" тип яҙылған миҙалды тапшырырбыҙ.

Баш ҡағам.

- Ай, Уралым, Уралым.... Күккә ашҡан Уралым.... – тип көйләп ебәрә әңгәмәсем.

Бер туҡтауһыҙ шулай низер булһа ла көйләй.

- Ҡаҙмашта түңгәүерҙәр йәшәйме? – Минең тыуған ауылымды һораша.

- Юҡ, тамъяндар.

- Ә-ә-ә... Күргәнем бар, юл буйында ятып ҡала, матур ауыл. Быуаһы ла бар, шулаймы?

- Ә һеҙ ауылдың эсендә булғанығыҙ бармы ни?

- Юҡ. – Йылмая.

- Ә быуаһын ҡайҙан беләһегеҙ?

- Күренеп тора бит үткән саҡта.

- Күренмәй шул. Икенсе берәй ауыл менән бутамайһығыҙмы?

- Юҡ. Мәктәбегеҙ тау башында, ике ҡатлы, шулаймы? Күрше ауылдарҙан да йөрөп уҡыйҙар.

- Эйе...

Күрәһең, Ҡоролтай башлығы шулай һәр ауылды белергә тейештер.

## 09:45

- Әйҙә!
- Ҡайҙа барабыҙ?
- Республиканың ЮНЕСКО эштәре буйынса комитетына.

Ултырғыска һалып ҡуйған кейемдәрҙе алып кейенәбеҙ.

- Һеҙ минең бүректе күрҙегеҙме әле?

Ирмәк кенә икән тип ҡарап ҡуйғайным.

- Ә бына быныһын? Ул бүрегенең эсенән... ҡойроҡ тартып сығарҙы. – Милли бүреккә окшатып махсус тектереп алдым. "Салауат" ательеһында. Түбәһендә – ырыуымдың тамғаһы.
- Ниндәй ырыу?
- Өршәк-Мең. Кәрәкмәгән сакта ҡойроҡто эскә йыйып ҡуям. Халыкка бик оҡшай. Үҙемдең дә күңел бөтөн. Дүртенсе йыл кейеп йөрөйөм инде.

Тағы ла ҡайһылыр шағир әйтмешләй, "бурап-бурап" ҡар яуған урамға сығабыҙ. Мин юлды ҡыҫҡартмаҡ булып, машинаның артынан түгел, ә алдынан урап ултырам.

Илгиз ағай миңә текәләп ҡарай.

- Ни булды?
- Ҡатын-ҡыҙҙың машинаны алдан урап ултырыуы водителдәр араһында насар ырым һанала.

Көләм. "Харап икән".

- Ысын.
- Ярай, белеп ҡуйырмын. – Шулай тим, ә үҙем онотасағымды беләм – хөрәфәттәргә ышанмайым.

Машинаның алғы тәҙрәһен көскә ҡарҙан таҙалап, ҡуҙғалабыҙ.

- Ҡышҡы "дворниктар" ҙа ҡуйырға өлгөрөп булмай, – тип зарлана ул арала Илгиз Замфирович.

Радионы ҡабыҙа. Һауа торошон тыңлайбыҙ. "Әле баш ҡалала 10 градус һалкын. Дымлылык – 95 процент", – ти радио тулҡындары аша Әхәт Мортазин.

- Өс бала атаһы икәнегеҙҙе беләм. Ә исемдәре нисек уларҙың?
- Игеҙәк малайҙар – Алсын менән Сыңғыҙ. Ҡыҙым – Сәлимә. Малайҙар әле ауылда. Рәхәтләнеп ял итәләр.
- Ҡайһылай матур исемдәр!
- Үҙем һайланым. Алсын – ыласын мәғәнәһендә, ә Сыңғыҙ... – "Сыңғыҙхан хөрмәтенә". – ...Бөйөк яҙыусы Сыңғыҙ Айтматов хөрмәтенә. – "Яңылыштым".
- Мин бөйөк хан тип уйлаһам.
- Юҡ. Сыңғыҙ Айтматов, белгең килһә, төрки яҙыусылары араһында иң бөйөгө ул.

Һүҙҙе икенсегә бороп:

- Көтмәгәндә шундай ҡыҙҙар осрай,

Шундай ҡыҙҙар осрай, ят та үл инде! – ти...

- Рәми.
- Беләһеңме, мин был шиғырын үҙенең үк юлдары менән нисек дауам итәм? – Мут ҡына йылмая. – "Юҡ, бармаһам бармайым,

Лутсы өйгә ҡайтайым,

Еңгәгеҙгә арҡа терәп,

Йоҡларға мин ятайым..." тип.

Шымабыҙ, әммә оҙаҡҡа түгел, тынлыкты Илгиз ағай боҙа:

- Ҡартаямы ни һуң йөрәк... – тип ғәҙәтенсә көйләй башланы. Радиола шаян халыҡ йырын ишетеп туҡтаны.
- О, Флүрә апай! Флүрә Ноғоманова. Был йырҙы ишеткәнем юк ине уның башкарыуында. – Үҙе тыңлай, күҙе юлда. – Ниндәй әҙәпле кеше икәнлегемде яҙығыҙ, үткәрҙем бынау машинаны! – тип көлдөрә.

Килеп еттек кәрәкле ергә.

- Тиҙҙән "Салауат эҙҙәре буйлап" тигән акция сиктәрендә Эстонияға китергә тейешмен. Шуның ҡағыҙҙарын йүнәтергә кәрәк бында.

Комитетта оҙаҡ ҡына тоткарландыҡ. Әҙерәк ялка төштөм. Дә, был ҡағыҙ эше... Ике генә кеше ултыра бүлмәлә. Яуаплы сәркәтип Венера Әхмәт ҡыҙы Фарганова Илгиз Замфировичтың документтары менән була. Компьютерҙа йыйырға һәм ҡултамға ҡуйырға кәрәк. Илгиз ағай түҙмәне, ултырып йыя башланы үҙе хаҡында.

Комитеттан һуң Илгиз Замфир улының икенсе эш урынына йүнәләбеҙ. Йәнә машинаны ҡарҙан "әрсеп", сак ҡуҙғалып киттек.

- Ике эштә эшләүе ауыр түгелме?
- Юҡ, киреһенсә. Бына тарихсылар, улар үткәнде өйрәнә, архивтарҙа ултырып. Ә беҙ – социологтар – бөгөнгөнө. Шунлыктан, беҙ кабинеттарҙа ултырып түгел, ә күп йөрөп, кешеләр менән аралашып, уларҙың тын алышын белеп эшләргә тейеш. Быға тиклем социологияны бары тик һан менән генә эш итә торған фән тип уйлайҙар ине. Хәйер, әле булһа шул ҡараш өҫтөнлөк итә Рәсәй социологтары араһында. Ә бына Көнбайыш илдәрендә һанға түгел, ә сифатка ҙурырак иғтибар бүләләр.

Институт Телеүҙәк артында урынлашкан. Тыштан да, эстән дә ҡотһоҙ ғына бер бина. Шул инде, Рәсәй ғалимдарының яҙмышы. Тәғәйен этажға күтәрелгәс, Илгиз Замфирович ишектәрҙе асып иҫкәртеп сыкты:

- Мин бында! Бына бында беҙҙең төп белгестәребеҙҙең береһе эшләй, – ти һулдан беренсе ишекте асып. – Азат Таһир улы Бирҙин. Асфальт балаһы, башкортса һөйләшә белмәй, әммә бик рухлы егет.

Эш буйынса ниҙер һөйләшәләр ҙә, директор кабинетына үтәбеҙ. Уныһы Ҡоролтайҙағыға ҡарағанда күпкә ҡайтышырак, әлбиттә. Күберәк

ҡара төҫтәр өҫтөнлөк итә. Ҡара өҫтәл, ҡара шкафтар... Өҫтәлдә – ноутбук, китаптар һәм малайҙарының фоторәсеме.

Ҡултамға өсөн төрлө ҡағыҙҙар тотоп инә лә башланылар. Торараҡ, Бирҙин да күренде. Илгиз Замфирович иртәгә Мәскәүгә китергә тейеш. Мәскәү башҡорттары менән осрашырға, танышырға. Һөйләшеүҙәренән аңлауымса, Азат Таһировичты ла үҙе менән алып, бер юлы социологтарҙың "Сорокин уҡыуҙары"нда ла ҡатнашмаҡсылар. Бына шулай, ике ҡуянды бер юлы.

- Паспортың, аҡсаң үҙең менәнме?

- Юҡ, өйгә ҡайтып килергә кәрәк, – ти Бирҙин.

- Йыйын улайһа, өйөңә барып киләйек тә, иртәнгелеккә самолетҡа билеттар алып ҡуйыйыҡ. – Шулай тине лә, ошонда көтөгөҙ, мин хәҙер, – тип күрше бүлмәгә эштәрен бөтөрөп ҡуйырға сығып китте.

Ә беҙ Азат Таһирович менән әңгәмәләшәбеҙ. Ул миңә социология, Медведевтың илде модернизациялау тураһындағы телмәре, сәйәсәт, бөгөнгө етәкселеккә ҡағылышлы фекерҙәрен һөйләй.

Солтанморатов бер кеше менән кире әйләнеп килде.

- Таныш булығыҙ, тағы ла бер ярҙамсым – Баймаҡ егете Илшат Йосопов. Илшат, ә был минең шәхси корреспондентым. Киләһе өс йылда артымдан эйәреп йөрөйәсәк. Эшләгән эштәрем тарих биттәрендә ҡалһын өсөн. – Шаярта.

## 12:00

Бар эшен теүәлләп бөткәс, кире урамға сығабыҙ. Был юлы өсәүләп. Тағы ла юлда. Башҡорт дәүләт университеты бинаһы янынан үткән саҡта:

- Бына инде мин уҡыған ер, – тием.

- Мин дә сағыштырмаса күптән түгел ошо уҡыу йортон тамамлағайным. – Яҡшы һүҙҙәр менән иҫкә алмай бындағы белем биреү кимәле хаҡында. – Ничего тут не получил, только здоровье потерял, – тип ҡуйҙы урыҫсалап. Нимә әйтергә теләгәндер инде.

Юлда телевидение тураһында һүҙ сыҡты.

- Минең балалар өйҙә яратып "Сәңгелдәк" ҡарай. Ләкин унда Тыр-тырҙы күрһәтә башлаһалар, телевизорҙы тәҙрә аша алып ырғытырҙай булам,– ти Азат ағай. – Күҙ алдына килтерегеҙ, тапшырыуҙа ҡатнашҡан ҡыҙҙар – барыһы ла камил, нәзәкәтле, аҡыллы. Ә берҙән-бер ир заты? Ниндәйҙер иҫәр! Илленсе йылдарҙағы "Һәнәк" юморы менән, етмәһә. Бала күңеле нисек бар, шулай ҡабул итә.

- Эйе, бына Тыр-тыр урынына Эльбрус Ниғмәтуллин кеүек егеттәрҙе саҡырып тапшырыу эшләһәләр! – тип ҡушыла Илгиз ағай. Урам буйында тәмәке тартып китеп барған ике үсмергә төртөп:

- Бына ошондай балалар үсә инде шунан, ни Аллаға түгел, ни муллаға! – ти.

- Ә былай, уйлап ҡараһаң, "Тамыр"ҙа барыһы ла насар түгел. Әгәр ҙә "Тыныс йоко, кескәйҙәр!" тапшырыуындағы кеүек уйынсыҡтар менән эшләһәләр, отолорҙар ине. Ә улар балаларҙың үҙҙәренә баҫым яһаны.

Бына, әйтәйек, Эльбрус Ниғмәтуллин менән тапшырыуҙар серияһы эшләһәләр, балалар көстөң нимә икәнен аңлар ине. Көс бит айырым алғанда, тупаҫлыҡ түгел, киреһенсә.

- Беҙҙең балаларыбыҙға көслө ир-аттарҙың миҫалы кәрәк. Етте ниндәйҙер эскесегә оҡшаған образды таратырға!

Бара биргәс, һүҙ икенсегә борола:

- Мәскәүҙә саҡта Ҡарамырҙаны ла күреп кәңәшләшәһе ине, – ти Илгиз Замфирович.

- Ул үҙенең клубын ойоштороп ята. Һәр региондан бер нисә кеше булһа, бик шәп инде, – ти Азат ағай.

Минең ҡыҙыҡһыныуҙы икәүләп ҡәнәғәтләндерәләр:

- Сергей Ҡарамырҙа – Рәсәйҙең бөгөнгө хәлторошон тәрәндән өйрәнгән шәп социолог. Социолог ҡына түгел, күпте күргән философ та. Рәсәйҙең хәҙерге хәлен аңлағың килһә, уның китаптарын уҡырға кәрәк.

Паспорттарҙы алғас, "Юлдаш" авиакассаһына юл тотабыҙ.

- Ҡазандан ниндәй уй менән ҡайттығыҙ?

- Нимә-нимә, бер фекерем тағы ла нығынды. О, татарҙар өлгөр, тибеҙ, унда ла беҙҙәге кеүек бер төркөм халыҡ бөтә милләттең йөҙөн билдәләй. Ҡалғандары шул беҙҙең башҡорттар кеүек... – әйтеп бөтөрмәй, ҡул һелтәй.

"Юлдаш"та арыу ғына тотҡарландыҡ. Мәскәүгә билет алыу өсөн генә лә байтаҡ ваҡыт кәрәк икән.

## 13:10

Азат Таһировичты ҡайһылыр бер урамда төшөрөп ҡалдырғас, симпозиум үтәһе ергә ашығабыҙ. Юлда – тығындар, тайғаҡ, буранлап яуған ҡарҙан дворниктар тәҙрәне таҙартып өлгөрмәй. Илгиз Замфирович сыҙамай, онотолоп китеп тоҙло-боросло һүҙҙәр ысҡындырып ебәрә.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты бинаһы алдына килеп еттек. Машинаны урынлаштырғас, юл аша йүгереп сығабыҙ. Ғөмүмән, Илгиз Замфирович шәп атлап йөрөй.

Беҙ килеп еткәндә конференцияға йыйылыусылар төшкө ашҡа туҡтағайны.

- Ашханаға инеп, тамаҡ ялғайыҡ, – ти. – Әйҙә, нимә ашайһың, мин һыйлайым.

Үҙе мине көтмәй, заказдар бирә башланы:

- Һөтлө сәй, шешлек...

Шым ғына, әммә ҡабалан-ҡабалан ашайбыҙ.

- Юҡ, туйманым. – Тағы бер порцияға заказ бирә. Ситтән ҡараһаң, ябай ауыл кешеһе инде – итте рәхәтләнеп ҡулдары менән маткып тотоп, ихласлап ашай. Гел тиҙлектә – ашағанда ла, йөрөгәндә лә, һөйләшкәндә лә.

Тамаҡ ялғағас, бина буйлап йөрөйбөҙ. Конференцияла ҡатнашыусылар өсөн ойошторолған күргәҙмәләрҙе күҙәтәбеҙ. Ингән ерҙә уҡ тиерлек "Китап" нәшриәтенеке. Илгиз Замфировичтың үҙенең китабы ла бар бында. Социология буйынса.

Күргәҙмәләрҙең ниндәйҙәре генә юк! Боронғо ҡулъяҙмаларҙы ла, милли кейемдәрҙән ҡашмау, түшелдерек, һаҡал кеүек эшләүҙә айырым оҫталыҡ талап ителгән, хәҙер сәнғәт өлгөһөнә генә әүерелгән әйберҙәрҙе лә күрергә мөмкин. Илгиз Замфирович һәр күргәҙмә алдында таныштарын осрата.

Юбиляр ханым – Розалия Әсфәндиәр ҡыҙы журналистарға интервью биреүҙән бушағас, янына барып ҡотларға ла ваҡыт тапты.

- Мин һеҙҙең ҡобайырҙарығыҙҙы яратып уҡыйым. – Сәсәниәнең бындай һүҙҙәргә йөҙө яҡтырып китте, хатта.

Шунда уҡ яңы сыҡкан ғилми китаптарҙың презентацияһын да үткәрәләр. Ләкин, аңлауымса, уларҙы бик һирәктәр генә тыңлай. Шау-шыу эсендә ни һөйләгәндәре йүнләп ишетелмәй ҙә. Нимә хаҡында һүҙ йөрөтөүҙәрен аңлар өсөн бер нисә минутка туктап торһам, геройым ҡайҙалыр юкка сыкты. Улай-былай ҡаранам, халыҡ күп, күренмәй. Ашхананан эҙләп таптым. Иң арттағы буш бер өҫтәл артында ултыра.

- Арып киттегеҙме?

- Черчилль әйткән бит: "Форсат сыкканда – ултырырға, урын булған ерҙә – тороу, ятырға урын булғанда ултырыу кәрәкмәй" тип.

Симпозиум башланыуы тураһында хәбәр итәләр. Алғы рәттәрҙең береһенә, йәш кенә, әле студент, буласаҡ ғалимә ҡыҙ – Венера Баймөхәмәтова эргәһенә ултырҙыҡ.

- Кеше ҡайһылай аҙ ул, – тим Венераға. Халыҡ ысындан да бик әҙ генә. Ләкин таныш йөҙҙәр күп: ана, ғалимә Фирҙәүес Ғилметдинова, Рауил Бикбаев, Ҡәҙим Аралбаев, Ғайса Хөсәйенов...

- Конференцияға килеүселәрҙең күбеһе уҡытыусылар ине. Улар симпозиумға ҡалмай ҡайтышып бөттөләр шул...

Бына бер-бер артлы ҡотлай ҙа башланылар. Сәсәниәнең хеҙмәттәштәре, ижадташтары ине уларҙың барыһы ла тиерлек. Ғалимәгә байрамы уңайынан иң ҙур бүләкте Ауырғазы районы Төрөмбәт ауылынан килгән "Йыйын" фольклор түңәрәге ағзалары бүләк итте. Ҡулдан, боронғоға



оҡшатып, орнаменттар менән биҙәп эшләнгән балаҫ.

- Бындай балаҫтар 15 мең тора! – тип һоҡлана янымда Илгиз ағай. – Минең машинала ла бар шундайырак. Тик ул бәләкәс кенә. Мин уны, беләһеңме, Египетта һатып алғайным. Биҙәктәре тас беҙҙеке.

Бына Илгиз Замфировичтың да сираты етте. Йәһәт кенә, оҙаҡҡа уҡ һуҙып тормай, әммә ихлас ҡына ҡотланы ла кире урынына килде.

- Хәҙер беҙгә бынан һиҙҙермәй генә сығып китергә кәрәк, – ти. Мин яҡындағы ишеккә ымлайым:

- Бына ошонан сыкһаҡ та булалыр.

Розалия Әсфәндиәр ҡыҙының икенсе яҡҡа боролғанын уңайлап, йәһәт кенә сығып шылабыҙ.

## 15:15

Беҙ тағы ла институтта. Ҡағыҙ эше. Ниндәйҙер документтарына ҡултамғалар ҡуя, кешеләр менән һөйләшә, бойороҡтар бирә.

Бына бер йыйнаҡ ҡына апай килеп инде кабинетына.

- Илгиз Замфирович, мин тағы ла Рәшит Назаровтың эше буйынса бит әле.

Ҡолаҡ ҡарпайҙы. Социология институтында шағирҙың ни ҡыҫылышы бар?

- Бына был папкала уның әле бер ерҙә лә баҫылмаған ике шиғыры һәм шулай уҡ бер ҡайҙа ла донъя күрмәгән хаттары. Мин уларҙы сағыштырып тикшереп сыктым, хәҙер редакторлау өсөн Мәрйәм апайға биргәндә лә була.

Апай сығып киткәс:

- Рәмзиә Ислам ҡыҙы Бикәнәсова булды был. Бында институтта эшләй, элек Ҡоролтайҙа ла йөрөгән. Рәшит Назаровтың архивын киң ҡат-

ламға сығарырға теләй. Ә беҙ изге теләккә ҡаршы торабыҙмы һуң инде? Хуплайбыҙ ғына. Был “эш” тип башҡара торған нәмә түгел, ә мәсет төҙөү кеүек – күңел талабы. Рухи мираҫыбыҙҙы һаҡлап ҡалдырыу.

Китап кәштәһенең ҡайһылыр еренән Рәшит Назаровтың өс телдә сыҡкан бәләкәс кенә шиғырҙар китабын тартып сығарып:

- Бына ниндәй шиғырын яратам мин, – тип уҡып та күрһәтте:

“Торам тормош уртаһында...”

Бында эште бөтөргәс, Ҡоролтайға юлланабыҙ. “Ашҡаҙар” радиоһынан “Оло юлдың туҙаны” тигән матур йырҙы башҡаралар.

- Ҡолаҡ һал, ниндәй матур образ бит, ә? Оло юлдың туҙаны...

Артабан һүҙ нисектер ғаилә тирәһенә күсә.

- Минең кәләш Баймаҡтыҡы. Ә бит Әбйәлил кейәүе лә була ала инем. Баймаҡ ҡыҙы барыһының да танауына сиртте, – ти уйынлыысынлы.

- Дингә ҡараш нисек? – тип ҡыҙыҡһынам.

- Нисек әйтергә инде. Һәр кемдең үҙ юлы. Һәм һәр кемгә үҙ юлы тураҡ кеүек. Ҡыҙғаныска ҡаршы, һуңғы ваҡытта диндарҙар халыҡты туплау урынына, күберәк таркатa. Рәсми дини ойошмаларҙың позицияһы ла аңлашылмай – башҡасараҡ фекерләгән йәштәрҙе үҙҙәренән тибеү менән шөғөлләнәләр... Ә дин беҙгә кәрәк ул, башҡорттарға. Иман! Беҙҙә бит күберәк динле кеше тип әйтмәйҙәр, иманлы кеше тиҙәр. Кемдер әйтә, мотлаҡ биш шартты үтәргә: намаҙ уҡырға кәрәк, тегеләй итергә кәрәк, былай итмәҫкә кәрәк...

## 16:05

Ҡоролтай. Тағы телефондан туктауһыҙ шылтыратыуҙар, ҡағыҙҙар, ҡағыҙҙар, ҡағыҙҙар... Ун биш-егерме минут эсендә “Деловая поездка в Казань” тигән бер битлек отчет яҙып сайтка элеп ҡуйҙы.

- Алло, Марат, һаумы! Алдым хатыңды. Бер генә һорау – минән ҡан кәрәкме? – Миңә ҡарап үҙе мут ҡына йылмая. – Бинаһы булыр, әлбиттә...

Ул һүҙ йөрөткән хатты өҫтәленән алып уҡыйым. Халыҡтың айныҡлығы өсөн көрәшкән йәмғиәт ойошмаларының тиҙҙән уҙасаҡ сараһы хаҡында һүҙ бара. Хаттың авторы – журналист Марат Абдуллин.

Ишек асылды. Институтта көн башында уҡ осрашҡан Илшат Йосопов.

- Ниңә өҫ кейемеңде сисмәй индең? Мин ярай, аңлармын, ә бына бүтән урынға инергә тура килһә?

Илшат ағай бер аҙ уңайһыҙланып китте.

- Иртәгә ҡуҙғалаһыңмы юлға?

- Эйе, Адыгеяға.

- Улайһа, бынан китаптар алып кит.

- Эйе, мин дә шуны әйтәм.

Миңә аңлаталар хәҙер:

- Илшат иртән Адыгеяға институт эше менән китә. Бер юлы бына Ҡоролтай эшен дә аткарам тип атлығып тора. Урындағы башҡорттарҙың хәлен белешеп, китаптар ҡалдырып китәсәк. Ул да социология фәндәре кандидаты. Адыгеяла диссертацияһын яҡлаған.

Илшат Фәритович сығып киткәс, ҡоролтайҙыҡылар күмәкләп эшкыуарҙар өсөн Ҡоролтай янында ойошторолаcаҡ Бизнес-үҙәк тураһында һөйләшеп алды.

Кискә табан Илгиз Замфирович янына йәш кенә егеттәр инә башланы. Күренеп тора – студенттар.

Ана, береһе, Мәскәүҙә аспирантурала уҡып йөрөүсе Азат Бадранов исемле егет нимә ти:

- Мәскәүгә, Санкт-Петербургка уҡырға инеүе ауыр түгел ул. Тик беҙҙең ауыл балаларына шуны аңлатырға ине.

- Каникулдарҙа районддар буйлап сығығыҙ, – ти Илгиз Замфирович. – Газель бирәм.

- Эйе, шулай итербеҙ ҙә. Мәскәүҙә уҡығандарҙың телдәре телгә йоҡмай ул, аңлатырҙар. Ябай ауыл балалары ла үҙҙәрен етдиерәк ерҙә һынап ҡарарға тейеш. Юғиһә, ИНЖЭКОНдың* нимә икәнен дә белмәйҙәр. Бына, мәҫәлән, Татарстан ҡалаларынан шунда күпләп уҡыйҙар, ә беҙҙекеләр юк кимәлендә.

- Хәҙер ҡайта һалып тамаҡ туйҙырабыҙ ҙа, спортзалға! – ти Илгиз ағай. Мин аптырабыраҡ ҡарап ҡуям:

- Арыманығыҙмы ни спортзалға барырға?

- Һи, минең көн саҡ башлана ғына... Башҡорттар бит күпселек өкәләр. Төн халыҡтары тигәндәрме әле уларҙы?

Ҡайтыр алдынан бер этажға юғарыраҡ ултырған Өфөлә уҡыусы студенттарҙың якташтар ойошмалары ассоциацияһына инеп сығабыҙ.

- Йәштәрҙе район-ҡала берлектәренә айырыу – бүлгеләү менән тиң түгелме?

- Буш хафа. Унан ҡала, ассоциацияла улар бит берлектә лә саралар уҙғаралар.

Бына, мәҫәлән, кисә Эльбрус Нигмәтуллин менән осрашыу үткәрелде. Шунан, нисек, оҡшанымы кисә? – ти йәштәргә.

- Эйе, бик окшаны!

- Нисә кеше булды инде?

- Ун биш...

- Шулай ғынамы ни? Мин кәмендә иллеләп кеше килер тип көткәйнем. Насар эшләйһегеҙ,

насар. Шул бер үк күренеш. Эш ҡушҡанда барыһы ла шәп, ахырында...

Өйөндә беҙҙе Зөлфиә исемле һылыу ҡатыны ҡаршы алды. Йүгереп йөрөп сәйен, ашарын ҡарап, өҫтәл әҙерләнө.

Ике бүлмә. Береһе – барыһы өсөн дә, балалар бүлмәһе тиергә лә була, бөтә ерҙә уйынсыҡтар. Икенсеһе йоҡо бүлмәһен һәм кабинетты берләштергән. Ҙур мониторлы компьютер әллә ҡайҙан күренә.

- Бына инде минең китаптар! – ти һоҡланып. – Тағы ҡайһы студент ятағында был хәтлем китап күрерһең?

Минең сәмгә тейә биреп ҡуя.

- Миндә лә һеҙҙән кәм түгел ул, Илгиз ағай. Тик... – китаптарҙың исемдәренә күҙ һалам. – Тик күбеһенсә нәфис әҙәбиәт.

- Минең бында ғилми китаптар шул. Әһә, Ҡарамырҙаның бынау китаптарын айырып ҡуйыр кәрәк, һорағайнылар.



Йәш ярымлыҡ бәләкәс кенә Сәлимә аяҡ аҫтында йүгереп йөрөй. Әле атаһына, әле әсәһенә барып һырыла. Әсәһенә оҡшап сибәр генә ҡыҙын атаһы күтәреп-күтәреп һөйөп-яратып ала. Мине лә ят итмәй, ҡулыма йәбешә, фотоаппаратты тартып алмаҡсы булып тартҡылаша.

- Был хәтлем дә матур балаға исемде кем һайланы ул?

- Мин, бөтәһенә лә мин.

Хужабикә йылт итеп иренә ҡарап ҡуйҙы:

- Эйе, һин, ти! Мин һайланым.

Илгиз Замфирович һүҙ бирә торған кешеме һуң инде:

- Юҡ, мин.

- Ярай, һин булһын, ти...

Ипле генә итеп әреплəшкәндәрен тыңлай-тыңлай, бүлмәне күҙҙән үткәрәм. Стеналарҙа ҙур фотолар. Балаларының фотолары. Бына игеҙәк малайҙары....

Өҫтәл әҙер булғас, тағы ла ҡабалан-ҡабалан тамаҡ туйҙырабыҙ.

- Ҡабаланмағыҙ, яйлап ашағыҙ, – ти шымыҡай хужабикә. Зөлфиә апай тип әйтергә лә тел бармай, шундай йәш, һылыу, хур ҡыҙы кеүек. Өс бала әсәһе тимәҫһең дә! Бер ойошмала экономист булып эшләйем, ти. Әле декрет ялында.

- Малайҙар өйҙә сакта уларҙы балалар баҡсаһына, "Латифа" балалар өсөн беренсе башҡорт һынлы сәнғәт үҙәгенә алып йөрөйөм мин. Әле улар ауылда, – ти хужа.

Эш кейемен спорт кейеменә алыштырғас, тағы урамға.

- Минең кроссовкаларҙы әҙерләп ҡуйҙыңмы?

- Эйе, ана ишек төбөндә...

Тышҡа сыҡҡас, һаман боҙолоп торған һауаға ҡарап:

- Иртәгә Мәскәүгә осоп булмаҫмы икән?

## 19:45

Спортзал.

- Бөгөн егеттәр менән баскетбол уйнарға һүҙ ҡуйыштыҡ. Ә былай мин баскетболды ял көндәрендә генә уйнайым. Эш көндәрендә бассейн яҡшыраҡ. Бында барыһы ла башҡорттар. Ҡасандыр бергә уҡыған егеттәр. Хәҙер төрлөбөҙ төрлө ерҙә эшләй. Бына ошолай спортзалда булһа ла осрашабыҙ. Бергәләп тәндә лә сыныҡтырабыҙ, һөйләшеп күңелде лә бушатабыҙ.

Мәғарифты үҫтереү институтының спортзалында байтаҡ ҡына кеше йыйылғайны инде беҙ барыуға. Таныш йөҙҙәрҙе лә сырамытып өлгөрҙөм. – Ана, Илшат Фәритович... Барыһы ла еңел спорт кейемендә. Илгиз Замфирович аяҡ-ҡулына йәрәхәттәрҙән махсус һаҡлағыстар кейә:

- Мин шулай һаҡсыл кешемен ул.

Кемделер алыштырып, инде ҡыҙыу ғына барған уйынға ҡушылып китә. Етеҙлек менән түгел, күберәген хәйлә менән уңайлы ваҡытты көтөп алыуҙы, шулай тип атап булһа, алдыра. Уйнаған сакта "минең нәзәкәтле ҡолаҡтарға тәғәйенләнмәгән" һүҙҙәр ҙә ишетелеп ҡалғылай.

Спортзалдан һуң тағы өйөнә елдерәбеҙ. Илгиз Замфирович арыған булһа ла, ҡәнәғәт. Сәй эскәндә миңә:

- Бигерәк иркен һөйләшкәнгә иғтибар итмә, мин инде арыуҙан үҙемде бер аҙ тыя алмай башланым, – ти.

Сәлимә әле йоҡламаған, атаһын көткән. Алдынан төшмәй.

Тыныс йоҡо теләп хушлашып сыҡҡан сакта, сәғәт ҡылдары 12-сене һуға ине инде.

Йөрәгендә халҡына һөйөү йөрөткән, эшлекле ир-уҙамандың көнө булды был.

*Миңзәлә АСҠАРОВА,*
*m.askarova2011@yandex.ru*

# ҺЕҘҘӘ НИМӘ ӘҘЕРЛӘЙҘӘР, БЕҘҘӘ ҺАЛМА ЙӘЙӘЛӘР

**Яңы йылда рубрика яңыртабыҙ, дуҫтар. Донъя кухняларын әҙме-күпме байҡап сыҡҡандан һуң, ниһайәт, сират Башҡортостанға етте. Ни тиһәң дә, республикабыҙҙың һәр мөйөшөндә аш яраштырыу ысулдары айырыла, һәр районның үҙенә генә хас ризыҡ төрҙәре, яратҡан ашы бар. Мәҫәлән, ҡайһылыр урында тултырманың нимә икәнен, нисек эшләнгәнен белмәйҙәр, йәиһә ҡаҙылыҡты тултырма тиҙәр. Һөҙмә, ҡорот, эремсек менән дә шундайыраҡ хәл. Һалманы баймаҡтар шаҡмаҡлап ҡырҡһа, әбйәлилдәр тура дүртмөйөш итә. Төньяҡ-көнсығышта "торпеда" киң таралған, ә көньяҡ-көнсығышта был ризыҡты һирәктәр генә ишетеп белә. Һанай китһәң, бындай миҫалдарҙы байтаҡ килтерергә була. Шуға ла беҙҙең маҡсатыбыҙ — һәр районда популяр булған аш-һыу төрөн билдәләү. Был маҡсатҡа һеҙҙең ярҙам менән өлгәшергә уйлайбыҙ, хөрмәтле журнал уҡыусылар. Бының өсөн үҙегеҙ тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт биреп, фотоғыҙ менән һеҙҙең ауылда, районда киң таралыу алған ризыҡтарҙың рецебын һәм үҙегеҙ әҙерләгән тәмлекәстәрҙе фотоға төшөрөп ебәреү талап ителә.**

**Һүҙҙе баш ҡаланан башларға булдыҡ. Өфөлә йәшәүсе Лэйсән ӘМИНЕВА үҙе яратып әҙерләгән салатын тәҡдим итте.**

## "ГӨБӨРГӘЙЕЛ" САЛАТЫ

**Салат өсөн 4 йомортҡа, 200 г тауыҡ ите, 150 г һуған, 250 г алма, 100 г сыр, 150 г грек сәтләүеге, майонез, тоҙ һәм салатты биҙәү өсөн бер аҙ петрушка, һуған, кишер кәрәк.**

1. Тауыҡ итен бешереп, һыуытырға һәм ваҡлап турарға.
2. Һуғанды ваҡлап турағас, ҡайнар һыуҙа 10 минут тоторға һәм һыуыҡ һыуҙа сайҡатырға (һуғандың әсеһе бөтһөн өсөн шулай эшләнә).
3. Йомортҡаның ағын айырып алып ҡырғыстан үткәрергә, һарыһын айырым ваҡларға.
4. Грек сәтләүеген бәләкәй киҫәктәргә бүлергә, ә бер нисә сәтләүекте бөтөн килеш ҡалдырырға.
5. Алманы һәм сырҙы ҡырғыс аша үткәрергә.
6. Биҙәү өсөн һуғандан сәскәләр киҫеп алырға, кишерҙе ҡырырға.

Ингредиенттарҙы тәрилкәгә ҡатлап йәйергә: иң тәүҙә йомортҡа ағы, тоҙ, ит, унан һуған, алма, сыр, йомортҡа һарыһын һалып, һәр бер ҡат араһына майонез һөртөргә һәм иң өҫкә сәтләүек һибеп сығырға.

Яртышар сәтләүектән гөбөргәйелдең башын һәм аяҡтарын эшләргә, йәшел үләндәр, һуған, кишер менән биҙәргә, майонез менән шаҡмаҡтар эшләргә. Салат әҙер!



# Ләйсән ӘМИНЕВА

Башҡорт дәүләт аграр университетының аҙыҡ технологиялары факультетында белем ала. Йыр-бейеүгә маһир, шиғырҙар ҙа ижад итә. Тәмле итеп ашһыу әҙерләү – иң яратҡан шөғөлө.

















www.shonkar.ru

## ҒИНУАР

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| шш | | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| шр | | 5 | 12 | 19 | 26 | |
| кс | | 6 | 13 | 20 | 27 | |
| йм | | 7 | 14 | 21 | 28 | |
| шб | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 | |
| йш | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 | |

## ФЕВРАЛЬ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| шш | 1 | 8 | 15 | 22 | |
| шр | 2 | 9 | 16 | 23 | |
| кс | 3 | 10 | 17 | 24 | |
| йм | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| шб | 5 | 12 | 19 | 26 | |
| йш | 6 | 13 | 20 | 27 | |

## МАРТ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| шш | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| шр | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| кс | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| йм | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| шб | 5 | 12 | 19 | 26 | |
| йш | 6 | 13 | 20 | 27 | |

## АПРЕЛЬ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 4 | 11 | 18 | 25 |
| шш | | 5 | 12 | 19 | 26 |
| шр | | 6 | 13 | 20 | 27 |
| кс | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| йм | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| шб | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| йш | 3 | 10 | 17 | 24 | |

## МАЙ

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| шш | | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| шр | | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| кс | | 5 | 12 | 19 | 26 | |
| йм | | 6 | 13 | 20 | 27 | |
| шб | | 7 | 14 | 21 | 28 | |
| йш | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 | |

## ИЮНЬ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 6 | 13 | 20 | 27 |
| шш | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| шр | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| кс | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| йм | 3 | 10 | 17 | 24 | |
| шб | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| йш | 5 | 12 | 19 | 26 | |

## ИЮЛЬ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 4 | 11 | 18 | 25 |
| шш | | 5 | 12 | 19 | 26 |
| шр | | 6 | 13 | 20 | 27 |
| кс | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| йм | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| шб | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| йш | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |

## АВГУСТ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| шш | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| шр | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| кс | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| йм | 5 | 12 | 19 | 26 | |
| шб | 6 | 13 | 20 | 27 | |
| йш | 7 | 14 | 21 | 28 | |

## СЕНТЯБРЬ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 5 | 12 | 19 | 26 |
| шш | | 6 | 13 | 20 | 27 |
| шр | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| кс | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| йм | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| шб | 3 | 10 | 17 | 24 | |
| йш | 4 | 11 | 18 | 25 | |

## ОКТЯБРЬ

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| шш | | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| шр | | 5 | 12 | 19 | 26 | |
| кс | | 6 | 13 | 20 | 27 | |
| йм | | 7 | 14 | 21 | 28 | |
| шб | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 | |
| йш | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 | |

## НОЯБРЬ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| шш | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| шр | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| кс | 3 | 10 | 17 | 24 | |
| йм | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| шб | 5 | 12 | 19 | 26 | |
| йш | 6 | 13 | 20 | 27 | |

## ДЕКАБРЬ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 5 | 12 | 19 | 26 |
| шш | | 6 | 13 | 20 | 27 |
| шр | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| кс | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| йм | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| шб | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| йш | 4 | 11 | 18 | 25 | |

шоңҡар 2011









# ЙЫРЛАП ЙӘШӘҮҘӘРЕ БЕР ҒҮМЕР...

**ВӘХИТ ХЫЗЫРОВТЫҢ ижадын күркәм сәскәгә лә, мәғрур ағасҡа ла тиңләргә булыр ине. Тик ул үҙенән-үҙе донъяға пәйҙә булған күренеш түгел, сәхнә оҫтаһының йырҙары — уның тыуған яҡтарында, бай тарихлы, халыҡ йолаларын, боронғо йыр-моңдарын, рухи ҡаҙаныштарын ҡәҙерләп һаҡлаған таланттарға йомарт Әбйәлил тарафтарында. Ә шулай ҙа... Бәрәкәтле тупраҡта шытым алған үҫентеләрҙәй йыр-моң яратыусы үҫмерҙәр күп бит ул, үҙешмәкәр сәхнәләрҙә сығыш яһап йөрөүселәр ҙә байтаҡ. Ә ил алдында исемдәре халыҡ теленән төшмәгән, донъя сәхнәләрендә республикабыҙ намыҫын яҡлай алырлыҡ, йырҙары сәнғәтебеҙҙең алтын фондына инеп ҡалырлыҡтары күп түгел.**



Вәхиттең ата-әсәһе Ғәлибай Мырҙабай улы менән Әклимә Ғәлиәхмәт ҡыҙы Хызыровтар колхозда ла егелеп эшләп, йортта ла аҙбар тулы мал-тыуар, ҡош-ҡорт аҫрап, баҡса үҫтереп көн күреүҙәренә ҡарамаҫтан, рухи байлыҡ хаҡында ла онотмай. Алты баланы – ике ҡыҙ һәм дүрт малайҙы тәрбиәләп аяҡҡа баҫтырыу, уларға тейешле белем алырға ярҙам итеү – ата-әсәнең иң яҡты теләге була.

Алдан алып булһа ла әйтәйем: уларҙың изге хыялдары тормошҡа аша – Хызыровтарҙың алты балаһы ла юғары белем алып, үҙ юлдарын һайлап, донъя көтә. Ата-әсә өсөн ошонан да ҙурыраҡ бәхеттең булыуы мөмкинме һуң?!

Барлыҡ ауыл малайҙары һымаҡ Вәхит тә иртәнән кискә тиклем эш өҫтөндә. Мал ҡарау, баҡса мәшәҡәттәре, йортто тәртиптә тотоу – барыһы ла бала-саға иңендә. Сөнки өлкәндәр колхоз эшенән бушамай. Бесән мәле, һуғым өмәләре, уңыш йыйыу кеүек бөтә ғаилә менән башҡарылған эштәр бер байрам булып хәтерҙә ҡала.

Күңел асырға ла ваҡыт бүлә Хызыровтар. Йыр-моңға, матурлыҡҡа ынтылған бала ел ҡыуып, аҙып-туҙып йөрөмәй. Уның күңелендә этлеккә, алама уйҙарға урын ҡалмай.

- Олатайымдың йортонда гел скрипка эленеп торҙо. Кем теләй, шул алып уйнай алды. Беҙҙең өйҙә бер генә түгел, ә 5-6 баян бар ине, – тип бала саҡтарын иҫкә ала Вәхит Ғәлибай улы. – Сәғит ағайым – ғаиләлә оҫта баянсы. Ул башта сәнғәт училищеһын, аҙаҡ институтын да бөттө. Ҡустым Зөфәр ҙә училище тамамланы. Әле район мәҙәниәт һарайында йырлай.

Бер ваҡыт атайым оло һыйырҙы һатып Магниттан пианино алып ҡайтты. Ул осорҙағы бәләкәй ауыл өсөн ғәжәп күренеш булғандыр инде: уны машинанан төшөргәндәрен ҡарарға бөтә ауыл халҡы йыйылды. Алдан һөйләшмәгәндәрҙер, күрәһең, пианиноға иң аптыраған кеше әсәйем ине. Атайымдың, мал тотонғас, донъя кәрәк-ярағы алып ҡайтыуын көтөп торған бит инде ул.

Был ят уйын ҡоралы ла беҙҙең өсөн үҙ булып китте. Унда бөтәбеҙ ҙә уйнап үҫтек. Бөгөн дә хеҙмәт итә ул: Өфөлә йәшәүсе Фәһимә һеңлем уйнай.

Ғаиләләге дүртенсе бала Вәхит өс йәштән сәхнәгә менә. Әсәһе уға бик матур милли бейеү кейеме һәм ҡыҙыл бәрхәттән ситек тегеп бирә. Малай концерттарҙа "Перовский"ҙы дәртләнеп бейей, ауылдаштары яратып йырлаған мөхәббәт йырҙарын башҡара. Шул саҡта уҡ һәләтле малайҙы "Ғәлибайҙың артист улы" тип йөрөтәләр.

Бер көн Әклимә апай улының күңелен китмәҫкә тырышып, йомшаҡ тауыш менән: "Балам, һин матур йырлайһың. Әйҙә, йырлап ҡына йөрө, бейеп торма инде, аяҡтарың килешмәй", – ти. Әсә һүҙенән сығып булмай инде. Вәхит башҡаса сәхнәлә бейемәй.



Мәктәптә уҡығанда репертуары тағы ла киңәйә, тулылана йәш йырсының. Ул саҡта айырыуса популяр булып киткән Рим Хәсәновтың һәр яңы йырын тиерлек башҡарып ауылдаштарын һөйөндөрә малай.

Механизатор – ауылда иң хөрмәтле, кәрәкле кеше. Вәхит тә ошо һөнәрҙе һайлай, училищеға китергә әҙерләнә. Ләкин әсәһенең теләге икенсерәк булған икән. Ул һәләтле улын Өфөгә, сәнғәт училищеһына барырға өгөтләй. Был фекерҙе шул йәйҙә генә ошо уҡыу йортон тамамлаған Сәғит ағаһы ла хуплай.

Бер һабаҡташы менән китә былар баш ҡаланы яуларға. Дуҫы ауыл хужалығы институтына юллана, ә Вәхит – сәнғәт училищеһына. Уҡырға инәсәгенә шикләнмәгән үҫмер, тәүҙәрәк аптырап ҡала: 200-ләп кеше имтихан бирергә килгән. Ә урындар 24 кенә. Һәр эшкә сәмләнеп тотоноп өйрәнгән ауыл малайы уңайһыҙланыуҙарын ситкә ҡуйып, имтихандарға етди әҙерләнә. Сәхнәләрҙән йырлап, халыҡ алдында ла үҙен тейешенсә тотоп өйрәнгән бит инде ул. Тауышының да һынатмаҫлыҡ булыуын белә.

24 ҡабул ителеүсе араһында Вәхит менән бергә әле исемдәре республика тамашаларына билдәле сәнғәт әһелдәре Йәмил Әбделмәнов, Джон Мусин, Харис Шәрипов, Хима Йәнбирҙина, Резеда Әминева, Зөлфиә Шакировалар ҙа була.

Шулай итеп, күңелле лә, ауыр ҙа, яҡты өмөттәр тулы тынғыһыҙ ҙа студент йылдары башланып китә.

## ВӘХИТ ТӨРЛӨ ТЕЛДӘРҘӘ ЙЫРЛАРҒА ӨЙРӘНӘ

"Беренсе курстан үҙемә шундай маҡсат ҡуйҙым: көнөнә мотлаҡ бер әҫәр – романсмы ул, ариямы, эстрада йәки халыҡ йырымы, үҙләштерергә кәрәк буласаҡ. Башҡортса ғына түгел, татар, рус, украина, итальян, француз, ҡаҙаҡ йырҙарын да өйрәнәм. Сәмләнеп, яратып тотондом был эшкә. Дәрес ҡалдырғаным юҡ, уҡырға иртүк киләм. Йәш булһам да, уҡыу нигеҙе тырышлыҡта икәнен, сәнғәттә биләгән урыным ошо нигеҙҙең сифатына бәйлелеген аңлағанмын бит әле. Әле шуға шатланам. Уҡып бөткәндә иң бай репертуар минеке ине", – ти күренекле йырсы бөгөн.

Икенсе курсты тамамлағас, уҡыуын ҡалдырып тороп, армияла хеҙмәт итеп ҡайтырға ла тура килә Вәхиткә. Йыр онотолоп тора. Моң-

ға маһир башҡа һалдаттар һымаҡ үҙешмәкәр сәнғәт сәхнәләрендә йырларға теләмәй ул. "Йырлап йөрөүҙе хеҙмәт итеү тип ҡабул итмәйем мин", – ти Вәхит Хызыров.

Армиянан һуң уҡыуҙы дауам итеү еңелдән булмай, әлбиттә: талаптар икенсерәк, төркөмдәштәр башҡа, уҡытыусыларҙың да күбеһе алмашынған. Уҡылғандар онотолған. Әммә булмыштағы сәм һәм һайлаған һөнәренә мөхәббәт ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға ярҙам итә.

"Ижад кешеһе өсөн талант төшөнсәһе мөһимерәкме, әллә тырышлыҡмы?" тигәндә, уларҙың икеһен дә бер юғарылыҡҡа ҡуя Вәхит Ғәлибай улы. Әлбиттә, тыумыштан бирелгән һәләтең булмаһа, ҡоро тырышлыҡ менән әллә ҡайҙа китеп булмай, ә инде һәләтеңде тырышлыҡ ярҙамында талант дәрәжәһенә үҫтермәһәң, шулай уҡ, бер ни ҙә килеп сыҡмай.

Ҡатыны Мария Анатольевна менән дә ижад юлында таныша йәш йырсы. Өфө ҡыҙы алсаҡ, сибәр концертмейстер Әбйәлил егетен ғишыҡ утына һала. Оҙаҡламай йәш ғаилә өсөн яңы тормош юлы башлана.

Рус ҡыҙына өйләнеүенә ҡаршы төшмәй өлкән Хызыровтар. Килендәренең үҙ милләтенән булмауын өнәп тә бөтөрмәгәндәрҙер, бәлки. Әммә йәш йөрәктәрҙең хәтерен ҡалдырмайҙар. "Маша менән тәүге тапҡыр ауылыбыҙға ҡайтыу һаман иҫтә, – ти Вәхит көлөп.

– Кәләшем аҙбар тулы малды ла, ауыл тормошон да тәүгә күрә. Һыйыр-башмаҡтарҙан ҡурҡа. Беҙҙең яҡта шулай бит инде: һыйырҙарҙың исеме Машка, үгеҙҙәрҙеке – Мишка. Атайым килененең хәтере ҡалыр тип, өйҙәгеләргә: "Һыйырға "Машка" тип өндәшмәгеҙ", – тип киҫәтеп ҡуя. Ә һыйыр икенсе исемгә әйләнеп тә ҡарамай, һауырға ла яҡын килтермәй". Киленгә иплән кенә ысынбарлыҡты аңлатырға тура килә.

Оло өйгә ни кәрәк, кесеһенә лә шул кәрәк. Өйләнгәс, студент булһаң да, ғаиләне ҡарау зарур. Бер эштән дә баш тартмай Вәхит. Студент йырсыларҙан төркөм ойоштороп, концерттар менән райондарға ла сығып йөрөйҙәр, төндәрен вагон бушатҡан саҡтары ла була, йөк бушатыуҙан, урам һепереүҙән тартынып тормай.

Сәмле кеше бөтә нәмәлә лә сәмле: үҙ көнөн үҙе күрергә тырыша егет. "Ҡәйнәндең фатиры бар, шунда йәшәгеҙ", – тип дөйөм ятаҡтан урын бирмәйҙәр. Ни тиклем генә һәйбәт булмаһын, кешелә йәшәү ижад кешеһенең илһамын арттырмай.

Аҙағыраҡ Октябрь проспектында урынлашҡан тәүге фатирҙарына сыҡҡас, күңел ҡанаттары иркенерәк талпына, ижад офоҡтары киңәйә төшә. Сөнки йырсының әҙерлек мәлдәре, яңы әҫәрҙәр өҫтөндә эшләүе өйҙә үтә бит инде.

"Хужаларға ҡамасауламаһам ярар ине" тигән уңайһыҙланыуҙан азатһың, теләгәнсә ижад ит. Концерттарға саҡырһалар, ситтән концертмейстер эҙләп йөрөйһө юҡ. Машенькаһы йырсының бөтә репертуарын белә. Йыр һайлауҙа һәм уны камиллаштырыуҙа иң яҡын кәңәшсе лә, тәнҡитсе лә – яратҡан ҡатыны. Бәхәстәр ҙә булғылай, әлбиттә. Тик бер-береһенә ихтирам тойғоһон юғалтмайҙар. Хызыровтарҙың берҙән-бер улдары Тимур-Тимерхан М. Аҡмулла исемендәге педагогия университетының сит телдәр факультетында белем алһа ла, йыр-музыка сәнғәте нескәлектәрен һәйбәт белә. Заманында музыка мәктәбендә белем алған ул.

## ВӘХИТТЕҢ УЛЫ БЕРӘҮ, ӘММӘ БАЛАЛАРЫ КҮП

Улдары берәү булһа ла, балалары күп Хызыровтарҙың. Сөнки икеһе лә йәш быуынды йыр-музыка сәнғәтенә өйрәтә. Вәхит Ғәлибай улы 18 йыл инде сәнғәт училищеһында вокал дәрестәре алып бара. Бынан тыш, М. Аҡмулла исемендәге педагогия университетының музыка факультеты доценты ла, филармония йырсыһы ла. "Ирәндек моңдары", "Гәлсәр һандуғас" республика конкурстары еңеүселәре Рөстәм Шаһыбалов, Руслан Сәйфетдиновтар һәм исемдәре халыҡ араһында билдәлелек яулаған Искәндәр Ғәзизов, Илүс Ғилманшин, Рөстәм Ғәлиевтарҙы оло сәхнәләргә сығарыуҙа күп көс һалған остаз да ул – Вәхит Хызыров. Өмөтлө йәш йырсылар Илдар Рәхимғолов менән Радмир Хәсәнов та Вәхит Ғәлибай улының студенттары.

"Вокал дәрестәрен биргән кеше үҙе лә йырларға тейеш, – тигән фекерҙә Башҡортостандың халыҡ артисы. – Ә беҙҙә сәхнәгә аяҡ баҫып та ҡарамаған кешеләр ҙә уҡыта. Шәкертең бит һиңә ышанырға, йырсы булараҡ та хөрмәт итергә тейеш. Уҡыусыларыңды тамашасынан ҡурҡмаҫҡа, сәхнәгә залдағы йырмоң һөйөүселәргә ҡарата оло һөйөү менән сығырға өйрәтергә кәрәк. Был өлкәлә өлгө булмаһаң, һиңә уҡыусың нисек ышанһын?! Үҙеңдең дә уҡыусыңа ышаныуың, уның мөмкинлектәрен күреп, үҫтерә белеүең мотлаҡ.

Был йәһәттән мин ғүмер буйы остазым Миләүшә Ғәлиевна Мортазинаға рәхмәтлемен. Һәр ваҡыт эшләп уҡыйым, төндәрен ҡатыныма бала ҡарашам. Йоҡом туймай килгән саҡтарҙа ла, хатта аҙаҡҡы курста имтихандарға бер аҙна ҡалғас, һуҡыр эсәккә операция яһатып, тейешле кимәлдә, бар мөмкинлегемә йырлай

алмағанда ла миңә ышанды, өмөтөмдө һүндермәне. "Ты обязательно выстрелишь!" ти ине. Институтты тамамлар алдынан мине Калининградта үтәсәк Халыҡ-ара конкурска әҙерләй башланы. Остазымдың ышанысы ла, Башҡортостан йырсылары исеменән ҡатнашыуым да, сығышым уңышлы килеп сыҡһа, киләсәк ижади тормошомда айырым роль уйнаясағын һәйбәт аңлауым да рухи көс бирҙе миңә. Етди әҙерләнеп сыктым юлға. Һөҙөмтәлә махсус призға лайыҡ булып, дипломант булып ҡайттым.

Ысынлап та, был уңышым төрлө илдәрҙә, юғары сәхнәләрҙә сығыш яһау өсөн юл асты. Донъяның йөҙҙән артыҡ ҡалаһында Башҡортостан йырсыһы булып ҡатнаштым.

Миләүшә Ғәлиевна әле лә дәрестәр бирә. Кем уға эләгә, шул бәхетле", – ти йырсы.

"Миләүшә Ғәлиевна Вәхиттең һәләтен генә түгел, иҫ киткес тырышлығын да күргәндер, – тип һүҙгә ҡушыла Мария Анатольевна, – Вәхит бер ваҡытта ла дәрескә һуңламаны, дәрес ҡалдырманы, имтихандарға бөтә күңелен һалып әҙерләнде, һәр көн яңы программа өҫтөндә эшләне. 5-6 айбер урынына дәүләт имтихандарына 30-50 әҫәр әҙерләп килә торғайны. Әле лә шулай: ниндәй генә эшкә тотонһа ла, ысын фанатик ул. Шуға ла ике уҡыу йортонда уҡытырға ла, филармонияла эшләргә лә, яңы йырҙар өйрәнергә лә, төрлө кимәлдәге сәхнәләрҙә сығыш яһарға ла өлгөрә".

## «ЙЫРСЫ ТАМАШАСЫҺЫН ХӨРМӘТ ИТЕРГӘ ТЕЙЕШ»

Ижад хаҡында һүҙ барғанда, моғайын, йырсының ҡарашын уның үҙ ауыҙынан ишетеү дөрөҫөрәк булыр, тип уға бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттем.

**- Вәхит, йыр һәм йырсылар хаҡында ҡайһы бер фекерҙәрегеҙ менән уртаҡлашһағыҙ ине.**

- Тамашасы йырсының аҡыл кимәлен, үҙҙәренә булған мөнәсәбәтен, уның кәйефен, һайлаған һөнәрен яратыу-яратмауын шул тиклем яҡшы тоя, был хәҡикәтте һанға һуҡмаусылар бик ныҡ яңылыша, – ти Вәхит Хызыров. – Тамашасы йырҙарыңды отоп алырға теләп, үҙеңде яҡын итеп, тағы ла тыңлағыһы килеп ҡайтырға тейеш. Йырҙары йырсының вокал мөмкинлектәрен генә түгел, ә уның үҙенең характеры, донъяға ҡарашы, фекерләү кеүәһе хаҡында ла күпте һөйләй. Ҡайһы бер йәш йырсыларҙы йәлләп тә ҡуям: ижадта иң үҫешә торған осорон белер-белмәҫ көйҙәренә үҙҙәре шиғырын да, музыкаһын да (әгәр шулай атап булһа) сығарған булып, бер миҙгеллек йыр башҡарып йөрөп, ғүмерҙәрен әрәм итәләр. Ә улары үҙҙәренән башҡа бер кемгә лә кәрәкмәй. Битараф, йәки йәнең көйөп тыңлайһың да, шунда уҡ онотола ла.

Халыҡ иҫ киткес аҡыллы бит ул. Бына "Ильяс" тигән халыҡ йырын ғына алайыҡ:

*Шул яҡтарға ҡарап бер йырланым,*
*Уйҙарымды алыҫҡа ебәреп,* –

тигән юлдар бар унда. Шул күренеш күҙ алдына килә. Ә һүҙ кеүәһе лайыҡлы көй менән дә ҡушылһа, ни тиклем тәьҫир итеүсе көс бит ул йыр. Сит илдәрҙә йөрөгәндә шуға иғтибар итәм: ысын йырға хатта тәржемә лә кәрәкмәй. Башҡорт йырын тыңлап сит ил тамашасылары: "Рәхмәт, һин ошо хаҡта йырланың бит", – тиҙәр. Яңылышмайҙар.

**- Ниндәй авторҙарҙың ижады күңелеңә айырыуса яҡын?**

- Үҙемдең фекерҙәрем-тойғоларым менән ауаздаш булмаһа, өйрәнеп тә тормайым. Үҙебеҙҙең классиктарҙан Заһир Исмәғилев, Хөсәйен Әхмәтовтарҙың вокал циклдарын һәр саҡ яратып башҡарҙым. Заһир ағайҙың "Салауат" операһынан Салауат куплеттарын, "Былбылым", "Тауҙар йыры" әҫәрҙәрен, Хөсәйен ағайҙың "Ҡояшҡа дан", "Төнгө Урал" йырҙарын хор һәм оркестрға ҡушылып әле лә күңел һалып йырлайым.

Татар классигы Рөстәм Яхиндың 20-25 йыры һәм романсы – репертуарымда. Бигерәк тә "Бик һағындым", "Серле күҙҙәр", "Онота алмайым" әҫәрҙәре күңелемдә гел сыңлап тора. Әле 13 телдә йырлайым. Башҡорт, татар телдәренән башҡа немец, украин, итальян телдәрендәге ариялар, йырҙар, романстарҙы башҡарырға яратам. Айырыуса Шуберттың романстары арбай. Замандаш композиторҙарҙан үҙебеҙҙең яҡташыбыҙ Нур Дауытовтың әҫәрҙәре зауығыма тап килә. Бигерәк тә уның шағирҙар Шәриф Бикҡол һәм Рауил Бикбаев шиғырҙарына ижад иткән йырҙарын халыҡ бик яратып ҡабул итә.

**- Вәхит, бөгөнгө көндә ниндәй хыялдар менән йәшәйһең?**

- Хыялдар күп инде ул. Яңыраҡ 45 йәш тулып үтте. Тиҫтәләрсә ижад емештәрем аудио, видео дискыларҙа яҙылмаған. Шуның хәстәрен күрергә күптән ваҡыт. Ғинуар айында "Нефтселәр" һарайында ижад кисәм үтмәксе. Йәнә төрлө фильмдарҙа төшкөм килә. Ғөмүмән, әлегә ижади мөмкинлектәрем асылып бөтмәгән һымаҡ.

**- Вәхит, һине аш-һыу оҫтаһы ла, тиҙәр...**

- Эйе, бешеренергә яратам. Ит, балыҡ аштарымды яҡындарым, дуҫтарым маҡтай-маҡтай ашай. Ҡамыр аштарын да әҙерләйем.

**- Нисек өйрәндең был эштәргә?**

- Атайым бешергән аштарҙы бөтәбеҙ ҙә ярата инек ғаиләлә. Студент саҡта башҡа

төшкән эш булғандыр инде. Хәҙер үҙем ҡыҙыҡып киттем. Рецептарын китаптарҙан, гастролдәрҙә сакта рестарандарҙан, хужабикәләрҙән алам. Ғөмүмән, аш-һыу әҙерләү минең өсөн шулай уҡ яратҡан ижад төрө. Ниҙер әҙерләгәндә иң мөһиме плита янынан китергә ярамай. Күңелең изгелекле, теләктәрең матур булырға тейеш. Һәләт тә кәрәктер, тип уйлайым. Ә инде өҫтәлгә ҡуйырға затлы һауыт-һаба, сәнске-ҡалаҡтар, матур өҫтәл япмаһы, ғөмүмән, шәп сервировка ризыҡтың йәмен һәм тәмен арттыра һымаҡ.

шоңҡар

## ЙЫРСЫ ТОРМОШОНАН БЕР МӘҘӘК ХӘЛ

Гәҙиттә, Вәхит Хыҙыровтың йырҙарын тамашасы һәр саҡ күтәреп ала. Ә инде бер киске концертта халыҡ айырыуса яратҡан йырҙарҙы башҡарғанғамы, бөтөнләй сәхнәнән төшөргә ирек бирмәй, ҡабат-ҡабат һорап йырлаталар уны. Ҡайтҡанында инде сәскәләргә күмеп оҙаталар. "Ну, малай, бәхетле йырсыһың да инде, ана бит нисек алҡышлайҙар үҙеңде!" – тип көнләшеү ҡатыш һоҡланып ҡала сәхнәләштәре лә. Артист кешегә күп кәрәкме, маҡтаныуҙарҙан күңеле тағы ла күтәрелеп, Өфөнөң Достоевский урамындағы "элитный" йорттоң тотош 9-сы ҡатын биләгән ҙур яңы фатирына осоп тигәндәй ҡайтып инһә, унда ҡатыны Машенька ҡосаҡ йәйеп ҡаршылап тора. "Әйҙә, тиҙерәк сәхнә кейемдәреңде алыштыр ҙа, китә һалайыҡ, әсәйем көтә. Ҡунаҡҡа саҡырҙы", – ти ул Вәхитте ҡабаландырып. Ниндәй кейәү ҡәйнәгә ҡунаҡҡа барыуҙан баш тартһын?! Етмәһә, концерт тип көн буйына йүнләп ашалмаған. Ҡәйнәһе Татьяна Александровна аш-һыуға оҫта инде ул. Ана, тәмле бәлеш еҫтәре бөтә подъезға таралған.

Бер аҙ салат-маҙар ҡапҡылап, һурпалы аш ашап алыуға көтөлгән ҙур бәлеш тә табынға ҡуйыла. Ҡәйнә кеше ҙур байрамға әҙерләнгәнме ни, иң матур күлдәген кейеп алған, йөҙөнән йылмайыу китмәй. Шул саҡ Вәхиттең күҙе бәлеш өҫтөнә ҡамыр менән яҙылған ике хәрефкә төшә лә йөрәге шатлығынан урынынан ҡубырҙай булып тибә башлай. Бына хужабикә ул хәрефтәргә ҡарап сукынып та ала. "Быныһы инде артығыраҡ та", – тип уйлай Вәхит "Х.В." тип яҙылған хәрефтәрҙән күҙен алмай. Исем-фамилиямдың тәүге хәрефтәрен ҡуйып бәлеш бешереүенә рәхмәт, әлбиттә, уға ҡарап сукынмаһа ла булыр ине. Минең мосолман икәнде онотоп киттеме икән ни?!"

Шулай булһа ла, нисек күңелен күрергә белә ҡәйнәһе берҙән-бер кейәүенең. Иә инде, кемдең башына килер ошондай уңышлы сюрприз менән ҡаршылау? Күңеле тулыуҙан Вәхит Хыҙыровтың күҙҙәренә йәш тула. Уларҙы күрһәтмәү өсөн ҡарашын түбә таҡтаһына текәп, ҡалтыранған йомшаҡ тауыш менән ҡәйнәһенә һүҙ ҡуша: "Миңә булған ихтирамың, иғтибарың өсөн үҙеңде Хоҙай Тәғәлә ололаһын, мамочкам. Бөгөнгө уңышлы сығышым хаҡында берәй артистан (Татьяна Александровна оҙаҡ йылдар филармонияла эшләп пенсияға сыға) ишетеп бешкән бәлеш өҫтөнә яҙҙыңмы хәрефтәрҙе?" – ти. Үҙе: "Оҙаҡламай, ҡәйнәмдең тыуған көнө. Мин дә бәлеш йәки торт өҫтөнә уның исем-фамилияһының баш хәрефтәрен яҙып, күстәнәскә алып килермен әле", – тип уйлап ҡуя.



Ҡәйнәһенең йөҙө үҙгәреп китә. Йылмайыуы юғала. "Ниндәй "Хыҙыров Вәхит" булһын, "Христос воскрес!" тигәнде аңлата был хәрефтәр", – ти ул кейәүенә ҡоро ғына. Аҙаҡ күмәкләшеп көләшеп алһалар ҙа, ҡайтҡанда Хыҙыровтар үпкәләшкән кешеләрҙәй һөйләшмәй генә ҡайта. Хәйер, кемгә һәм ни өсөн үпкәләргә тейеш һуң әле улар? Табын йәмле, бәлеш тәмле булды.

*Гөлфиә ЮНЫСОВА.*

# “УРАЛ БАТЫР” БАЛЕТ СӘХНӘҺЕНӘ КҮТӘРЕЛЕРМЕ?

Йәкшәмбе көндө билдәле балет артисы, йәш хореограф **РИНАТ АБУШАХМАНОВ** менән осрашырға тип Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрына килгәнмен. Вахтала иһә: “Абушахманов әле генә ҡайтып китте”, – тинеләр. Аптырашта ҡалдым. Әллә бер-беребеҙҙе аңламаныҡмы? Улай булыуы мөмкин түгел. Әңгәмәсемдең телефон аша йәкшәмбе кис театрға килерһегеҙ тиеүе, ә минең тәүҙә дүшәмбе осрашып булмаҫмы, тип ҡаршылыҡ белдерергә ниәтләүем, һәм шунда уҡ аҙнаның тәүге көнө артист халҡының берҙән-бер ялы икәнлеген хәтергә төшөрөп, әлеге уйымдан баш тартыуым күҙ алдынан үтте. Бәлки, был һөйләшеү уның хәтеренән сыҡҡандыр? Улай тиһәң, көн дә журналистар йонсотмайҙыр үҙен. Ғөмүмән, матбуғат баҫмалары, бигерәк тә башҡорт телендә нәшер ителеүсе гәзит-журналдар, балет сәнғәте хаҡында яҙмай ҙа тиерлек. Хәйер, үҙемдең ҡасан һуңғы тапҡыр балет спектакле ҡарауымды аныҡ ҡына әйтә алһамсы. Ысынлап та, балетты сәнғәттең иң ауыр һәм ғәжәйеп серле бер төрө тип ҡабул итергә күнеккәнбеҙ ҙә, үҙебеҙ шул мөғжизәне аңларға ла тырышмайбыҙ. Күңелемде ғәйеп тойғоһо биләп алды. Әллә репертуарҙағы барлыҡ спектаклдәр менән танышып сыҡҡандан һуң ғына осрашыуға килергәме? Шулай ҙа әңгәмәсемә шылтыратып аңлашыуҙы хуп күрҙем:





**- Ринат Әхтәм улы, хәйерле кис! Хәтерегеҙҙә булһа, һеҙҙең менән бөгөн театрҙа осрашырға һөйләшкәйнек. Әммә үҙегеҙ ҡайтып киткәнһегеҙ икән...**

- Һаумыһығыҙ! *(Аптыраулы тауыш менән)* Кем әйтте быны? Ҡайтманымсы. Көтөгөҙ. Беҙ бит ун минуттан биш тула тигәндә осрашырға тейеш инек. Һеҙҙең сәғәтегеҙ нисектер, әммә минеке әлегә 16. 45-те күрһәтә...

Бәйләнеш өҙөлдө. Пип-пип-пип...

Уҫал ғына һөйләшкән кеүек тойолһа ла, тауышы яғымлы яңғырай, етмәһә саф башҡортса ғына өндәшә. Сәғәтемә күҙ һалам. Ысынлап та, ваҡытынан алдараҡ килгәнмен икән. Әңгәмәсемдең репетициялары тамамланып, эргәләге кафеға ҡапҡылап сығырға ингән сағы булған, күрәһең. Ошолар хаҡында уйланып торғанда Ринат Абушахманов үҙе лә күренде. Һәм теүәл 16.50 сәғәттә беҙ театрҙың күркәм фойеһында әңгәмәне башлағайныҡ инде.

**- Ринат, һеҙҙең театраль ғаиләнән сығыуығыҙ мәғлүм. Атайығыҙ Әхтәм Әхәт улы һәм ағайығыҙ Айрат драма театрына хеҙмәт иткән кешеләр...**

- Ғәфү итегеҙ, зинһар, һеҙҙе бүлдерергә мәжбүрмен. Сәнки әсәйем хаҡында телгә алырға онотторғоҙ. Ул да шулай уҡ оҙаҡ йылдар Мәжит Ғафури исемендәге башҡорт дәүләт академия драма театрында режиссер ярҙамсыһы булып эшләне. Артабан ул саҡтағы Йәш тамашасы (хәҙерге Мостай Кәрим исемендәге милли йәштәр театры) театрында труппа мөдире йөгән тартты. Һәм "Нур" татар дәүләт драма театрында ошо уҡ вазифала эшләп хаҡлы ялға сыҡты.

**- Тимәк, образлы рәүештә әйткәндә, Абушахмановтарҙың һәммәһенә лә театр ене ҡағылған. Ә бына һеҙ шулай ҙа башҡа йүнәлеште һайлағанһығыҙ...**

- *(Ризаһыҙ ҡиәфәт менән)* Нисек инде башҡа? Шул уҡ сәнғәт, театр, сәхнә...

**- Эйе, ана шул театрҙың башҡа йүнәлешенә – драмаға түгел, ә балетҡа өҫтөнлөк биреүегеҙҙе күҙ уңында тотам. Нимә килтерҙе һеҙҙе бында?**

- Нимә килтерҙе тип... Иң тәүге сиратта – бейеү сәнғәтенә ҡарата ҡыҙыҡһыныуым. Балет артисы булыр өсөн бала саҡтан уҡ ошо йүнәлештә уҡый башлайһың бит. Беҙҙең эргәлә генә хореография училищеһы урынлашҡан. Атайымдың танышы – Ғәлиәскәр Камал исемендәге татар дәүләт драма театры актеры Рауил Шәрәфиевтың улы шул училищела уҡый ине. Башҡорт театры Ҡазанда гастролдә булғанда Рауил ағай атайым аша улына күстәнәс ебәргән. Һәм бер көндө беҙ атайым менән шуны тапшырырға тип хореография училищеһына юл тоттоҡ. Теге малай Вил исемле ине. Уның менән тиҙ генә уртаҡ тел табып дуҫлашып киттек. Ял көндәрендә беҙгә ҡунаҡҡа ла килә торғайны. Уҡыуы тураһында ылыҡтырырлыҡ итеп һөйләүе, бейеү алымдарын күрһәтеүе хәтерҙә ҡалған. Балет сәнғәтенә нәҡ шул ваҡытта ҡыҙығып киткәнмендер, күрәһең. Өсөнсө класты тамамлағас, атайым менән әсәйемә ошо училищеға барырға теләүем хаҡында хәбәр иттем. Өйҙәгеләр ҡаршы килмәне. Һәм бына егерме йылдан ашыу инде мин балетта. Бейемәгән партиялар ҙа ҡалманы шикелле.

**- Ошо театрға тәүге тапҡыр аяҡ баҫҡан көнөгөҙ хәтерегеҙҙәме?**

- Училищела белем алған йылдарҙа театр репертуарында Петр Ильич Чайковскийҙың Василий Вайнонен ҡуйылышындағы "Щелкунчик" балеты бар ине. Ул спектаклдә училище уҡыусылары уйнаны. Йәнә икенсе курста Мәскәүҙән Андрей Миланин килеп училище өсөн "Тылсымлы флейта" спектаклен сәхнәләштерҙе. Ҡыҫҡаһы, балет артисы сәхнәнең еҫен бала саҡтан уҡ тойорға тейеш. Сәнки һигеҙ йыл дауамында училищела белем алып, бер тапҡыр ҙа сәхнәгә сыҡмаһаң, театрға килеп эшләп китеүе ауыр буласаҡ.

**- Балетта партнерҙарҙың бер-береһенә өйрәнеп китеүе оҙаҡҡа һуҙыламы?**

- Юҡ. Сәнки училищела дуэт бейеүе тигән предмет бар. Партнерҙы нисек тоторға, ҡайһы тәңгәленән күтәрергә, уға нисегерәк ярҙам итергә кәрәклеге уҡыған саҡта уҡ өйрәтелә. Профессионалдарҙа белем алһаң, шулай уҡ бөтә тырышлығыңды һалып бейеү нескәлектәренә төшөнөргә ынтылһаң, эшкә килгәс, барыһы ла еңелерәк бирелә.

**- Ә һеҙҙе профессионалдар уҡыттымы?**

- Мин Юлай Ғиниәт улы Ушановта белем алдым. Төркөмдө Шамил Әхмәт улы Тереғолов сығарҙы. Һүҙ юҡ, улар заманында Хәләф Ғата улы Сәфиуллин ойошторған балет түңәрәгендә шөғөлләнеп, артабан Пермь хореография училищеһын тамамлап, бик күп театрҙарҙа спектаклдәр ҡуйған тәжрибәле педагогтар булды.

**- Бөгөн училищела балет сәнғәтен бөтә нескәлегендә белгән педагогтар бармы?**

- Үкенескә ҡаршы, училищела юғары белемле белгестәр юҡ кимәлендә. Һуңғы ваҡытта шуға иғтибар итәм: уҡыусылар дуэт бейеүе буйынса артта ҡала. Театрға килгән йәш бейеүсене хатта үрҙә атап үткән төшөнсәләргә, барлыҡ партияларға ҡабаттан өйрәтергә тура килә. Ғөмүмән, бөгөн театрҙа ла дуэт бейеүен өйрәтеүсе кеше юҡ. Эйе, бында бейеүсе, педагог һәм балетмейстер булараҡ хеҙмәт иткәнлектән, күп осраҡта мин ярҙамға киләм. Әммә, ғәҙәттә, йәштәр эш башлағас та, партияларын олораҡ педагогтар ярҙамында үҙләштерергә тырыша. Тик ундайҙарҙан беҙҙә ҡатын-ҡыҙҙар ғына. Ә гүзәл зат ир-атты бейеү нескәлектәренә төшөндөрә алмай. Әлеге мәлдә театрҙа бына ошондайыраҡ хәл ителмәгән мәсьәлә бар. Һәм был әлбиттә спектаклдәрҙең сифатында ла сағылыш тапмай ҡалмай. Быйылтырғы Нуриев фестиваленә Мәскәүҙән Кораблина Ольга Владимировна исемле тәнҡитсе саҡырылғайны. Гала-концертта Санкт-Петербургтағы Мариин, Мәскәүҙәге Ҙур театрҙан һәм беҙҙән парлап сығыш яһаусылар булды. Шунда әлеге балет белгесе: "Питерҙыҡылар бейеү мәҙәниәтен күрһәтте", – тип бик дөрөҫ билдәләп үтте. Ысынлап та, балетта тап шул әйбер булырға тейеш. Бейеү мәҙәниәте ул бик серле төшөнсә. Труппаны нисек шул кимәлгә еткерергә кәрәклеген барыһы ла аңлап етмәй. Быға өлгәшеү өсөн үҙ эшеңдең оҫтаһы булыу, профессиналлек талап ителә. Һәм, әлбиттә, театрҙа балет етәксеһенең булыуы мөһим. Эйе, бөгөн афишаларыбыҙҙа формаль етәксенең исеме күрһәтелгән. Әммә репертуар сәйәсәтен, балеттың йүнәлешен алып барыусы, труппалағы етешһеҙлектәрҙе кәметеү өҫтөндә эшләүсе кеше, йәғни баш балетмейстер юҡ беҙҙә. Шуға күрә бейеү мәҙәниәте лә аҡһай.

**- Хәҙер балет әкренләп спортҡа әйләнә бара, артистарға эмоционаллек етешмәй, улар техни-**



ка менән генә алдыра, тиҙәр. Ошо фекер менән килешәһегеҙме?

- Эйе, балетта спорт элементтары, акробатика, шулай уҡ бейеү акробатикаһы кеүек әйберҙәр килеп сыға башланы. Ҡайһы бер алымдарҙы спорттан алып балетка күсерәләр. Уныһы бар. Әммә балет спортка әүерелә тип әйтмәҫ инем. Ни сәбәпле бындай фекерҙәр килеп тыуа һуң? 40-60-сы йылдарҙа Ҙур театрҙа (Советтар Союзындағы иң тәүге театр) Ростислав Владимирович Захаров тигән балетмейстер әүҙем рәүештә спектаклдәр ҡуя. Ул "драмбалет" йүнәлешендә эшләй. Һөҙөмтәлә, шул осорҙа сәхнәләштерелгән балеттар һәм Ҙур театр үҙе лә ошо йүнәлешкә яҡынлаша. Бында эмоциялар алғы планға сыға, ә ҡатмарлы бейеү элементтары талап ителмәй. Шул уҡ ваҡытта Көнбайыш илдәре балетмейстерҙары яңы балет жанрҙарын (танцсимфония, сюжетһыҙ балеттар, модерн) үҫтереү өҫтөндә эшләй. Уларҙа эмоциялар, хатта сюжеттар ҙа юк. Һәм хореографияның, үҙенсәлекле фигураларҙың музыка менән тап килеше һөҙөмтәһендә шедеврҙар тыуа. Йәғни балет драматик элементтарҙы түгел, ә бейеүҙең үҙен бөтә нескәлегендә, матурлығында күрһәтеүгә өлгәшә. Һәм бөгөн, нигеҙҙә, ошо йүнәлешкә өҫтөнлөк бирелә. Ә инде ниндәйҙер тәрән кисерештәр, юғары маҡсаттар драма театрына ҡалырға тейештер тип уйлайым.

**- Һеҙгә нимә еңелерәк бирелә? Техникамы әллә эмоциялармы?**

- Техникаға өлгәшә алмаһам, минән балетмейстер сыкмаҫ ине. Ә инде кисерештәрҙе сағылдыра белеүгә килгәндә, театралдар ғаиләһендә тәрбиәләнгәнгәләр күрәһең, уныһына ла зарланмайым: актер партиялары уңышлы сыға. Бөгөнгә көндә ошо йүнәлештәге барлыҡ образдарҙы мин һынландырам. Һүҙ ыңғайында шул хакта ла әйтеп үтеү урынлы булыр. Училищела "Актер оҫталығы"н үҙләштерҙек. Ләкин Санкт-Петербургта хореографлыкка укый башлағас, ысынында ул дәрестәрҙең башҡасараҡ кимәлдә үтергә тейешлегенә төшөндөм. Бына бөгөнгә көндә Өфө сәнғәт академияһында балет педагогтары әҙерләйҙәр. "Актер оҫталығы" нескәлектәрен уларға драма театры белгесе төшөндөрә. Әммә ул педагог студенттарына балет образының нисек королоуын һис ҡасан да аңлатып бирә алмаясаҡ. Унда шөғөлләнеүсе буласаҡ педагогтар ҙа киләсәктә шул уҡ хатаны ҡабатлаясаҡ. Һәм артабан да беҙҙә бейеү мәҙәниәте тигән төшенсә булмаясаҡ. Бына шундай ҙур юғалтыу бар. Ә белгестәрҙе эҙләп карарға ниңәлер тырышмайбыҙ.

**- Эш дәүерендәге иң ауыр партияғыҙ?**

- Мин былай тип әйтер инем: күп кенә партиялар образдың ҡуйылышын төшөнөп бөтмәгән осраҡта ауыр бирелә. Физик йәһәттән түгел, ә ҡуйыусы-балетмейстер, режиссер булараҡ уларҙы аңлап етмәгәнлектән. Сөнки сығыш яһағанда йыш ҡына үҙ-үҙемә: "Ни өсөн бындай хәрәкәттәр яһайым әле? Был бейеү ошо рәүешле тамамланырға тейешме икән?" – тигәнерәк һорауҙар бирергә тура килә. Ә инде икеләнгән осраҡта артист образды ҡора алмай. Ул балетмейстер тарафынан һалынған образды дөрөҫ тип ҡабул итергә тейеш. Бына мин беҙҙең "Ромео һәм Джульетта"лағы Ромеоға, "Золушка"лағы Принцка, "Баҡсаһарай фонтаны"ндағы Гирейға ышанмайым. Сөнки хореографтың музыканы дөрөҫ аңламауын һәм шулай уҡ бейеүҙең һалынышында ла хата барлығын күрәм. Һөҙөмтәлә, шул етешһеҙлектәрҙе үҙең төҙәтергә тырышкан һымаҡ килеп сыға һәм шуға ла әлеге партиялар миңә ауыр бирелә.

**- Театрҙың бөгөнгө репертуарындағы милли әҫәрҙәр хаҡында һүҙ ҡуҙғытһаҡ...**

- Ә ундай әҫәр беҙҙә бармы һуң? Эйе, композиторға йәки авторға ҡарап ҡына спектаклде милли тип атап булһа, Ләйлә Исмәғилеваның "Арҡайым"ы, афишала йәнәһе лә Мостай Кәрим әҫәре буйынса тип билдәләнгән "Прометей"ҙы (Рөстәм Сабитов музыкаһы) шундай спектаклдәр иҫәбенә индерергә мөмкин. Әммә әле телгә алып үткән әйберҙәр беҙҙең хакта түгел. Башҡорт милләтенә бер ҡағылышы ла юҡ уларҙың. "Арҡайым" балеты шул биләмәлә йәшәп, берберенең ҡырып үлтереп бөткән ниндәйҙер ҡырағай ҡәүем тураһында бәйән итә. Етмәһә, ҡуйыусыһы ла, рәссамы ла, либретто авторы ла ситтән саҡырылған. "Прометей"ҙа ла Мостай Кәримдең әҫәре, уның драматик йөкмәткеһе, авторҙың идеялары юҡ.

**- Милли әҫәрҙе репертуарға алыу-алмауҙы кем хәл итә?**

- Бөгөнгө көндә милли спектакль тип иҫәпләнгән әйберҙәр Мәҙәниәт министрлығы кушыуы буйынса ҡуйыла. Дөрөҫөрәге, композитор билдәле бер темаға музыка яҙа ла министрлыкка мөрәжәғәт итә. Әҫәрҙең темаһы репертуарға индерергә яраҡлы тип табылһа, театрға ошоға бәйле

спектакль сәхнәләштерергә, тигән приказ килеп төшә һәм балет ҡуйыла. Ә ысынында иһә, спектаклде башынан алып аҙағына саҡлы режиссер-балетмейстер ҡорорға: кәрәкле әҫәр һайларға (уның эпос йәки легенда булыуы итимал), артабан шул әйберҙән либретто яҙырға, сценарий яҙырға һәм ошо эштәрҙе атҡарып сыҡҡандан һуң ғына композиторға заказ бирергә тейеш. Әлеге тәртип буйынса эшләнелһә, бәлки берәй милли балет спектакле барлыҡҡа килер ине беҙҙә. Ә инде әҙер музыкаға ситтән балетмейстерҙар саҡыртыуҙан милли әҫәр түгел, ниндәйҙер лего ҡоролмаһы яһала. Улай-былай ғына йыйыла ла, продукт әҙер. Миллиме? Ярай, милли. Һәм шуның менән эш тамам.

**- Санкт-Петербургтағы балет академияһында хореограф һөнәрен үҙләштергәнһегеҙ. Репертуарҙа һеҙҙең ҡуйылыштағы "Том Сойер" (П. Овсянников) һәм "La marionnette" (И. Стравинский) балеттары бар. Сираттағы Р. Нуриев исемендәге фестивалгә К. Караев музыкаһы, Низами поэмаһы буйынса "Ете гүзәл" тип исемләнгән әҫәр сәхнәләштерергә йыйыныуығыҙ ҙа мәғлүм. Ә бына йәш балетмейстер Ринат Абушахманов "ысын" милли башҡорт балетын ижад итәсәкме?**

- Әлбиттә, ундай уйҙар бар. Иң тәүге сиратта "Урал батыр"ҙы сәхнәләштереп ҡарарға ине. Был эпос минең ҡарамаҡҡа балет сәхнәһе өсөн һәйбәт әйбер. Уны драма театрында тормошҡа ашырыуы ауырыраҡ булырға тейеш тип уйлайым. Сөнки әҫәрҙәге образдар драматик түгел, ә күпкә визуаль, күҙ менән күрерлек. Бөгөнгө көндә әҫәр ҙә, балетмейстер ҙа, ошо темаға яҙырға теләгән таныш композиторҙарым да бар. Был хаҡта һөйләшеүҙәр ҙә булды. Ләкин ул спектаклдең ҡуйылыу-ҡуйылмауы тураһында әлегә ләм-мим. Сөнки был әйбер бер кемгә лә кәрәк түгел. Театр етәкселеге милли спектаклде тамашасы хушһынмаҫ тип ҡурҡа. Ә министрлыҡтан приказ килһен өсөн, унда кемдер йөрөргә, талап итергә тейеш. Минең талап итеү буйынса тәжрибәм юҡ. Ваҡытым да самалы. Әйе, был йәһәттән композиторҙарға еңелерәк, улар башта яҙа, һуңынан талап итә. Ҡыҫҡаһы, милли әҫәрҙәр сәхнәләштерергә теләк бар, әммә уларҙы тормошҡа ашырыу юлдары ҡатмарлы.

**- Аңлауымса, етешһеҙлектәр хаҡында тураһын әйтергә ҡурҡмайһығыҙ, ә үҙегеҙ тәнҡитте ҡабул итә beләһегеҙме?**

- Профессионалдар тәнҡитләй икән, ниңә ҡабул итмәҫкә? Итәм. Һәр ваҡытта ла түгел, әлбиттә. Улар менән килешмәгән осраҡтарым да булыуы ихтимал. Әммә тәнҡитселәрҙең кәңәшенән, баһаһынан башҡа ижад итеү, балетмейстер булараҡ үҫешеү мөмкин түгел. Шуға ла барлыҡ спектаклдәремде, яҙмаларҙы Санкт-Петербургтағы балетоведтарға ебәрәм. Сөнки беҙҙә ундай белгестәрҙе көндөҙ шәм яҡтыртып эҙләһәң дә табыу мөмкин түгел. Профессионалдар булмағас, билдәле инде, тәнкит тә юҡ. Һәм шуға күрә ошондай хәлгә килеп терәлгәнбеҙ ҙә инде. Әйе, Рудольф Нуриев исемендәге фестивалдәр үтеп тора, тәнкитселәр, махсус белгестәр саҡыртыла. Әммә уларҙы артистар менән аралаштырыу сараһын күрмәйҙәр, түңәрәк өҫтәлдәр ойошторолмай. Матбуғатта "фестиваль һәйбәт үтте, ҡотлайбыҙ, киләсәктә лә шулай булһын", кимәлендәге мәҡәләләр баҫтыралар ҙа шуның менән вәссәләм. *(Аптыраулы ҡиәфәт менән)* Ни өсөн улай эшләйҙәрҙер инде? Аңламаҫһың. Белгестәр бит беҙҙең етешһеҙлектәргә төртөп күрһәтеп, уларҙы булдырмауҙы талап итергә тейеш. Ә күҙҙе асырға кәрәк. Артабан да бер-беребеҙҙе данлашып, күкрәк һуғып, һуҡырҙарса ҡыланып йәшәүҙе дауам итһәк, Андерсендың билдәле бер әкиәтендәге теге "ялангас батша" хәленә тарыуыбыҙ ихтимал.

**- Балет артистары нисә йәштә сәхнәнән китергә тейеш?**

- Эш стажыбыҙ – 20 йыл. Был тәңгәлдәге иң ҙур проблема шунда. Хәйер, быны театр кимәлендә генә хәл итеп була торған мәсьәлә тип атап булмаҫ. Аңлайһығыҙҙыр, балет артисы коллективыбыҙҙың иң йәш ағзаһы. Әммә шуныһы ла бар: улар башҡаларға ҡарағанда иртәрәк хаҡлы ялға сыға. Һәм театрҙан киткәндә балет артисының маҡтаулы исеме лә, йәшәргә урыны ла булмай. Опера йырсылары иһә 50-60 йәштә лә сәхнәгә сыға, регалийҙар, грамоталар, премиялар, фатир талап итә ала. Ә утыҙ биш йәшендә сәхнә менән хушлашырға мәжбүр булған балет артисын фатир менән тәьмин итеү хаҡында бер кем уйламай ҙа. Шуға ла күп артистар беҙҙән китеп, Санкт-Петербург, Мәскәү, Екатеринбург театрҙарына эшкә урынлашыуҙы хуп күрә. Сөнки унда финанслау мәсьәләһе башҡасараҡ. Ә балет – ҡиммәтле сәнғәт. Һәм артистар быны яҡшы аңлай. Бөгөнгө көндә йәш балет артисының эш ха-



ҡы ете мең һум тәшкил итә. Аҙыҡ-түлек магазинындағы иғландарға иғтибар иткәнегеҙ бармы? "Кассир талап ителә, эш хаҡы 10 000 һумдан" тип яҙылған. Ә бит кассир булыр өсөн мәктәп белеме лә етә. Балет артисы шул ете меңен алыр өсөн һигеҙ йыл уҡырға тейеш. Юғары белемгә эйә булырға теләһә, йәнә биш йыл талап ителә. 13 йыл белем тауына үрләгәндән һуң ғына уға кассирҙың эш хаҡын түләй башлаясаҡтар. Бына шундай ғәжәп күренеш. Ә уҡыу дәүерен кәметеп булмай. Сөнки өс йылда балет артисы әҙерләү мөмкин түгел.

**- Ә һеҙҙең халыҡ-ара карьера хаҡында уйланғанығыҙ булманымы?**

- Ни эшләп булмаһын? Әле лә уйлайым мин. Балет артисы сифатында түгел әлбиттә, ҡуйыусы-хореограф булараҡ. Ғөмүмән, миңә, балетмейстерға үҫешер өсөн төрлө театрҙарҙың репертуарҙарын ҡарау, тәжрибә туплау талап ителә. Шуға ла ниндәй ҙә булһа сит театрға барып, спектаклдәр сәхнәләштерергә тигән маҡсатым бар. Үҙебеҙҙең театрҙа мин бит балетмейстер булараҡ контракт нигеҙендә генә эшләйем. Йәғни һәр бер спектакль өсөн айырым килешеү төҙөлә. Әле бына өсөнсөһөнә ҡул ҡуйҙырҙым. Ә башҡа килешеүҙәр булмаһа, мин эшһеҙ ҡалам. Шуға күрә үҙемә эш эҙләйәсәкмен. *(Ихлас йылмайып)* Ғәфү итегеҙ, әңгәмә тамамланманымы әле?

**- Юҡ. Һеҙ бит үҙегеҙ хаҡында бер ни ҙә һөйләмәнегеҙ, һүҙ балет тураһында ғына барҙы...**

- *(Йылмайып)* Балетмейстер менән тағы ла нимә хаҡында әңгәмәләшергә һуң? Мин ғөмүмән, үҙем хаҡында һөйләргә яратмайым.

**- Юл аша ғына Театр эшмәкәрҙәре союзы, унан ары Башҡорт дәүләт академия драма театры урынлашҡан. Береһендә – атайығыҙ, икенсеһендә ағайығыҙ хеҙмәт итә. Бер-берегеҙгә йөрешәһегеҙме?**

- *(Йылмайып)* Был урам бит "Театральная" тип атала. Өс театр кешеһенең урыны ошо тирәлә инде. Йөрөшмәгән ҡайҙа? Атайым менән әсәйем ике театрҙағы бер спектаклде лә ҡалдырмай. Мин ағайымдың премьераларына барып торам, ағайым минекеләргә килә. Уның менән бер-беребеҙҙең спектаклдәребеҙ хаҡында йыш ҡына фекер ҙә алышабыҙ. *(Йәнә йылмайып, шаярыу ҡатыш)* Ул миңә балет ҡуйырға, мин уға драма спектакле сәхнәләштерергә өйрәтәм. Шуныһы ҡыҙыҡ, икебеҙ ике йүнәлештә эшләһәк тә бер төрлө фекерләйбеҙ.

**- Буш ваҡытығыҙ ҡаламы?**

- Ундай бәхет эләкһә, рәхәтләнеп ял итәм.

**- Нисегерәк итеп?**

- Ҡайһы берҙә ятам да йоклайым. Йәнә ноталар, музыка тыңлау ҙа минең өсөн үҙе бер күңел асыу сараһы. Тыныс ҡына ваҡыт үткәрергә яратам мин. Тәбиғәттә ял итеү, балыҡ ҡармаҡлау оҡшай.

**- Сәхнәлә йәрәхәттәр алған осраҡтарығыҙ буламы?**

- Беҙҙең хаҡта шундай бер көләмәс бар: әгәр ҙә балет артисы йоконан уянған һәм уның бер ере лә ауыртмай икән, тимәк, ул үлгән. *(Көлөшәбеҙ һәм ул етди ҡиәфәт менән)* Йәрәхәтһеҙ бейеүсе булмай инде ул. Әммә уларҙы кәметергә мөмкин. Бының өсөн дөрөҫ шөғөлләнеү талап ителә. Был мәсьәләне педагогтар күҙ уңында тоторға тейеш. Йәрәхәттәр йөкләмәләрҙең артыҡ күп булыуынан, йә күнекмәләрҙе дөрөҫ эшләмәгәнлектән килеп сыға.

**- Балаларығыҙҙы балет мәктәбенә бирер инегеҙме?**

- Тәбиғәт тарафынан ошо йүнәлештә эшләр өсөн мул ғына һәләт һалынһа, бәлки, уйлап ҡарар инем. Кире осраҡта юҡтыр. Ә былай, әлегә өйләнмәгәнмен.

**- Идеалығыҙҙағы ҡатын-ҡыҙ образы?**

- Ҡатын-ҡыҙ ысын мәғәнәһендә ҡатын-ҡыҙ булырға тейеш. Ир-ат та шулай уҡ ирлек сифаттары хаҡында онотмаһын. Бөгөнгө тиң хоҡуҡлылыҡты өнәп етмәйем. Бәлки, тарихи кинолар, китаптар йоғонтоһонда тәрбиәләнгәнгәлер, миңә, "золотой век нашего дворянства" тиҙәр бит әле, ана шул осор яҡынырак.

**- Ә театралдар ғаиләһендә кем баш?**

- Атай – баш, әсәй – муйын. Әммә был мәсьәләгә нисек ҡарайһың бит әле. *(Йылмайып, шаярыу ҡатыш)* Башты муйын хәрәкәт иттерәме, әллә баш үҙенән-үҙе бороламы, тигәндәй.

**- "Шоңҡар"ҙы башлыса йәштәр алдыра. Уларға ниндәй теләктәрегеҙ булыр?**

- Был тормошта һәр кем үҙ урынын табырға һәм белергә тейеш, тип уйлайым мин. Күңел ҡушыуы буйынса ниндәйҙер һөнәр һайлағанһығыҙ икән, шул өлкәлә максималь рәүештә ҙур профессионал булырға тырышығыҙ. Әйткәндәй, мин үҙем дә ошо хаҡта хыялланам.

**- Ә Ринат Абушахманов тормошта үҙ урынын тапҡанмы?**

- *(Ихлас йылмайып)* Минең тормошом тамамланмағандыр бит әле. Шуға ла ниндәйҙер йомғаҡтар яһарға иртәлер тип уйлайым. Эйе, бөгөнгө көндә мин үҙ һөнәремдә таптым һәм ошо йүнәлештә бөтә күңелемде һалып ижад итәм. Ә киләсәк хаҡында әйтә алмайым.

- *(Сәғәтемә күҙ һалам)* **Илле минут самаһы һөйләшкәнбеҙ. Күп тә түгел һымаҡ. Әммә балет сәнғәте һәм ундағы көнүҙәк мәсьәләләр хаҡында ни саҡлы мәғлүмәт бирҙегеҙ. Ихлас әңгәмәгеҙ өсөн рәхмәт һеҙгә!**

- Үҙегеҙгә рәхмәт! Беҙҙең спектаклдәргә йөрөгөҙ!

**- Мотлаҡ. Һау булығыҙ!**

*Гөлшат ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.*

# «ДОНДУРЕЙ МАНИФЕСЫ» НИ ҺӨЙЛӘЙ?




**ҮҘӘК ҺӘМ БӨТӘ ИЛ БУЙЛАП ТАРАЛҒАН ГАЗЕТАЛАРҘЫ АҠТАРҒАНДА ҠАЙҺЫ САҠТА ҠЫҘЫҠЛЫ МӘҠӘЛӘЛӘР ТАП ИТӘҺЕҢ. УҠЫЙҺЫҢ, УЙЛАНЫП ЙӨРӨЙҺӨҢ, ТЫНЫСЛАНАҺЫҢ... ТИК ЯҢЫНАН ШУЛ МӘҠӘЛӘГӘ БӘЙЛЕ БЕРӘЙ НӘМӘ ПӘЙҘӘ БУЛҺА, ҠАБАТ УЙЛАНАҺЫҢ... ОШОЛОР АХЫРЫ, «ҺҮҘ КӨСӨ» ТИГӘНДӘРЕ.**

**«КОМСОМОЛЬСКАЯ ПРАВДА» ГАЗЕТАҺЫНДА КИНОКҮҘӘТЕҮСЕ СТАС ТЫРКИНДЫҢ СОЦИОЛОГ, «ИСКУССТВО КИНО» ЖУРНАЛЫНЫҢ БАШ МӨХӘРРИРЕ, РӘСӘЙ ПРЕЗИДЕНТЫ ЭРГӘҺЕНДӘГЕ МӘҘӘНИӘТ БУЙЫНСА СОВЕТ АҒЗАҺЫ ДАНИИЛ ДОНДУРЕЙ МЕНӘН ӘҢГӘМӘҺЕ ДОНЪЯ КҮРГӘЙНЕ. БИТАРАФ ҠАЛА АЛМАНЫҠ.**

**ДАНИИЛ ДОНДУРЕЙ:** «Телевидение менән сағыштырғанда, милиция һәм махсус хеҙмәттәр – балалар баҡсаһы».

## ИНЦЕСТ ҺӘМ МОДЕРНИЗАЦИЯ

*– Бөгөнгә көндә халыкта "Дондурей манифесы" тип йөрөтөлгән, "Кешене оноттоғоҙ!" исеме аҫтында баҫылған һәм Пермь иктисад форумында яңғыраған докладығыҙҙа мәҙәниәт – ул генийҙар, борондан һаҡланып ҡалған китапханалар һәм һәйкәлдәр генә түгел, шулай уҡ ғүмеребеҙҙе тәшкил иткән, шул иҫәптән Рәсәй өсөн традицион булған юл тығындары ла тип билдәләгәйнегеҙ. Был һүҙҙәрҙә хаҡлыҡ бар һымаҡ. Уйлаһаң, ул да бит беҙҙең мәҙәнилек йә мәҙәниһеҙлек күрһәткесе.*

– Әлбиттә. Юлдарҙың сифаты – ул һәр мәҙәниәттең мөһим өлөштәренең береһе. Мин яҙған текста шундай һүҙҙәр бар: "Нисек уйлайбыҙ, шулай йәшәйбеҙ". Рәсәйҙең "модернизация"ға табан юлында төп ҡаршылыҡтар, күптәр күҙ алдарына килтергәнсә, чиновниктар, ярлылыҡ йә коррупция түгел. Төп бәлә – тиҫтәләрсә миллион ватандашыбыҙҙың башында "ултырған" ҡаршылыҡтар. Уларҙы йырып сығыу бик ауыр. Айырыуса, маташып та ҡарамаһаң.

"Паттерндар" тигән төшөнсә бар, үҙ-үҙеңде тотоу тәрҙәре йәғни. Беҙҙә улар йыш ситкә тайпыла, ғөмүмән, әхлаҡи критерийҙар ҙа. RAI-3 итальян телеканалы "Россия" кана-

лында сыҡҡан “Специальный корреспондент” тапшырыуының алты секундын (нисек уҡытыусының уҡыусы малайҙарҙың яланғас осаһына һуҡҡанын) үҙендә күрһәткән. Был хаҡта уҡып белеүемсә, ошонан һуң итальян каналында күптәрҙе эшенән ҡыуғандар. Рәсәйҙә гәҙәти булған телесюжетты ҡабатлап күрһәткәндәре өсөн. Ә беҙҙә берәү булһа ла ҡыбырлаһасы?! Илебеҙ Хөкүмәте инновацияларға тип бер ярым триллион һум бүлгән көндә, мәҫәлән, “Пусть говорят” тапшырыуында оҙаҡ ваҡыт дауамында ҡыҙы менән “ғүмер” иткән атай тураһында бәхәс ҡорҙолар.

***– Һеҙҙеңсә, был турала бөтөнләй һөйләшергә кәрәкмәйме?***

– Бөтә сиктәрҙе сыйып ташлаған, әхлаҡһыҙ ҡылыҡтар бар. Уларҙы эфирға сығарырға ярамай. Мәҙәниәт – ул бит рөхсәттәр һәм тыйыуҙар системаһы. Кешелек инцест проблемаһын әллә нисә мең йыл элек үк хәл иткән: уны юкка сығыуға килтереүсе иң насар енәйәт итеп билдәләгән.

***– Шулай ҙа, телеэфирҙың быны́ң ише күренештәре үҙебеҙҙе аңлау өсөн файҙалы түгелме икән? Иртән газетала инновацион йәмғиәт тураһында мәғлүмәт алған кеше кисен телевизор тоҡандыра ла, уға ниндәй йәмғиәтте үҙгәртергә, модернизациялау кәрәклегенә төшенә. Тормош ысынбарлығы, йәғни.***

– Федераль канал ил президентының төп идеяларынан аҫтыртын ғына көлә тип әйтмәксеһегеҙме? Ул бит йыл буйы модернизация талап ителеүе, якшы, сифатлы белем биреү, фәнгә инвестициялар тураһында тылкый, “Сколково”ны алға этәрә. Беҙгә, Марк Шагалдың һүрәттәрендәге кеүек, осоп китеү кәрәклеге тураһында хыял итә. Шул уҡ “Время” тапшырыуы дрессировщигын ашаған арыҫлан хаҡында мәғлүмәт менән башланып, шуның менән тамамланып ҡуйғанда нисек осмаҡ кәрәк?! Уртаһында күңелһеҙ, ялҡыткыс хәл кеүек кенә ил һәм донъя тормошо тураһында сюжеттар бирелә. Иртән эшкә барғас кешеләр нимә тураһында фекер уртаклаша? Әлбиттә, кисәге йырткыс арыҫлан һәм Краснодар крайы ауылдарының береһендә үлтерелгән ун ике кеше тураһында. Башка нәмәне иҫләмәйәсәктәр ҙә!



***– Ысынында Интернетта “Беҙ телевизорҙан аңлы рәүештә баш тарттыҡ” тигән йәштәрҙе даими тап итәм. Кемдәрҙер ҡыҙыҡһындырған тапшырыуҙарын Интернет аша ҡарай. Әлбиттә, аҡыллы теленачальниктар был “сифатлы” аудиторияны ла үҙ ҡулдарына электереү тураһында хыял итә. Шул рәүешле Гай Германиканың “Школа” исемле телесериалы барлыкка килде. Уны мин был кино һәм телемиҙгелдең төп ваҡиғаһы тип иҫәпләйем. “Доктор Хаус”, “Остаться в живых”тың бер серияһын да күрмәнем. Әммә, илдән ситкә сыҡҡанда, “Школа”нан тороп ҡалмаҫ өсөн видеомагнитофонды яҙҙырыуға ҡуйып китә инем.***

– Беренсенән, аралашыу даирәгеҙ ярайһы элитар. Социолог буларак шуны әйтә алам: телевизорҙы халыктың 3-тән алып 8 процентҡа тиклеме генә ҡарамай. Дөрөҫөрәге, был төркөм “ҡумтаны” аҙнаһына биш тапкырҙан һирәгерәк тоҡандыра. Ә 92 проценты йышырак ҡарай. Баяғы, “ҡумта”нан баш тарткан тип әйткән йәш егеттең әсәһе йә өләсәһе уны үҙе өсөн дә, улы һәм ейәне өсөн дә ҡарай. Ҡот оскос серҙе асам: көн дә эшләп торған телевизор алдында 102-105 миллион кеше ултыра. Был бөтә тәр художество мәҙәниәтен берләштергән хәлдә лә, бер йыл эсендәге ҡулланыусылар һаны буйынса күберәк!

## ТЕЛЕВИЗОРҺЫҘ, ТИМӘК ҠАРАҢҒЫЛЫҠТА

***– Докладығыҙҙа “бөгөнгө көндә телевидение етештергән продукцияны ҡарау йоконан һуң беренсе урынды биләй” тиелгән...***

– Әле булһа Борис Ельциндың әйткәндәрен иҫләйем, ул телевидениены көс ведомствоһы менән сағыштырғайны. Оборона министрлығы, йәшерен хеҙмәттәр, милиция, Федераль хәүефһеҙлек хеҙмәттәрен көнөбеҙҙең халыҡ, тышкы донъя менән эш итеүҙең төп ведомствоһы булған телевидение менән сағыштырғанда – барыһы ла балалар баҡсаһы.

2010 йылдың 1 ғинуарына ҡарата, беҙҙең халыҡ, Интернет менән сағыштырғанда, телевизор алдында ваҡытын 24 тапкырға күберәк уҙғара. Шуға күрә телевизион эшкыуарлығы етди көстәр һағы аҫтында. Телевидение, йәғни юғары көс ведомствоһы менән эшләгәндәрен, шөкөр, илебеҙҙең стратегик маҡсаттар өсөн ҡаралған ғәскәрҙәрҙә ҡулланырға баштары

етмәне. Ракета ғәскәрҙәрен хужалык иҫәбенә күсермәнеләр, сөнки ракеталарҙы шәхси кешеләргә йә төркөмдәргә байыу өсөн биреп тороп булмай бит инде. Ә телевидениены, бәхеткә, булған икән. Телевидениеның аҡыллы, дөрөҫ иктисад проблемаһы – ил үҫеше өсөн иң мөһимдәрҙең береһе. Дөйөм милләт телеэфирына сығарылған рекламаларҙан алынған килем – 4 миллиард доллар, йәғни эске тулайым продукцияның (0,3%) дөйөм иҫәбендә тинлек кенә. Әммә һеҙ был өлкә менән ҡыҙыкһынған өс аналитикты ла таба алмаясаҡһығыҙ. Бик етди эш ул, һәм халык араһына сығарып хәл итмәүең хәйерле.

*– "Россия" телеканалы, белеүебеҙсә, дәүләттеке шикелле. Исмаһам, ул башка телеканалдарҙан айырылып торған контент булдыра алмаймы?*

– Ҡаҙна тарафынан бүленгән аҡсаның күләмен реклама биреү юлы аша табылғаны менән сағыштырып булмай. Донъяла әллә күпме телевизион алдау ысулдары бар. Мәҫәлән, телевизионщиктар: "Әгәр енәйәтселәр тураһында әҙерләгән тапшырыуыбыҙ окшамаһа, телевизорҙы һүндерегеҙ!" – тип әйтергә ярата. Ошо һүҙҙәр менән улар юғары етәкселеккә, сәйәси элиталарға, юғары укыу йорттары студенттарына килеп инә лә: "Кешеләрҙең һайлау мөмкинлеге бар!" – ти. Ысынында был ҡоро демагогия. Заман кешеһе телевизорҙы ла, Интернетты ла һүндереп ҡуя алмай. 100 осрактың 57-һендә кеше өйөнә килеп инеү менән иң тәүҙә телевизорын ҡабыҙа. Ул беренсе мохтажлык. Яктылык ҡына телевизорҙан "мөһимерәк". Ризыҡ, һыу, ҡатының менән аралашыу, енси мөнәсәбәттәр – барыһы ла икенсе, өсөнсө, бишенсе сиратта... Кешеләрҙең телевизорҙы һүндереп ҡуйырға хәленән килмәй. Бөгөн улар, телевизорҙың һүнек тороуын йәшәүҙән, яктылыктан һәм һулар һауанан мәхрүм ҡалыуға тиңләй. Уны ҡараңғылык менән генә сағыштырырға мөмкин. Телевизорһыҙ, тимәк, һин канализация соҡоронда.

## "МОЛОТОВ КОКТЕЙЛЕ"

*– Бөгөн телевидениела барған күренештәрҙе һеҙ "аҫҡа һөйрәүсе селекция", "илдең кешелек капиталына ҡайтарғыһыҙ, баһалап бөткөһөҙ зыян килтереүсе, тормоштоң иң бысраҡ өлөштәрен күрһәтеү аша аҡса эшләү" тип атайһығыҙ. Һорау тыуа... Илебеҙ телетапшырыуҙарында барған, бысраҡ кейемдәр араһында соҡонған тапшырыуҙарҙың күпселеге – сит илдәрҙә сыҡкандарының калькалары ғына. Беҙҙең телевизионщиктар үҙҙәре бер ниндәй тапшырыу уйлап тапмай тиерлек. Шулай ҙа, мәҫәлән, Америка йә Италия халыҡтарына "ҡайтарғыһыҙ зыян" килтерелеүе тураһында һүҙ сыҡканы юк. Әйткәндәй, Италия телевидениеһын ҡарау бөтөнләй мөмкин түгел. Сөнки ул өҙлөкһөҙ матурлык конкурстарынан ғибәрәт, беҙҙәге фигуралы шыуыу кеүек. Американыкы ҡыҙыҡлырак, әммә унда ла "хужабикәләр өсөн" тапшырыуҙар етерлек.*

– Беҙ, һәр ваҡыттағыса, сиктән-сиккә бәрелеп-һуғылабыҙ. Барыһы ла сама белеүгә ҡайтып кала. Беҙҙең һәр илдән ниндәйҙер әшәкене алырға башыбыҙ етә. Һөҙөмтәлә, рустарҙың "Молотов коктейле" барлыкка килә. "Культура" каналынан тыш, беҙҙә күңелде лә күтәреп, аҫтыртын ғына ниндәйҙер файҙалы нәмәгә өйрәтеүсе каналдар бик аҙ. Дуҫыңа йә эш менән тәьмин итеүсеңә хыянат ҡылмай йәшәп буламы? Мәктәп дуҫыңдың миллионер булып китеүенә, ә һинең нисек барһың – шул хәлдә ҡалыуыңа нисек ҡарарға? Ошоноң ише һорауҙарҙың береһе өҫтөндә лә кешесә бәхәс ҡоролғаны юк. Киреһенсә, якынса һуңғы 15 йылда телевидение халыкты үҙ тукландырыусыларын хөрмәт итмәҫкә өйрәтә. Әйтерһең дә, шуны аңлатырға тырышалар: ирек, шәхси милек, күп партиялы система кеүек күңелһеҙ күренештәрҙән төҙөлгән дәүләттә йәшәүебеҙ тураһында яҙылған Конституцияға иғтибар итмәгеҙ.

Рәсәйҙә үткән бөтөн социологик һорау алыуҙарҙың һөҙөмтәләре шуны һөйләй: халыктың күпселек өлөшө капитализмға нәфрәт менән ҡарай. Ә һорау алыуҙа ҡатнашыусыларҙың һәр дүртәүһенең өсәүһе күптән шәхси эшҡыуар ойошмаһында эшләй. Донъяның икенсе берәй илендә ялланған хеҙмәткәрҙең эш урынына: "Мине һәм балаларымды туйындырған әҙәмде шул тиклем күрә алмайым!" – тип мыңғырҙап китеп барыуын күҙ алдына килтерә алаһығыҙмы?

*(ҡыҫҡартып алынды)*
*Р. СӘЛИМОВ тәржемәһе.*



# УҢЫШҠА ӨЛГӘШЕҮ СЕРҘӘРЕ

**Кеше яҙмыштары төрлө. Берәүҙәр баш әйләндерерлек уңыштарға өлгәшеп, бәхет күгенең ете ҡатын да иңләһә, икенселәр, Алланың рәхимһеҙлегенә туҡтауһыҙ зарланып, тормош төпкөлөндә үҙенсә ҡайнай бирә. Ысынлап та, кемгәләр бары ла еңел бирелә, ә кемгәләр гел абынырға, туҡтауһыҙ ҡаршылыҡтар менән көрәшергә тура килә. Быны кеше тәҡдиргә япһара. Әммә һеҙ – үҙ яҙмышығыҙҙың хужаһы һәм оҫтаһы. Уны нисек теләйһегеҙ, шулай үҙгәртә алаһығыҙ. Яҙмышығыҙ биттәре матур хәтирәләр, күңелле хәл-ваҡиғалар менән тулһын, уй-хыялдарығыҙ бойомға ашһын тиһәгеҙ, яҙмыш дилбегәһен үҙ ҡулығыҙға алырға тура киләсәк. Ҡытайҙарҙа "Тауҙы юлынан алып ташларға теләгән кеше, эште бәләкәй таштарҙан башлай" тигән бик аҡыллы әйтем бар. Беҙ ҙә яҙмышты яҡшы яҡҡа үҙгәртеүҙе уй-хыялдарҙы тәртипкә килтереүҙән башларға кәрәк, тигән фекерҙәбеҙ. Һәм һеҙгә, ҡәҙерле уҡыусылар, уңышлы булыу серҙәрен махсус сығанаҡтарҙан беҙҙең менән бергә үҙләштерергә тәҡдим итәбеҙ. Һайлағыҙ: үҙ яҙмышығыҙҙың ҡоломо һеҙ, әллә хужаһымы?!**

Һуңғы йылдарҙа телевидение тапшырыуҙарында, киң мәғлүмәт сараларында бәхетле булыу серҙәре тураһында бик күп һөйләйҙәр. Хатта был турала "Сер" тип аталған фәнни-популяр фильм да төшөрөлгән. Китап магазиндарында Наталия Правдина, Дейл Карнеги һәм башҡа авторҙарҙың уңышҡа өлгәшеү нескәлектәренә өйрәтеүсе психология китаптары иң популярҙарҙан иҫәпләнә. Уларҙың ниндәйе генә юҡ! "Мин аҡса йәлеп итәм", "Минең балам – буласаҡ миллионер", "Мин – мөхәббәт һәм бәхет алиһәһе", "Нисек бай булырға?", "Байлыҡ минең ҡулымда" һ.б. Халыҡ араһында ла был "мөғжизәле" китаптарҙың әһәмиәте, ярҙамы ҙур тип әйтә алам. Сөнки күп кенә таныштарымдан ошондайыраҡ фекерҙәр ишетергә тура килде:

*Урта йәштәрҙәге ханым ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡ арҡаһында яуаплы вазифаһынан бушатылғас, деп-*



*рессияға бирелә. Шул сакта осраҡлы рәүештә ҡулына Н. Правдинаның китабы килеп эләгә. "Бына шунда килде инде миңә йән тыныслығы. Үҙемде тик позитив уйҙар уйларға мәжбүр иттем. Яңынан һәйбәт эш табасағыма ышана башланым. Депрессиянан ҡотолдом. Һәм, күп тә үтмәй, тәүгеһенән дә аҡсалыраҡ, ә иң мөһиме, күңелемә яҡын булған эш таптым", – тип һөйләне ул.*

*Икенсе бер танышым төҫкә-башка сибәр, һөнәрле-белемле булыуына ҡарамаҫтан, һаман ғаилә ҡора алмай йөрөй ине. Бер-ике йыл самаһы бәйләнеш өҙөлөп торғандан һуң, уның уңышлы ғына кейәүгә сығып, фатирлы ла булып, хәҙер инде бәпәй үҫтереүҙәрен ишетеп ҡыуандыҡ. Бер осратҡанда, нисек улай тиҙ арала тормошланып киттең әле, тигәнгә серле генә йылмайып: "Наталия Правдинаның китабын бүләк итермен әле. Хикмәт тап шунда", – тигәйне.*

Ә был китаптарҙың төп асылы шунда: беҙҙе уратып алған уңышһыҙлыҡтар, бәләләр өсөн тик үҙебеҙ генә ғәйепле, йәғни сәбәпте башҡа берәүҙән түгел, фәҡәт үҙебеҙҙән генә эҙләргә тейешбеҙ. Бәхетте һауанан көтөп ятмай, үҙебеҙ уға ынтылырға, етешһеҙлектәребеҙ өҫтөндә эшләргә, камиллашырға, иң мөһиме, көсөбеҙгә ышанырға кәрәк. Ҡайһы берәүҙәр бәлки был фекер менән килешмәҫ. Әммә үҙеңә ышанмаһаң, туктауһыҙ икеләнһәң, һин нисек бәхеткә өлгәшә алаһың? Уның китаптарының бер нисәүһен дөйөмләштереп, ҡаймағын айырып, ҡайһы бер кәңәштәрен һеҙгә лә еткерергә булдыҡ.

## БӘХЕТЛЕ БУЛЫУ СЕРҘӘРЕ

Иң тәүге сиратта кеше үҙен тик позитив уйҙарға көйләргә өйрәнергә тейеш. Сөнки беҙҙең уйҙар йыһан менән бик тығыҙ бәйләнештә. Улар йыһанға барып тоташып, киләсәгебеҙҙе программалаштыра һәм материаллашып тормошҡа кире ҡайта. Яҡшы теләктәр теләп, үҙебеҙҙе ыңғай уйҙарға ғына көйләп йөрөһәк, ғаләм дә беҙгә яраҡлаша. Ерҙең тартыу көсө законы (закон притяжения) туктауһыҙ эшләп тора икәнен хәтерҙән сығармайыҡ. Үҙегеҙҙе донъяла иң бәхетле кеше тип хис итһәгеҙ, һеҙҙең тирәләй йылы атмосфера барлыҡҡа килә. Һеҙҙе тик ыңғай күренештәр, яҡшы, уңышлы кешеләр генә уратып ала башлай. Ҡайһы берәүҙәр үҙҙәрен солғап алған уңышһыҙлыҡтар, асыуҙарын килтергән хәлваҡиғалар, финанс проблемалары, көндәлек мәшәҡәттәр тураһында ғына уйлап, көйөнөп, тормошонан ҡәнәғәт булмай йөрөй икән, һөҙөмтәлә йыһан шундай уҡ мәшәҡәттәрҙе тағы ла өҫтәп кенә тора. Һәм кеше туктауһыҙ проблемалары менән әйләнеп торған тәгәрмәс эсендә ҡала. Иң мөһиме, күңелһеҙ, ҡурҡыныс күренештәр тураһында уйлауҙан бөтөнләй тыйылығыҙ. **Иҫегеҙҙә тотоғоҙ! ПОЗИТИВ УЙҘАР НЕГАТИВТАРЫНАН ЙӨҘ ТАПҠЫР КӨСЛӨРӘК.** Берәй эштең аҙағы хәйерле килеп сығырына ышанмай йөрөйһөң икән, космосҡа был турала сигнал ебәрәһең, уны йыһан мотлаҡ тотоп аласаҡ һәм шундай уҡ позиция менән яуап ҡайтарасаҡ. Һөҙөмтәлә, һаулығына туктауһыҙ зарланыусылар йыш сирләй, аҡса етмәүенә борсолоусылар аҡсаһыҙлыҡтан интегә. Ундайҙарҙың бөтмәҫ аһ-зарын тыңламаҫҡа ла мөмкин. Иғтибар итегеҙ әле: тормоштары менән ҡәнәғәт булған оптимист рухлы кешеләрҙе лә тап үҙе ише кешеләр уратып ала.

Шулай уҡ йыһандың икенсе бер мөһим законы – эмоциялар менән идара итергә өйрәнеү. Үҙегеҙҙең хис-тойғоларығыҙҙы дөрөҫ юҫыҡҡа йүнәлтеүҙе иртәнсәк йоҡоғоҙҙан уянғас та башлау мөһим. Әгәр йоҡоғоҙ туймай, һытыҡ, асыулы йөҙ менән килеп торһағыҙ, артабан бөтә көнөгөҙ шулай үтәсәк. Шуға күрә лә һәйбәт уйҙар солғанышында алда һеҙҙе тик яҡшы көн көткәненә ышанып аяҡҡа баҫыу менән, күңелле музыка ла ҡуйып ебәрһәгеҙ, йыһан да күңелегеҙ торошона яраҡлашып, һеҙгә матур көн бүләк итәсәк. Көн дауамында үҙегеҙҙе һау-сәләмәтмен, матурмын тип хис итегеҙ. Ошо ерҙә йәшәүегеҙ, бөгөнгө көнөгөҙ, ерҙәге һәр һулышығыҙ өсөн Аллаһы Тәғәләне тәбрикләп, юғары көстәргә рәхмәт әйтегеҙ. Хоҙайҙан иртәгеһе көндө тағы ла уңышлыраҡ биреүен һорағыҙ.

Түбәндәге мөһим ҡағиҙәне лә иҫегеҙҙән сығармағыҙ. **ХЫЯЛҒА ИРЕШЕР ӨСӨН, УНЫ ДӨРӨҪ ИТЕП ТЕЛӘЙ БЕЛЕРГӘ ЛӘ КӘРӘК.** Әгәр эстән генә теләһәң, ул бары тик хыял ғына булып ҡала. Теләк һүҙенең тамыры тел тигәндән алынған, шуға ла ҡысҡырып әйтеп теләһәң, ул мотлаҡ тормошҡа ашыр. Уй-ниәттәрең ҡабул булһын өсөн өс талап:

***үҙеңдең нимә теләгәнеңде аныҡ белеп, тормошҡа ашыуын ысын күңелдән теләргә (уны мотлаҡ хәҙерге заманда һорарға кәрәк. Мәҫәлән, "Бөгөн минең эштәремдең бөтәһе лә уң була!" һ.б.);***

***теләгеңде тормошҡа ашырыр өсөн йыһандың мөмкинлектәр бүләк итеүенә ышанырға;***

***һеҙгә бирелгән мөмкинлектәрҙе ҡабул итеп, уны тормошҡа ашырырға.***

Артабанғы кәңәш – **ҮҘЕҢДЕ ХӨРМӘТ ИТӘ БЕЛЕРГӘ ӨЙРӘНЕҮ.** Үҙеңде үтә түбән баһалайһың икән, башҡаларҙың ихтирамын яу-



лауы ауыр буласаҡ, улар хатта һине күрмәйәсәк тә. Көнделегеҙҙә үҙегеҙҙең идеалығыҙҙы булдырығыҙ. Һәм шул идеалға ирешкән һайын үҙбаһағыҙ күтәрелә барыр, ғорурлыҡ тойғоһо ла үҫешер. Аҙығыҙҙа барлыҡҡа килгән образға ярҡлашырға тырышығыҙ. Ә хәҙер бер бит ҡағыҙ алып, 5-10 йылдан киләсәгегеҙҙе нисек күҙ алдына килтереүегеҙ хаҡында яҙығыҙ. Яҙмағыҙҙа түбәндәге пункттар сағылыш тапһын:

1. Үҙегеҙҙең өҫ-киәфәтегеҙ;
2. Эш урынығыҙ;
3. Биләгән вазифағыҙ;
4. Яратҡан кешегеҙ менән мөнәсәбәтегеҙ;
5. Ғаиләгеҙ;
6. Һаулығығыҙ торошо.

Был ҡағыҙ битен берәй ҡул теймәгән ергә йыйып ҡуйығыҙ ҙа, исемлек тураһында онотоғоҙ. Берәй заман, күп йылдар үткәс, яңылыштан ғына шул ҡағыҙҙы табып алғас, уны уҡып, һеҙөмтәләрегеҙ менән сағыштырып, үҙегеҙ үк хайран ҡалырһығыҙ.

Шулай уҡ, көндәлек тормошта ҡулланған һүҙҙәргә иғтибар итеү мөһим. Сөнки һүҙҙәр беҙҙең менән идара итә. Тиҫкәре фразаларығыҙҙы телмәрегеҙҙән бөтөнләй алып ташлап, позитив һүҙбәйләнештәр менән алыштырығыҙ. Мәҫәлән:

*Эт көүек арыным – Фәрештә көүек арыным;*
*Ҡараңғы көнгә – Яҡты көнгә;*
*"Хәлегеҙ нисек?" тигән һорауға: "Бик яҡшы, һеҙгә лә шуны теләйем!"* – тип яуаплағыҙ.

Үҙ алдығыҙға көйләп йөрөгән йырҙарға бигерәк тә иғтибарлы булығыҙ. Матур йөкмәткеле йырҙар кәйефегеҙҙе күтәрәсәк. Ә моңһоу, ҡайғылы йырҙар күңел торошона кире тәьҫир итмәй ҡалмаҫ. Ҡайһы бер артистарҙың сәхнәләрҙә шаулатып йырлап йөрөгән йырҙарының һүҙҙәренә иғтибар итегеҙ әле, тормоштары ла бит шул йырҙарының йөкмәткеһенән ҡалышмай.

***Үҙ-үҙенә ышанмағандар, оялсандар өсөн кәңәштәр:***

**1.** Талапсан, уҫал етәксегеҙҙең эш кабинетына берәй йомош менән ингән ваҡытта, етәксене эш өҫтәлендәге берәй фотоһүрәттең эсендә ултыра икән, тип күҙ алдына килтерегеҙ (ғаиләһе менән төшкән фотоһы йәки берәй матур картина булыуы мөмкин). Ул шул һүрәт эсендә көсөргәнештән ҡотолоп, бер аҙ ял итһен әйҙә. Һөҙөмтәлә, һеҙҙең тәҡдимегеҙҙе күтәреп алыр, йомошоғоҙҙо матур итеп ҡабул итер.

**2.** Берәй офиска, банкка төшкө аш ваҡытына 5 минут ҡалғанда килеп еттегеҙ икән, ти. Ә һеҙгә үҙ йомошоғоҙҙо эш итергә кәрәк. Ул урындарҙа, ғәҙәттә, күберәк ҡатын-ҡыҙҙар эшләй. Үтенесегеҙ кире ҡағылмаҫтан элек, уйығыҙҙан ғына ханымға бүләктәр бирәһегеҙ икән, тип хис итегеҙ (аҡ лимузин, француз хушбуйы, матур гөлләмә). Ә ысынында, был саҡта һеҙ был кешегә йылы энергия тулҡыны ебәрәһегеҙ. Ул кеше үҙе лә һиҙмәҫтән ошо тулҡындарҙы тотоп аласаҡ һәм шундай уҡ симпатия менән һеҙгә яуап ҡайтарасаҡ. Йомоштарығыҙҙы йомошлағас, төшкө аш ваҡытын бүлгән өсөн ғәфү үтенеп, рәхмәт әйтергә онотмағыҙ.

Әлбиттә, тормошта төрлө саҡ була. Берәй уңышһыҙлыҡҡа осраһағыҙ, уны күңелегеҙгә үтә яҡын алып, төшөнкөлөккә бирелергә ашыҡмағыҙ. Уңышһыҙлыҡҡа рәхмәт әйтегеҙ, был осраҡ киләсәктә ошо хаталарҙы бүтән ҡабатламаҫҡа һабаҡ булһын.

Иң мөһиме, нисә йәштә, тормошҡа ниндәй мөнәсәбәттә булыуығыҙға ҡарамаҫтан, мөғжизәгә ышанығыҙ. Баш ҡала вуздарының береһендә уҡытҡан тәжрибәле ғалим, политология фәндәре кандидаты бер лекцияһында: "Мөғжизәгә ышанығыҙ! Сөнки тормошта улар булып тора. Балаларса, ябай бер ҡатлылыҡ менән ышанығыҙ!" – тигәйне. Ошо фекерҙе күңел һандығыма бикләгәндән һуң, үҙем бер ҡыҙыҡлы күренешкә тап булдым. Ғүмеремдә бер имтиханға ла әҙерләнмәй йөрөгәнем булмаһа ла, был юлы, ваҡыт булмау сәбәпле, иң талапсан, уҫал уҡытыусының имтиханына бер һорауҙы ла асып уҡып өлгөрә алмайынса, нисек тә булһа биреп сығырмын әле, тигән уй менән килеп ултырҙым. Әллә имтиханға бармаҫҡамы, тигән икеләнеү уйымда ла булманы нисектер. Артабан инде еңел билет эләкте, талапсан уҡытыусы иң мәрхәмәтлегә әйләнде, имтиханымды уңышлы ғына тапшырып сыҡтым. Ысын мөғжизә булды минең өсөн. Был, әлбиттә, бер нәмә лә эшләмәй, һауанан мөғжизә көтөргә кәрәк, тигәнде аңлатмай. Мин бары тик эштең аҙағы хәйерле тамамланырына ышандым. Ошо ышаныуым өсөн йыһандың бер бүләгенә лайыҡ булдым.

*Н. Правдинаның кәңәштәрен файҙаланып, Милә БИЛАЛОВА әҙерләне.*

# МАГАЗИНДА ИЛАҒАН БАЛАЛАРҒА ӘКИӘТ



**Башта түбәндә яҙылған ысулдар тураһында беҙ ҙә белмәй инек. Ҡыҙыҡайҙың магазиндан аҡырып илап сыҡҡан сактары булды. Тора-бара һығымталар яһалды, бер аҙ тәжрибә тупланды. Әллә үҙе үҫтереме?**

**Баланы мөмкин тиклем магазинға йөрөтмәү хәйерле. Бигерәк тә уйынсыҡтар һатылғанына. Сөнки уға өйөндә булған тәтәйҙәр ҙә окшаясаҡ, хаҡы киммәтенә лә күҙе ҡыҙасаҡ. Ул теләгәнде алыр мөмкинлек булмай, илатып алып сығып китеүҙән дә күңелһеҙ хәл юҡ. Үҙеңә лә ҡыйын, бала ла стресс кисерә. Ингәнһегеҙ икән, ярты сәғәттәй уйнап, тикшереп сыҡһын. Эргәһендә йөрөп күберәк аңлатырға, һөйләргә кәрәк. Тейергә, ултырырға ярамағандары ла була бит уйынсыҡтарҙың. Бер нәмә менән мауыға башлаһа, ҡапыл иғтибарын икенсегә йүнәлтәһең. Арый биргәс, бергәләшеп килешеп аҡсағыҙ етерлек тәтәй алып сығып китәһегеҙ. Ҡайтҡас бының менән нисегерәк уйнау, кемгә күрһәтеү тураһында һөйләшәһегеҙ.**

**Тормош бит, аҙыҡ-түлек магазинына ла бергә инергә тура килгән сактар була. Касса эргәһендәге бөтә шоколад, киндерҙар – уныҡы, шулаймы? Быларға иғтибар итмәһен өсөн өйгә кәрәкле әйберҙе барып алып, тотоп сығырға ҡушаһың. Мәҫәлән, матур ҡаплы сәй, эремсек. Быныһы ла тәьсир итмәһә, тышҡа сыҡҡас берәй ҡыҙыҡ әйбер күрһәтеү тураһында әйтәһең һәм ысынлап та ни менәндер әүрәтергә кәрәк. Был берәй сағыу реклама тактаһы булһынмы, матур машинамы, үҙе һымаҡ йәштәге баланымы, ирмәк кенә көсөкмө шунда... Бәләкәсте алдарға ярамай бит инде. Бик тә түҙҙермәһә, йә арығанға фантазияңды эшләтә алмайһың, иренәһең икән, (ундай саҡтар ҙа була) чупа-чупс булһа ла алырға кәрәк. Һирәк-һаяҡ ярай ул. Бәләкәс бала уны тулыһынса имеп бөтә алмай барыбер.**

**Әммә ошо әкиәтте һөйләү тәьсир итмәй ҡалмаҫ моғайын. Беҙгә ярҙам итте.**

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер ҡуян. Бер заман ул әсәһе менән урамға сыҡҡан. Магазин эргәһенән үтеп барғанда:

- Әсәй, миңә ошонда һатылған ҡәләмдәрҙе алып бир әле, – ти икән.

Әсәһе:

- Аллаһы бойорһа, атайың аҡса эшләп ҡайтҡас, иртәгә алырбыҙ, йәме.

Ҡыҙыҡай:

- Миңә хәҙер үк кәрәк, Алла бирмәһә лә кәрәк, хәҙер үк! – тип илай башлаған.

Уның ҡысҡырғанын төлкө ишетеп ҡалған. “Бәй, нимәгә мыжый ул? Ә-ә, ҡәләм тиме? Магазинда матур ҡәләмдәр һаталар икән, вәт, белдем!» тип уйлаған.

Иртәгеһен ҡуян әсәһе менән шул магазинға барған. Тик... һатыусы:

- Ул ҡәләм юҡ инде, өлгөр төлкө алып китте, – тип яуаплаған.

Әсәһе:

- Эй, ҡыҙым, һин ҡысҡырып илап һорағас, төлкө ишеткән дә ҡуйған. Шым ғына, матур итеп һораһаң, бер кем ишетмәҫ ине. Алла бирһә тип әйтмәһәң, булмай ҙа ҡуя шул, балам.

Бер нисә көн үткәс, ҡуяндар тағы урамға сыҡҡан, магазинға ла ингәндәр. Был юлы Ҡуянһылыу бик матур күлдәк күреп ҡалған. Кейеп тә ҡараған. Килешеп тора икән үҙенә. Итәктәре күпереп тора, зәңгәр генә сәскәләре, кеҫәләре, ҡайышы бар. Уны кейеп бейеүе лә уңай, ти. Әсәһенә:

- Әсәкәйем, Алла бирһә, миңә ошо күлдәкте һатып алырһыңмы икән?

- Эй, сабыйым, әлбиттә алырбыҙ. Атайың аҡса эшләп алып ҡайтһын да, йәме?

- Ярар, әсәй, – тигән аҡыллы ҡыҙ.

Мөйөштә генә боҫоп торған төлкө ҡуяндың тағы нимә һорағанын нисек кенә тырышмаһын, ишетә алмаған. Иртәгеһенә матур күлдәк ҡуяндыҡы булған да ҡуйған.

**Киләһе юлы ашамаған балаларға ла әкиәт булыр.**

***Гөлсинә ЙОСОПОВА.***

Мөнир ФӘЙЗУЛЛИН

# БЫЛ ҒӨМЕРҘЕҢ ӨҘЫӨҘАРЫ – ТАУ ТҮБӘНЕ ШЫӨҒАН ҒӘМҺЕҘ БАЛА КЕҮЕК...



## КУСТЫМДЫҢ ЯКТЫ ИҪТӘЛЕГЕНӘ

Ҡармаҡлар ҙа йөрөр ине,
Һарағының бәрҙеһен.
Ҡустым Иштимерҙе әйтәм,
Яратты шул бигерәк-бигерәк,
Шөғөлдөң был әрһеҙен.

Тоноҡтарҙы, шаршыларҙы,
Бәрҙенең ятыуҙарын,
Күрәҙәсе һымаҡ белде:
Ҡасан үрләп балыҡтарҙың,
Түбәнгә ҡайтыуҙарын.

Ау һалманы,
            яр һалманы,
Йырылды, тип, еллеһе.
Көн оҙоно йөрөһә лә,
Тотҡан ғына балыҡтары
Бер шеш булды йәмғеһе.

“Күп” тотҡанһың,
            тип шаяртһам,
Һеңкелдәп көлдө генә.
Аҙ шул, ағай, тимәне,
Сөнки “етәр”ҙе белде ул –
Ризығына яҙған һәр кем,
Ашар ине кинәнеп.

Бөгөн аңлайым,
            булған ул,
Тәбиғәттең балаһы.
Бер гонаһһыҙ Иштимерҙәй,
Тәбиғәткә йәндәш булып,
Йәшәй белһәк кана һуң?!
Үткәндәрҙе хәтерләтеп,
Ята йылға буйҙары.
Яратҡан ҡустымды бөгөн,
Балығына алып йөрөнө,
Бары минең уйҙарым.

## ЯҘЫҢ БЕР БАЛҠЫУЫ

Яҙың бер балҡыуы –
Ҡояштың ҡалҡыуы,
Ҡарҙың ятып ялҡыуы,
Үҙ ағына ҡайтыуы,

Ҡоштарҙың ҡайтыуы,
Умырзаяның ҡалҡыуы,
Малдың биктән ялҡыуы,
Иркенлеккә ҡасыуы.

Яҙың бер балҡыуы –
Ҡояштың ҡалҡыуы,
Ҡистәрҙең шау-шыуы,
Йөрәктәрҙең ҡауышыуы,
Мөхәббәттең аңҡыуы –
Яҙың бер балҡыуы!..

* * *

Өлкән Әүҙектенең
тәрән үҙәгенән
Табып алдыҡ болан мөгөҙө.
Туғыҙ сатаһын,
            ташлап киткән уны
Боландың боланы – үгеҙе.

Алыҫтан уҡ ята ялтырап тарбаҡ мөгөҙ,
Биләмәнең хас та тамғаһы.
Йән йылытып ята,
һөйөнсөләп,
Әле беҙҙә болан ҡалғанын,
Әле беҙҙә иман ҡалғанын.

***Берәү тосын: “Мәжлес туғандарым минең...” – тип башлаһан, ти.***

Шәжәрә байрамы...
Туғандар
Килеп тулғандар:
Күрешеү,
Ҡосаҡлашыу,
Әлбиттә,
Илашыу,
Унан
Аш-һыу,
Һүҙ артынан һүҙ,
Йыр артынан йыр –
Кем тыйыр...
Бары бар,
Ни етмәй?
Тик күңел
Бик һиҙгер –
Етмәй ниҙер...
Һәм,
Һорау әҙер:
Был саҡлы туғандар,
Быға са
Ҡайҙа булғандар?..

* * *

Мәңгелек мәшәҡәт –
тамаҡ коллоғонан
Ҡотолоу урыны айыуға, моғайын,
Өң генәлер...
Ә унда
оҙайлы  был ҡыштар, бәлки, бер
Уяулы-йоколо уҙғарған сиркансыҡ
Төн генәлер.

* * *

***(Үҙебеҙҙең диалектта, үҙебеҙҙең донъялыкта)***

Төнәктә тауыҡ –
Келәттә бойҙай.
Төн оҙай...
Кем нимә уйҙай?

Тауыҡ бойҙай уйҙай,
Бойҙайҙы сыскан урҙай,
Ни уйҙаһын бойҙай?!.

* * *

“Кирас картка биребйәрәм,
Мыжыуыңдан туктамаһаң,
Хәҙер генә йоктамаһаң”.

Ололарҙың тәрбиәһе –
Һурылған кыйыҡ тактаһы,
Елдә (колакка!) так та ток.

Якында ғына йөрөнө
Йөнтәҫ Кирас картыбыҙ,
Пыш-пыш булды артыбыҙ...

Бөгөн ҡалай анһат донья,
Туғарылған атыбыҙ –
Ҡайҙа Кирас картыбыҙ?..

***ҺЫЙЫРМЫ, ШИҒЫРМЫ?***

Һыйыр алып ҡайтыр өсөн
Урманға барҙым.
Күп йөрөнөм, таба алманым,
Юғалған, аҙғын.

Әллә уны мин күрмәнем,
Әллә ул мине.
Күрһә хужаһын, тим, танып,
Өндәшер ине.

Мин бит күренеп йөрөнөм
Тик һуҡмаҡ буйлап.
Тыуған төйәгем хаҡында
Оҙон уй уйлап.

Таба алманым эҙләһәм дә,
арып һәм талып.
Йөрөһөн әйҙә, мин бит ҡайттым,
Бер шиғыр алып...
Бына ул!

* * *

Ҡайынлыҡҡа еткәс кенә,
– Тыр-р-р! – тинек тә
атыбыҙҙы,
Йыуан ағас төпһәһенә
Бәйләп ҡуйып
ҡалдырып,
Мал аҫтына түшәргә тип,
Ҡыу япраҡты
шаптырлатып,
Йыйып алдыҡ йүгереп йөрөп,
Бер тоҡ итеп, тултырып.

Их, ғүмерҙең уҙыуҙары!..
Ғәмһеҙ бала
салкан ятып
Тау түбәне
шыуған кеүек.
- Тыр-р-р! –
тигәнгә,
Ғүмер торһа,
Бушҡа үткән көн-
төндәрҙе,
Тормош менән
тултырһаңсы!..
Ҡыу япраҡтар йыйған кеүек.



# ҠЫҘ БАЛА ШУҒА БӘХЕТЛЕ – ЯҘМЫШЫН ҮҘЕ ЯҘА

Әбйәлил районының Буранғол ауылы халҡы улар хаҡында телгә алғанда, гел икеһен бергә ҡушып, «Әлфиә, Гөлфиә» тип һөйләй. Иҫ белә башлағандан алып бер-береһенән айырылмаған, ике тамсы һыу кеүек оҡшаш игеҙәк ҡыҙҙарҙы ҡайһы сакта яҡын дуҫтары ла бутап ҡуя.

Ҡатыны вафат булып, дүрт бала менән тороп ҡалған Ғәнит Нурислам улы Хамматов, ике балалы тол ҡатын Миңзифа Шиһап ҡыҙы менән сәстәрен сәскә бәйләп, ишле ғаилә ҡороп ебәрәләр. Уртаҡ улдары Әлфирҙән һуң барыһын да хайран ҡалдырып игеҙәк ҡыҙҙар тыуғас, дүрт улынан һуң түҙемһеҙләнеп ҡыҙ бала көткән Ғәнит ағайҙың шатлығының сиге булмай. Туғыҙынсы синыфҡа тиклем ҡыҙҙарының икеһен ике яғынан етәкләп кенә йөрөтә. Күрше-күләне гел генә: «Ғәнит ағай урам буйлап ҡыҙҙары менән маҡтанып, ата ҡаҙ кеүек ҡуҡырайып китеп бара», – тип ҡарап торор була. Ишле ғаиләлә апай-ағайҙарынан иркәләнеп, атай-әсәй ҡосағында наҙланып үҫкән ҡыҙҙар бәләкәйҙән ауылдаштарының да иғтибар үҙәгендә. Көн дә тиерлек бирелгән «кемегеҙ Әлфиә лә, кемегеҙ Гөлфиә әле?» тигән һорауға ла күнегеп бөткәндәр. "Игеҙәктәр булып яралыуыбыҙ әсәйебеҙ нәҫеленән килә, токомобоҙҙа йәштәш игеҙәк туғандарыбыҙ ҙа бар, беребеҙҙең ейән-ейәнсәрҙәре игеҙәк буласаҡ, Аллаһы бойорһа. Ғөмүмән, Игеҙәк булып тыуыуыбыҙға шатланып бөтә алмайбыҙ, яңғыҙлыҡ тойғоһо юк беҙҙә, бергә ифрат күңелле", – ти игеҙәктәр.

Мәктәп йылдарында Әлфиә теүәл фәндәрҙән алдырһа, Гөлфиә гуманитар өлкәне яҡын күрә, бигерәк тә география, тарих дәрестәрен ярата. Өйгә бирелгән эштәрҙе бергәләп әҙерләй ҡыҙҙар, мәктәптә ойошторолған мәҙәни сараларҙа парлап ҡатнашалар, дуҫтары ла уртаҡ уларҙың. Әлфиә спорт ярыштарының уртаһында ҡайнаһа, Гөлфиә физкультура дәресен бик үҙ итеп бөтмәй. Икеһенең дә спорт кейемдәрен Әлфиә кейеп туҙҙыра. Миҙалға дәғүә итмәһәләр ҙә, тырыш ҡыҙҙар мәктәпте тик "5"-ле билдәләренә генә тамамлай. Аталары вафат булғас, әсәләре яңғыҙ ҡалғанлыҡтан, кинйәләрен һис тә йыраҡҡа ебәр-



геһе килмәй. “Өфө алыҫ, аяғығыҙҙы юрғанға ҡарап һуҙып, яҡыныраҡ ҡалаларҙағы уҡыу йортон һайлағыҙ”, – тип кәңәш бирә. Әммә үҙ һүҙле, маҡсатлы ҡыҙҙар документтарын алып үҙҙәре генә баш ҡалаға юл тота.

Әлфиә теүәл фәндәрҙе үҙ итһә лә, география тип иҫе киткән Гөлфиәгә эйәреп БДПУ-ның һәм БДУ-ның география факультеттарына документын тапшыра. Ҡыҙҙар шулай уҡ БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетының башҡорт һәм немец телдәре бүлегенә лә инеп ҡарарға ниәт итә. География факультеттарына конкурстан үтә алмай Әлфиә менән Гөлфиә. БДУ-ның башҡорт һәм немец теле бүлегенән уҡырға инеүҙәре хаҡында шылтыратыу, һәм әңгәмәгә саҡырыу алғас, шатлыҡтан түбәләре күккә тейә яҙған ҡыҙҙар, тейешле “отработка”ны йәһәт кенә тамамлап, ауылға ҡайтып китә. Көҙөн уҡырға килгәс, студенттар исемлегендә уларҙың фамилиялары булмай сыға. Был сәйер күренеш аптырата ҡыҙҙарҙы. Әммә юғалып ҡалмайҙар – ике айлыҡ компьютер курсына яҙылалар. Ауылға ҡайтып китергә оялдыра, барыһы ла уларҙы юғары уҡыу йортонда уҡып йөрөй, тип уйлай бит. Курсты тамамлағас, Сибай ҡалаһының һөнәрселек училищеһына юлланалар һәм, бер йыллыҡ тегенселәр курсын ҡыҙыл дипломға тамамлаған ныҡыш ҡыҙҙар, йәнә Өфөнө яулап ҡарарға ниәт итә. Был юлы Өфө дәүләт сервис һәм иҡтисад академияһының технология һәм дизайн факультетын һайлап, һынауҙарҙы уңышлы үтеп, ошо уҡыу йорто студенттары булып китә игеҙәктәр. Тәүге курста уҡыуы еңел бирелмәй. Бигерәк тә урыҫ телен яҡшылап белмәүҙәре арҡаһында төшөнгәндәрен дә аңлата алмаған осраҡтары булғылай. “Башҡа милләт вәкилдәре араһында уҡыһаҡ та, ситләтмәнеләр, киреһенсә, үҙ итеп, ихтирам менән ҡаранылар. Әле лә хәтеребеҙҙә: БДУ-ға инергә имтихан тапшырып йөрөгәндә ҡабул итеү комиссияһында ултырған башҡорт ҡыҙҙары асыҡтан-асыҡ абитуриенттарҙан “ауыл йолҡоштары уҡырға килде” тип мыҫҡыл итеп ултырҙы, әйтерһең дә үҙҙәре ауылда үҫмәгән”, – тип әсенеп һөйләгәйне ҡыҙҙар.

Икенсе курста Әлфиә менән Гөлфиә йәйге стипендияларын ҡушып теген машинаһы һатып ала, яңғыҙ әсәләренән матди ярҙам һорамау ниәтенән тегенеү эшенә тотона. Үҙҙәре йәшәгән дөйөм ятаҡта салбарҙар ҡыҫҡартып, ябай юбкалар тегеп, кейемдәр төҙәткеләп акса эшләй башлайҙар. Лекциялар тамамланып, тегеү буйынса практик дәрестәр башланғас, таныш-белештәренән заказдар ҡабул итеп төрлө фасонлы кейемдәр тегеүгә тотоналар. Студенттарҙан тыш мосолман кейемдәре тектерер өсөн өлкәнерәк ҡатындар ҙа йыш мөрәжәғәт итә ҡыҙҙарға. Дин тотҡан парҙар өсөн никах кейемдәре лә тегә улар. Ҡыҙҙарҙың өҫтөндәге күлдәк, блузкалары ла үҙенсәлеклелеге менән айырылып тора. Кисәләргә, туйҙарға, уҡыуға, көндәлек тормошҡа кейемде, фасонын үҙҙәре уйлап сығарып, бер иштән теген кейәләр. Эшләп тапҡан аҡсаларын йәшәүҙән, ашауҙан арттырып ноутбук, фотоаппарат, тағы ла бер теген машинаһы һатып алалар. Ауылға бүләктәр алып ҡайтып әсәһен, туғандарын ҡыуандырып торалар.



“Миңзифа” коллекцияһы

III курсҡа еткәс ҡыҙҙарҙың курс эше – егеттәр өсөн тегелгән “Себер һулышы” исемле кейемдәр коллекцияһы Елена Локманова етәкселегендәге «Сто лиц» студияһы һәм Өфө дәүләт сервис һәм иҡтисад академияһының технология һәм дизайн кафедраһы менән берлектә ойошторолған Өфөләге мода күргәҙмәһендә еңеп сыға. Ҡалдыҡ туҡымаларҙан себер халҡы орнаменттарын ҡушып егеттәр өсөн тегелгән джинсы, спорт салбарҙары, ҡышҡы йылы кейемдәр жюри тарафынан юғары баһаланып, Ульяновск өлкәһенә конкурсҡа ебәрелә. Димитровград ҡалаһында үткән “Йәш дизайнерҙар һәм рәссам-модельерҙарҙың дүртенсе Волга буйы фестивале» тип аталған конкурста Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән килгән йәштәр араһында башҡорт ҡыҙҙары еңеү яулай.

Өфөгә ҡайтҡас Әлфиә менән Гөлфиә ректор премияһы менән бүләкләнә, шулай уҡ Президент стипендияһына ла лайыҡ була. Стипендия бер генә кешегә бирелергә тейеш булғас, кемеһенә тәғәйенләргә белмәй аптырап бөтәләр. Икеһе лә “5”-легә генә уҡый, икеһе лә эҙләнә, икеһе лә әүҙем. Оҙаҡ кәңәшләшкәндән һуң, икеһен дә стипендиат итәләр.

Ошо уҡ йылда Өфө ҡалаһында төрлө уҡыу йорттары студенттары араһында «Урал еңел сәнәғәте» ойоштороған «А-нан Я-ға саҡлы мода» тип аталған мода күргәҙмәһендә шул уҡ «Себер һулышы» коллекцияһы менән өсөнсө урынға лайыҡ булалар.

V курс аҙағында «Йәштәр модаһы» тип исемләнгән дизайнерҙар конкурсында ла урын яулай тырыш ҡыҙҙар. Ә инде V курста диплом эше өсөн әҙерләнгән «Миңзифа» коллекцияһы Өфөлә йыл да үткәрелгән «Евро-Уфа-Азия – 2010 йәштәр модаһы» форумында өсөнсө урынға лайыҡ була. Был коллекцияла башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейемдәре заманлаштырып тегелгән. Балитәктәрҙе – таҫмалы ҡыҫҡа күлдәктәр, сулпытәңкәләрҙе өсмөйөшләп бөрөлгән таҫмалар алмаштыра, биҙәктәр урынында – башҡорт орнаменттары. Милли элементтар ҡушып ижад ителгән замانса кейемдәр коллекцияһының исеме лә башҡортса яңғыраһын, тип әсәләре хөрмәтенә «Миңзифа» тип атайҙар. "Ң" хәрефенең ҡойроғон алып ташлаһаң, «Мин – зифа» тигән икенсе төрлө мәғәнә лә биреп була бит. Диплом эшенә ҡыҙҙар егеттәр кейеме коллекцияһы ла ижад итә. Киң ҡайыштарҙы кейем элементтары итеп тоташтырып теккән комбинезондар, кәүҙәне төҙ тотоу маҡсатында тегелгән башҡа кейемдәр ҙә факультетта юғары баһалана.

Ульяновск өлкәһендәге, баш ҡалалағы еңеүҙәрен, яҡшы уҡыуҙарын иҫәпкә алып, өсөнсө курста ҡышҡы каникулдар мәлендә ял итеү өсөн ҡыҙҙарға юллама тотторалар. Ҡыҙҙар Сергиев Посад, Суздаль, Ярославль һ.б. тарихи ҡалаларға сәйәхәт ҡыла. Тарихи урындарҙы, сиркәү, собор, музейҙарҙы күреп хәтерҙән юйылмаҫлыҡ тәьсораттар алып ҡайта улар. Ә инде йәй еткәс, уҡыу йорто тырыш ҡыҙҙарҙы Ҡара диңгеҙгә ебәрә. Киләһе йылына ла игеҙәктәргә Ҡара диңгеҙгә барырға насип була. Был юлы улар, Сочи менән генә сикләнмәй, Абхазияға, Адлерға барып урай, Сталиндың дачаһын да күреп ҡайта.

Дәрт ташып урғылған йәш ваҡытта дарманын юҡ-барға сарыф итмәйенсә, ваҡыттарын кәрәгенсә файҙалана белгән ҡыҙҙар күңел асырға ла, кешеләр менән аралашырға ла ваҡыт таба. Һуңғы курстарҙа Әлфиә менән Гөлфиә "Әбйәлил йәштәре" ойошмаһының иң әүҙем ағзаларына әүерелә. Спиртлы эсемлектәрҙе тәмләп тә ҡарамаған ҡыҙҙарҙы ойошманың сәләмәт тормош өсөн көрәш алып барыуы ылыҡтыра. Яҡташтары менән сәй, һуттар эсеп байрам итеп, әхлаҡи темаларҙы күтәреп һөйләшеп ултырыу күңелдәренә хуш килә. Бынан тыш, КВН-дар, кисәләр ҙә ойошторалар.

Кейем тегеүҙән тыш Әлфиә менән Гөлфиәнең ҡыҙыҡһыныуҙары, шөғөлдәре бик күп: бәйләм бәйләргә әүәҫтәр, аш-һыу әҙерләргә яраталар, компьютер программаларын үҙләштереү, фотоға төшөрөү ҙә уларҙың иғтибарынан ситтә ҡалмай.

«Ҡайһы сакта йәндәребеҙ бер бөтөн кеүек. Тышҡы ҡиәфәтебеҙ генә түгел, холоҡ-фиғелебеҙ ҙә оҡшаш: икебеҙ ҙә шаянбыҙ, күп һөйләйбеҙ, аралашырға ратабыҙ. Бәләкәйерәк сакта атайыбыҙ ҡул күтәртеп, сиратлап һөйләргә ҡуша торғайны. Әлегә оҙаҡҡа айырылып торғаныбыҙ юҡ. Беребеҙҙә булмаған сифат икенсебеҙҙә бар, беребеҙҙең ҡулынан килмәгән эшкә икенсебеҙ маһир, бер-беребеҙҙе гел тулыландырып йәшәгәнгә, терәк-таяныс булғанға, тормош ауырлыҡтары һиҙелмәй, бейек үрҙәрҙе яулауы еңел бирелә. Өфөлә уҡығанда студенттар ҙа, уҡытыусылар ҙа беҙҙе айыра алмай торғайны. Бер-беребеҙ өсөн зачет, имтихан тапшырған осраҡтар ҙа булғыланы. Ҡайһы бер һиҙгерерәк уҡытыусылар икебеҙҙе бер юлы баҫтырып һорау алғанда ла, белгәнебеҙ алдан ҡысҡырып яуап биреп ҡотола инек. Ваҡытты сарыфламаҫ өсөн бүлешеп тә уҡыныҡ, мәҫәлән, Әлфиә лекция яҙҙы, мин һөйләргә әҙерләндем. Нисәнселер курста Әлфиә курс эшен яҙып, компьютерҙа баҫты, ә мин ҡабат-ҡабат уҡып комиссия алдында икебеҙ өсөн дә айырым-айырым инеп сығыш яһап сыҡтым. Бындай осраҡтарҙа бер иштән кейенәбеҙ, сәстәребеҙгә бер төрлө прическа яһайбыҙ. Ә ҡала буйлап йөрөгәндә икебеҙ ике төрлө итеп кейенергә тырышабыҙ, автобуста, урамда кешеләрҙең иғтибарын йәлеп итеү туйҙырған. Кешеләрҙең: "Ҡарағыҙ әле, игеҙәктәр", – тип шыбырлашып, артына әйләнеп ҡарап ҡалыуы уңайһыҙландыра. "Хеҙмәтең менән абруй яулай алһаң, аҙаҡ абруй һиңә үҙе хеҙмәт итер" тигән девиз менән йәшәйбеҙ", – тип, бер-береһен бүлдерә-бүлдерә һөйләне игеҙәктәр.



Уҡыу йортон ҡыҙыл дипломға тамамлаған, студент саҡтарынан уҡ күңелдәренә яткан шөғөлдө дөрөҫ файҙаланып, үҫтерә белгән, меңәрләгән конкурсанттар араһында еңеүҙәр яулаған ҡыйыу, ныҡышмал башҡорт һылыуҙары киләсәктә лә һынатмаҫ, тормошта үҙ урындарын табыр, дизайн өлкәһендә яңынан-яңы уңыштар яулар тигән ышаныстабыҙ.

*Земфира АБУШАХМАНОВА.*

# ӘСӘЙЕМДЕҢ ҠЫҘЫ ЛА, УЛЫ ЛА МИН...



**«Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ» тигән мәҡәлде ни өсөндөр тик ир-егеттәргә ҡарата ғына әйтергә күнегелгән. Әммә бөгөнгө көндә төрлө һөнәрҙәргә эйә булған гүзәл заттарыбыҙ ҙа байтаҡ. Хатта улар бөтөнләй ят өлкәләрҙе гармониялы рәүештә берләштереп, уңышлы эшләй. Ҡатын-ҡыҙҙарға хас сабырлыҡ, ир-егеттәрсә ҡыйыулыҡ, тәүәккәллек менән яңынан-яңы үрҙәр яуларға, бар һынауҙарҙы ла лайыҡлы еңеп сығырға һәләтле ҡыҙ ул журналыбыҙҙың тышлығында ҡояштай балҡыған РӘЗИЛӘ ӘБДЕЛҒӘЗИНА.**

Әбйәлил районы Әлмөхәмәт ауылында донъя ҡорған Рәйлә Ғәни ҡыҙы менән Салауат Хөснөтдин улы ғаиләһенең берҙән-бер һөйөнөсө лә, ҙур өмөтө лә булып, йорттарына йәм, күңелдәренә дәрт өҫтәп донъяға килә Рәзилә. Ата-әсә наҙына, һөйөүенә күмелеп үҫкән биш йәшлек иркә ҡыҙҙың тынғыһыҙ тормошо Сибай ҡалаһында башлана. Ҡалаға күсеү ҡыҙ балаға яңы мөмкинлектәр аса, яңы бейеклектәргә әйҙәй. Өс йәшенән сәхнә түренән төшмәй әле йырлап, әле тыпырлап бейегән ҡыҙҙы әсәһе музыка мәктәбенә алып килә. Тәүге дәрестән үк Рәзиләлә сәнғәткә һөйөү уяна һәм ул әҙерлек курсының бер сәғәтен дә ҡалдырмай йөрөй. Уҡырға төшкәс тә музыка мәктәбен ташламай, флейта класына яҙыла. Шулай итеп уның буш ваҡыты ҡалмай ҙа тиерлек. Төшкә саҡлы башланғыс мәктәптә белем алһа, көн-

дөң ҡалған яртыһын флейтала уйнарға өйрәнеүгә бағышлай.

“Йыр-моңға һәләтем – атай-әсәйемдең иң ҙур бүләге тип баһалайым. Әсәйем, Ҡанитә өләсәйемә оҡшап, йырға әүәҫ. Уның һағышлы йырҙар һуҙыуы, йәиһә көнө буйына күңелләнеп китеп, көйләп йөрөүе әлегеләй хәтерҙә. Өләсәйемдең моңло тауышын яҙҙырып та ҡуйҙыҡ. Туғандар менән бергә йыйылғанда йыш тыңлайбыҙ. Минең өсөн ул илһам сығанағына әүерелгән”, – ти Рәзилә. Ысынлап та, ҡыҙ һәр йәйге каникулын Хәлил ауылында өләсәһе янында үткәрә. Әлбиттә, яҡын кешеһе Рәзиләлә йыр-моңға мөхәббәт хисен уятмай ҡалдырмағандыр. Әле лә йыр-моңдан өҙөлмәй ул. Көн дә Нур Дауытов, Заһир Исмәғилев көйҙәрен, классик музыканы йотлоғоп тыңлай.

Кешенең хәрәкәттәрен, үҙ-үҙен тотошон күҙәтеп, холоҡ-фиғелен, ниндәй өлкә эйәһе булыуын төҫмөрләргә мөмкин. Дөрөҫ үҫешкән һәләт кешенең асылына әүереләлер ул. Рәзиләне тәү күреүҙә үк был ҡыҙ бейеүсе түгелме икән, тигән уй тыуҙы. Дөрөҫ баһалағанмын, ысынлап та, минең алда зифа буй-һынлы, һөйкөмлө, оҙон толомло, күләс йөҙлө, еңел хәрәкәтле, эскерһеҙ ҡарашлы башҡорт бейеүсеһе тора ине. Әммә бейеүселә тәбиғәттән бирелгән һәләттән тыш, һығылмалылыҡ, етеҙлек, артистизм, сәхнәлә үҙеңде ышаныслы тотоу кеүек сифаттар ҙа булырға тейеш бит әле. Уларҙы йәштән үк тәрбиәләргә кәрәк. Рәзилә биш йәшенән әсәһе етәкләгән түңәрәктә мәктәп уҡыусыларын күҙәтеп, аҙаҡ улар менән бергә бейеү серҙәренә төшөнә. Һуңғараҡ “Сулпан” балалар вокаль-хореография ансамбленең әүҙем вәкиленә әйләнә. Бында ҡыҙға бейеү менән бер рәттән йырларға ла мөмкинлек асыла. Студенттар өсөн ойошторолған бейеү ансамбле етәксеһе Ҡолбәйетова Зөлхизә Мәүлетбай ҡыҙы ҡыҙҙың һәләтен күреп: “Буйың оҙон, беҙҙең ҡыҙҙарҙан бер ҙә ҡалышмайһың”, – тип үҙенә саҡыра. Шулай VIII синыф уҡыусыһының Башҡорт дәүләт университетының Сибай филиалының “Ете ырыу” ансамбленә алыныу Рәзилә өсөн ҙур мәртәбә лә, етди һынау ҙа була. Шуға ла ышанысты аҡлар өсөн бар тырышлығын һала ҡыҙ. Тиҙ арала өйрәнеп, өлкәндәр менән бер рәттән төп составта уңышлы ғына сығыштар яһай, гастролдәргә йөрөй башлай. Уға Рәсәйҙең күп кенә ҡалаларын күреү бәхете тәтей. Үҙе студент булғас, юғары уҡыу йортоноң “Нардуған” ансамбленә алына.

“Бигерәк тә халыҡ бейеүҙәре күңелгә яҡын. Уларҙы онотолоп китеп бейергә була. Йыр, бейеү көндәлек мәшәҡәттәрҙе оноттора, күңел төшөнкөлөгөнән ҡотолорға ярҙам итә. Үҙемде бер ҡошҡа әүерелеп, бейек зәңгәр күккә осоп киткән кеүек хис итәм, – тип хистәре менән бүлешә бейеүсе ҡыҙ. – Үҙ ғүмеремдә өйрәнгән бейеүҙәр араһында “Бөрйән ҡыҙҙары”на еткәне булманы. Ундағы етеҙ, киҫкен хәрәкәттәр, лирик сигенеүҙәр холҡома тап килә, тип әйтер инем. Тормошта ла бер урында оҙаҡ тапаныуҙы өнәп етмәйем, тиҙлек яратам”. Ысынлап та, ҡул ҡаушырып ултырыуҙы үҙһенмәй икән Рәзилә. Конкурс-бәйгеләрҙә әүҙем ҡатнаша. Әйтәйек, республика кимәлендә үткән “Һылыуҡай-2008” конкурсында “Иң һөйкөмлө” һәм “Концерт афишаһы һылыуы” тигән номинацияларҙа еңеү яулай. 2009 йылда “Студент яҙы”на үҙенсәлекле номер әҙерләй. Сибай филармонияһының ҡурайсы Раушан Ниязғолов менән бергә Нур Дауытовтың “Фатима” тигән әҫәрен башҡарып, II урынға эйә була.

“Студент яҙы” тигәндән, бер ҡыҙыҡлы хәл иҫкә төштө, – ти Рәзилә серле йылмайып. – Мәктәптә уҡыған саҡта йыл һайын тиерлек “Студент яҙы”нда ҡатнашырға тура килде. Шулай II курс студенты булғас, Өфөгә сираттағы конкурсҡа килергә насип булды. Мине күргәс, режиссерҙар аптырашып: “Юғары уҡыу йорттарында 5 йыл ғына уҡытмайҙармы ни хәҙер? Был бәйгелә ҡатнашыуыңа 7 йыл булып китмәнеме?” – тип һорап ҡуйҙы”.

”Йөрөгән таш шымара, ятҡан таш мүкләнә”, тиҙәр бит әле халыҡта. Шулай бер-бер артлы конкурстарҙа ҡатнашып, призлы урындарға эйә булғас, Рәзилә тағы ла юғарыраҡ маҡсат ҡуя: ҡатмарлыраҡ бәйгелә ҡатнашып, беренселек яуларға. Әмәлгә ҡалғандай, етәксеһе Асия Солтан ҡыҙы Ғәйнуллина уға Сибай ҡалаһы исеменән “Сая ҡыҙҙар” республика конкурсында ҡатнашырға тәҡдим итә. Һайлап алыу турынан еңел генә үтә ҡыҙ. Әммә бәйге шарттарына ингән һыңғә ташлау, уҡ атыу, көйәнтәләп йүгереү кеүек спорт ярыштарында еңеү ауырыраҡ бирелә. Тик артҡа сигенергә яратмаған һылыуҡай ҡаршылыҡтар алдында юғалып ҡалмай. “Әйткәндәй, “Сая ҡыҙҙар” конкурсы тағы ла бер һөнәр үҙләштерергә булышлыҡ итте бит әле. Башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы түгел, тип флейтала уйнарға рөхсәт итмәнеләр. Шуға ла миңә бер аҙна эсендә алялһыҙ тағы ла бер музыка ҡоралында – думбырала уйнарға өйрәнергә тура килде”, – тип йылмая Рәзилә.

“Ниәт иткән – моратына еткән” тигәндәй, думбыраның да асылына төшөнөп, бәйгелә уның ҡылдарын сиртеп күптәрҙең йөрәктәрен әсир итеп ҡайта ҡыҙ Ишембай яҡтарында. “Сая ҡыҙҙар – 2010” республика бәйгеһендә I урын яулай. Бынан тыш  “БДАУ һылыуҡайы”нда ла ҡатнаша.

Сәхнәлә, тамашасы алдында үҙен ышаныслы тойған кеше тормошта ла юғалып ҡалмайҙыр ул. Ысынлап та, Рәзилә һәр көнөн файҙалы ла,

ҡыҙыҡлы ла итеп ойошторорға тырыша: иртән дәрестәргә йөрөй, мәҙәни сараларҙа ҡатнаша, ял көндәрендә кино, концерттар ҡарарға, дуҫтары менән тәбиғәт ҡосағына сығырға ла ваҡыт таба. Әле Линара Таһирова етәкселегендәге "Һылыуҡай" студияһында администратор эшен башҡара. "Тормошомдо ошо студияһыҙ күҙ алдыма ла килтерә алмайым. Ул минең хеҙмәт юлымдағы тәүге тәжрибәм. Мәҙәни сараларҙа күп ҡатнашырға тура килә, күңелемә ятҡан эш башҡарыу, окшаш шөғөллө кешеләр менән аралашыу бәхете бирҙе ул миңә", – ти уңған ҡыҙ.

Етәкселек итеү сифаттары уҡыуҙа ла кәрәк Рәзиләгә. Утыҙ егет араһында уҡыған берҙәнбер ҡыҙ дүрт йыл төркөм старостаһы йөкләмәһен уңышлы башҡара. "Егеттәр араһында уҡыуым яуаплылыҡ өҫтәмәй ҡалдырманы. Төркөмдә тыуған проблемаларҙы, студенттар араһындағы аңлашылмауҙанлыкты хәл итергә тура килә. Ҡайһы сакта улар менән йомшаҡ та булырға, ә ҡайһы берҙә үҙеңдең уҫаллығыңды, талапсанлығыңды ла эшкә егергә лә тура килә. Үпкәләшеп алған сактар ҙа булғылай, әлбиттә. Әммә беҙҙең өсөн иң мөһиме – төркөмөбеҙҙәге берлек, татыулыкты һаҡлау".

Төркөмдә бер генә ҡыҙ булғанлыктан, Рәзиләгә бөтә гүзәл заттар намыҫын һаҡларға тура килә икән. Дәрестәрҙә лә, ятакта ла нәзәкәтлек төшөнсәһен хәтеренән сығармай ул. Көн дә күлдәк-итәктәр кейеүгә өҫтөнлөк бирә. Ҡыҙ кеше һәр саҡ биҙәнеп йөрөргә, үҙе тураһында хәстәрлек күреүгә өйрәнергә бурыслы тип иҫәпләй. "Егеттәр араһында уҡыу миңә бер мөһим һабаҡ бирҙе, – ти Рәзилә серен сисеп, – элек мин хис-тойғоларға тиҙ бирелә торғайным. Ә хәҙер үҙемдең йомшаҡ күңелле, романтик рухлы булыуымды күрһәтмәҫкә тырышам. Нисек кенә ауыр булмаһын, барыһына ла түҙергә, үҙемде ҡулда тоторға тырышам. Өйҙә яңғыҙ ҡалған сакта ғына күҙ йәштәренә ирек бирәм".

Рәзилә төркөмөндә лә берҙән-бер ҡыҙ, ғаиләлә лә берҙән-бер бала. "Берҙән-бер булыу миндә ныҡышмалылыҡ тәрбиәләй, көс, ышаныс бирә, тип әйтер инем. Мәҫәлән, берәй уңышһыҙлыктан һүң баш баҫып ҡалырға тырышмайым. Үҙемде ыңғай уйҙарға көйләп, алдағы маҡсаттарымды тормошҡа ашырырға тотонам. Ә ғаиләлә бер бөртөк булыуымды әүҙем тормош менән ҡаплатам. Төрлө сараларҙа ҡатнашыу, ҡыҙыҡлы кешеләр менән аралашыу, ниндәйҙер эҙләнеүҙәр һөҙөмтәһендә тормошома сағыу минуттар өҫтәйем, яңы дуҫтар табам. Донъяға ҡыҙ бала булып яратылһам да, әсәйем өсөн мин ул да, ҡыҙ ҙа. Сөнки тәбиғәтем менән гүзәл заттарса йомшаҡ күңелле, сәнғәт өлкәһенә ғашиҡ булһам да, һөнәрем егеттәрҙеке. Киләсәгемде етди һөнәргә генә бағышларға уйлайым", – тип яуаплай Рәзилә.

Эйе, ысынлап та, егеттәр һөнәрен һайлаған икән ул. Башҡорт дәүләт аграр университетының "Энергетика" факультетында IV курста белем ала. Күптәрҙе ҡыҙыҡһындырған – "Ниңә мотлаҡ ошо һөнәрҙе һайланың?" тигән һорауҙы мин дә бирмәй булдыра алманым. Бактиһәң, уны физика, математика фәндәрен, тәжрибәләр үткәреүҙе яратыуы түгел, ә бөләкәй генә сымдың бөтә донъяны ялғау, яктыртыу һәләтенә эйә булған электр утының серҙәренә төшөнөү теләге еңгән икән. Күптәрҙең ҡыҙ кешегә был йүнәлештә уҡыуы ауыр булыр, тип өгөтләүҙәре лә Рәзиләгә үҙ яҙмышын һайларға ҡамасауламай.

Киләсәккә пландары ла аныҡ билдәләнгән ҡыҙҙың: университетты тамамлағас, артабан аспирантурала белемен камиллаштырырға ниәтләй. Аҙаҡ үҙ факультетында фәнни эш менән шөғөлләнергә, студенттарға белем бирергә теләй. "Үҙебеҙҙең профессорҙарға ҡарап һоҡланам мин, – ти Рәзилә остаздары хаҡында. – Улар үҙ эшен бирелеп башҡара, шәкерттәренән лайыҡлы фән әһелдәре әҙерләргә тырыша. Араларынан "Электр машинаһы" дәресен алып барған Муфазалов Фуат Шәрифулла улын айырып әйтер инем. Уның белемле, тәжрибәле, ихтирамлы, һәләтле булыуы һәм намыҫлы хеҙмәте минең өсөн өлгө. Тынлы оркестрҙа уйнап йөрөгән, хеҙмәт стажы ла ҙур. Әле уға етмеш йәш булһа ла, егеттәрсә етеҙ. Мин дә уның кеүек республикабыҙға файҙалы кеше булырмын тип ышанам".

Рәзиләнең фәнгә булған мөхәббәтенә шигем ҡалманы. Сөнки әңгәмә барышында эш өҫтәлендәге "Электрик белешмәһе" күҙгә салынды. Быны шәйләп ҡалған ҡыҙ: "Мин был китап менән айырылғаным юҡ ул, уны һәр саҡ сумкамда йөрөтәм. Дәрестән, эштән һүң уҡыуға ваҡыт самалыраҡ ҡала. Ә бына юлда йөрөгәндә ҡулымдан төшөрмәйем. Фәнни китаптар уҡып, биш сәғәтлек Өфө-Сибай юлының оҙонлоғон да һиҙмәйем", – ти ул.

Карьера, яраткан шөғөл, дуҫтарҙың күплеге генә кешене тулыһынса бәхетле итә алмайҙыр. Нисек кенә булмаһын тормош мәғәнәһе матур ғүмер кисереүгә һәм йәшәүҙе дауам итеүгә, үҙеңдән һүң эҙ ҡалдырыуға ҡоролған. Рәзилә лә донъяның йәмен татыу янында ныклы терәк-таяныс булырҙай, рухи яктан камил ир заты барында ғына мөмкин тип һанай. Яҙмышын үҙе кеүек үк сәнғәт өлкәһендә һәләтле, рухлы башҡорт егетенә генә тапшырырға теләй. Ә иң ҡыуаныслыһы – рухлы башҡорт балаларына лайыҡлы әсәй булырына ышана.

***Филүзә СӘЛИХОВА әңгәмәләште.***

# КҮҘҘЕ ҺАҠЛАР КОНТАКТ ЛИНЗАЛАР

**Статистика мәғлүмәттәренән Рәсәйҙә һәр өсөнсө кешенең күҙҙәре насар күреүе билдәле. Һәм улар, нигеҙҙә, контакт линзаларға өҫтөнлөк бирә. Күреү һәләтенең насарайыуына булышлыҡ иткән сәбәптәрҙе асыҡлау һәм контакт линзаларын тәрбиәләү хаҡында кәңәштәр алыу ниәте менән Өфө ҡалаһы хужалыҡ иҫәбендәге муниципаль учреждениеһының тәжрибәле врач-офтальмологы ӘҒЗӘМОВ ВАДИМ ТАЗЕЛҒАЯН улына мөрәжәғәт иттек.**



**- Вадим Тазелғаянович, контакт линзаларҙы күпселек нисә йәштәрҙән ҡуллана башлайҙар?**

- Ҡулланыусыларҙың йәш арауығын 16-18-ҙән алып 50-гә тиклем тип билдәләр инем. Әлбиттә, шартлы рәүештә. Пациенттарыбыҙ күреү сифатын яҡшыртыу өсөн тәғәйенләнгән махсус сараларға башлыса үҫмерлек осоронда мохтажлыҡ кисерә башлай.

**- Күҙҙәрҙең йәштән үк насар күрә башлауына, һеҙҙеңсә, нимә сәбәпсе?**

- Был проблеманың нигеҙе заман технологияларына бәйле. Бигерәк тә компьютерҙарҙы киң ҡулланған осорҙа миопия менән ауырыусылар һаны артыуы ғәжәпләндермәй. Сәғәттәр буйына мониторға текәлеп ултырыусыны күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ әле. Ниндәй һын хасил була? Алға төбәлгән

килеш һис ҡымшанмай ваҡыт үткәргән кеше. Ул шул рәүешле үҙен дә, күҙҙәрен дә хәрәкәттән бөтөнләй мәхрүм итә. Күҙҙәр яҡындағы предметтарҙы ғына ҡарарға өйрәнә, алыҫтан күреү һәләте насарая, йәғни күреү даирәһе кескәй ара менән генә сикләнә. Ошо рәүешле заман ауырыуы – күрәшлек (близорукость) барлыҡҡа килә. Ә үткән быуатта хәлдәр бөтөнләй башҡаса булған. Совет заманында райондарҙа медицина тикшеренеүе үткәргән саҡта яҡшы күреүселәр һаны 98-99 % тәшкил иткән, тимәк, күҙ менән сирлеләр бары тик 1-2 %-ҡа ғына еткән. Быны сере ябай. Оҙаҡ ваҡыт телевизорға йәки компьютерға текәлеп ултырыусылар менән сағыштырғанда, көн дауамында физик эш башҡарғандарҙың күҙҙәренә көс аҙыраҡ төшә. Сөнки бер туҡтауһыҙ хәрәкәтләнеү һөҙөмтәһендә ҡан йөрөшө яҡшыра, күҙ кислород менән туклана, һеңерҙәр тонуста тора, тимәк, күреү һәләтенең түбәнәйеү мөмкинлеге сикләнә тиган һүҙ.

**- Был сирҙең нәҫелдән күсеү мөмкинлеген дә инҡар итеп булмайҙыр?**

- Ул икенсел фактор. Тәү сиратта, күҙҙәргә көсөргәнешлек ҙур зыян килтерә. Мәҫәлән, китап, гәзитте яҡын тотоп йәки ятып уҡыу, тура ултырмау, яҡтылыҡтың дөрөҫ төшмәүе, эйелеп яҙыу күҙҙәргә көсөргәнеш тыуҙыра. Ә транспортта уҡыуҙың зыяны тураһында әйтеп торорға ла кәрәкмәйҙер. Күҙҙәрҙе хәстәрләмәү башҡа ағзаларға ла кире тәьҫир итә, мәҫәлән, умыртҡа һөйәге, муйын ауыртыуына килтерә. Шуға күрә китап-дәфтәрҙе күнегелгән аранан аҙ ғына алыҫҡараҡ ҡуйып уҡырға, һәм компьютерға ла текәлмәҫкә кәңәш итер инем. Нисек кенә булмаһын, сирҙе дауалағансы уны булдырмау хәйерлерәк бит.

**- Ә линзаның кеше һаулығына зыяны бармы?**

- Зыяны юк, киреһенсә, ул күҙ һәм күҙ мускулдарын өҫтәмә йөкләмәнән азат итеп, яҡшы күреүгә булышлыҡ итә. Күреү даирәһен киңәйтә. Контакт линзаларҙы йөрөтөү артыҡ уңайһыҙлыҡ тыуҙырмай, сөнки беҙҙең поликлиникаға килгән һәр пациент күҙ үҙенсәлектәрен асыҡлаусы шәхси тикшеренеү үтә. Шунан һуң уға форма, күләм йәһәтенән тап килгән линзалар тәҡдим ителә.

Күҙ тәҙәлөшөнә һәм мөгөҙсәнең бөгөлөшөнә ҡарап төрлө линзалар яһайҙар. Күптәрҙең күҙ мөгөҙсәләре бер радиуслы, ялпаҡ формала. Уларға ғәҙәти контакт линзалар уңайлы. Әммә ҡайһы бер мөгөҙсәләрҙең текәрәк форма алыуы арҡаһында махсус линзалар булдырылған. Күҙ ҡабағының күҙ алмаһына ниндәй кимәлдә ятыуына ҡарап төрлө ҡалынлыҡтағы линзалар ҡулланыла. Әгәр күҙ ҡабаҡтары иркен һәм бушаҡ икән, тимәк линзаның ситтәре ҡалынырағы, ә күҙгә тығыҙ ятҡандарына йоҡарағы һайлана. Шулай уҡ күҙ алмаһының диаметрын үлсәү ҙә мөһим. Сөнки бәләкәйерәк диаметрлы контакт линза бушағыраҡ, ә киңерәк диаметр тығыҙыраҡ ултыра.

Контакт линзалар ентекле тәрбиәләүгә мохтаж: уларҙы көн дә махсус һыу менән таҙартырға, контейнерҙағы шыйыҡсаны алыштырырға кәрәк. Күҙгә сәң инеүенән һаҡланырға, һәм иң мөһиме, билдәләнгән ҡулланыу ваҡыты үткәс тә линзаны яңыһына алыштырырға кәрәк.

**- Контакт линза йөрөтөүҙең мәшәкәте күп, шуға, бәлки, күҙлек кейеү уңайлыраҡтыр?**

- Контакт линзаны ла, күҙлекте лә хуплайым. Икеһенең дә ыңғай һәм кире яҡтары бар. Күҙлек менән сағыштырғанда контакт линза ҡулланыу йәһәтенән уңайлыраҡ: ул ысынбарлыҡты боҙмай, сифатлы итеп сағылдыра. Күреү даирәһе лә киңәйә. Ә күҙлек менән күҙ араһындағы һауа арҡаһында предметтар, һындар алыҫыраҡ күренә. Күреү даирәһе лә сикләнә, йәғни эргә-тирәне күҙлек аша ҡарау өсөн башты кәрәкле йүнәлешкә борорға тура килә, ә контакт линзала бары күҙ йөрөтөү ҙә етә. Шул арала күҙҙәр автоматик рәүештә хәрәкәтләнеп, файҙалы матдәләр һәм кислород алышыныуын һәм ҡан йөрөшөн тиҙләтә.

Линзаны күҙҙәрҙе ял иттергәндән һуң ғына кейеү кәңәш ителә. Бигерәк тә оҙаҡ файҙаланыуға тәғәйенләнгәндәрен йыш таҙартып тороу фарыҙ. Көнө буйы линзала йөрөү күҙҙәргә кислород менән туҡланырға ҡамасаулай. Һәм был төрлө бактерияларҙың үрсеүенә килтереүе ихтимал. Шулай итеп, кисен өйҙә булғанда күҙлек кейергә тәҡдим ителһә, төрлө мәҙәни сараларға йөрөгәндә, спорт менән шөғөлләнгәндә (бигерәк тә ҡыш көндәрендә) контакт линзалар уңайлыраҡ. Мәҫәлән, физик күнегеүҙәр эшләгәндә, ауыр эштәр башҡарғанда күҙлек ҡамасаулай, ямғыр яуғанда, ҡышҡы һалҡында һыулана, парлана.

Шулай уҡ линзаларҙың ультрафиолет нурҙарынан һаҡлау сифаты ла бар. Улар күп ваҡыттарын тышта үткәргән һөнәр эйәләре өсөн ҡулайлы.

**- Бөгөнгө көндә һеҙҙең поликлиника ниндәй контакт линзаларына өҫтөнлөк бирә?**

- Беҙҙең пациенттар контакт линзаларҙың хилафилкон, окуфилкон, гидрогель, гиполан кеүек материалдарҙан етештерелгәндәре араһынан гиполан нигеҙендә яһалғанына туҡталды, сөнки улар тейешле кимәлдә һыу һәм һауа үткәрә, үтә ҡиммәт тә түгел. Составындағы һыу 50-60%-ҡа етә. Мәҫәлән, гидрогель линзаһының һыуы 70%-ка етеүе күҙҙең короloғон булдырмай һәм ул ике тапҡыр яҡшыраҡ тын ала. Әммә һыу күләме юғары булған һайын линза йомшаҡ төҙөлөшлө, саңды тиҙ һеңдереүсәнгә әйләнә. Үтә йоҡа булыуы арҡаһында уны ҡулланыуы ла ҡатмарлаша. Бындай линзаларҙы йыш алыштырырға тура килә. Әлеге сығымдарҙы оптимәлләштереү осоронда был бик отошло түгел, шуға ла бөтә линзалар араһында бар күрһәткестәр буйынса гиполан өҫтөнлөк ала тип уйлайым.

**- Контакт линза төрҙәренең ҡайһыһы уңайлыраҡ: йомшағымы әллә ҡатыһымы?**

- Улар араһында артыҡ ҙур айырма юк та тиерлек. Бары тик ҡаты линзаларға өйрәнеү күберәк ваҡыт талап итә. Линза кеймәй йөрөп алғас, күҙҙе ҡайтанан уларға өйрәтергә кәрәк була. Шул йәһәттән бер аҙ ҡыйынлыҡ тыуыуы ихтимал. Ә йомшаҡ линзаларҙы ҡабаттан "үҙләштерергә" кәрәкмәй. Йәнә улар күҙгә ныҡлы, тығыҙ ултырыуы менән дә уңайлы. Линза диаметры күҙ мөгөҙсәһенән киңерәк булғанға күрә күҙҙең һынын ҡабатлай. Ҡаты линзалар менән бөтөнләй икенсе хәл күҙәтелә: диаметры күҙ мөгөҙсәһенеке менән тап килә, тимәк, ултырыу майҙаны ла бәләкәй.

**- Күҙҙең төҫөн үҙгәртеүсе төҫлө ҡаты линзалар хаҡында нимә әйтерһегеҙ?**

- Төҫлө линзалар матурлыҡ йәһәтенән генә ҡулланыла. Уның күреү һәләтенә ыңғай йоғонтоһо юҡ. Үҫмер ҡыҙҙарға күҙ төҫөн төрләләндереү имидж үҙгәртеү мөмкинлеген бирә. Әммә уның кәмселлектәре лә юҡ түгел. Төҫлө йәки ниндәйҙер биҙәк, һүрәт кеүек өҫтәмә ҡатламдар күҙҙең тын алыуын сикләй, ҡараш даирәһен тарайта. Кеше тирә-яҡты бәләкәй генә аранан ҡарарға мәжбүр була. Һөҙөмтәлә, күҙгә өҫтәмә көс төшә.

**- Тормошта көтөлмәгән хәлдәр ҙә осрап тора. Мәҫәлән, төнгөлөккә линзаны һалыу мөмкинлеге булмаһа нимә эшләргә? Линзала йоҡларға яраймы?**

- Линзаны кейем менән сағыштырайыҡ. Беҙ тәүлек әйләнәһенә: өйҙә, эштә, ҡунаҡта, йоҡлағанда ла бер үк кейемдә йөрөмәйбеҙ бит. Һәр нәмәнең ҡулланыу ваҡыты бар. Линзаларҙы ла оҙаҡ сисмәү зыянлы. Үҙегеҙ ял итәһегеҙ икән, күҙҙәрегеҙ хаҡында ла онотмағыҙ. Әгәр ҙә һеҙҙең менән бындай хәл китеп тыуһа, линзаны аҙ ғына тоҙ өҫтәлгән ҡайнаған һыуға һалып торорға була. Әммә был ысул менән артыҡ мауыҡмаҫка кәңәш итер инем, сөнки линзаларҙың һыу-тоҙ балансы боҙоласаҡ. Аҙаҡ ул формаһын юғалта, бөртә, киңәйә, ҡалыная башлай. Ундай линзаларҙы ҡуллана башлаһаң, күҙҙе ауырттырыуы мөмкин. Шуға ла башта үҙенең махсус шыйыҡсаһы менән ентекләп таҙартып алырға кәрәк.

**- Күрәшлелек күрһәткестәрен белеп кенә контакт линза алып буламы?**

- Юҡ, кеше мотлаҡ белгестәргә мөрәжәғәт итергә тейеш. Сөнки ул үҙенең күҙ параметрҙары тураһында хәбәрҙар түгел. Шуға бер ниндәй тикшереүһеҙ линза алыу, минеңсә, мәғәнәһеҙлек.

**- Контакт линзалар менән мунса инергә, һыу инергә яраймы?**

- Теоретик күҙлектән ҡарағанда, ярай. Ә бына саунаға йөрөргә кәңәш итмәҫ инем. Сөнки саунала һауа ҡоро, температура 100-120 градустан ашып китә. Ә яртылаш һыуҙан торған линзаның өҫкө ҡатламының эҫегә кибеүе мөмкин. Мунсаның һыулы һауаһы зыянһыҙ, бары тик гигиенаны һаҡларға, йыуыныу сараларын күҙгә яҡын ебәрмәҫкә кәрәк, юғиһә уларҙың реакцияға инеүе бар.

**- Кемгә бөтөнләй линза кейергә ярамай?**

- Күҙҙәрҙең һәм танау тирә ҡыуышлыҡтың шешеү ауырыуҙары, киҙеү ваҡытында ҡәтғи тыйыла.

**- Журнал уҡыусыларына теләктәрегеҙ?**

- Йәштәргә иң ҙур теләгем шул: күҙҙәрегеҙҙе артыҡ көсәндермәгеҙ, йышыраҡ ял минуттары ойоштророға тырышығыҙ. Эшегеҙ компьютер алдында оҙаҡ ултырыуҙы талап итә икән, күҙ өсөн махсус күнегеүҙәр яһағыҙ. Иң ябайы, тәҙрә алдына баҫып, алыҫтағы предметтарҙы күҙәтегеҙ йәки күҙҙәрҙе йомоп бер нисә минут ултырығыҙ. Төнгөлөккә йәшел сәйҙән компрестар яһағыҙ. Эшегеҙҙе ваҡ ҡына өлөштәргә бүлергә тырышығыҙ. Эшегеҙ өйөлөп ятһа ла, һаулығығыҙға битараф булмағыҙ. Күреү һәләтегеҙҙе йәштән һаҡлағыҙ. Үҙегеҙҙе күркәм донъяға һау-сәләмәт күҙҙәр менән бағыу бәхетенән мәхрүм итмәгеҙ.

***Филиә БУЛАТОВА әңгәмәләште.***

# ҺЕҘ МАШИНА АЛЫРЛЫҠ АҠСА ЙЫЙЫРҒА ҺӘЛӘТЛЕМЕ?



**Бөгөнгө көндә телевизор, һыуытҡыс, машина кеүек ҙур әйберҙәрҙең хаҡын тулыһынса түләп, һатып алыусылар һаны һирәк. Шуға ла ҡайһы берәүҙәр аҡса йыйыуҙы хуп күрә, ә ҡалғандары үтескә һорап тороу яҡлы. Үҙегеҙҙең ҡайһы төркөмгә ҡарағанығыҙҙы белгегеҙ килһә, түбәндәге тесты үтергә тәҡдим итәбеҙ. Әгәр 1, 3, 5, 7, 9-сы һорауҙарға — «эйе» һәм 2, 4, 6, 8, 10-ға «юҡ» тип яуап бирһәгеҙ, иҫәбегеҙгә 2-шәр мәрәй өҫтәгеҙ. Башҡа варианттар өсөн 0 мәрәй.**

1. Күп осраҡта аҡсаны йәшереп ҡуям, ә һуңынан уны таба алмай йонсойом.
2. Әйберҙәрҙе алдан төҙөгән теҙмәгә нигеҙләнеп алам, унан бер ҡасан да тайпылмаҫҡа тырышам.
3. Эш хаҡы алған көндө үк, үҙемә байрам ойоштороп, аҡса туҙҙырып алам.
4. Сифатһыҙ, файҙаһыҙ әйберҙәр һатып алырға аҡса йәлләйем.
5. Сиратта тороуҙы енем һөймәй, минән алда 3-4 кеше генә булһа ла, сығып китеү яғын ҡарайым.
6. Осрашыуҙарға бер ваҡытта ла һуңламайым, һәр ерҙә тәртип яратам.
7. Кеҫәм буш булһа, үҙ-үҙемә ышанысым кәмей.
8. Дуҫтарым, туғандарым ярҙамына мохтажлыҡ кисермәй йәшәргә тырышам.
9. Киләсәк тураһында уйлап ҡайғырмайым, “бөгөн һәм хәҙер” принцибы буйынса йәшәйем.
10. “Һауалағы торнаға ышанып, ҡулыңдағы сәпсекте ысҡындырма” тигән фекер яҡлымын.

**0-10 мәрәй.** Әгәр ҙә берәй әйбер һатып алырға ниәтләйһегеҙ икән, аҡса туплай башлаһағыҙ ҙа була. Сөнки һеҙ – көслө рухлы кеше, аҡса йыя алаһығыҙ. Бер ниндәй ҡаршылыҡтар алдында ҡаушап ҡалмай, маҡсатығыҙға ынтылаһығыҙ.

**12-20 мәрәй.** Аҡса менән ауырыраҡ эш итәһегеҙ. Улар һеҙҙә оҙаҡ тотҡарланмай. Шуға күрә уларҙы йыйып та маташмағыҙ. Ваҡытығыҙҙы бушҡа ғына сарыф итерһегеҙ. Әгәр ҙә машина һатып алыу теләге бар икән, дуҫтарығыҙҙан үтескә генә һорап тороғоҙ.



# ВАҠЫТ УҘА, ШИНАЛАР ТУҘА...

**ДОНЪЯНЫ АВТОМОБИЛДӘР БАҪҠАС, ИЛДӘ ХӘЛ ИТЕП БУЛМАЙ ТОРҒАН ТАҒЫ БЕР МӘСЬӘЛӘ ҠАЛҠЫП СЫҠТЫ: ҠОРОС АРҒЫМАҠТАРҘЫҢ ТУҘҒАН «АЯҠ КЕЙЕМЕН» ҠАЙҘА ҠУЙЫРҒА? ЙЫЛ ҺАЙЫН ИЛДЕҢ УРТАСА БЕР ӨЛКӘҺЕНДӘ ГЕНӘ ЛӘ 90 МЕҢ ТОННА ИҪКЕ ПОКРЫШКА ТУПЛАНА. УЛАР ЮЛ БУЙҘАРЫНДА АУНАЙ, ТӨРЛӨ СКЛАДТАРҘА ӨЙӨЛӨП, СҮПЛЕКТӘРҘӘ АҒЫУЛЫ ҺАҪЫҠ ЕҪ СЫҒАРЫП ТӨТӘП ЯТА.**

Иҫке шиналар бик шәп яна, уларҙы төрлөсә ҡулланып була. Әйтәйек, ҡыштарын юлда ватылып ҡалған осраҡтарҙа, ярҙам килеп еткәнсе ризина тәгәрмәсте яндырып, туңып үлмәйенсә ҡалалар. Уларҙы буяп, балалар майҙансыҡтарында төрлө пирамидалар яһау өсөн дә файҙаланалар. Эсенә тупраҡ һалып, сәскә ултырталар. Шиналарҙы өҫтө-өҫтөнә өйөп, тишектәр уйып, еләк тә үҫтерәләр...



Әммә был торғаны бер наҙанлыҡ! Байтаҡ йылдар элек сит ил ғалимдары шина менән бәйле бөтә нәмәнең – уны етештереү, ремонтлау һәм башҡаларҙың рак сиренә килтереү ихтималлығы ҙур, тип белдергән. Бындай мәғлүмәттәр беҙҙең илдә сер булып һаҡланды. Тәүге тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе 1988 йылда ғына йәмәғәтселеккә барып етте. Мәскәүҙең шина етештереү заводында уҙғарылған анализдар ундағы эшселәрҙең рактан үлеү ҡурҡынысы 2,5 тапҡырға артығыраҡ булыуын күрһәтте.

Ә йыйыу цехында хеҙмәт итеүселәргә был ҡурҡыныс өс тапҡыр артығыраҡ янай. Улар нигеҙҙә үпкә һәм ашҡаҙан яман шеше менән ауырып китә. Үпкә рагы бигерәк тә яңы резина тәгәрмәстәр яһағанда газдарҙы вулканлаштырыусыларҙа, шулай уҡ иҫке шиналарҙы яңыртыу хеҙмәтендәгеләрҙә йыш осрай. Ашҡаҙан шеше иһә резина бүлеп сығарған газ һәм туҙан ҡатнашмаһы арҡаһында барлыҡҡа килә. Камера һәм шиналарҙы ҡайнар юл менән ремонтлағанда, протекторҙы яңыртҡан ваҡытта организмға айырыуса ҙур хәүеф янай.

Кеше өсөн зыянлы тармаҡтар күп – химия, гальваника... Әммә, ғәҙәттә, күңелһеҙ әҙемтәләр тураһында уйлап тормайбыҙ. Ҡайҙа ла булһа эшләргә, ғаиләне туйҙырырға тырышабыҙ. Етмәһә “зыян өсөн” аҡсаһы ла күберәк түләнә бит, пенсияға ла иртәрәк сығаһың... Шулайын-шулай. Әммә бындай шарттарҙа хеҙмәт итеүселәр үҙҙәрен генә түгел, яҡындарын да ҙур ҡурҡыныс аҫтына ҡуя. Мәҫәлән, һаулыҡ өсөн зыянлы урында эшләүсе ҡатын-ҡыҙҙың ауырыу бала табыу хәүефе өс тапҡырға артығыраҡ. Резина эшкәртеү цехында эшләүсе ҡатын-ҡыҙҙарҙан лейкоз менән сирләүсе бала тыуыу осрағы йыш осрай.

Бындай заводтар үҙ хеҙмәтсәндәрен генә түгел, ә шул тирәлә йәшәүсе халыҡты ла ағыулай бит әле.

**1998 йылда АҠШ-тың ТӨНЬЯҠ КАЛИФОРНИЯ ШТАТЫНДА 7 млн. ИҪКЕ ПОКРЫШКА ЙӘШЕН ҺУҒЫУ АРҠАҺЫНДА ЯНЫП КИТӘ. ЯНҒЫНДЫҢ ЭҘЕМТӘЛӘРЕ ҺӘЛӘКӘТЛЕ БУЛА. БАРЫ ТИК УН ЙЫЛДАН ҺУҢ ҒЫНА БЫЛ УРЫНДА ТӘБИҒӘТТЕ ТУЛЫҺЫНСА ТЕРЕЛТӘ АЛАЛАР.**

Иҫке покрышкаларҙан яһалған скульптуралар









Шина яһау – зыянлы етештереү сәнәғәте, ә автопокрышкаларҙың зарары бармы? Нимә ул автопокрышка? Һауа өрҙөрөлгән тәгәрмәс тығымы. Уның эсендәге һауа беҙҙең организм өсөн шаҡтай зарарлы. Составында йөҙләгән ағыулы химик матдә бар. Шул иҫәптән N-нитрозамин. Бының нимә икәнен беләһегеҙме? Иң ҡурҡыныс канцероген һәм мутаген! Ул бит шин эсендә генә тороп ҡалмай, ә тышҡа ла сыға. Шуныһы ла бар, температура ни ҡәҙәр юғарыраҡ булып, шина нығыраҡ ҡыҙған һайын, ул шул ҡәҙәр күберәк бүленеп сыға. Шәп йөрөгән ваҡытта ҡапыл тормозға баҫҡанда, боролоштарҙа тиҙлекте кәметмәгәндә, ышҡылып, уның ҡыҙыуы тағы ла арта. N-нитрозамин һауанан ауырыраҡ, ул өҫкә күтәрелмәй, аҫтараҡ була, беҙ шуны һуларға мәжбүр.

Йәнә шина туҙаны тигән нәмә лә бар. Бынының N-нитрозаминдан да хәтәрерәк. Сөнки уның составын бенз(а)пирен тәшкил итә. Иң ҡурҡыныс канцерогендарҙың береһе. Был туҙан һулыш аша организмға эләгеп, үпкә йәки ашҡаҙанға йәбешеп ҡала. Шуға күрә лә автотрассалар тирәһендә йәшәүселәр араһында рак менән ауырыусылар 2-3 тапҡыр күберәк.

Балалар майҙансыҡтарында һәм башҡа ерҙәрҙә файҙаланылыусы һеҙ әйткән иҫке шиналар иһә шул тирәлә канцероген матдәләр туплаНыуға килтерә, былай ҙа насар экология шарттарында йәшәүселәрҙең сәләмәтлеген ҡурҡыныс аҫтына ҡуя. Уларҙы буяп ҡуйыуҙың бер файҙаһы ла юҡ.

Санэпиднадзор шиналарҙы хәүефле тауар исемлегенә индереүгә ҡаршы тора. Был исемлектә йорт йыһазы, уйынсыҡтар, имеҙлектәр – барыһы ла бар, әммә шин юҡ. Шуға күрә Рәсәй заводтары ла, сит илдекеләр ҙә әлеге тауарҙың зыянлы булыу мәсьәләһендә бер ниндәй ҙә яуаплылыҡ тоймай.









**ҺАНДАР: 1 ТОННА ИҪКЕ МАШИНА ПОКРЫШКАЛАРЫН ЯНДЫРҺАҢ, АТМОСФЕРАҒА 270 КИЛОГРАММ ҠОРОМ ҺӘМ 450 КИЛОГРАММ АҒЫУЛЫ ГАЗ БҮЛЕНЕП СЫҒА.**

***Ғәли ӘХМӘТЙӘНОВ әҙерләне.***

*Мар. СӘЛИМ*

# ЯҢЫСА ҺЕПЕРЕҮСЕ

Сатирик хикәйә

Был йортҡа әйләнеп тә ҡарамам тигәйнем, әллә ни эшләп, үҙем дә һиҙмәҫтән, боролдом бит шул яҡҡа. Белмәйем, әллә берәй тылсымлы көс әүрәтте, әллә яҙмыш...

Бынан ике йыл элек ошонан яй ғына үтеп бара инем, күрәм: мөһабәт бинаның парад ишеге төбөндә бер төркөм ир-ат йоҙроктарын болғай-болғай ҡыҫҡырыша, шаулаша. Элек шулай хөкүмәт йорто алдына теҙелеп сәйәси азатлыҡ, һүҙ ирке даулайҙар ине. Инде нимә етмәй икән быларға, тип эргәләренә барһам, ришүәтсе чиновниктарға ҡаршы пикет ойоштороғандар икән.

– Ниңә ситтән генә күҙәтеп тораһың? – тип өндәште миңә пикетсыларҙың береһе. – ФСБ-нанмы әллә?

– Юҡ, мәктәптән. Физика уҡытыусыһы.

– Коррупционерҙарҙы яҡларға йыйынмайһыңдыр бит?

– Яҡлау түгел, мин уларҙы!.. – Яуабым ышаныслыраҡ булһын өсөн, Маяковскийса итеп: – Я волком бы выгрыз... коррупцияны! – тигәс, теге йылмайып ебәрҙе.

– Үҙебеҙҙең кеше икәнһең, әйҙә, беҙҙең менән! – Һәм миңә транспарант тотторҙо. Унда эре хәрефтәр менән «Коррупцияны тамырынан йолкоп ташлайыҡ!» тип яҙылғайны. Бик дөрөҫ һүҙҙәр. Күптәрҙең күңеленә хуш килерлек. Президентыбыҙ ҙа, ана, гел шуны һөйләй.




Мин ирекле Рәсәй гражданына хас ғорурлыҡ менән, бөгөнгө көндә бик актуаль яңғыраған лозунгыны күтәреп, чиновниктарҙың тәҙрә төбөнә үк барып баҫтым. Ләкин хакимиәт вәкилдәре тәҙрәгә ҡапланып уны уҡыу түгел, бүлмәләренән танауҙарын да күрһәтмәне. Асыуым сығып:

– Ришүәт алыусыларға оят! Бөтһөн коррупция! – тип ҡыҫҡырғайным, ике әҙмәүер ике яғымдан эләктереп тә алды, милиция машинаһына индереп тә ултыртты.

– Ҡайҙа алып китәһегеҙ?

– Банкетка! – тип мыҫҡыллап көлдө егеттәр.

Улар мине киң бүлмәлә ултырған ҙур погонлы, ҡап ҡорһаҡлы кеше алдына килтереп баҫтырҙы. Уныһы иномарка фараһындай ҡыҙыл күҙҙәре менән миңә сәнсеп ҡараны ла:

– Ызначит, – тине, – һеҙ беҙҙең стабильный йәмғиәтебеҙҙе ҡаҡшатырға теләйһегеҙ?

– Ҡаҡшатырға түгел, нығытырға! – Мин ебеп төшмәнем. – Ана шуның өсөн тыныс пикет үткәрәбеҙ.

– Тыныс, ти! Беренсенән, һеҙ тауышланып коррупцияға ҡаршы көрәш комиссияһының эшенә ҡамасаулайһығыҙ. Икенсенән, властарҙың рәхсәтенән башҡа киң саралар үткәрергә хаҡығыҙ юҡ. Аңланыңмы, экстремист?!

– Аңламаным.

– Аңламаһаң... Эй, егеттәр, аңлатығыҙ был аңраға!

Теге әҙмәүерҙәр мине тимер ишек янына елтерәтеп килтерҙе лә ҡапыл туҡтап ҡалды.

– Бында бит, ағай, рәхәт түгел, – тине береһе, минең менән, ниһайәт, кешесә һөйләшеп.

– Бигерәк тә һеҙҙең йәштәге кешегә... – тип өҫтәне икенсеһе.

– Улай бик йәлләһәгеҙ, ҡайтарып ебәрегеҙ.

Тегеләр икеләнгәндәй итте:

– Ебәрер инек тә... Тәртип һаҡлаусыларға улай килешмәй.

– Мәсьәләнең мораль яғы бар.

Шул саҡ башыма ҡыйыу фекер килде:

– Мораль яғын үҙем күтәрәм. Меңәр һум етерме һеҙгә «за моральный ущерб»?

– Аҙыраҡ та инде, – тигәйне береһе, икенсеһе:

– Йә, ярай, бюджетникка ташлама булһын, – тине.

Егеттәр меңлектәрҙе кеҫәләренә сумдырҙы ла:

– Ҡара уны, ағай, башҡаса теге йорт янында буталып йөрөмә, – тип дуҫтарса кәңәш биреп, мине оҙатып ҡалды.

Икенсе көндө мәктәпкә килеү менән директор саҡыртып алды.

– Тейешле органдарҙың сигналдары нигеҙендә мин һеҙҙе эштән ебәрергә мәжбүрмен, – тине ул рәсми тауыш менән. – Ғариза яҙып китһәгеҙ, үҙегеҙгә яҡшыраҡ булыр.

Шулай итеп, мине «үҙ теләгем менән» мәктәптән ҡыуҙылар. Эшкә алыуҙарын һорап бер нисә урынға ғариза яҙып ҡараным. Әммә бушҡа ғына. «Беҙгә экстремист кәрәкмәй!» – тип гелән кире борҙолар.

Ике йыл буйы эшкә урынлаша алмай ҡаңғырҙым. Был ваҡыт эсендә әллә нисә түрәне коррупцияла ғәйепләп, вазифаларынан бушаттылар. Тик улар төрмәгә лә ябылманы, Себергә лә һөрөлмәне. Мәскәүгә китеп, оторо бейек урынға менеп ҡунаҡланылар. Ә мин иһә тыуған еремдә һаман эшһеҙ йөрөйөм...

Әле бына шуны уйлап, теге матур йорт янынан үтеп бара инем, ғәжәп күренешкә тап булдым. Дипломаттар, портфелдәр тотҡан эшем эйәләре ожмах ҡапҡаһындай киң ишектән бер инеп-бер сығып, әле унда, әле бында тыз-быз йүгерешә. Дуст һипкәс, ҡайҙа барып бәрелергә белмәй сапҡан тараҡандар шикелле.

Улар араһында Килмәт синыфташымды күргәс, һорамайынса түҙмәнем. Былтыр ул бында дворник булып урынлашҡайны, белмәй тормаҫ.

– Нимә, класташ, әллә һеҙҙә лә МЧС күнекмәләр үткәрәме?

– Күнекмә, тиһең. Ысын тревога! Яңы хужа иҫке хужаның командаһын туҙҙыра. Бәй, һин ишетмәнеңме ни? – Килмәт миңә ғәжәпһенеп ҡараны. – Элекке хужа тарафынан коррупцияла ғәйепләнеп, эшенән ҡыуылған Сейбешкәнов әфәнде башлыҡ булып ҡайтты лаһа. Хәҙер ул әшнәләрен яңынан үҙ янына йыя.

– Элекке бандаһынмы?

– Сеү, ауыҙыңды үлсәп ас! Бөгөнгө сәйәси телдә банда, шайка, кландар «команда» тип атала. Әле как раз командаларҙың алмашынған сағы.

– Ә һин тоҡсай күтәреп ҡайҙа киттең?

– Мин бит элекке хужа командаһынан. Отставкаға сыҡтым, – тине лә Килмәт ҡара тоҡсайын сисеп ебәрҙе. – Ә был минең фирменный эш ҡоралым.

Тоҡсай эсендә синтетик һепертке күргәс, көлөп ебәрҙем:

– Урам һепереүселәрҙең дә командаларға бүленгәнен белмәй инем әле.

– Белмәһәң, бел. – Шаярыу ҡайғыһы юҡ ине Килмәттә. – Мине бында урынлаштырған дәрәжә эйәһе менән бергә үҙем теләп ғариза яҙҙым. Мин эш табырмын, тик бына уға йәнә власть алмашынғанын, йәғни иҫке командаsuccessfully?

– Лайыҡлы алмаш! – тип, миңә һепертке-һен һондо. – Бар хәҙер үк минең урынға!

– Нисек? Мин улар командаһында түгел дәһә.

– Ә һин, элекке режим ҡорбанымын, тип әйт.

Ысынлап та, урыҫ әйткәндәй, чем чёрт не шутит. Һеперткене сәскә кеүек ҡәҙерләп тоттом да, мәрмәр баҫҡыстан атлап, индем ожмах һарайына. Инеү менән ике яҡтан ике эшем эйәһе – әйтерһең, Нәнкир менән Мөнкир! – береһенән-береһе уҙҙырып, һорау яуҙырырға тотондо:

– Исем-атың?

– Затың?

– Маҡсатың?..

Мин уларҙың бөтә һорауына ла сатнатып яуап бирҙем.

– Халҡыбыҙ көтөп алған яңы хакимиәткә тоғро хеҙмәт итергә теләйем! – тигәс, тегеләрҙең ауыҙҙары ҡолаҡ артына етте.

– Бөгөнгө инновация һәм нанотехнология заманында физика закондарын белгән эспитсиәлистәр бик кәрәк беҙгә, – тигән вердикт сығарҙылар ахырҙа. – Һеҙҙе яңыса һепереүсе вазифаһын башҡарыусы, йәғни «и.о. нанодворника» итеп алабыҙ.

Бына шулай мин мәртәбәле ерҙә эшләй башланым. Хеҙмәтемде шул тиклем яратып башҡарам, ҡалабыҙҙың иң матур бинаһы янында бер бөртөк сүп күрмәҫһең!

Әйткәндәй, был мөһим йорттоң бүлмәләре яңы чиновниктар менән тулды. Бер генә буш ултырғыс та ҡалманы. Йылы урынға ултырыусылар араһында элекке эшкинмәгән эшем эйәләре лә юҡ түгел. Ҡайһы береһе сүп-сар урынына ла тормаҫлыҡ хатта. Эх, мин әйтәм, шуларҙы тимер һепертке менән һепереп осорорға!

Юҡ, юҡ, зинһар, дөрөҫ аңлағыҙ. Мин был һүҙҙәрҙе кеше ишетерлек итеп ҡысҡырып әйтмәйем. Бары тик шулай тип уйлайым ғына. Ә уйлау – ул әлеге йәмғиәттә емерергә саҡырыу, тигән һүҙ түгел. Тимәк, бик нык теләһәң дә, мине экстремизмда ғәйепләп булмай.

Шулай, йәмәғәт, мин хәҙер экстремист түгел. Мин хәҙер яңыса һепереүсе!

# ФЕВРАЛЬ АЙЫНА ЙОНДОҘНАМӘ

## ҠУҘЫ



Февраль айы Ҡуҙыларға үҙҙәренең лидер һәм ойоштороусы сифаттарын асырға ярҙам итер. Айҙың икенсе яртыһы пландарығыҙҙы тормошҡа ашырыу өсөн ҡулайлы. Етәксегеҙ менән дә мөнәсәбәтегеҙҙе яҡшыртыу мөмкинлеге асылыр. Шәхси тормошоғоҙҙа тотороҡлолоҡ барлыҡҡа килер.

## ҮЛСӘҮ



Был айҙа тәүәккәллерәк булырһығыҙ, тирә-йүндәгеләр тарафынан иғтибар көсәйер. Спортта, ярыштарҙа, ижади эшмәкәрлектә уңыштар көтөлә. Туғандарығыҙ, яҡындарығыҙ менән үҙегеҙҙе борсоған уйҙарығыҙҙы уртаҡлашыу өсөн уңайлы ваҡыт.

## БУҒА



Буғаларҙың карьера буйлап үрләү теләге уяныр. Ошоға бәйле яңы маҡсаттарығыҙ тыуыр. Уларҙы тормошҡа ашырғанда үҙ көсөгөҙгә генә ышанығыҙ, был һеҙгә уңышҡа өлгәшергә ярҙам итер. Февраль айы яңы эш башлау өсөн уңайлы ваҡыт. Уҡыуҙа әүҙемлек күрһәтегеҙ.

## САЯН



Февраль айында күптән күрешмәгән туғандарығыҙ менән аралашыу теләге уяныр. Уйлап табыу һәләтегеҙҙе күрһәтерһегеҙ. Барлыҡ осрашыуҙар ҙа күңелле һәм ҡыҙыҡлы үтер. Өйҙә ремонт башлау, ҡыҫҡа сәфәрҙәргә сығыу ҙа отошло. Был айҙа насар ғәҙәттәрегеҙҙән арыныу ҡыйын булмаҫ.

## ИГЕҘӘКТӘР



Был ай Игеҙәктәргә үҙ тикшеренеүҙәрен алып барыу, белемдең яңы өлкәһен өйрәнеү өсөн ҡулай осор. Бының өсөн бөтә мөмкинлектәр ҙә асылыр, уларҙы ҡулдан ысҡындырмаҫҡа тырышығыҙ. Ғилми эш менән шөғөлләнеүсе Игеҙәктәрҙе уңыш көтә.

Шәхси тормошоғоҙҙа гармония урынлашыр.

## УҠСЫ



Февраль айында Уҡсыларҙың аралашыу теләге ҙурайыр. “Юҡ” тип әйтергә өйрәнергә ваҡыттыр. Матди йәһәттән уңышлы булмаҡсы. Финанс мәсьәләләрҙе дөрөҫ хәл итерһегеҙ, аҡсаға мохтажлыҡ кисермәҫһегеҙ.

## ҠЫҪАЛА



Ҡыҫалаларға февраль айы ҡыйыулыҡ һәм тәүәккәллек алып килер. Ғүмерегеҙҙә ҙур үҙгәрештәр булыуы һәм уларҙың алдағы тормошоғоҙға тәьҫир итеүе ихтимал. Был ай алдараҡ тотонорға баҙнат итмәгән эштәрҙе атҡарып сығыу өсөн уңышлы. Тик барыһы ла алдан уйланылырға тейеш. Шулай уҡ романтик мөнәсәбәттәр өсөн уңай осор.

## ЫЛАҠ



Февраль айында Ылаҡтарға үҙҙәренең тышҡы ҡиәфәтенә иғтибар итеү, гардеробтарына үҙгәрештәр индереү кәңәш ителә. Энергияғыҙ ташып торғанға, яңы башланғыстарҙың күбеһендә һеҙҙе уңыштар көтә. Финанс хәлегеҙҙең яҡшырыуы тәүәккәллек, баҙнатлыҡ һәм етеҙлек күрһәтеүегеҙгә бәйле.

## АРЫҪЛАН



Февраль айында Арыҫландар шәхси тормоштарында һәм эштәрендә әүҙемлек күрһәтһен. Лидер ролен үҙ өҫтөгөҙгә ала алаһығыҙ. Етәксегеҙ һәм коллегаларығыҙ менән мөнәсәбәттәрегеҙ яҡшырыр. Был айҙа физик күнегеүҙәрҙе, дөрөҫ туҡланыуҙы ғәҙәткә индереү ҙә кәңәш ителә.

## ҺЫУҒОЯР



Февраль айында тәүәккәллегегеҙ артыр, үҙ аллы ҡарарҙар ҡабул иткегеҙ, эштәрҙе алып барғығыҙ килер. Бының өсөн энергияғыҙҙы дөрөҫ йүнәлтергә тырышығыҙ, юғиһә барыһы ла бушҡа буласаҡ. Йәиһә спорт менән шөғөлләнегеҙ. Берәүгә лә әйткегеҙ килмәгән һөйөү хисе тыуыуы ихтимал.

## ҠЫҘ



Февраль айында инициатива һәм ныҡышмалыҡ күрһәтһәгеҙ, барыһы ла еңел һәм тиҙ хәл ителер. Коллективта абруйығыҙ артыр, хеҙмәттәштәрегеҙ менән мөнәсәбәтегеҙ яҡшырыр. Шулай уҡ яңы танышлыҡтар көтөлә.

## БАЛЫҠ



Был айҙа Балыҡтарға дуҫтары менән аңлашыу форсаты тейер. Шулай уҡ яңы таныштар барлыҡҡа килеүе ихтимал. Үҙ-үҙегеҙҙе, нимә теләгәнегеҙҙе аңларға тырышығыҙ. Стрестан, ығы-зығынан, эмоциональ көсөргәнештән ары тороғоҙ, ял итеп алырға онотмағыҙ.












# ҮЛСӘМДӘР



## КЕЙЕМ ҺАЙЛАҒАНДА ЯҢЫЛЫШМА

Ҡатын-ҡыҙ кейем-һалым магазинына килһә, яҡлауға мохтаж бер йән эйәһе хәлендә ҡала. Сөнки һатыусылар әле тегеһен, әле быныһын кейеп ҡарарға тәҡдим итеп йөҙәтергә тотона. Йыш ҡына тауарын һатыу маҡсатында буй-һынға килешлеһен дә, кәүҙәлә бик үк матур ултырмағандарын да маҡтапмаҡтай. Шуға ла ҡатын-ҡыҙҙарға кейем һайлау ауырға төшә. Ошоларҙы күҙ уңында тотоп, гүзәл заттарыбыҙға кейем һайлауға ҡағылышлы бер нисә кәңәш тә бирмәксебеҙ.

### Үҙеңә генә ышанырға мөмкин

Кейем һайлағанда әхирәттәрегеҙҙең кәңәшенә ҡолаҡ һала алаһығыҙ, әммә башлыса үҙ зауығығыҙға таянып эш итегеҙ. Сөнки, дөрөҫөн генә әйткәндә, бер ҡатын-ҡыҙ ҙа әхирәтенең үҙенән матурыраҡ булыуын теләмәй. Уның теге йәки был кейемдең һине тулыраҡ күрһәтеүе хаҡында әйтергә уңайһыҙланыуы ла бар. Шуға ла үҙегеҙҙең эске тауышығыҙҙы тыңлаһағыҙ отошлораҡ булыр. Йәнә кейемдең үҙен түгел, ә үҙегеҙҙе ошо кейемдә оҡшатыуығыҙ мөһим.

### Ниндәй төҫкә, стилгә һәм фасонға өҫтөнлөк бирергә?

Кейем – һеҙҙең образығыҙҙың бер өлөшө. Шуға ла стилде профессионалдар менән берлектә һайлау яҡшы. Әммә бик һирәктәр генә быңдай мөмкинлеккә эйә. Әгәр ҙә образығыҙ өҫтөндә үҙегеҙгә эш-





Рәсәйҙә кейем-һалымдың үлсәмен өс күрһәткес билдәләй: буй оҙонлоғо – түш үлсәме – янбаш үлсәме. Мәҫәлән, 164-96-104 үлсәмдәр менән тамғаланған кейем буйы – 164 см, түш үлсәме – 96 см һәм янбаш үлсәме 104 см булған гүзәл заттар өсөн тәғәйенләнеүен аңлата. Рәсәйҙә үлсәмдәр 42-44-48-50 һ.б. кеүек йоп һандарҙан ғибәрәт. Улар түш үлсәмен икегә бүлеү һөҙөмтәһендә барлыкка килә. Мәҫәлән, ул 88 см икән, тимәк кейемдең 44 һанлыһын һайларға була. Әгәр һан таҡ булһа, ул кәүҙәнең тулылығына ҡарап, ҙурыраҡ йәки кәмерәк йоп һанға табан түңәрәкләнә.

Ә АҠШ-та үлсәмдәр дюймда йәки халыҡ-ара код символдары менән күрһәтелә: S, M, L, XL, XXL һ.б. Уларҙың ниндәй үлсәмгә торош булыуын белер өсөн, мәғәнәләрен хәтерҙә ҡалдырға кәрәк.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 50 | 52 | 54 | 56 | 58 |
| 16 | 18 | 20 | 22 | 24 |
| L | XL | XL | XXL | XXXL |
| 44 | 46 | 48 | 50 | 52 |
| L | L | XL | XL | XXL |
| 100 | 104 | 108 | 112 | 116 |
| 108 | 112 | 116 | 120 | 124 |
| 170-176 | | 176-182 | | 182> |

**XS** – extra small – нык бәләкәй
**S** – small – бәләкәй
**M** – middle – уртаса
**L** – large – ҙур
**XL** – exstra large – нык ҙур
**XXL** – exstra exstra large – үтә ҙур

Буй-һынға ярашлы үлсәмле, килешле кейем генә үҙ-үҙеңә ышаныс тойғоһон тәьмин итә ала. Кәрәкле кейемде һайлау күп ваҡытты ала, бигерәк тә сит ил етештергән кейем үлсәмдәре системаһы Рәсәйҙекенән ҡырҡа айырылыу сәбәпле, был хәл икеләтә ауырлаша. Шуға күрә бер аҙ ошо мәсьәләгә туҡталып китергә булдыҡ.

**Кейем үлсәме** – кеше кәүҙәһенең йәки тән ағзаһының параметрҙарын хәреф йәки һан менән тамғалаған код. Әммә ҡатын-ҡыҙҙарҙың буй-һыны төрлө булыу сәбәпле, улар шартлы рәүештә генә билдәләнә. Был үлсәмдәр системаһы фигураларҙың уртаса күрһәткестәрен сағылдыра. Улар, ғәҙәттә, өҫ кейеменең бирҡаһына, ә аяҡ кейеменең олтороғына йәки табанына яҙыла.

## ҠАТЫН-ҠЫҘҘАРҘЫҢ КЕЙЕМ ҮЛСӘМДӘРЕ ТАБЛИЦАҺЫ

| Рәсәй | 40 | 42 | 44 | 46 | 48 |
|---|---|---|---|---|---|
| АҠШ | 6 | 8 | 10 | 12 | 14 |
| Халыҡ-ара | XS | XS | S | M | M |
| Европа | 34 | 36 | 38 | 40 | 42 |
| Ҡытай | | | S | M | M |
| Түш үлсәме (см) | | | 88 | 92 | 96 |
| Янбаш үлсәме (см) | | | 96 | 100 | 104 |
| Буй (см) | | | <164 | 164-170 | |





ләргә тура килә икән, түбәндәге кәңәштәргә ҡолаҡ һалығыҙ:

⏩ Әгәр ҙә стилегеҙгә үҙгәреш индерәһегеҙ икән, ул холҡоғоҙҙа ла, үҙ-үҙегеҙҙе тотошоғоҙҙа ла сағылырға тейеш. Был әлбиттә, еңел бирелмәйәсәк. Әммә кейем стиле шул образға ярашлылыҡты талап итә.

⏩ Төп ҡағиҙә менән таныштыҡ. Хәҙер инде фасон һәм төҫтәр хаҡында һүҙ йөрөтөргә мөмкин. Әгәр ҙә һеҙ яҡын киләсәктә тормошоғоҙға ла, образығыҙға ла үҙгәрештәр индерергә теләйһегеҙ икән, тимәк, кейем фасоны ла башҡаса булырға тейеш. Әйтәйек, яңы эшкә урынлашырға йыйынған осраҡта, эшлекле костюмдарға өҫтөнлөк бирергә кәрәклеге бер кем өсөн дә сер түгел. Үтә сағыу төҫтәр менән һағыраҡ эш итегеҙ. Киреһенсә, һоро, һоро-зәңгәр, аҡһыл-көрән, ҡом төҫтәре образығыҙға етдилек һәм олпатлыҡ өҫтәр. Әгәр ҙә һеҙ декрет отпускыһында икән, һуңғы ваҡытта популяр булып киткән Casual стилен (уңайлы булыуы менән айырылған кейемдәр) һайлағыҙ. Шулай уҡ гардероб яңыртҡанда буй-һынығыҙҙың үҙенсәлектәре, йәшәү рәүешегеҙ, холоҡ-фиғелегеҙ хаҡында ла иҫтән сығармағыҙ.

⏩ Көндәлек тормош мәшәҡәттәренә сумырға өлгөрмәгән йәш ҡыҙ сағыу төҫтәге кейемдәр һайлай ала. Был өлгөрөп етмәгәнлек, күңел асыу кәйефе һәм модалы күренергә тырышыу хаҡында һөйләй. Ә олораҡ йәштәге ханымдарҙың матди хәленә һәм статусына ярашлы кейенеүе зарур.





## ДЖИНСЫ ҮЛСӘМДӘРЕ

Джинсы кейемдәренең бирҡаһында сит ил тамғалары һәм дюймдарҙа күрһәтелгән һандар (1 дюйм = 2,54 см) бирелә. Мәҫәлән, W30/L32, инглиз теленән тәржемә иткәндә W хәрефе – "waist" бил тигәнде аңлата, тимәк бил үлсәме – 30 дюйм, ә L – "long" оҙонлоҡ, балаҡтарҙың эске яғының тегелеш һыҙығының оҙонлоғо – 32 дюйм булыуын иҫкәртә.

| USA | 25 | 26 | 27 | 28 | 29 | 30 |
|---|---|---|---|---|---|---|
| Рәсәй | 40 | 42 | 42/44 | 44 | 44/46 | 46 |
| Бил үлсәме, см | 64 | 66 | 69 | 71 | 74 | 76 |
| Янбаш үлсәме, см | 90 | 92 | 94 | 96 | 98 | 100 |

Салбар балаҡтарының эске яғындағы тегелеш һыҙығы (длина шагового шва) билдәлә бер буй үлсәменә тәғәйенләнә. Мәҫәлән, L 28 – 157-160

| Буй, см | 152-158 | 158-164 | 164-170 | 170-176 |
|---|---|---|---|---|
| Балаҡтың эске тегелеш һыҙығы, L | 26 | 28 | 30 | 32 |
| Аяҡ оҙонлоғо, см | 66 | 71 | 76 | 81 |







## ТҮШЛЕК ҮЛСӘМДӘРЕ

Түшлек үлсәме һан һәм хәреф менән тамғалана. Һан – түш аҫты үлсәме, ә хәреф – түшлектәр (чашечка) үлсәме (түш һәм түш аҫты айырмаһы):

**12-14 см** – А түшлектәре
**14-16 см** – В түшлектәре
**16-18 см** – С түшлектәре
**18-20 см** – Д түшлектәре
**20-22 см** – Е түшлектәре
**22-24 см** – F түшлектәре

| Үлсәм | Түш аҫты үлсәме | Түш үлсәме (см) | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | A | B | C | D |
| 70 | 68-72 | 82-84 | 84-86 | 86-88 | 88-90 |
| 75 | 73-77 | 87-89 | 89-91 | 91-93 | 93-95 |
| 80 | 78-82 | 92-94 | 94-96 | 96-98 | 98-100 |
| 85 | 83-87 | 87-99 | 99-101 | 101-103 | 103-105 |
| 90 | 88-92 | 102-104 | 104-106 | 106-108 | 108-110 |
| 95 | 93-97 | 107-109 | 109-111 | 111-113 | 113-115 |
| 100 | 98-102 | 112-114 | 114-116 | 116-118 | 118-120 |
| 105 | 103-107 | 117-119 | 119-121 | 121-123 | 123-125 |







Ә француз үлсәмдәре билдәләнеше европаныҡынан 15 берәмеккә айырыла. Мәҫәлән, 90С=75С, 80А – 65А һ.б.





| | | | |
|---|---|---|---|
| E | F | G | H |
| 90-92 | 92-94 | 94-96 | 96-98 |
| 95-97 | 97-99 | 99-101 | 101-103 |
| 100-102 | 102-104 | 104-106 | 106-108 |
| 105-107 | 107-109 | 109-111 | 111-113 |
| 110-112 | 112-114 | 114-116 | 116-118 |
| 115-117 | 117-119 | 119-121 | 121-123 |
| 120-122 | 112-124 | 124-126 | 126-128 |
| 125-127 | 127-129 | 129-131 | 131-133 |







## АЯҠ КЕЙЕМЕ ҮЛСӘМДӘРЕ

Аяҡ үлсәмен белеү өсөн ҡағыҙға баҫып, табанды уратып һыҙып йәки үҙегеҙгә ярашлы олтораҡ оҙонлоғон үлсәргә кәрәк. Рәсәйҙә ул – миллиметрҙарҙа, Англияла дюймда үлсәнһә, Европа илдәрендә (Италия, Франция һ.б.) штих массаһы (штихмассовая) системаһы ҡулланыла (1 = 2/3 см, йәғни 6,66 мм). Унда аяҡ кейеменең үлсәме урынына олтораҡтың оҙонлоғон алалар. Шуға күрә был илдәрҙә үлсәмдәр бер берәмеккә күберәк.

| Табан оҙонлоғо, см | 21 | 22 | 23 | 24 | 25 | 26 | 27 | 28 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Рәсәй | 34 | 35 | 36 | 37 | 38 | 39 | 40 | 41 |
| Европа илдәре | 35 | 36 | 37 | 38 | 39 | 40 | 41 | 42 |
| Великобритания | 2,5 | 3 | 4 | 5 | 5,5 | 6,5 | 7 | 8 |
| АҠШ | 4 | 4,5 | 5,5 | 6,5 | 7 | 8 | 9 | 9,5 |

Ҡайһы бер фабрикалар аяҡтың тулылығын да күрһәтә.

**«F» төрө** – уртаса аяҡҡа
**«G» төрө** – көслө (масив) аяҡҡа
**«Н» төрө** – тулы аяҡҡа (киң табанлы)
**«Н1/2»** төрө киң табанлы, үтә тулы аяҡҡа тәғәйенләнгән.

Әгәр аяҡ кейемендә тулылыҡты белдереүсе бер ниндәй ҙә билдә юҡ икән, тимәк, аяҡ кейеме уртаса аяҡҡа ҡаралған.





шоҥҡар

## БАШ КЕЙЕМЕ ҮЛСӘМДӘРЕ

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың баш кейеменең үлсәмен белер өсөн башты уратып үлсәү талап ителә.

| Рәсәй үлсәме, см | Америка үлсәме, дюйм | |
|---|---|---|
| 53 | 6.5/8 | XXS |
| 54 | 6.3/4 | XS |
| 55 | 6.7/8 | S |
| 56 | 7 | SM |
| 57 | 7.1/8 | M |
| 58 | 7.1/4 | ML |
| 59 | 7.3/8 | L |
| 60 | 7.1/2 | L-XL |
| 61 | 7.5/8 | XL |
| 62 | 7.3/4 | XXL |
| 63 | 7.7/8 | XXXL |
| 64 | 8 | 4XL |
| 65 | 8.1/8 | 5XL |








шоҥҡар

## БИРСӘТКӘ ҮЛСӘМДӘРЕ

Устың киңлеген (баш бармаҡһыҙ) үлсәп, бирсәткә үлсәмен белергә мөмкин. Ҡатын-ҡыҙҙар өсөн 17-нән алып 30-ға тиклемге бирсәткәләр тәғәйенләнә.

| Британия/АҠШ | Метрлы үлсәүҙәр системаһы | Бирсәткә үлсәме |
|---|---|---|
| 7 | 17.8 см | XSM |
| 8 | 20 см | SM |
| 9 | 23 см | MD |
| 10 | 25 см | LG |
| 11 | 28 см | XLG |
| 12 | 30.5 см | XXLG |
| 13 | 33 см | XXXLG |





шоҥҡар

Әгәр был һандар менән тиҙ генә ниндәй үлсәмгә ярашлы икәнен билдәләй алмаһаң, уларҙы Рәсәйҙекенә әйләндерергә була. Бының өсөн беҙҙең ил үлсәменән 16 һанын алырға кәрәк. Мәҫәлән, һеҙ 48 үлсәмле кейем кейәһегеҙ икән, тимәк һеҙгә 32 үлсәмле сит ил салбарын ҡарарға була (48-16= 32). Был биркала теркәлгән тәүге һан.

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 31 | 32 | 33 | 34 | 35 | 36 | 38 | 40 |
| 48 | 48/50 | 50 | 52 | 52/54 | 54 | 56 | 56/58 |
| 79 | 81 | 84 | 86 | 88 | 91 | 96 | 102 |
| 102 | 104 | 106 | 108 | 110 | 112 | 116 | 120 |

см, ә L 36 — яҡынса 186 см буйлы ҡатын-ҡыҙҙарға тап килә. Ә икенсе һанды иҫтә ҡалдырырға тура килә.

| 176-182 | 182-188 |
|---|---|
| 34 | 36 |
| 86 | 91 |



# Һорауҙарға юрист Гөлсәсәк Туҡтамышева яуап бирә.

**Һорау: Мин — шаһит. Судҡа саҡырылған осраҡта бармаһам, миңә нимә янай?**

**Яуап:** Гражданлык процессуаль кодексының 70-се статьяһының 1-се пунктына ярашлы, суд ултырышына шаһит рәүешендә саҡырылған кеше билдәләнгән ваҡытта судка барырға һәм дөрөҫ күрһәтмә бирергә тейеш. Әгәр кисермәҫлек сәбәптәр арҡаһында бара алмаһағыҙ, Гражданлык процессуаль кодексының 168-се статьяһының 2-се пунктына ярашлы, һеҙгә 1000 һумға тиклем күләмдә штраф һалыу янай. Суд ултырышына икенсе тапҡыр саҡырылып та, бер ниндәй сәбәпһеҙ бармаһағыҙ, мәжбүри рәүештә алып килеүҙәре лә мөмкин.

**Һорау: Суд ҡарары закон көсөнә инде. Яуапҡа тарттырылыусы уға (ҡарар менән риза булмаһа) ялыу бирә аламы?**

**Яуап:** Гражданлык процессуаль кодексының 376-сы статьяһының 1-се һәм 2-се пункттарына ярашлы, әгәр суд ҡарары ҡаралған эштә ҡатнашыусылар һәм башҡаларҙың хоҡуҡтары һәм законлы мәнфәғәттәре боҙолһа, улар 6 ай дауамында Рәсәй Федерацияһының Юғары Суды Президиумына ялыу яҙа ала. Тик, кодекстың шарттары буйынса, әлеге ҡарарҙың закон көсөнә ингәнгә тиклем башка ялыу биреү ысулдары ҡулланылған булырға тейеш. Яуапка тарттырылыусы алда телгә алынған Кодекстың 34-се статьяһына ярашлы, ҡаралған эштә ҡатнашыусы кеше буларак, закон көсөнә ингән суд ҡарарына ялыу биреү хоҡуғына эйә.

**Һорау: Ер участкаһын шәхси милеккә күсерергә теләйбеҙ. Быйың өсөн ниндәй документтар кәрәк һәм ул түләүлеме?**

**Яуап:** Ер кодексының 26-сы статьяһына ярашлы, ер участкаһына булған хоҡуктар “Күсемһеҙ милеккә хоҡуктарҙы һәм улар менән килешеү төҙөүҙе дәүләт теркәүенә ҡуйыу тураһындағы” (рус. «О государственной регистрации прав на недвижимое имущество и сделок с ним») Федераль законға ярашлы документтар менән раҫлана. Ошо закондың 2-се статьяһының 1-се пунктына ярашлы, дәүләт теркәүенә ҡуйыу теркәлгән хоҡуҡтың булыуын дәлилләүсе берҙән-бер факт. Телгә алынған закондың 16-сы статьяһында хоҡуҡтарҙы дәүләт теркәүенә ҡуйыу өсөн кәрәкле документтар исемлеге, тапшырыу тәртибе ентекләп яҙылған.

Шуныһы: ғариза биреүсегә хоҡуҡтарҙы дәүләт теркәүенә ҡуйыу өсөн кәрәкле документтарҙы һәм уларҙың исемлеген алыу тураһында, шул иҫәптән документтар тапшырылған көн һәм ваҡыты теүәл күрһәтелгән расписка бирелә. Уны юғалта күрмәгеҙ, сөнки ул ергә хоҡуҡтарҙы дәүләт теркәүенә ҡуйыу өсөн тапшырылған документтарҙы ҡулға алыуҙы дәлилләй.

Ер кодексының 28-се статьяһының 2-се пунктына ярашлы, дәүләт һәм муниципаль милек иҫәбендә торған ер участкалары граждандарға һәм юридик ойошмаларға түләү аша бирелә.

## Рәсәйгә сит илдәрҙән килгән туристар өсөн ҡуйылған белдереүҙәрҙән

Рәсәй урамдарында таныш түгел кешеләргә йылмайыу ғәҙәте юҡ. Әгәр йылмайһағыҙ, урыҫ кешеһенең: “Минең берәр ерем бысранған йәки йыртылған, был шунан көлә”, - тип уйлауы бар.

Рәсәйҙә автомобилдәр йәйәүлеләргә юл бирмәй, киреһенсә, тиҙлектәрен арттыра ғына. Әлбиттә, бәрәү ҙә һеҙҙе тапатып үлтерергә йыйынмай, улар һеҙҙең күҙҙәрегеҙҙә ҡурҡыу күреүҙән ләззәт ала.

* * *

Ғалимдар донъя сәнәғәтендә йәшеренлек кимәлен асыҡлаған. Францияла бер завод икенсе заводтың нимә етештереүен белмәй. Англияла бер лабораторияға күрше лабораторияларының нимә башҡарыуы мәғлүм түгел. АҠШ-та бер хеҙмәткәргә күрше өҫтәл артында ултырған икенсе хеҙмәткәрҙең нәмә менән шөғөлләнгәне билдәһеҙ. Рәсәйҙә иһә хеҙмәткәрҙәр үҙҙәренең нимә эшләгәнен белмәй.

* * *

Йәш ҡыҙ фатирға урынлашырға килә һәм фатир хужаһына:
– Дуҫтарым өсөн миңә тағы ла 15 аскыс кәрәк буласаҡ, – ти.
Хужа:
– Бәлки, “әйләндергес” ишек кенә ҡуйырбыҙ?

* * *

Аллаһ ҡатын-ҡыҙҙы яһағанда: “Йә, ярай, биҙәнер әле”, – тигән.

* * *

Бер көндө өләсәй менән ейәндең дарыуҙары бутала. Ейәне төнгө клубта фейс-контролдә йоклап китә, ә өләсәй кеше һигеҙ метрлыҡ ойоҡбаш бәйләй.




### АБОНЕНТ 88.

Миңә 33 йәш. Районыбыҙға яҡын ҡалала эшләп йөрөйөм. Эсеү, тартыуҙан ситенмен. 25-33 йәштәр тирәһендәге гүзәл зат менән ғаилә ҡорорға теләйем. Адресым һәм телефон номерым редакцияла.

### АБОНЕНТ 89.

30 йәшлек ир-егетмен. Ауыл ерендә йәшәйем. Эскелек менән мауыҡмайым. Етди мөнәсәбәттәр ҡорорға әҙер 25-30 йәштәрҙәге ҡатын-ҡыҙ менән танышырға теләйем. Телефон номерым редакцияла.

ОЙОШТОРОУСЫҺЫ - БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ЭЛЕМТӘ ҺӘМ КИҢ КОММУНИКАЦИЯЛАР МИНИСТРЛЫҒЫ.
УЧРЕДИТЕЛЬ – МИНИСТЕРСТВО СВЯЗИ И МАССОВЫХ КОММУНИКАЦИЙ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН.

директор-баш мөхәррир
**АЗАМАТ ЮЛДАШБАЕВ**
директор-главный редактор

МӨХӘРРИРИӘТ:
**Фирҙәүес ӘХМӘТЙӘНОВА**
**Гөлнур ҠОЛҺАРИНА**
**Заһир ҠОТЛОСУРИН**
**Рәсүл СӘҒИТОВ**
**Зәки ӘЛИБАЕВ**

РЕДАКЦИЯ ХЕҘМӘТКӘРҘӘРЕ:
**Илшат ЗАРИПОВ** - баш мөхәррир урынбаҫары
**Гөлнара МОСТАФИНА** - яуаплы сәркәтип
**Гөлшат ҠАҺАРМАНОВА** - бүлек мөхәррире
**Ләйсән ШӘРИПОВА** - өлкән мөхәррир
**Шамил ЯУБАҪАРОВ** - өлкән мөхәррир
**Байрас ҠЫУАНДЫҠОВ** - биҙәлеш мөхәррире
**Гүзәл НОҒМАНОВА** - верстка буйынса оператор
**Милә БИЛАЛОВА** - корректор
**Филүзә СӘЛИХОВА** - йыйыу буйынса оператор
**Алина ЗӘЙҘУЛЛИНА** - баш бухгалтер
**Айрат ИСМӘҒИЛЕВ** - водитель

**БЕҘҘЕҢ АДРЕС:**
450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, “Шоңҡар” журналы редакцияһы.
**НАШ АДРЕС:**
450001, Республика Башкортостан, город Уфа, проспект Октября, 2. Редакция журнала “Шонкар”.

**ТЕЛЕФОНДАР:**
27-77-992 – баш мөхәррир, 29-27-763,
27-77-995 – бүлектәр, 29-27-762 – бухгалтерия.
**www.shonkar.ru.** E-mail: Shonkar@ufanet.ru.

**БЕҘҘЕҢ РЕКВИЗИТТАР. НАШИ РЕКВИЗИТЫ:**
КП РБ Редакция журнала “Шонкар”
Р/с 40602810600010000123 в Филиале ОАО “УралСиб” в г. Уфа, БИК 048073770,
К/С 30101810600000000770, ИНН 0278123157,
ОКОНХ 87100, ОКПО 32060535

*Башҡортостан Республикаһының “Өфө полиграфия комбинаты” дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды. Адресы: 450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2.*

*Йыйырға бирелде 11.01.11. Баҫырға ҡул ҡуйылды 19.02.11. Ҡағыҙ форматы 60х84 1/8. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма табаҡ 10. Учетн.-изд. таб. 12. Тиражы 7451 дана. Заказ 2.0002.11. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт тарафынан теркәлгән. Теркәү номеры: ПИ № ФС 77-30609.*

**Материалдарҙы ҡулланғанда журналға һылтанма яһау мотлаҡ.**

***Авторҙарыбыҙға гонорар түләү өсөн түбәндәге мәғлүмәттәр кәрәк:***
*– авторҙың тулы фамилияһы, исеме, атаһының исеме;*
*– почта индексы һәм тулы адресы;*
*– паспорт серияһы, номеры, кем тарафынан һәм ҡасан бирелгән;*
*– тыуған йылы, айы һәм көнө;*
*– социаль номеры;*
*– Дәүләт пенсия фондының страховка таныҡлығы номеры.*
*Әгәр ошо мәғлүмәттәр күрһәтелмәһә, авторҙарға гонорар түләнмәй.*
*Редакцияға тапшырылған материалдарға һәм ҡульяҙмаларға рецензия бирелмәй, улар авторға кире ҡайтарылмай. Башҡа баҫмаларҙа донъя күргән йәки уларға тапшырылған материалдар ҡабул ителмәй.*

Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.

# СКАНВОРД




*Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.*

## ҮТКӘН ҺАНДАҒЫ СКАНВОРД ЯУАПТАРЫ:

Шапалаҡ, Курск, шампан, абсурд, коммерсант, Рейн, танго, скинхед, емдек, бирт, тройка, Кариб, даһи, Болгария, шкаф, рифма, айран, яҫтыҡ, референт, конфетти, бойскаут, урманһы, сынйыр, фанатик, науруз, ишмә, уйынсыҡ, драм, конферансье, ужым, маринад, рампа, рам, бала, фазенда, Европа, ҡабырға, араҡы, ылаҡ, лавр, реприза, плюш, ыршы, сана, һаҡал, ҡарһылыу, роза, атака, ҡаймаҡ, ләхет, ҡунаҡ, усаҡ, нур, рәүеш, аҙыҡ, ырғаҡ, низағ, ток, утлыҡ, ришүәт, афәт, Швейцария, таяҡ, ярыҡ.

ISSN 2220-8437



«Ирәмәл» тәбиғәт паркы

Индексы 73867

Юрий Дунаев фотоһы.